Рамазан Өмотбаев



# Атлы башҡорт

13-сө башҡорт мәктә-
бенә дәүләт эшмәкәре,
күренекле яҙыусы, яугир
Рамаҙан Ғимран улы
Өмөтбаевтың исемен
биреү айҡанлы мәктәп
музейенә түбәндәге
китаптарҙы тапшы-
рабыҙ.

Авторҙың яҡындары
һәм туғандары.

7.04.2005 йыл.

1. [signature] (Х. Мамухамбетова)

2. [signature] (С. Омотбаева)

3. [signature] (Ш. Хайрулина)

[signature] (Чингиз Хайрулин)

4. А. Минин (А. Минов)

[signature] А.Т. Умербаев

7. Б. Омотбаев

8. [signature] — Раушан Омотбаев



Рамазан Өмөтбаев



# Атлы башҡорт

Повесть, хикәйәләр, иҫтәлектәр

КИТАП
ӨФӨ — 2004

УДК 82-3=512.141
ББК 84-4 (2Рос=Баш)
Ө 55

Йыйынтыҡты төҙөүсе һәм
баҫмаға әҙерләүсе
**Рауил Рамазан улы Өмөтбаев**

**Өмөтбаев Р. Ғ.**
Ө 55 **Атлы башҡорт.** Повесть, хикәйәләр, иҫтәлектәр. — Өфө: Китап, 2004. — 256 бит.

ISBN 5-295-03414-3

Яугир, йәмәғәт эшмәкәре, ғалим һәм әҙип Рамазан Өмөтбаевтың был китабына «Атлы башҡорт» повесы, хикәйәләре һәм уның тураһындағы иҫтәлектәр индерелде.

**УДК 82-3=512.141**
**ББК 84-4 (2 Рос=Баш)**

**ТП-077/04**
**ISBN 5-295-03414-3**

© Р. Ғ. Өмөтбаев, 2004

## ҮҘЕМ ХАҠЫНДА

Мин, Өмөтбаев Рамазан Ғимран улы, 1924 йылдың 7 апрелендә элекке Йылайыр кантоны Темәс волосының, хәҙерге Әбйәлил районының Әлмөхәмәт ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуғанмын. 1929 йыл, күҙ терәп торған атыбыҙ ҡазаланып үлеп ҡалғас, беҙ, күп балалы ғаилә, бер туҡал һыйырға ҡарап тороп ҡалдыҡ. Шул туҡал һыйырҙы етәкләп, беҙ ауылыбыҙҙа ойошҡан «Ҡыҙыл ялан» колхозына инеп киттек. Был 1930 йылдың аҙағы булһа кәрәк. Колхозға ойошоу тураһында Яйҡар араһының йыйылышы беҙҙең өйҙә үткәнен асыҡ хәтерләйем.

1931 йылдың яҙында беренсе яҙғы сәсеүгә сыҡтыҡ. Мин атай һабанында ат башында йөрөнөм. Бер аҙ эшләгәс: «Аттарын да, балаларын да үҙ хужаларына беркетергә ярамай, үҙ аттарын йәлләп, һабанға егелгән сит кешенең аттарын арыталар», — тип аттарҙы ла, уларҙы менеп йөрөгән балаларҙы ла башҡа кешеләргә таратып бирҙеләр. Быныһы ниндәй кешенең аҡыллы фекере булғандыр инде, уныһы беҙгә мәғлүм түгел, ләкин ул заманаларҙа кешегә үҙенең әсе тире һеңешкән атын, малын яҡын күреүе бик тә дөрөҫ, тәбиғи ҙә булғандыр, тип уйлайым.

1931 йылдың 1 сентябрендә хәҙрәт йортонда асылған башланғыс мәктәптең тәүге тапҡыр ишеген астыҡ. Класс бүлмәһендә ҡуйылған ике генә парта артында ун дүртәр бала ултырып дәрес башлап ебәрҙек. Бер ауылда йәшәһәк тә, ул балаларҙың күбеһе тиерлек беҙгә таныш түгел ине. Ул замандарҙа һәләтлерәк балаларҙы класс аша күсереү тәртибе бар ине. Икенсе, өсөнсө кластарҙа яртышар йыл уҡып, 1934 йыл мин, үҙ тиҫтерҙәремдән алдараҡ, дүртенсе класты тамамланым. Ләкин артабан уҡыуҙы дауам итеү дәрте көслө булыуға ҡарамаҫтан, яҡын-тирәлә мәктәп булмау, бигерәк тә ситкә китеп уҡыу өсөн өҫ-баштың юҡлығы арҡаһында, 1 сентябрҙә мәктәптән мәхрүм ҡалдым. Уҡыуҙан бөтөнләй төңөлөп бөткәс, шул йылдың сентябрь

аҙаҡтарында атай мине Ҡырҡты тауы буйында алтын сығып ятҡан «Ырғайҙы» тигән тау ҡуйынына алтын йыуырға алып китте. (Ул ваҡыттарҙа күп ғаиләле кешеләргә колхоз бер нисә аҙнаға йәки айға шундай эштәрҙә эшләргә лә рөхсәт итә ине). Бында икенсе баҫҡыс колхоз-йәштәр мәктәбе булыуын атай, күрәһең, алдан уҡ белгән булған. Юл ыңғайында Ишҡол тигән ауылды үткән саҡта атын урам уртаһына туҡтатып, дилбегәне миңә тотторҙо ла ауыл ситендә бер-береһенә төкәтеп эшләнгән йорттар араһына инеп юғалды. Күп тә үтмәй йүгереп килеп арбаһына ултырҙы ла, атын кире бороп, ҡыйыҡһыҙ бер таш өй алдына туҡтаны. Был беҙгә бик алыҫ туған тейеш Ғәлимйән тигән ағайҙың йорто булып сыҡты. «Мына ошо малайҙы үҙеңдә ятҡырып, ынйыныр булғансы уҡытаһың», — тип атайым, минең ҡулға ярты өшә тотторол, ошо кешегә ҡалдырып китте. Октябрь аҙағында, башҡа балалар бер сирек уҡығас, мин өҫтәге ыштан-күлдәк менән ялан аяҡ Ишҡол колхоз-йәштәр мәктәбенең 5-се класына уҡырға инеп киттем. Миңә тейешле ҡулдан тегелгән итек, кесерәйтеп атай толобонан эшләнгән аҡ тиртун тик ноябрь урталарында ғына килеп етте. Шуға тиклем мин еңгәйҙең туҙған иҫке еләнен, хужаның табаны айырылған алаптай итеген кейеп (һөйрәп) мәктәпкә йөрөнөм. Ауыл оҫтаһы Өмөгөлсөм инәй толопто миңә ҡулайлап теккән саҡта уның ике яурынын көмөрәйтеп эшләгән; уны кейгәс, мин бер йоҙроҡтай ғына бөкрө кеше булып ҡалдым. Мине тәүгә күргән малайҙар «бөкөй Рамазан» тигән ҡушаматты шундуҡ йәбештереп тә ҡуйҙылар.

Ҡыш буйы үҙем бейеклеге ауыр тирмән тартып, күрше-күләнгә хат яҙып, ситтән ауылға килгән хаттарҙы уҡып тамаҡ туйҙырҙым, сөнки атайҙарҙан һирәк-һаяҡ килгән ярҙам йүнләп уҡырлыҡ һәм ус ярлыҡ булманы. Шулай итеп, 5-се класс та артта ҡалды. Беҙ йәй буйы колхозда эшләп килеүгә мәктәп директоры, бик тә интеллигентлы, энергияһы ҡайнап торған Фәритов ағай, Ишҡол ауылының уртаһында, бер буш өйҙө ятаҡҡа ҡулайлаштырып, бер стенаһынан икенсеһенә ҡырҡ бала ятырлыҡ итеп һәндерә йәйҙертеп ҡуйған ине. Класс бүлмәләре етешмәү сәбәпле, күп биналарҙы балалар үҙ көстәре менән төҙөнө. Беҙ, бәләкәйҙәр, балсыҡ тапаныҡ, ҡом ташыныҡ, стена мүкләнек. Ошо төҙөү эштәре ваҡытында Хәлил ауылының Дәүләтов Әбделхай тигән бер малайын бүрәнә баҫты. Ул уҡырға тик аҙаҡтан, камил төҙәлгәс кенә, килде. Был егет киләсәктә, 50-се йылдарҙа, Урал аръяғында атаҡлы колхоз председателе булаһы кеше ине. Ятаҡ түшәме терәтелгән ике бағанаға эленгән шәм эргәһендә кис дәрес әҙерләү өсөн урын даулау йыш ҡына ҙур ыҙғыш

менән бөтә. Ҡыҙылдың түбән яғында ултырған ауылдарҙан йыйылған балалар күберәк булыу сәбәпле, ут яҡтыһына йыйылған күбәләк шикелле, шәм тирәһенә яҡыныраҡ урындар, башлыса, уларҙыҡы.

Директорҙың тырышлығы менән Ишҡол ауылының үр яғында, Ҡыҙыл йылғаһы буйында, мәктәптең ярҙамсы хужалығы ойошторолдо. Балалар көсө менән бында һоло, картуф сәстек. Балаларға көнөнә бер тапҡыр йылы аш бешереү өсөн кишер, кәбеҫтә ултыртылды, хужалыҡтың бер нисә баш һауын һыйырын мәктәп балалары үҙҙәре һауҙы. 1936 йыл булһа кәрәк, беҙҙең барыбыҙҙы ла тигәндәй пионерға алдылар. Ҡыҙыл галстукты тышҡы кейем өҫтөнән тағып йөрөнөк. Йәйге каникулға муйыныбыҙға ҡыҙыл галстуктар тағып, борғо уйнап, барабан ҡағып, сафҡа теҙелгән көйөнсә йырҙар йырлап ауылға ҡайтып төштөк. Беҙ өйҙәребеҙгә таралмайынса, ауылдың осонан-осона йыр менән урам буйлап үттек. Беҙҙе бөтә ауыл халҡы тигәндәй ҡаршы алды. Шул көндә үк иғландар яҙып элеп, иҫке колхоз клубында үҙебеҙ әҙерләп алып ҡайтҡан концертты ҡуйып ебәрҙек. Клубҡа шығырым тулған ауыл халҡы беҙҙең һәр бер сығышты дәррәү алҡышлауҙар менән ҡаршы алды. Мин «Таштуғай» көйөн йырланым. Ул ваҡытта мәктәп балалары араһында минең «Таштуғай» тигән икенсе ҡушаматым да бар ине. Ишҡол ауылында силсәүит булып эшләгән, ситтән килгән Низамов тигән, һары быштыҡ ҡына, бала-сағалары булмаған ағай, минән «Таштуғай»ҙы йырлатып: «Рамазан, һин миңә ул ғына бул да ҡуй инде», — тип күҙ йәштәре менән илап ултырыуҙары бөгөнгөләй хәтеремдә: улар минең тамаҡты туйҙырып, әҙ-мәҙ аҡса ла тотороп сығарырҙар ине. Шул йылды яҙ Ишҡол ауылына Башҡорт академия драма театры килгәйне. Улар Афзал Таһировтың «Алатау» спектаклен колхоз сәхнәһендә ҡуйҙы. Тамаша бөткәс, театр етәксеһе сәхнәгә сығып: «Беҙ һеҙгә үҙ һөнәребеҙҙе күрһәттек, хәҙер инде һеҙҙең сират — ҡайҙа күрәйек әле, һеҙҙә ниндәй таланттар бар икән?» — тип тамашасыларға мөрәжәғәт итте. Баяғы ағай мине ҡулымдан етәкләп туп-тура сәхнәгә мендерҙе лә: «Бына ошо егет һеҙгә хәҙер башҡорттоң оҙон көйө «Таштуғай»ҙы йырлар», — тип иғлан итте һәм мин йырлап бөткәнсе эргәмдә баҫып торҙо. Алҡыштарҙан һуң атаҡлы ҡурайсы, артист Ғиниәт Ушанов ағай сығып мине, ун ике йәштә булыуыма ҡарамаҫтан, кәүен генә малайҙы, түшәмгә сөйҙө лә: «Ҡустым, һинән киләсәктә данлыҡлы йырсы сығасаҡ, уҡыуыңды бөт тә Өфөгә кил», — тип саҡырҙы. Өҫтәүенә, кеҫәһенән сығарып бер тәңкә аҡса бирҙе. Ҡағыҙ аҡсаны беренсе тапҡыр ҡулыма тотоуым ине. Ушанов ағайҙы беренсе һәм һуңғы тапҡыр

күрҙем. Ул минең хәтерҙә оҙон кәүҙәле, оҙонса матур ҡуңыр битле, дөм-ҡара сәсле, йөҙөнән яҡты нур сәсеп торған ағай булып уйылып ҡалған. Ләкин тормош сәхнәһе Ишҡол ауыл клубының сәхнәһенә ҡарағанда киңерәк, ҡатмарлыраҡ булып сыҡты, миңә «данлыҡлы йырсы» булырға насип итмәне, яҙмыш мине үҙенең икенсе һуҡмаҡтарына төшөрөп алып китте. 6-сы класты тамамлап, яңынан колхозда эшләй генә башлағайным, миңә Әбйәлил РОНО-һынан Ташбулат ауылында асылған берҙән-бер пионер лагерына путевка килеп төштө. Был минең отлично уҡыуым өсөн мәғариф бүлегенең бүләге булған икән. Асҡарҙа беҙҙе райондың бөтә ауылдарынан йыйып, Ташбулатҡа йөк машинаһы менән оҙаттылар. Был минең беренсе тапҡыр машинаға ултырыуым. Был тойғоно хәҙер күҙ алдына килтереүе ҡыйын, мин үҙемде һауала осоп барған ҡош итеп хис иттем, алға елгән машина йәм-йәшел урмандарҙы, хуш еҫ бөркөтөп үҫкән сәскәле туғайҙарҙы йырып барған диңгеҙ карабына, ә юлдың ике яғында артта ҡала барған ер шул диңгеҙҙә йөҙгән утрауҙарға оҡшай ине. Ул саҡта бөтә ер йөҙөндә беҙҙән дә бәхетлерәк бер кем дә булмағандыр, юлда осраған ауылдарҙы йыр йырлап үтеү был күренешкә тағы ла күркәмерәк йәм өҫтәй ине.

Ташбулатҡа барып урынлашҡас, пионер формаһы һәм ҡыҙыл галстук бирҙеләр. Пионер сборҙары үткәрҙек, «Ҡыҙылдар һәм йәшелдәр» тигән хәрби уйындар уйнаныҡ, ул ваҡытта гөрләп торған Күсем марганец руднигына экскурсияға барҙыҡ. Унда беҙҙе шахтаға алып инделәр. Тимер юлы вагонеткаһына егелгән аттарҙың руда ташыуҙарын күреп, уларҙың бөтә шахта горизонты буйлап кешеһеҙ, үҙҙәре генә йөрөүҙәренә иҫ-аҡылыбыҙ китте. Уларҙың баш баҫып, талымһыҙ, ыждым эшләүҙәренә ҡарап, беҙҙең, ауыл балаларының, йөрәгебеҙ әрнене. Беҙ ул хайуандарҙы ысын күңелдән йәлләп ҡайттыҡ. Ташбулат халҡы өсөн «Ҡаһарман Павлик» тигән спектакль ҡуйҙыҡ. Мин кулактар тарафынан йыртҡыстарса үлтерелгән Павлик ролен башҡарҙым. Бер ай ваҡыт бер көндәй ҙә булмай ҡалды. Мин райондан үҙебеҙҙең өй эргәһенә «лүфкәүик» машинаһы менән килеп төштөм. Ул машинаға мине ул саҡта районда эшләгән ауылдашым Зариф ағай Ишмурзин ултыртып ебәргәйне. Ул мин барғанда ла, лагерҙан ҡайтҡанда ла ҙур хәстәрлек күрһәтте. Был уңай менән шул замандарҙағы бер ғәҙәт иҫкә төштө: әгәр ауылындан берәр кеше районда, ул саҡтағыса әйткәндә «урында» эшләһә, район үҙәгенә йомош менән барған бөтә ауылдаштар ҙа туп-тура уға барып төшөрҙәр ине. Ә ул ауылдаш, тарыҡмай ғына түгел, үҙ ауылдаштарының йомошон үҙе йөрөп йомошлап

ҡайтара торғайны. Был беҙҙең халыҡта ғүмер-ғүмерҙән килгән итәғәтлек, бер-береһенә булған иғтибар һәм ҡайһылай ҙа матур ғәҙәт булған, ә хәҙер?..

Ҡапҡа төбөнә «лүфкәүик» килеп туҡтағас, ихатала тәгәрмәс бөгөп торған ҡарттың шөрләүенән йөрәге ҡубып, ҡойолоп төшкән. «Мин әллә ГПУ килеп төштөмө, тип уйлағайным» тигән булды аҙаҡ атай.

Пионер лагерынан уҡыуҙы артабан да дауам итеү теләге менән янып ҡайттым. Минең был дәрттең үҫеүенә, бер уйлаһаң, атай үҙе лә ярҙам итте. 6-сы класты тамамлағас, мәктәп дирекцияһы тирә-яҡ ауылдарҙан бөтә ата-әсәләрҙе йыйҙы. Шул йыйылышта, гел генә отличноға уҡыған баланың атаһы булараҡ, минең ҡартҡа һүҙ бирҙеләр. Ул беренсе булып сығыш яһаны. Әҙерәк шапырынырға ярата торған Яйҡар араһының кешеһе булараҡ, атай түбәтәйен ҡулына йомарлап тотоп: «Балаларҙы уҡытҡас, ана шулай уҡыталар ул», — тип трибунанан борсаҡ шыттырып төшөп китте. Ләкин 1 сентябрь көнө килеп еткәс, мине артабан уҡытырлыҡ хәле булмай сыҡты. Мәктәпте ташларға тура килде. 13-сө йәшкә киткәндә ауылда ойоша башлаған Әлмөхәмәт МТС-ына директорҙың эш ҡағыҙҙарын күсереп яҙыусы булып эшкә индем. Атайыма тәүге алған 50 тәңкәне тотторғас, уның йәшел күҙҙәренә йәш эркелде, сөнки 1928 йылда бер көрән бейәбеҙҙе һатып алған 80 тәңкә аҡсанан башҡа беҙҙең өйгә бер ҡасан да ундай аҡса ингәне булманы. Ауыл халҡы: «Ана, Ғимрандың балаһы 6-сы класты бөтөргәс, өҫтәл артында ҡәләм осо менән аҡса эшләй», — тип һөйләп сығарҙы. Билдәле, МТС-та эшләп алыу матди файҙанан тыш, мине байтаҡ нәмәгә өйрәтте. Мин ул саҡтарҙа халыҡҡа бигерәк кәрәк эш ҡағыҙҙары төҙөргә өйрәндем, юғары урындарға кәрәк кешегә ғаризалар, төрлө ышаныс ҡағыҙҙары, башглавсудҡа кассацион ялыуҙар яҙҙым. Аҙаҡтан миңә тормош юлында бала саҡта алған был һабаҡтар бик күп осраҡта ныҡ ҡына ярҙам иткеләне.

1937—38 уҡыу йылында Баҡыр Үҙәк руднигында асылған тулы булмаған урта мәктәптең 7-се класына уҡырға барҙым. 5 саҡрымға йәйәү йөрөп уҡыным. Ике тиҫтәгә яҡын бала инек, ләкин 10-сы класты тамамлау бәхетенә икәү генә — һуғышта башын һалған Ғәлиәкбәров Әбдрахман һәм ошо юлдарҙың авторы ғына ирештек. Ҡалғандарыбыҙ төрлө кластарҙа мәктәп ташлап сығып китергә мәжбүр булды. 1939 йыл хөкүмәт түләп уҡыу законы сығарҙы. Уҡыған балаларҙың ата-әсәһе ике бүлә 75-әр тәңкә түләргә тейеш булды, ләкин күп кенә ғаиләләр был аҡсаны таба алмау арҡаһында, байтаҡ балалар уҡыуын туҡтатырға мәжбүр булды. Мәктәп кластары бөтөнләй

бушап ҡалды. Ул ваҡыттарҙа һәр бер бәләкәй генә бала совет иленең ҡайнар патриоты ине. Совет-фин сигендә 1939 йылдың ноябрь айында провокациялар башланғас, дәрестәр башланыр алдынан бөтә мәктәп митинг үткәреү өсөн һыҙыҡҡа теҙелер ине. Үндағы мәктәп балаларының фин агрессорҙарын фашлап һөйләгән ҡайнар патриотик телмәрҙәре әле лә ҡолаҡта яңғырап тора. Шуғалыр ҙа декабрь башында фин һуғышы башланып киткәс, 1940 йылдың башында 9-сы класта уҡыған 11 малай, ысынлап та малайҙар инде, башҡаса бер кем тип тә атап булмай, бер кемдән дә һорап тормай, мәктәп ташлап, беҙҙән 120 саҡрымда ятҡан Белорет ҡалаһына летчиктар әҙерләп сығара торған мәктәпкә йәйәүләштек. 11 баланан йәше һәм таҙалығы еткән Кузьма Петров тигән егет кенә ҡабул ителде, ҡалғандарыбыҙ бөтәрөнөп, аслыҡтан ҡаҡ һөйәккә ҡалып бер аҙна тигәндә яңынан ҡайтып индек. Ҡыш көндәре мәктәптә уҡыуҙа булһам, йәй башланғас та, уҡыу тамамланыу менән колхоз эшендә булдым. 7-се класты тамамлағас, йәй буйы колхоз учетчигы булып эшләнем, 1939 йыл уҡыу башлангансы көндөҙ колхоздың йылҡыһын көттөм, ә инде әҙерәк өлкәнәйә төшкәс, быуынға ҡарыу ултырғас, косилка менән бесән, көҙ — иген өлгөргәс, лобогрейкаға ултырып иген саптым. Колхозда кәбән ҡойоуҙан башҡа бөтә эштәрҙе лә башҡарырға тура килде, тик уныһы ғына хәлдән килмәне.

10-сы класты 1941 йылдың 10 июнендә, һуғыш башланырға ике аҙна ҡалды тигәндә, тамамланым. Һуңғы имтиханды тапшырған көндө үк, аттестат тапшырыу тантанаһын көтөп тә тормай, торф ҡырҡырға киттем, сөнки ул кисәгә кейеп барырлыҡ өҫтә кейем юҡ. Минең маҡтау грамотаһы менән аттестатты, премияға бирелгән трикотаж күлдәк менән бергә мәктәп дирекцияһы атайым ҡулына тотторол киткән. Торфтан ҡайтыуға миңә премияға бирелгән күлдәкте атай ҡарт колхозда кладовщик булып эшләгән Сәлихов Мазһар тигән ағайға 3 бот бойҙайға һатҡан ине. Ул буй-буй трикотаж күлдәкте торфтан ҡайтҡас уның өҫтөндә күрҙем. Фәҡирлек арҡаһында үҙемдең хәләл көсөм менән алған күлдәкте үҙемә бер тапҡыр ҙа кейергә насип булманы. Баймаҡ торфынан ашағандан арттырып 205 тәңкә аҡса алып ҡайттым, атай мәрхүмдең шатлығының сиге булманы. Хатта көтөүҙән алып ҡалып, бер тәкә салыуы ла хәтеремдә. Атайҙың, ауылдаштары араһында күкрәк һуғып, «үҙ байлығы» менән маҡтаныуы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ.

1941 йылдың ноябренән алып тыуған колхозыбыҙ «Буденный»ҙа бухгалтер булып эшләнем. 1942 йыл башында бер төркөм комсомолецтар менән, үҙебеҙ теләп,

Ырымбур өлкәһендәге яңы ойошҡан Краснохолм хәрби-пехота училищеһына киттек. Армияны гауптвахтанан башланым. Мине үҙем менән барған 21 егеткә командир итеп тәғәйенләнеләр. Ырымбур вокзалында хәрби комендантҡа инеп, билет юллап йөрөгән арала моҡсай эсендәге аҙыҡ менән ҡуша һалынған документтарҙы тоттороп киткән егет ултырған урынында йоҡлап киткән дә, уның ҡулындағы минең документтар һалынған ҡапсыҡты Ырымбур жуликтары урлап алып киткән. Документһыҙ тороп ҡалғас, мин бөтә егеттәрҙе вокзал алдына теҙҙем дә, хәлде һөйләп бирҙем. «Нишләйбеҙ, училищеға китәбеҙме, әллә документтар булмағас, военкоматҡа кире ҡайтабыҙмы?» — тип һораным. Егеттәр бер ауыҙҙан: «Училищеға китәбеҙ, документһыҙ булһа ла алырҙар әле», — тип яуап ҡайтарҙы. «Давай, кире ҡайтып китәйек», — тип ауыҙ асыусы бер кем дә табылманы. Ошо бәләкәй генә факт үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй түгелме?

Асҡарҙан сығып киткәс, Орск аша Ырымбурға яғылмаған теплушкаларҙа ун көн тигәндә килеп еттек, барлыҡ аҙыҡ-әүҡәт ашалып бөтөлдө. Ырымбурҙан яңынан 100 саҡрым үтәһе бар. Ҡайҙа колхозға, ҡайҙа силсәүиткә инеп, кемдән жмых, кемдән һоло алып тамаҡланып, баяғы араны йәйәүләп, дүртенсе көн тигәндә училищеға килеп еттек. Бөтә егеттәрҙе лә училищеға ҡабул иттеләр, ә мине, асыҡ ауыҙ булғаным өсөн, Әбйәлил военкоматынан документтарҙың күсермәһе килеп еткәнсе, гауптвахтаға яптылар. Дөрөҫ, бик тә ғәҙел эшләгәндәр, бер кемгә үпкәләргә лә урын юҡ.

Кесе командир званиеһы биреп, полктарға тараттылар. Беренсе тапҡыр июль башында (1943 йыл) һуғышҡа индек. Икенсе аҙнаһында бомбардировкаға эләгеп, ауыр контузия алдым. Шунан һуң «стройға яраҡһыҙ» табып, мине штабҡа күсерҙеләр. Һуғыш бөткәнсе полк, дивизия штабтарында эш башҡарыусы булып хеҙмәт иттем. Шунда машинкала, йәғни бына әле баҫып ултырған «Ундервуд» тигән немец машинкаһында баҫырға өйрәндем. Совет Армияһынан 1946 йылдың ноябрь айында демобилизацияландым. Ауылда ҡалырға ниәт бик ҙур ине, сөнки ул ваҡытта һуғыштан ҡайтҡан фронтовиктарға бер центнер иген, бейма баҫтырыу өсөн ике килограмм һарыҡ йөнө бирергә тигән ҡарар бар ине, ләкин беҙҙең колхоз миңә уны табып бирә алманы. Бейма юллап, район үҙәгенә ике тапҡыр йәйәүләп барып ҡайттым. Бер тапҡыр райсовет председателе, үҙебеҙгә еҙнәй тейеш кеше Шәрипов Ғибатта булдым, ләкин Хәлил сельпоһының председателе Хоҙайбәндин тигән бәндә уның бойороғон үтәмәне. Ул райсовет председателенең яҙған ҡағыҙын йыртып ырғытты. (Ул

саҡтарҙа ла юҡ-юҡ та бюрократтар булғылаған икән). Мин ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла сабыулап йөрөнөм-йөрөнөм дә, ни игенен, ни быймаһын ала алмай, «өйрәнгән яҡ» тип, ғинуар башында «Сибайзолото» руднигына килеп эшкә керҙем. Мине Сталин исемендәге старателдәр артеленә счетовод итеп ҡабул иттеләр. Үҙем, бер аҙ эшләп, землянка һатып алғансы, Хәмитов Абрар тигән таныштарымда өйҙәш йәшәнем.

Тиҙҙән мине «Сибайзолото» комскомитетының секретары итеп һайлап ҡуйҙылар. ВЛКСМ-дың Баймаҡ райкомы пленумында беренсе тапҡыр ҡатнашып, миңә һүҙ биргәс, пленум ағзаларына «ҡайнар сәләм тапшырып», трибунала ни әйтергә белмәй, ҡара тиргә батып, ҡатып торған саҡтар әле лә хәтерҙә.

1947 йыл, уҡыуҙы дауам итеү теләге менән Магнитогорск тау-металлургия институтына имтихан тапшырып, уның киске бүлегенә уҡырға индем. Бер үк ваҡытта ҡалалағы ҙур предприятиеларҙың береһе, калибр заводында завод комскомитетының секретары булып эшләп тә йөрөнөм, ләкин, фатир булмау сәбәпле, бер нисә айҙан һуң Сибайға кире әйләнеп ҡайттым. Старателдәр артелендә хеҙмәт һәм эш хаҡы буйынса председатель урынбаҫары булып эшләп йөрөгән ерҙән мине 1947 йылдың ноябрь айында ВКП(б) ағзалығына кандидат көйөнсә партияның Баймаҡ район комитетына эшкә күсерҙеләр. Башта пропаганда һәм агитация бүлегендә инструктор, унан парткабинет мөдире булып эшләнем. 1949 йылда мине пропаганда һәм агитация бүлегенең мөдире итеп үрләттеләр.

1952 йылдың аҙағында, партияның өлкә комитеты эргәһендә асылған марксизм-ленинизм классиктарын тәржемә итә торған курстан айырып, мине Стәрлетамаҡ өлкәһенең яңы асылған «Сталин байрағы» тигән гәзиткә редактор итеп ебәрҙеләр. Ул өлкә бөтөрөлгәс, өлкә партия мәктәбенә кире ҡайтып, имтихандар тапшырып, отличник дипломы алдым. Шуны ла әйтеп китергә кәрәк, Стәрлетамаҡта эшләгәндә өс бүлмәле фатир алып, Баймаҡтан үҙ ғаиләмде күсереп алып килдем. Ҡалала йүнләп йәшәргә лә өлгөрә алманыҡ, күскәндең 9-сы көнөндә Стәрлетамаҡ өлкәһен бөтөрөү тураһында Үҙәк Комитеттың ҡарары сыҡты. Мин эшләп йөрөгән «Сталин байрағы» редакцияһын, башҡа бик күп шуның ише өлкә учреждениеларын яптылар. Барыбыҙ ҙа урамда тороп ҡалдыҡ. Тик бик күп ваҡыт үткәс кенә төрлөбөҙҙө төрлө ергә урынлаштырып бөттөләр. Ҡайҙа ебәрһәләр шунда барҙыҡ, ни ҡушһалар шуны башҡарҙыҡ, хәҙерге кеүек, тормош шарттары дауайлау хәлдәре ул замандарҙа булмай торғайны. Һәр кемдән башта эш талап ителде.

Диплом алғас, партияның өлкә комитеты мине «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитенә эшкә тәғәйенләне, ләкин ул ваҡытта райкомдың 1-се секретары Любушкин, обкомға инеп, Баймаҡҡа, райкомға алып ҡайтты, ә 1953 йылдың көҙөндә Баймаҡ МТС-ы зонаһы буйынса секретарь итеп һайланылар. Ошо осорҙа оҙаҡ йылдар МТС директоры булып торған Зариф Хафизович Ҡадиров менән бергә эшләй алыуҙы үҙем өсөн ҙур тормош һәм эш мәктәбе үтеү тип һанайым. Райком секретары булыуға ҡарамаҫтан, торлаҡ булмау сәбәпле, уларҙа фатирҙа, Зариф ағай менән Ғәбилә апай тәрбиәһендә торҙом. Уларҙың миңә күрһәткән изгелектәрен ғүмерҙә лә оноторлоҡ түгел. Көнө-төнө Зариф ағай менән колхозда йөрөнөм, 1954 йылдың яҙғы сәсеүенә тиклем беҙ булмаған ауыл ғына түгел, бер ферма, бер мастерской, бер бригада ҡалманы. Зариф ағайҙың эштән башҡа бер ниндәй ҙә ғәме булманы, аш алдында ла һөйләгәне тик шул эш булыр ине. Үҙенең бала-сағалары ишле генә булыуына ҡарамаҫтан, бер генә бүлмәле тәпәш кенә ҡараңғы өйҙә торҙо, сөнки уға үҙе һәм ғаиләһе тураһында ҡайғыртырға һис кенә лә форсат булманы. Ул бөтә кешенән алда тороп, бар кешенән һуң ятып китер ине. Йылдың теләһә ниндәй ваҡытында ла иртәнге сәғәт алтыла уның эш кабинетында шәм янып тора.

Һуғыштан һуң райондарҙағы эш стиле хаҡында берике ауыҙ һүҙ әйтеп китмәү хата булыр ине. 8 сәғәтлек көндәлек эш тамамланғас, райкомдарҙа киске сәғәт 9-ҙан 11-гә тиклем төнгө эш башланыр ине. Ул эш ваҡыты документтар өйрәнеүгә, үҙ өҫтөңдә эшләү йәки берәр төрлө ултырышҡа докладтар әҙерләүгә китә. Был һуғыш осоронда төндә эшләү ғәҙәтенең дауамы булды, ахырыһы. Берәр эш алдынан бөтә хеҙмәткәрҙәр ауылдарға тарала. Мәҫәлән, яҙғы сәсеү башланырҙан бик күп алда партия хеҙмәткәрҙәре йәйәүләп, муйынына сумкаһын аҫып, үҙенә тәғәйенләнгән колхозына атлай. Уның күн сумкаһында, ҡағыҙҙа булараҡ, төрлө темаға дүрт-биш лекция ята. Көн буйы райком вәкиле колхоз хужалары менән ҡырҙа була, кис, ауыл шәм алғас, колхоз клубында берәр лекция һөйләй. Элек райкомдарға халыҡ алдында сығып, башҡортсамы, руссамы ауыҙ асып һүҙ әйтә алмаған кешеләрҙе эшкә алманылар, сөнки партия работнигы халыҡ массаларын тәрбиәләүсе, өгөтләүсе, алда торған бурыстарҙы үтәүгә әйҙәүсе. Яҙғы сәсеү йәки иген урыу тамамланмай тороп, район үҙәгенә ҡайтып йөрөү ҡәтғи тыйыла. Һиңә йөкмәтелгән бурысты үтәп, беренсе секретарҙан рөхсәт алғас ҡына районға, бала-сағалар эргәһенә ҡайтып төшөлә. Элек беҙ колхоздарҙа кеше ни күрһә, шуны күреп, ни ашаһа шуны ашап, берәр ай йөрөп ҡайтыр инек. Шуға күрә

ауылдағы һәр кемдең нисек йәшәгәнен генә түгел, эске кисерештәренә ҡәҙәр яҡшы белеп торабыҙ.

1954 йылдың июнь башында мине райкомдың 2-се секретары итеп һайлап ҡуйҙылар. Был турала мин үҙемдең «Сиҙәм яҙы» тигән иҫтәлектәремдә яҙып үткәйнем. Шуға күрә был турала һөйләп тороуҙың кәрәге юҡтыр, тип уйлайым.

1956 йылдың ноябренән 1960 йылдың ноябренә тиклем партияның Баймаҡ райкомында 1-се секретарь булып эшләнем. Ул ваҡыт үҙенең төрлөлөгө, ҡатмарлылығы һәм яуаплылығы менән хәтерҙә ныҡ уйылып ҡалған бер һынылыш осоро булып тора. Уны, ваҡыт табып, ентекләп уйланҡырап, ҡағыҙға төшөрөп ҡалдырыу кәрәктер, тип уйлайым. Тора-бара әгәр һаулыҡ булһа, бәлки, шулай булыр ҙа, ләкин хәҙер өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын.

1960 йылдың ноябрь айында мине партияның өлкә комитетына партия органдарының мөдире итеп эшкә алдылар. Ул хәҙерге ойоштороу — партия бүлеге була. Унда 5 йыл эшләгәс, Үҙәк Комитет эргәһендәге аспирантурала уҡып, экономик фәндәр кандидатлығына диссертация яҡлап, 1967 йылдың мартында республикаға эшкә ҡайттым. 1975 йылдың июль айына тиклем Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары булып эшләнем. 1975 йылдан пенсияға сыҡҡансы, йәғни 1981 йылдың майына тиклем, республика кинофикацияһының Дәүләт комитеты рәйесе булып эшләнем. Шул ваҡыттан ошо көнгәсә СССР-ҙың персональ пенсионерымын.

Эшләү осоронда 6 тапҡыр Башҡорт АССР-ы Верховный Советына депутат булып һайландым, күп тапҡырҙар Өлкә комитет ағзаһы һәм Өлкә комитет бюроһы ағзалығына кандидат булып һайландым. КПСС-тың XXI съезы делегаты булдым. 1958 йыл район мәктәптәрен яңы уҡыу йылына әҙерләү, инициатив төҙөлөш буйынса Рәсәй Федерацияһында инициатор булып, мөрәжәғәт менән сыҡтыҡ. Шул уңай менән РСФСР Мәғариф министерствоһы күп иптәштәргә, шул иҫәптән миңә лә «Мәғариф отличнигы» тигән исем бирҙе. Бөтә Союз уҡытыусылар съезына делегат булып та һайландым. Ордендарым, миҙалдарым да бар. Сиҙәм күтәреү йылдарында хөкүмәт Ленин ордены менән наградланы.

Үҙемдең кеше һәм шәхес булып формалашыуым өсөн Әбйәлил һәм Баймаҡ халҡына мәңге бурыслымын.

*Рамазан ӨМӨТБАЕВ. 1986 йыл, 3 апрель*

# АТЛЫ БАШҠОРТ

*Повесть*

I

1942 йылдың авгусы. Колхоздың йылҡы көтөүсеһе Ғилмишәриф менән ошоғаса Суртан приискыһында старателдәрҙән алтын ҡабул итеүсе булып эшләгән «Мәте» ҡушаматлы Заһретдин бер купеға эләкте. Армияға алыныусыларҙы теплушкаларға тейәп оҙатһалар ҙа, былар нишләптер ултырып, хатта ятып бара торған вагонға тура килде. Ғилмишәриф, ҡайыш менән уратып быуылған һары сумаҙанын көскә вагонға һөйрәп инеп килеүсе ауылдашын күргәс тә шатлығынан:

— Ә, Заһретдин ағай, һаумы! — тип һөрәнләп ебәрҙе. Тегеһе Ғилмишәрифкә күҙ һирпеп алды ла:

— Һау, һау! — тип ауыҙ эсенән мығырҙаны.

— Һин, ағай, вәйәнкәматта күренмәгәйнең, мына бергә килеп эләктек! Ҡайһылай ҙа йәтеш булды, — тип Ғилмишәриф өҙөлөп ҡалған хәбәрҙе ялғарға тырышты. — Һин дә, ағай, армиәгә китеп барыуҙыр бит?

— Кәнишнә, әрмиәгә! Әллә өләпсәңә ҡунаҡҡа бара тип уйлағайныңмы? — тип ул яуабын ҡырт киҫеп һүҙҙе сомторайтырға самаланы.

Бите көнгә ялтырап янған Ғилмишәриф, моҡсайын аяҡ араһына ҡыҫтырып, ауылдашы ҡаршыһына ултырҙы. Унаң өҫтө-башы ла мөсһөҙ генә. Заһретдиндың диҡҡәт менән ҡарауынан оялыпмы, Ғилмишәриф ҡулдан тегелгән, гармун күреге шикелле сырышып бөткән кәзәкиен, ҡайышланып бөткән салбар балаҡтарын һыпырып алды. Ә Заһретдиндың йәне көйә: «Исмаһам, бер йүнле кеше менән эләгеп булманы. Өҫ-башы ни рәүешле бит!»

Быларҙы билдәһеҙ тарафтарға алып китәһе паровоз, ҡайғылы тауыш сығарып, гудогын ҡысҡыртты, йөгән самалаған ҡарт ат шикелле, бер нисә тапҡыр алға-артҡа

сигенеп алды ла урынынан ҡуҙғалды. Заһретдин тәҙрәгә ҡапланды — ҡатыны Маһитап оҙатырға килгәйне, тубығына хром йәбештереп тегелгән галифеһынан сигеүле батист ҡулъяулығын сығарып, вагон артынан йүгерә-атлай килгән бисәһенә болғаны-болғаны ла, тегеһе күҙҙән юғалғас, күҙ йәштәрен һөртөп, кире урынына ултырҙы. Йәшел фуражкаһын алып, сәсе ҡойола башлаған ялтыр башын һөртөп алды, тағы урынынан тороп, оҙон ҡуңыслы хром итеген шығырлата баҫып тамбурға сығып китте. Күренеүенсә, үҙенә урын да, толҡа ла таба алмай: нисек инде Заһретдин ише Заһретдинды тоттолар ҙа, бронен һыпыра тартып алып, армияға оҙаттылар. Армияға алыныу тураһындағы уй уның башына килмәгәйне. Ирәндек тауының көнсығыш битендәге Дарыуҙы һыуы буйында, сылтырап аҡҡан көмөштәй таҙа шишмә тауышын тыңлап ҡына ултырып, старателдәрҙән алтын ҡабул итә ине бит ул. Нисә йылдар инде донъя гәме, тормош хәсрәте уны урап үтте. Бисәһенең кейгәне атлас та ебәк, биҙәкле сатин да либерти ине. Ә үҙ кейеме һуң! Бостон да шевиот, габардин, ашағаны француз булкаһы ла керәндил, эскәне ялтыр ҡалай ҡумталы «стопитый» йәки цейлон сәйе. Ә аяғында табанлыҡ араһына ҡайын туҙы һалып тегелгән, баҫҡан һайын шығырлап торған ялтыр хром итек. Ә тәхил шарабы тураһында һөйләйһе лә юҡ. Тап-таҙа туҡһан алты градуслы зәмзәм һыуы өҫтәл тояғы ҡырында фанера менән ябылған биҙрәлә ултыра — һоҫоп ал да эс! Ҡайһы саҡтарҙа көрөшкәне батырыбыраҡ һемереп ебәрһәң, эсең өҙөләр, өҫтәл артында ултырып кәйефләнеп тә алаһың:

*Ана килә афтамабиль,*
*Тейәгәне таш күмер...*

Нисә йылдар алтын ҡабул итеп эшенең яйына ла төшөнөп бөткәйне. Бына үҙҙәренең машерт[1] станогында көн буйы һары балсыҡ, алтын ҡомо йыуып арыған, брезент курткалары һарғайып бөткән старателдәр көн ауышыуға төрлөһө төрлө яҡтан алтын ҡабул итеү урынына ағыла — алтын тапшырырға сираҡа тора.

Тояҡтары ергә батырылып, ҡарағай таҡтаны йышып эшләгән өҫтәлдең һул мөйөшөндә ниндәйҙер шыйыҡса һалынған оҙонса ҡалай һауыт бар. Ә Заһретдиндың күкрәгенә тейеп тигәндәй, үлсәгес, старателдәр әйткәненсә, «мыҫҡал» тора. Был мыҫҡал алтын эҙләүселәрҙе һирәк-

---

[1]*Башгерд* — немецса. Урындағыса машерт — алтын ҡомон йыуа торған иләкле станок. Ғәҙәттә, ауыр тоҡомо өҫтә, еңеле аҫҡа төшә.

мирәк байыта ла, йышыраҡ ярлыға ҡалдыра. Шуға күрә лә улар алтынына ла, «мыҫҡалы»на ла ҡул һелтәп кенә ҡарай. «Алтын табып кем йәлсегәне бар. Алтын нисек килә, шулай китә», — тиҙәр. Шуға күрәлер ҙә алтын табып ҡулына әҙерәк мал керһә, старатель, эшен ташлап, байлығы бөткәнсе аяҡ тибеп, кәпәс ташлап байрам итә. Мәгәр донъя юҡлығы, аслыҡ уны яңынан машертына килеп көрәгенә тотонорға мәжбүр итә.

Сират торған старателдәр терегөмөш ярҙамында тотолған ваҡ ҡына бөртөклө алтын валсыҡтарын төргән ҡулъяулыҡтарын сисәләр ҙә, баяғы шыйыҡсалы һауытҡа һалалар. Һаҡ ҡына һалалар ҙа, ике күҙҙе алмай көтә башлайҙар. Ҡалғаны Заһретдиндың эше. Ул йылтыр тимерҙән эшләнгән ҡыҫҡысты уң ҡулына ала ла һалынған алтынды бутарға керешә. Уны балсыҡтан, тупраҡтан, башҡа ҡушымталарҙан, терегөмөштән айырған ваҡытта янып ҡарайған төтөн ҡоромдарынан таҙарта. Үҙенең тәбиғи һары төҫөнә ингән алтын бөртөктәрен мыҫҡал тәрилкәһенә һалып үлсәй ҙә бөтә кеше ишетерлек итеп иғлан ҡыла: «Хәким ағай! Һинең алтының бер мыҫҡал[1]!», «Зәйнулла ҡоҙа! Һинеке ярты мыҫҡал». Шунан һәр кемдең тапшырған алтынына күрә кәпитәнсә яҙып бирә лә эше тамам. Старателдәр ҡағыҙҙы тотоп контораға — бонға[2] йүгерә. Ә инде бонға — аҡса ҡағыҙынан эшләнгән ҡөҙрәтле нәмәгә, ҡош һөтөнән ғәйре бөтә йәнеңә кәрәкте һатып алып була.

Старателдәрҙән алтын ҡабул итеп, сейфҡа тапшыра ла, Заһретдиндың хеҙмәте тамам: кеҫәһенән әлеге батист карманайҙы сығарып йәмшек табалай ҡып-ҡыҙыл битен һөртөп ала, фанера өҫтөндә түңкәреүле ятҡан алюмин көрөшкәгә тотона. Бер ун-ун биш минут үтеүгә, уның кәйефе күтәрелеп, зәңгәр күктә Ирәндек тауы яғына әкрен генә йөҙгән болоттарға барып олғаша ла, тағы:

*Ана килә афтамабиль,*
*Тейәгәндәр таш күмер...*

Бына кем ине ул Заһретдин ағағыҙ?!

Ул үҙ баһаһын бик яҡшы белде. Теләһә кем менән уралманы, килгән-киткән менән ултырҙаш булманы. Алтын тапҡан кешеләрҙән дә һый-хөрмәт ҡабул итмәне. Старателдәр янында шундай, ә инде участка начальнигы, артель башлығы алдында баҫма булып ятырға ла риза.

---

[1]*Мыҫҡал* — золотник. Элекке ауырлыҡ үлсәүе — 4,35 г самаһы.

[2]*Бон* — старателдәр менән хисаплашыу өсөн сығарылған ҡиммәтле ҡағыҙ.

Әллә ҡайһы тарафтарҙан килен булып төшкән ҡатыны Мәһитап уны шулай өйрәткән. «Шул ҡатып бөткән ауылдаштарың менән сыбалма! Башыңды һәләк итерҙәр һинең ул ҡырағайҙарың», — тип Зәһретдинды көн һайын киҫәтеп кенә тора. Ә Зәһретдин ҡатынын бик тә ярата, һүҙенән бер генә ҡарыш та ситкә сыға алмай.

Бына шулай ғүмер һөрҙө ул Зәһретдин.

Әллә ҡайҙан һуғыш башланып китте. Мәгәр бының башындағы бер сәсе лә ҡыбырламаны: военком бер аҙна үтеүгә районға саҡырып, ҡулына бронь тотторop ҡайтарҙы. Һуғыш бөткәнсе, май эсендәге бөйөр шикелле, гәмһеҙ генә донъя көтөп ятырға ине ниәте. Ләкин эш үҙе уйлағанса барып сыҡманы: старателдәрҙең күбеһе кәйлә-көрәктәрен — мылтыҡҡа, һары балсыҡҡа буялған брезент көпөләрен шинелгә алмаштырҙы. Алтын эшләү һүнде, старателдәр артелен яптылар, юҡҡа хисап булғас, ҡабул итеү пунктын да бөтөрҙөләр. Шулайтып, Зәһретдиндың хәжәте ҡалманы. Хәрби комиссариат повесткаһы уны ла эҙләп тапты. Районға барғас, ул: «Как же, минең бронем бар бит!» — тип ауыҙ ғына асҡайны, уныһын тартып алдылар ҙа ҡулына икенсе документ тотторҙолар. Сургучлы мисәт баҫылған конверт тышына: «Командиру воинской части V... при Н... кавалерийском училище», — тип яҙылғайны. Хәрби комиссариатта: «Минең менән тағы кемдәр бара? Ул ниндәй часть һуң ул?» — тип һорашырға ла самалағайны, ҡулына документ тотторған лейтенант Зәһретдиндың бер унда, бер бында һуғылып ни эшләргә белмәй йөрөгәнен күреп: «Иптәш Итәлмасов! Документығыҙ ҡулығыҙҙа, бөгөнгө киске поезга өлгөрөгөҙ! Шагом марш!» — тип екерҙе. Хәрби комиссариат менән тамам хушлашып, тышта көтөп ултырған ҡатыны янына сыҡты. Иренең һөмһөрө ҡойолоп килеүенән Мәһитап эштең хөрт икәнлеген төшөнөп алды.

— Нишләй, нимә тинеләр? Ҡалдырҙылармы?

— Эйе, ҡалдырҙылар! Көтөп тор! Ҡана, дилбегәне бир! Хәҙер стансаға, киске поезға барып етергә кәрәк, — тип Зәһретдин атын Ҡаръятмаҫ тауы яғына борҙо.

Ҡаръятмаҫты күтәрелеп, юл һарҡыуға табан киткәс, Зәһретдин галифе кеҫәһенән теге конвертты сығарып яңынан яҙыуын уҡыны ла: «Бер үҙемә конверт биргәс, бигүк юҡ часть түгелдер әле. Йә шул командирҙарына урынбаҫар-фәлән кәрәктер, унда ла беҙҙең һымаҡ эш мәнеһен, донъяның рәт-сиратын белгән кешеләр кәрәкмәй тиһеңме ни?» — тип уйланы ла бер аҙ кәйефе күтәрелеп, күңеле тыныслана төштө.

Тик, инәһеҙ, мынауы «кавалерия» тигән һүҙе генә эсте бошора бит әле. Зәһретдин күҙен йомоп уйға сумды.

Ауылда тыуып үçеүенә ҡарамаçтан, малайҙар шикелле, атҡа әүәçлеге булманы. Биш-алты йәштә ат һуғарырға тип барғанда яй ғына юртып киткән бейәнән йығылып ҡалды ла бүтәнсә ат менеү түгел, эргәһенә бармаç булды. Хатта һуғарырға ла теҙгененән етәкләп кенә алып бара. Бына ошо кешене кавалерияға яҙғандар!..

— Ҡайтҡас, ауылдаштар һорашһа-нитһә, теләһә ни һөйләп йөрөмә. Уға ғына ҙур конверт тотторол, үҙен генә махсус часҡа оҙаттылар, тиерһең, — тине мыштайып килгән ҡатынына.

Кем белә, хата булған тип, кире ҡайтарып ебәрерҙәр әле. Улай тигәс тә, «Главзолото» начальнигы Серебровский үҙе ҡул бирешеп күрешә торғайны бит...

## II

Вагон тәгәрмәстәренең шаҡылдауын тыңлап, икеһе ике төрлө уйға сумған ауылдаштар оҙаҡ ҡына өндәшмәй барҙы. Заһретдин бик ғәмһеҙ күренгән юлдашына тағы бер ҡарап алды ла йәлпәк битенә етдилек йүгертеп, бер нисә тапҡыр тамағын ҡырҙы. Шунан тауышын ҡалынайтыбыраҡ Ғилмишәрифкә өндәште:

— Самаңа ҡарағанда, земляк, һин дә шул әрмиәгә китеп бараһыңдыр инде? Юлың уң булһын! — тигән булды.

— Эйе. Былай колхоз хужаларының мине алып ҡалырға ниәттәре лә юҡ түгел ине, ләкин ҡырталашып китеп барған көн. Мынауындай хәтәр заманда нindәй йөрәк менән сыҙап ятмаҡ кәрәк? Ил күргәнде күрмәй әмәл юҡ.

Мәте Заһрый юлдашына аптырабыраҡ ҡарап ултырҙы ла: «Ҡара, ҡара, ниндәйерәк хәбәр һөйләгән була: йәнәһе лә, уны колхоз алып ҡалырға тырышҡан, һинең хәжәтең дә колхозыңа шул үҙең саҡлы ғына инде!» — тип уйлап ҡуйҙы.

Станция һайын уларҙы ҡыçырыҡлап вагонға килеп тулған кешеләр башланған әңгәмәне йыш ҡына өҙөргә мәжбүр итте. Елкәләренә тоҡ аçҡан, ҡулдарына ҡайһыһы фанер сумаҙан, ҡайһыһы ҡумтаға оҡшаған һандыҡтың йоҙағынан тотоп инеп-сығып тороусылар бер-береһен этә-төртә шаулашып ҡыçыҡ вагонда урын дауланы. Ә былар баштан инеп алған урындарында, йомортҡа баçҡан тауыҡ шикелле, ултыра бирҙе. Шулай ҙа Ҡарталы станцияһына етеп, көньяҡҡа — Ташкент, Ырымбур, Кустанай яғына барыусылар шау-гөр килеп вагондан төшөп ҡалғас, Силәбегә китеүселәрҙең һаны байтаҡҡа кәмене. Заһретдин Ҡарталыла төшөп, әҙерәк перронда йөрөп инде лә тағы ауылдашының ҡаршыһына ултырҙы.

— Ҡайҙәле, ауылдаш! Документтарыңды күрһәт! Ҡайҙа сәфәр тотаһың икән? Ҡарайыҡ әле, — тине.

Әммә Ғилмишәриф, ауылдашы уйлағанса, бигүк бер ҡатлы булып сыҡманы:

— Нимәгә кәрәк ул һиңә? Урын-еренә барып еткәс, кәрәкле кешеһенә күрһәтермен, — тине.

Ғилмишәрифтең яуабы Зәһретдинды аптырауға ҡалдырҙы.

— Мин ни... былай ғына... ауылдаш тип ҡайҙа барыуыңды белергә тип ҡыҙыҡһынғайным, — тигән булды. Бер аҙҙан Зәһретдин аяғүрә баҫты ла галифе кеҫәһенән хәрби комиссариат биреп ебәргән пакетты сығарҙы, бөтә кеше ишетерлек итеп конверт тышына яҙған адресты уҡып ишеттерҙе.

— Бына шулай, Ғилмишәриф ҡусты, бер үҙемә бер пакет тотоп, ҙур командир ҡарамағына китеп барам. Райондың военкомы Белоногов кабинетында үҙ ҡулы менән тапшырҙы. «Бына иптәш Итәлмасов! Ошондай яуаплы вазифаны йөкмәтеү өсөн, районда эҙләп-эҙләп ҡараныҡ та, һинән дә ҡулайыраҡ кеше табалманыҡ. Тапшырылған бурысты урын-еренә еткереп үтәрһең, тип ныҡ ышанабыҙ», тип ҡулды ҡыҫты. Яуаплы етәкселәр бөтә урында ла: әрмиәлә лә, тылда ла кәрәк ул, — тип Зәһретдин һүҙен осланы.

Ғилмишәриф бер ни өндәшмәһә лә, ауылдашы менән үҙенең бер часҡа китеп барыуын белде. Шулай ҙа, был бер ҙур урынға тәғәйенләнгән икән, тип фекер йөрөттө.

Бер аҙ бара биргәс, Зәһретдин түбәнге кәштәгә баҫты ла өҫтә ятҡан сумаҙанын төшөрөргә уйланы. Таш тултырғандай ауыр сумаҙанын тартҡыслап ҡараны ла Ғилмишәрифкә:

— Ҡусты! Ҡана, әҙерәк ярҙам итсе әле, ошо сумаҙан булған нәмәне аҫҡа төшөрәйек, — тине.

Ғилмишәриф бер аяғына ғына баҫты ла икенсе ҡулы менән елтерәтеп сумаҙанды аҫҡы кәштәгә, ауылдашы алдына, ҡуйҙы. Зәһретдин, һөйләнә-һөйләнә, сумаҙан ҡайыштарын сисергә тотондо.

— Юлда килә торғас, ҡорһаҡ та асҡан әле. Әҙерәк әүҡәтләнеп алырға кәрәк, — тигәнен генә аңланы ауылдашы.

Зәһретдин ҡағыҙға, аҡ сепрәккә төрөлгән аҙыҡты үҙ эргәһенә һалды ла сумаҙанының өҫкө ҡапҡасынан өҫтәл яһап, бәләкәй генә сигелгән ашъяулыҡ йәйҙе. Сумаҙаны төбөнән мөгөҙ һаплы ялтыр бәке сығарып, ҡаҡлаған колбаса, йылҡы ҡаҙыһы тураны, сепрәгенә майы һеңгән ҡаҡлаған ҡаҙ сығарып, бер ботон айырып һалды. Алтын лавкаларында ғына һатыла торған француз булкаһын киҫәк-

киҫәк итеп телде лә бер-береһе өҫтөнә өйҙө. Шунан ыҡсым ғына тоҡсайҙан сабый бала дәүмәллеге бөкөлө быяла һауыт сығарҙы, тотҡаһына йылтыр тимер сынйыр бәйләнгән алюмин көрөшкәһенә спирт һалды. Был шулай бара, ә тоҡтары, сумаҙандары өҫтөнә ултырған кешеләр вагон эсен солғап алған тәмле-томло аҙыҡ, спирт еҫенә мырш-мырш итеп танауҙарын тартып ала. Заһретдин күкрәген тултырып эскә тын алды ла, күҙен йомоп алюмин көрөшкәне бушатып ҡуйҙы. Шунан оҙаҡ ҡына «һә... һә!..» тип ситкә тын бөрккәс, ҙур ләззәт менән ашарға кереште.

Бер аҙ ашап алғас, Заһретдин сумаҙан өҫтөндә ултырған көрөшкәне ҡулына алып төбөнә текләп ултырҙы ла кире урынына ҡуйҙы. Кирелә биреп бөтә вагонға ишетелерлек итеп кикерҙе, ашъяулығын йыйып, сумаҙанына кире тыҡты.

— Ғилмишәриф ҡусты...

Поезд йөрөшөнә ҡаршы йүгергән даланы, унда-бында үҫкән сауҡалыҡтарҙы ҡарап барған Ғилмишәриф үҙ исемен ишетеп һиҫкәнеп ҡуйҙы — Заһретдин өндәшә икән.

— Ғилмишәриф ҡусты! Мынауы сумаҙанды кире урынына ҡуйсы әле!

Ни хәл итһен, йәш кеше ауыр сумаҙанды өҫкө кәштәгә ырғытты ла кире урынына ултырҙы. Бер аҙ барғас, үҙе лә тамаҡ ялғарға булды.

Мөйөштә ятҡан ауыҙы бәйле моҡсайынан ҡалай көрөшкә сығарып титандан ҡайнар һыу килтерҙе. Бер төйөнсөктән көлдә бешкән өшә һындырып ашай башланы. Уның икмәген таҙа тештәре менән сытырлатып сәйнәүенән Заһретдин сөсө икмәгенә киндер орлоғо ҡушып бешерелгәнен аңланы. Ул нишләптер Ғилмишәрифтән күҙен алмай өҙлөкһөҙ текләп ултырҙы, бер нисә тапҡыр, уға ниҙер әйтергә теләгән шикелле, эйелеп тә ҡуйҙы, ләкин өндәшмәне. Ғилмишәриф бер-ике уртлап һыу эсте лә икенсе моҡсайынан сығарып һыулы көрөшкәһенә талҡан һала башланы. Шуны иҙеп бутҡа һымаҡ нәмә яһаны.

Заһретдин ерәнгән кеүек ҡарап алды ла тамбурға сығып китте. Йәнәһе лә, бергә барһалар ҙа, икеһе ике кеше.

Шулайтып, урынға килеп еткәнсе, быларҙың береһе вагонда рәхәтләнеп тәмле-татлы ашап, ә икенсеһе ҡайнаған һыуға талҡан болғап туҡланып килде.

## III

Уларҙың хеҙмәт итәһе часы Н. ҡалаһының көнсығышында урман араһындағы землянкаларҙа урынлашҡан булып сыҡты. Штабтың строевой бүлегендә документта-

рын тапшырыр алдынан оло сумаҙанын һөйрәп арманһыҙ булған Зaһретдин, ер аҫтына төшөп киткән ҡараңғы коридорға килеп ингәс, Ғилмишәрифтең еңенән тартты ла:

— Земляк, сабыр ит әле! Документты мин алдан бирәйем, — тине.

— Эйҙә, әйҙә! Тапшыра күр.

Заһретдиндың үҙ уйы бар: штабта тегенең документын алдан ҡарап, миңә тәғәйен урынға яңылыш уны ебәреп ҡуймаһындар. Шунан «Строевая часть» тип яҙылған ишеккә башын тығып:

— Разрешти! — тип ҡысҡырҙы. Өҫтәл артында ниҙер яҙып ултырған өлкән сержант быларға әйләнде лә, был ике кешене баянан бирле көтөп ултырғандай:

— Ваши документы! — тине. Заһретдин документын беренсе булып һондо. Сержант конвертты шатыр-шотор һүтте лә, эсендәге ҡағыҙға күҙ йүгертеп, иғтибарһыҙ ғына ситкә этеп ҡуйҙы. Уның шулай бик һаҡһыҙ ҡыланыуы Заһретдиндың эсен бошорҙо. Заһретдин бит өлкән сержант торған барьерҙың бәләкәй ишеген асып сығыр ҙа ҡосаҡтарын йәйеп: — «Уй, иптәш Итәлмасов, килеп еттеңме инде! Беҙ һине командир менән күптән көтә инек!» — тип өтәләнергә тотонор тип уйлағайны.

Өлкән сержант Ғилмишәрифтең дә документын әлеге ҡағыҙ өҫтөнә ырғытты, шунан телефондан кемделер саҡырҙы. Күп тә үтмәй, киң яңаҡлы, ҡыҫыҡ күҙле, ҡамыт аяҡлы старшина, шпорҙарын сылтыратып, быларҙы үҙе артынан эйәртеп алып китте. Ғилмишәриф: «Минең земляк артта ҡалды бит, көтөп алайыҡ», — тип эргәһендә барған старшинаға ишара яһаны. Ә тегеһе артына әйләнеп ҡараны ла:

— Давай, давай, повеселее! — тип ҡысҡырҙы. Заһретдин, сумаҙанын хром итегенең ҡуңысына һуға-һуға килеп етте лә, аһылдап, сумаҙаны өҫтөнә ултырҙы.

— А ну встать! Вишь расселся, как князь! — Старшина ҡысҡырып ебәрҙе. — Һин нимә? Сумаҙаныңа таш тейәп килә ятаһыңмы әллә?!

Ауылдаштар эсе үҙҙәре кеүек кешеләр менән шығырым тулған ҡараңғы землянкаға барып инде. Старшина ике ҡатлы ҡаҡ һәндерәнең бер мөйөшөнән урын күрһәтте лә ҡайҙалыр китеп юғалды.

Бер аҙҙан:

— Бөгөн бер ниндәй ҙә йылы аш көтмәгеҙ! Ни алып килгәнһегеҙ, шуның менән туҡланып ятығыҙ! — тигән команда булды. Һәр кем үҙ йүнен үҙе күреп ятырға әҙерләнде. Заһретдиндың тамағына аш барманы. Бер аҙ ултырғас, ул спирт һалып эсеп, тамағына ҡапҡылап та ҡараны, ләкин күңеле үҫмәне, күңелен ҡара һөрөм, ауыр болот баҫты.

Иртәнге сәғәт алтыла «подъем!» иғлан иттеләр. Силғау, аяҡ, тир еҫе аңҡыған бөркөү коридорҙа һуҡыр шәм яҡтыһында аяҡ тыпырлауы, бер-береһе менән төртөшөп һүгенеү тауыштары ишетелде. Иҙән уртаһында баҫып сәғәтенә ҡарап торған старшина:

— Живее, живее! Быстрее в строй! — тип ашыҡтырҙы. Кейенеп бөткәндәре стройға йүгерҙе. Иң аҙаҡтан булһа ла, Заһретдин да барып баҫты. Кешеләр урындарын алып тынысланғас, старшина саф алдына сығып баҫты ла, шпорҙарын зыңлатҡанса үксәһен үксәгә һуғып:

— Иптәштәр! Һеҙ Ҡыҙыл Армия, уның данлыҡлы кавалерияһы өсөн менге аттарҙы өйрәтә торған училище янындағы ремонт часына хеҙмәткә саҡырылғанһығыҙ, — тип белдерҙе.

— Вот это да!

— Вот это здорово! Мин ат тигән хайуанды ғүмеремдә күргәнем дә юҡ! — тигән тауыштар ишетелеп ҡалды.

Былай ҙа эсе бошоп саҡ торған Заһретдиндың йәне алҡымына килде. Ул ат өйрәтеү түгел, атҡа атланғанын да хәтерләмәй.

— Бына ошо часҡа килгән аттарҙы менгегә, тәүге кавалерия алымдарына өйрәтәбеҙ ҙә, уларҙы Ҡыҙыл Армияға тапшырабыҙ. Эскадрон писары һеҙҙең исемегеҙҙе алып бөткәс, иртәнге ашҡа барабыҙ. Ә унан һеҙҙе мунса төшөрөп, обмундирование таратып бирәбеҙ. Аңлашыламы? Һорауҙар бармы?

— Атта йөрөй белмәгән кешеләрҙе нишләтәһегеҙ? Пример, бына мин үгеҙҙән башҡа хайуан менән эш иткәнем юҡ! — тип ҡысҡырҙы берәү.

— Башта үҙегеҙҙе өйрәтәбеҙ. Ә шунан инде һеҙ үҙегеҙгә беркетелгән аттарҙы өйрәтергә тотонаһығыҙ. Ясно?

— Ясно!

Сафтың ҡойроғонда торған Заһретдин иң һуңғы минутҡа тиклем ниндәйҙер мөғжизәгә ышанды. Был уҫал старшина уның яғына күҙ ташлар ҙа: «Итәлмасов, ко мне!» — тип ҡысҡырыр төҫлө тойолдо. Ләкин уның фамилияһын телгә алыусы кеше булманы, старшина эскадрон писарына ниҙер әйтте лә ҡайҙалыр китеп барҙы. Уның урынына баҫҡан икенсе кеше бөтөнләй ауылса:

— Хәҙер һеҙҙең барығыҙҙың да исемлегегеҙҙе алам! — тип ҡулы менән ишара яһаны ла коридор башындағы тумбочка артына барып ултырҙы.

— Бына һеҙҙән башлайбыҙ, — тине ул саф башында торған оҙон кешегә күрһәтеп. — Ә ҡалғандарығыҙ уның артынан берәм-берәм миңә килеп яҙыла тороғоҙ.

Заһретдин һаман өмөт итә: эскадрон писары, уның ҡиәфәтенә ҡарар ҙа, ҡарышҡан шикелле, ошондай яуап-

лы мәлдә әллә ҡайҙа дөмөккән старшинаны саҡырып алыр: «Был иптәште ҡайҙа тәғәйенләйбеҙ? Нисә әйтһәң дә, гражданкала бик ҙур урында эшләгән бит», — тип әйтер тип көттө. Юҡ, булманы, писарь уны исемлеккә яҙып ҡуйғас, эргәһенән китешә алмай күкрәген киреп торған Зәһретдиндың өмөт менән янған күҙенә аҫтан өҫкә бер ҡараш атты ла:

— Иптәш... — Ул тиҙ генә исемлегенә күҙ йүгертеп алды. — Иптәш Итәлмасов! Кешеләргә ҡамасаулайһығыҙ, эшегеҙ бөттө, ситкәрәк китегеҙ! — тигәс кенә, өмөтөнөң һуңғы ҡылы өҙөлдө. Ул, көрһөнөп, бер-ике аҙым атланы ла күҙе менән ауылдашын эҙләне. Ә Ғилмишәриф, бер ни ҙә булмаған төҫлө, үҙе кеүек үк бик ябай ғына кейенгән кешеләр менән көлөшә-көлөшә ниҙер һөйләшә ине.

Урмандағы бер соҡор янында төҙөлгән барак кеүегерәк йортҡа ашарға алып барҙылар ҙа, дүрт кешегә берәр котелок тоҙло балыҡ ашы тараттылар. Ҡайһыһы салбар кеҫәһенән, ҡайһыһы итек ҡуңысынан ҡалаҡтарын сығарып шыйыҡ ашты кем уҙарҙан һемерергә тотондо. Зәһретдиндың ашҡа тығылмай тик үҙенә тейгән икмәк киҫәген генә көйшәүен күҙәтеп ултырған берәү:

— Земляк! Һин нишләп ашамайһың? Әллә быңдай аш тамағыңа бармаймы? Әйҙә аша, аша, — тине. Уның башҡорт кешеһе икәнен белептер инде: — Бында һиңә бишбармаҡ килтермәҫтәр, онот! — тип өҫтәп ҡуйҙы.

— Минең ҡалаҡ юҡ бит әле, — тип мығырланы Зәһретдин. Теге телдәр кеше тағы эләктереп алды.

— Армияла, земляк, ҡалаҡ менән ҡорал икеһе бәрәбәр йөрөй. Ҡоралһыҙ һуғышып булмай, ҡалаҡһыҙ йәшәп булмай. — Шунан, ниҙер иҫенә төшкәндәй, киндер ойоғо ҡуңысынан тағы бер ҡалаҡ сығарҙы. — Бына ҡалаҡ, тик алюмин. Уның менән эҫе ашты эсеп булмай, — тине.

Зәһретдин ҡапыл аңғармайыраҡ ҡулын һонғайны, теге ҡалағын йышылмаған өҫтәл аҫтына йәшерә һалды:

— Ҡара, һин кеше малына бик сос икәнһең! Быңдай ҡалаҡты һуғыштан алда ярты бот бойҙайға алмаштыралар ине, ә хәҙер баҙары бик юғары.

Ҡалаҡһыҙ эш харап икәнен аңлап алған Зәһретдин был кешегә һағыҙаҡ һымаҡ йәбеште. Сауҙалаша торғас, теге кешенең ҡалағын сынйыры менән йөҙ илле һумға һатып алды ла галифе салбарына тыҡты.

Иртәнге аштан һуң уларҙы ҡала буйлатып мунсаға алып киттеләр. Сисенеп ҡәҙерле кейемдәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырап йөрөгән Зәһретдиндың төргәген тартып алып, яланғас кешеләрҙең тауышынан шаулап яңғырап торған мунса эсенә индереп ебәрҙеләр. Был бер ҡулы менән оят ерен баҫып, икенсе ҡулы менән старшина бир-

гән шырпы ҡабындай кер һабыны тотоп, бөршәйеп торҙо ла тасҡа сират алған кешеләр артына барып баҫты. Улары ла әллә кемдәр — бөтәһе лә яланғас, танырлыҡ түгел — алдан инеп сиратты боҙҙолар, тастарҙы таратып алып та бөттөләр. Арҡаһын Маһитабынан ғына еҫле һабын менән ышҡытып өйрәнгән Заһретдин һыу мискәһе ҡырына килеп башы аша ике сүмес һыу ҡойҙо ла сығып китте. Һалдат кейемдәре таратып ултырған старшина менән әлеге писарь янына барырҙан алда иҙән уртаһында өйөлөп ятҡан кейем-һалым араһынан затлылығы менән айырылып торған үҙ гимнастеркаһын, галифеһын, хром итектәрен ҡултығы аҫтына ҡыҫтырып, старшина алдына барып баҫты. Ә теге төпкә батҡан көҙән күҙҙәре менән Заһретдинға яндырып ҡараны ла:

— А ну марш! Кейемдәреңде кире урынына һал! — тип бойорҙо. Шунан һаман шаңғып торған Заһретдиндың кейемдәрен һыпыра тартып алды ла өйөм өҫтөнә атты: — Все ваши вещи пойдут в фонд обороны!

Аптыранған Заһретдин:

— Мин ни өйгә кире ҡайтарырға уйлағайным да, юғиһә... — тип мығырлап үҙенең тире һеңешеп бөткән гимнастерка, галифеһына ҡарап ҡуйҙы. Әҙерәк күңеле йомшара төшкән старшина:

— Иптәш ҡыҙылармеец, һин дөрөҫ аңларға тейешһең: һәр кешенең кейемен ауылына илтеп тапшырып йөрөргә хөкүмәттең артыҡ транспорты юҡ. Кейемдәрегеҙ оборона фондына тапшырыласаҡ. Көнбайыштан немец фашистары оккупациялаған яҡтарҙан ҡасҡан кешеләрҙең күбеһе кейемһеҙ ҡалған, шуларға таратып бирәбеҙ. Конечно, һинең был кейемдәреңде бер яуаплы поста эшләгән кеше эләктереп ала инде. Уныһы факт, ну нишләмәк кәрәк? Дөйөм күрһәтмә шундай. — Старшина урынынан тороп өйөм өҫтөнән Заһретдиндың итеген ҡулына алып ялтыр ҡуңысына усы менән шапылдатып һуҡты: — Итек шәп шул. Мәңгелеккә эшләнгән, — ул Заһретдиндың итеген үҙенә үлсәп ҡараны. — Формаға тап килмәй. Ҡуңыстары оҙон... — Старшина Заһретдинды йәлләпме, уның йыуантыҡ, тоҡорой кәүҙәһенә ҡарай-ҡарай, гимнастерка, галифе һәм кирза итеген үҙе һайлап бирҙе.

Өҫтөнә хәрби кейем, башына йәшел пилотка кейгән Заһретдин мунса быуына һарғайып бөткән көҙгө алдына килеп баҫты. Көҙгөнән уға элекке Суртан приискыһының алтын ҡабул итеп ултырыусыһы Заһретдин түгел, ә үҙенә лә ят булған ҡыҙылармеец ҡарап тора ине. Башҡалар ҙа килде. Шау-шыу, көлкө башланды. Таныштары, ауылдаш, райондаштары, бер-береһен тәү тапҡыр күргән шикелле, ҡул биреп күрешә:

— Ну, малай, һине танырлыҡ та түгел!

— Ҡайһылай ҙа килешә икән! Өҫтөңә һылап ҡаплаған шикелле!

Кискә уларҙы взводтарға, отделениеларға бүлделәр. Заһретдин үҙен Ғилмишәриф менән бер отделениеға ҡуйыуҙарын һораны. Эстән генә: «Нисауа, ауылдаш ауылдаш булыр әле. Ни хәл итәһең, үҙ тиңеңде бынауындай мәхшәр араһында ҡайҙан тапмаҡ кәрәк?» — тип уйланы.

Һәр кемгә һалам тултырылған матрац, мендәр, икешәр простыня, одеял бирҙеләр. Старшина үҙенең каптенармусы, отделение командирҙары, помкомвзводтар менән бергә килеп һәндерәнең береһенә матрац түшәп, өҫтөнә простыня йәйҙе, икенсе простыняны түшәккә ҡыялап тартты. Баш осона, текә кәбән шикелле, аҡ мендәрҙе ослайтып ултыртып ҡуйҙы ла янында торған кесе командирҙарға:

— Йә, нисек? — тип өндәште.

— Отлично!

— Бына ошолайтып дауам итегеҙ. Түшәгегеҙҙе мин эшләгән кеүек йәйегеҙ! — тип команда бирҙе.

Күп тә үтмәне, орсоҡ һымаҡ әйләнеп йөрөгән старшинаның икенсе фарманы ишетелде.

— Бөтәгеҙгә лә үҙ әйберҙәрегеҙҙе алып ике шеренгаға теҙелергә!

Һәр кем, ауылдан алып килгән ҡәҙерле муҡсай — «мишауай мешоктарын», сумаҙандарын алдарына ҡуйып, сафҡа теҙелде. Старшина сафты алдан да, арттан да урап сыҡты ла, ҡап уртаға баҫып, бармағы менән таш иҙәнгә төрттө:

— Үҙегеҙ менән алып килгән шмоткаларығыҙҙы бына ошонда өйә башлағыҙ!

Шулай ҙа бит, тик уның әмерен үтәргә ашҡынып торған кеше табылманы. Улар өсөн алдарында ятҡан ошо фанер сумаҙан, мөйөштәренә еп бәйләнгән төрлө төҫтәге киндер тоҡсайҙар, аяҡтары араһына ҡуйылған төрлө төргәктәр, үҙ ауылдары, үҙ яҡындары менән бәйләп торған иң һуңғы еп һымаҡ ине.

Старшина:

— Уң флангынан башлайбыҙ! А ну! — тип екергәс, саф башында торған сабаталы ҡыҙылармеец ҡайын туҙынан эшләнгән моҙғаһын аяғы менән алға шылдырҙы ла тотҡаһынан тотоп илтеп һалды.

— А ну, следующий!

Кешеләр, күргәҙмәгә ҡуйған шикелле, әйберҙәрен берберeһенә йәнәш теҙә башланы.

— Баҙарға килтерҙегеҙме ни? Өйөп һалығыҙ! — тип ҡысҡырҙы теге. Заһретдин ауыр сумаҙанын старшина алдына ҡуйҙы.

— Все, все, товарищ красноармеец! Марш на место! — тип команда бирҙе.

Заһретдин Ғилмишәриф эргәһенә килеп баҫты. «Эх! Кәбәк мейе! Нимәгә кәрәк булғандыр инде килен һандығындай сумаҙанға ярты йыл ашарлыҡ аҙыҡ-әүҡәт тултырып алып килеү. Бигерәк тә анауы спирты менән боҙолмай торған ҡаҡлаған колбаса йәл!..» Заһретдин кешенекенән айырылып ултырған сумаҙанына ҡарап тағы көрһөнөп ҡуйҙы. Ғилмишәриф үҙенең буш тоғон ауылдашының сумаҙаны өҫтөнә ырғытты. Бөтә йыйылған ошо әйберҙәрҙе старшина менән писарь-каптенармус бер урынға ташып өйҙөләр ҙә кеше күҙен ҡыҙҙырып ятмаһын өсөн өҫтөн брезент менән ҡапланылар. Кискә өйөм эргәһенә мылтыҡлы бер часовой ҙа ҡуйҙылар.

## IV

Иртәнге тамаҡтан һуң практик занятиелар башланды. Уларҙы, иген ырҙыны һымаҡ ялтырап ятҡан манежға алып килделәр, һалдаттарҙы отделениеларына бүлеп, шундағы тып-тын торған сәйер аттарға ҡаратып ҡуйҙылар. Бер хәрби ҡулындағы сыбығын һауала болғай-болғай мәсьәләнең асылын аңлатты:

— Хәҙер вольтижировка башлана, һәр берегеҙ, мин күрһәткәнсә, һыбай килеш кавалерия алымдарын башҡарырға тейешһегеҙ. Бына ошолай, — тип йүгереп барып ат ялына ике ҡулы менән йәбеште лә төп-төҙ аяҡтарын ситкә ырғытып арғымаҡ өҫтөнә менеп тә ултырҙы. Шунан сос ҡына һикереп төштө. Артҡараҡ сыҡты, йүгереп килеп ҡойроҡ яғынан һикереп менеп ултырҙы. Эйәр ҡашағаһына ике ҡулы менән таянып, аяҡтарын һауала ҡайсыланы ла йөҙө менән арт яҡҡа ҡарап ултырҙы. Был күнекмәне арттан алға эшләп тә күрһәтте. Шунан йүгереп килеп аттың ялына тотондо ла кәүҙәһен турайтып теге яғына ташланы. Бәй, үҙе күҙ асып йомғансы аттың был яғына булды.

Вольтижер тигәндәре, күнекмәләрҙе күрһәтеп бөткәс, хайран ҡалып ҡарап торған егеттәргә:

— Ә хәҙер инде үҙегеҙгә тәғәйен аттар янына барығыҙ, яҡындан танышығыҙ, — тине.

Бөтәһенән элек атҡа барып йәбешкән Ғилмишәриф, ҡулын тейгеҙеү менән артҡа сигеп ҡысҡырып ебәрҙе:

— Бәй!.. Был ни ағас ат бит!

Бөтәһе лә яҡын килеп ағастан эшләп ҡуйылған аттарҙы үҙ ҡулдары менән һәрмәп ҡарай башланы.

— Ысынлап та, ағас икән был нәмә!

— Ҡайһылай килештереп тороп эшләгәндәр. Хәс ат!

— Һуң һин уларҙың төҫтәрен ҡара: берәүһен тура, ә икенсеһен ҡара йылтыр итеп эшләгәндәр, — тиеште ҡыҙылармеецтар.

Шулай ҙа бит, әммә инструктор өйрәткән күнекмәләрҙе эшләй алырҙай дүрт-биш кенә кеше табылды. Шулар араһында Ғилмишәриф тә бар ине. Ғилмишәриф һуғыштан алда ойошторолған «Ворошиловсы һыбайлылар» түңәрәгендә әлеге күнекмәләрҙе ағас атта түгел, колхоздың менгегә өйрәтелгән «Әүхәҙи» тигән өйөр айғыры өҫтөндә башҡарғайны.

Өйрәтеү бөткәс, взвод командиры лейтенант Руссов Яуымбаев Ғилмишәрифте саф алдына саҡырҙы.

— Бөгөнгө занятиела күнекмәләрҙе оҫта, аныҡ итеп башҡарғаны өсөн ҡыҙылармеец Яуымбаев Ғилмишәрифкә командование исеменән рәхмәт белдерәм, — тине. Ни тип яуап бирергә белмәй аптырап ҡалған Ғилмишәриф:

— Товарищ лейтенант! Живой лошадь надо, — тигән булды. Лейтенант уның арҡаһынан һөйҙө лә:

— Иптәш Яуымбаев, сабыр ит, аттың тереһен дә бирербеҙ! Әйткәндәй, һин гражданкала кем булып эшләнең? — тип һорап ҡуйҙы.

— Колхоз йылҡыһын көттөм. Мин гүләүәй йылҡының табунщигы.

Лейтенант теҙелеп торған взводҡа ҡарап алды ла:

— Бына барығыҙға ла иптәш Яуымбаевтан өйрәнергә кәңәш итәм! — тине.

Киске политинформация ваҡытында ла Яуымбаевтың фамилияһын маҡтап телгә алдылар. Ә иртәгәһенә эскадронда сыға торған «Атлы молния» тигән стена гәзитендә уны маҡтап яҙған бер нисә юл хәбәр ҙә күренеп ҡалды.

Был күнекмәләр артабан да ҡабатланды. Вольтижер Ғилмишәрифкә күнекмәләрҙе башҡарырға команда бирҙе. Шуны ғына көтөп торған егет арыҫлан етеҙлеге менән кисә күрһәткән алымдарҙы ҡабатлап ергә төшкәс:

— Молодец! Ат өҫтөндә тыуған кеүек эшләйһең! Хәҙер ҡарап ҡына тор! — тине.

Күнекмәләрҙе үтәй алыусылар яйлап арта барҙы. Барыһы ла Ғилмишәриф һымаҡ матур башҡара алмаһалар ҙа, ат өҫтөнә тырмашып булһа ла атлана башланылар.

Бер аҙнанан күнекмәләрҙе эшләй алмаусылар һаны өстән бергә генә ҡалды. Башта Зәһретдиндың булдыҡһыҙлығы күҙгә артыҡ салынмаһа ла, артабан ундайҙарҙың һәр береһен таный, көлә башланылар. Тегеләрҙе занятиелар тамамланғас та манежда алып ҡалып арманһыҙ булып аяҡтан йығылғансы өйрәтә бирҙеләр. Тора-бара ремонт эскадронында булдыҡһыҙҙарҙан биш кеше генә тороп ҡалды. Билдәле, бишәүҙең береһе Зәһретдин ине.

Лейтенант Руссов, Ғилмишәрифтең Заһретдин менән бер ауылдан икәнен белеп, яҡташына ярҙам итеүҙе йөкмәтте. Ләкин Заһретдин үҙенең алға китеше менән бер кемде лә ҡыуандыра алманы.

— Тик торған ағас атҡа ла менә алмағас, тиҙҙән ысын аттар менән күнекмәләр башлаһаҡ, һин нишләрһең? Һин Яуымбаев менән бер ауылдан түгелме һуң? — тип Руссов Заһретдин ағас атҡа менә алмай шыуып төшкән һайын әрләне. Ахырҙа аптырағас: — Һин, иптәш Итәлмасов, милләтең буйынса ғүмерен ат өҫтөндә үткәргән башҡорт тоҡомонан түгелме һуң? — тип уның сәменә тейергә уйланы. — Ауылдашың Яуымбаевты ғына түгел, ат өҫтөндә оҫта йөрөгән бөтә башҡорт халҡын мәсхәрәләйһең дә баһа? — тип уның теңкәһенә тейҙе.

Булдыҡһыҙлығына ҡарамаҫтан, Заһретдин бирешеп барманы, бик үҙәгенә үтә башлағас, бер көн лейтенант Руссовҡа:

— Һеҙ мине бөтә башҡорт менән мыҫҡыл итмәгеҙ. Минең бөтә башҡортта ҡыҫылышым юҡ. Фамилиям да Башкиров түгел, ә Итәлмасов! — тип ебәрҙе.

Үҙенә күрә түгел шыртын өрпәйткән Заһретдинға взвод командиры оҙаҡ ҡына текләп торҙо ла:

— Ахыры, һин, иптәш Итәлмасов, минең әйткәндәрҙән бер ни ҙә аңламаның. Конечно, бөтә башҡорттоң һиндә эше юҡ, ул халыҡ һинең кеүек тиреҫ тултырылған тоҡто күптән үҙ исемлегенән һыҙып ташлар ине, — тине.

Үҙ намыҫына тел тейҙертеп өйрәнмәгән Заһретдин өндәшмәй генә ҡалыу түгел, лейтенантҡа ҡаршы һөжүмгә күсте:

— Беләһеңме, иптәш лейтенант, мин быңдай мыҫҡыл итеүҙе күтәрә алмайым! Мин гражданкала бына быңдағы шикелле, — ул ялтырап ятҡан ҡаҡ ергә үксәләре менән тапанып алды, — ағас атҡа менеп бушҡа ваҡыт үткәрмәнем, хөкүмәткә алтын ҡабул иттем, — тип һалдырҙы... Ошо һимеҙ, тоҡрой кәүҙәле кешене былай ҙа күрә алмай йөрөгән лейтенантҡа етә ҡалды:

— Бына нимә, иптәш Итәлмасов! Гражданкала һин алтын ҡабул иткәнһеңме, яҡут ҡабул иткәнһеңме, унда минең эшем юҡ. Ә бына бында беҙ ҡушҡан эште урынеренә еткереп башҡарырға тейешһең! Ҡыҙыл Армия командирының теләһә ниндәй приказы һәр бер боец өсөн закон! Төшөндөңмө?

— Был күнекмәләреңдең дә, ағас аттарыңдың да фронт өсөн һуҡыр тингә лә кәрәге юҡ. Минең ҡулыма мылтыҡ, ҡылыс тотторoғоҙ ҙа фронтҡа оҙатығыҙ! Бына унда мин үҙемдең кемлегемде күрһәтермен! — тип ебәрмәһенме Заһретдин.

Сығырынан сыҡҡан лейтенант уның эргәһенә килеп баҫты ла ҡорһағынан түбән һалпайған ҡайышынан матҡып тотоп алды:

— Иң башта мин, иптәш Итәлмасов, бына ошо һалпайып төшкән ҡорһағыңды шиңдерәм! Унан һуң, әгәр кәрәк тапһаҡ, мылтыҡ, ҡылыс ышанып тапшырырбыҙ! Ә хәҙергә занятие мәлендә ләпелдәп торғаның өсөн сираттан тыш өс наряд! Все! Понятно?

— Так точно!

— Бына шулай!

Кис бөтә ҡыҙылармеецтар йоҡларға ятыр алдынан арманһыҙ булып арыған Зәһретдинды сираттан тыш нарядҡа алып киттеләр. Ул төн буйы ҡыҙылармеецтар ашханаһында күҙен аса-йома картуф таҙартты. Мендәр аҫтындағы һөйәк һаплы бысағымды алып киләһе булған да бит тип, бысраҡ таш иҙәндә фарман биреп йөрөгән өлкән сержантты һүкте. Ә теге бының уйын белгәндәй:

— Бына ошо бер мискә картуфты әрсеп бөтөрәһең. Боецтарға иртәнге аш бешереүгә әҙер булырға тейеш! — тине лә таҙартылған картуфты һалыу өсөн буш мискә килтереп ултыртты. Ҡара тупраҡ йәбешеп ҡатҡан картуфты Зәһретдин кухня бысағы менән әрсей генә башлағайны, помкомвзвода тағы эргәһенә килеп баҫты:

— Һин нимә, иптәш боец, картуфтың ҡабығын шул тиклем ҡалын итеп әрсейһең? Беренсенән, гимнастеркаңдың еңдәрен һыҙған, ә бынынды!.. — ул Зәһретдиндың аҫҡа шылып төшкән пилоткаһын һауыт-һаба кәштәһенә ҡағылған сөйгә элде. — Картуфты ошолай итеп әрсеһәң, иртәгә бөтә эскадронды ас ҡалдыраһың! — Өлкән сержант күҙ асып йомғансы ике картуф әрсеп буш мискәгә ырғытты.

Зәһретдин нисек кенә тырышмаһын, картуф тултырылған мискә кәмемәне, маңлайынан аҡҡан ҡара тир күҙҙәрен томаланы, киң яңаҡтары буйлап иҙәнгә аҡты. Уның өсөн был донъяла яртыһы серек картуфты әрсеүҙән дә ҡыйын эш юҡтыр төҫлө тойолдо. Аптырағас, бысағын ситкә атып бәрҙе лә аяғына баҫып, бер-ике тапҡыр кирелде. Нишләһен, ҡәһәрле мискә тирәләй бер-ике ураны ла яңынан урынына ултырҙы.

Нисек етте шулай төн уткәргән Зәһретдинды таң менән занятиеға алып сыҡтылар. Уның менән кухняла бергә эшләгән иптәштәре сисенделәр ҙә йоҡларға яттылар. Етмәһә, кеҫәләренә тултырып ҡайһыһы борсаҡ, ҡайһыһы яртышар буханка икмәк, ә сосораҡтары үҙ иптәштәрен ашатырға колбаса киҫәге лә алып ҡайтҡан. Зәһретдинда ул ҡайғы булманы, аяғөҫтө йоҡлай-йоҡлай саҡ казармаға килеп йығылды. Башҡалар кеүек, һәндерә мөйөшөнә улты-

рып итеген һала ғына башлағайны, взвод командиры Заһретдин алдына килеп баҫты ла:

— Итегеңде кей ҙә занятиеға шагом марш! Живо! — тип екерҙе. Заһретдин барған ыңғайға ҡайышын быуа-быуа: «Сираттан тыш наряд тигәне ошолайтып йоҡлатмай әҙәм ыҙалатыу була икән», — тип уйланы.

Бөгөн эскадрондың взвод командирҙары, ярҙамсылары ла йылтыратып таҙартылған итектәренә шпорҙарын, билдәренә шашкаларын тағып, яурындарына карабиндарын аҫып сыҡҡан. Эскадрон старшинаһы Заровняев теҙелеп торған саф алдына килеп баҫты. Башта ул зәңгәр фуражкаһының эйәге аҫтына төшөрөлгән ҡайышын, планшетын төҙәтте, ҡамыт аяҡтарын бер-береһенә шаҡылдатып алды ла ҡашын төйнәп, күҙен йүгертеп сафҡа ҡарап алды. Эргәһендә торған взвод командирҙары менән бер нисә һүҙ алмашты ла, әсе тауыш менән:

— Равня-йсь! — тип команда бирҙе. Шунан сафтың бер осонаса йөрөп тигеҙлекте тикшереп ҡараны ла: — Һулдан бишенсе! Ҡорһағың үҙеңдеке булһа, эскә тарт! Алтынсы! Күкрәгеңде алғараҡ! — тип екерҙе. «Смирно!» командаһын бирҙе. Ҡап уртаға баҫып баяғы планшетынан бәләкәй генә күк тышлы китап сығарҙы. Уны башы осонда бер нисә ҡат әйләндерҙе:

— Был китап эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһы кавалерияһының боевой уставы! Тәүге битенән аҙаҡҡыһына тиклем бөтә параграфын белеү — һәр бер ҡыҙыл атлының мөҡәддәс бурысы! Үҙ фамилияңды онотҡанда ла, уставтың төп пункттарын шартлатып әйтеп бирергә кәрәк. Төшөндөгөҙмө?

Яуап урынына эскадрон сафында ниндәйҙер шау-шыу ишетелеп ҡалды. Старшина ризаһыҙлығын белдереп, башын күтәреп, яңынан сафҡа текәлде:

— Бер ни ҙә ишетмәйем, төшөнөшләмө?

— Төшөндөк, аңлашыла! — тигән һирәк-мирәк тауыштар ишетелде. Эскадрон, манеж яңғыратып бер тауыштан: «Төшөндөк!» — тип ҡысҡырмайынса тороп старшина һорауын туҡтатманы. Шунан ғына бөгөнгө занятиеның йөкмәткеһен аңлатырға кереште. Әммә әйтәһе төп һүҙгә еткәнсе, кавалерия тарихына төшөп китте.

— Кавалерияла борон-борондан ир-егеттәрҙең аҫылы, урта бармаҡ шикелделәре генә хеҙмәт иткән. Ә батша заманында кавалерия дворян, кенәз, граф балалары менән генә комплектовать ителгән. Тик Совет власы ғына беҙҙең кеүек ярлы эшсе-крәҫтиән балаһына иң почетлы ҡоралды ғәскәрҙәр төрө, кавалерияла, хеҙмәт итеү мөмкинлеген бирҙе, — тип ул башын өҫкәрәк күтәрҙе, былай ҙа ҡалҡып торған күкрәген тағы ла алғараҡ сығарып, уң ҡулы менән

шашкаһының эфесына[1] тотондо ла ҡынынан шаҡылдатып сығара биреп кире тыҡты.

— Ҡала урамында арғымаҡҡа атланып ҡыҙҙарҙың күҙен ҡыҙҙырып үтеп китеүе генә ҡыҙыҡ ул. Атҡа атлана башлауҙан алда һеҙ өйрәнәһе баҫҡыстары бар. Бөгөн беҙ шуларҙан башлайбыҙ. Денникта[2] торған атҡа яҡын килеп уның менән танышыу, уға йүгән кейҙереү, аттың торошон тикшереү һәм атланырҙан алда уны таҙартыу күнекмәләрен башларға тейешбеҙ. Бынан тыш, уны эйәрләү, теҙгененән тотоп һарайынан сығарыу, атҡа атланғас, теҙгендәрҙе нисек тотоу, аттан төшкәс, эйәрен алыу һәм ат ҡарау бурыстары тора. — Старшина ҙур ләззәт менән һөйләп алды. — Хәҙергә барыбыҙға ла ат етешмәй, барыһы һигеҙ генә ат ҡалды, ә ҡалғандарын училищеға һәм фронтҡа оҙаттыҡ. Бер нисә көндән Башҡортостандан килеп етергә тейеш, бына шунан инде һәр беребеҙ, үҙ атыбыҙ менән эшләй башлаясаҡбыҙ, — тине.

Яңы хәбәрҙе ишетеү менән Ғилмишәриф, күптән күрмәгән яҡын танышын ашҡынып көткән кеше кеүек, РККА фондынан армияға алынмай ауылда тороп ҡалған аттарҙы күҙ алдынан үткәрҙе. Киләһе арғымаҡтар араһында үҙе тәрбиәләп үҫтергән аттарҙың булыуында уның шиге юҡ ине. «Бөтә Башҡортостанда билдәле, үҙенең КТФ-һы менән Мәскәүҙә Бөтә Союз Ауыл хужалығы күргәҙмәһендә бер нисә тапҡыр ҡатнашҡан колхоздан бер-ике ат килеп эләкмәүе мөмкин түгел», — тип Ғилмишәриф эстән генә шатланды.

Бер аҙҙан взводтарҙы отделениеларға бүлеп һөнәргә өйрәтергә керештеләр. Старшина Ғилмишәрифтәрҙең отделениеһын ат һарайына алып китте. Денникта әкрен генә ат кешнәгән тауыш ишетелеп ҡалды. Старшина шунда уҡ:

— Быстрый, спокойно, стоять! — тип ҡысҡырҙы. Таныш тауышты ишетеп аттар тынып ҡалды. Бысҡы вағы түшәлгән асфальт иҙәндә аяҡтарын тыҡылдатып торған Быстрый старшинаны ҙур күҙҙәрен тултырып, муйынын һуҙып ҡаршы алды.

Старшина ҡапҡаға күрһәтеп:

— Бына ошо таҡтаға аттың исеме, башҡа мәғлүмәттәре яҙыла, — тип уҡып күрһәтте. «Айғыр Быстрый, 1935 йыл тыуған, атаһы — Белан, әсәһе — Строгая[3], ахалтекин тоҡомонан». Бына бында эйәр, йүгән, нуҡта эленә, ә был йәшниктә ат таҙарта торған кәрәкле нәмәләр, ә быныһы

---

[1]Шашканың һабы.

[2]Ат тора торған өҫтө рәшәткәле махсус бүлмә.

[3]Тоҡомло аттарҙың исеме атаһы һәм инәһенең исемендә булған хәрефтәрҙән төҙөлә.

инде ат һуғара торған биҙрә. — Ул кеҫәһенән сығарып бер шаҡмаҡ шәкәрҙе Быстрыйҙың ауыҙына ҡаптырҙы ла яртыһы коридорға сығып торған һоло утлыҡсаһын ҡарап алды. Шунан: — Красноармеец Итәлмасов, йә әйт әле: ат алдындағы кормушканың тап-таҙа булыуы ни нәмәне аңлата? — тине.

Бындай һорауҙы көтмәгән Заһретдин аяҡтарын алмашлап баҫып алды ла:

— Был, иптәш старшина, ат алдына һалған корманы ашап бөткән, ә хәҙер ас тора, тигәнде аңлата, — тип яуап бирҙе.

— Ғөмүмән, яуап дөрөҫ, ләкин тулыһынса түгел. Ат алдындағы кормушкаларҙың таҙа булыуы, тимәк, ул ат таҙа, һау-сәләмәт, ундай атҡа хәҙер үк атланып фашист өҫтөнә ташланырға мөмкин тигәнде аңлата. Төшөндөңмө?

— Төшөндөм.

— Ә бына күрше денникта торған Гунгуттың кормушкаһын ҡарағыҙ, уның курмыһы тик яртылаш ҡына ашалған, тимәк, ул ат сырхаулай, ысынында ла уның ашҡаҙанын гастрит яфалай, — тип старшина өйрәтәһе күнекмәләргә күсте. Стена ҡырында ултырған биҙрәне бер ҡыҙылармеецҡа тотторҙо ла: — Быстрыйҙы ваҡытында һуғармағандар. Уның тамағы кипкән, йәһәт кенә ҡоҙоҡтан бер биҙрә һыу алып кил! — тип бойорҙо. Аҙаҡ, ҡылысына тиклем һыу тулы биҙрәгә ҡулын тығып ҡарағас:

— Бик һыуыҡ, был көйөнсә эсерергә ярамай, атҡа һалҡын тейеүе бар, — тип биҙрә эсенә ике ус бесән ырғытты. — Биҙрәгә бесән ташлаһаң, ат һыуҙы һемереп түгел, ә теше араһынан һурып ҡына эсә, шуның менән ул үҙен һалҡын тейеүҙән һаҡлай. Төшөндөңмө?

— Так точно!

— Күрҙегеҙме, мин Быстрыйҙың арт яғынан индем. Сөнки ул мине belә, минән ҡурҡмай, ә устав буйынса денниктың ишеген асҡан һәр кавалерист аттың исемен атап, уның башы менән үҙенә боролғанын көтөргә тейеш, сөнки ат, аҡыллы хайуан, изге теләгеңде аңламай тороп бер ваҡытта ла һиңә башы менән боролмай. Бына ошолай, — тип ул Быстрыйҙы башы менән ҡапҡаға борҙо ла уның һул яғына сығып муйынынан һөйҙө. — Ат һиңә башын бороу менән тик һул яғынан килергә кәрәк. Уң яғына сығыу устав буйынса ҡәтғи тыйыла. Атығыҙға шәкәр йәки кишер һонғанда бармаҡ осоғоҙ менән тотмағыҙ, сөнки тегенең бармаҡтарығыҙҙы ла эләктереп алыуы мөмкин, бына ошолай итеп бирегеҙ, — тип ул үҙенең сираттағы күстәнәсен, икмәк киҫәген, усы эсенә һалып һондо. — Ә хәҙер инде Быстрыйҙы денниктан алып сығырға кәрәк. Бына ошолай итеп уң ҡулың менән томшоғонан тотаһың

да һул ҡулың менән нуҡтаны ат башына кейҙерәһең, шунан инде эйәк аҫтындағы ҡайышты eләһең. Тик ныҡ итеп тартмағыҙ, ат башы менән ҡайыш араһында өс бармаҡ һыйып торорға тейеш. Атты сығарғанда нуҡтаның чумбуры һәр ваҡыт уртаға бөкләнгән көйөнсә һинең һул ҡулыңда булырға тейеш.

— Иптәш старшина, ә нимә һуң ул чумбур?

— Чумбур — беҙ кейҙергән нуҡтаның ҡулға тота торған ебе була.

— Беҙ «теҙген» тип әйтә торғайныҡ.

— Теҙген атланған атты идара итеү өсөн ауыҙлыҡтың ике осона беркетелгән бәләкәй дилбегә ул. Ә был чумбур — башҡа исеме юҡ, устав буйынса ла чумбур. Нуҡтаны кейҙерҙек. Ә инде хәҙер Быстрыйҙы ат һарайынан тышҡа, манежға, сығарырға кәрәк. Уны ошолай итеп эшләйҙәр: уң ҡулың менән чумбур тоташтырылған дүңгәләк аҫтынан тотаһың да һул аяғыңды күтәргән саҡта чумбур тотҡан уң ҡулыңды алға һонаһың. Икеһе бер ваҡытта эшләнергә тейеш, — тип уның менән йәнәш атлаған Быстрыйҙы денниктан коридорға алып сығып та китте. — Мә, иптәш Итәлмасов, Быстрыйҙы яңынан коридорға сығар, — тип чумбурҙы уның ҡулына тотторҙо.

Зәһретдин атҡа әйләнде лә теҙгененән тартҡылай башланы, мәгәр ат аҙым да алға атламаны, киреһенсә, артҡа сигенде.

— Прекратить! — тип ҡысҡырҙы старшина. — Чумбурыңды алға һонмаһаң, кавалерияның бер аты ла алға ҡуҙғалмаясаҡ, сөнки ул һинең командаңды аңламаны. Үҙең бер урында тороп, уң ҡулыңдағы чумбурҙы алға һуҙһаң да тик торасаҡ, сөнки ат һинең устав буйынса эшләмәгәнеңде күреп тора, — тип өйрәтте старшина. Бынан һуң ул атты таҙартҡан саҡта чумбурҙы дүңгәләккә нисек бәйләү ысулын өйрәтте.

Төштән һуң старшина, үҙенең парад кейемен сисеп, өҫтөнә ҡара халат кейҙе лә Быстрыйҙы таҙартырға кереште. Үҙе таҙартты, үҙе өйрәтеп торҙо:

— Тәүҙә бер ус бесән йәки һалам йомарлап жгут эшләйбеҙ. Бына шул жгутты уң ҡулыңа алаһың да аттың һул яғына сығып ошо рәүешле баҫаһың. Шунан инде жгут менән аттың муйынынан башлап ышҡый башлайһың, ат тиреһен ҡатҡан бысраҡтарҙан, саңдан һәм төрлө ҡауаҡтарҙан таҙартаһың, бына ошолай итеп, — тине лә аттың муйынынан алып тояҡтарына төшкәнсә тиклем ышҡырға тотондо. — Аттың йөнө ыңғайына жгутҡа баҫымды нығыраҡ төшөрәһең, ә йөн оторонона еңелерәк, — тип өйрәтеүен дауам итте. — Ә хәҙер инде щетка менән эшләй башлайбыҙ. — Командир һаҡлыҡ менән аттың башын, морон,

күҙ тирәләрен щеткалап сыҡты, шунан аттың һул аяғын, унан уң яғын таҙартты. Быны тыңлап, ҡарап торған егеттәр һораша башланы.

— Иптәш старшина, атты нисә көнгә бер таҙарталар?

— Көн һайын! Устав буйынса иртә менән ат таҙартыу өсөн бер сәғәт ваҡыт бирелә, аңлашыламы?

— Аңлашылыуын аңлашыла ла ул, ә бер сәғәт ваҡытты ҡайҙан алабыҙ һуң? — тине кемдер.

— Уны ҡыҙыл кавалерияның бөтә төр ғәскәрҙәргә ҡарағанда устав буйынса бер сәғәт иртәрәк тороуы иҫәбенә алабыҙ. Бына барығыҙға ла ат беркетеп биргәс, беҙ «подъем»ды күрше пехота полкына ҡарағанда бер сәғәткә алдараҡ иғлан итербеҙ. Кавалерист бөтә кешенән әҙерәк йоҡларға, күберәк эшләргә тейеш. Төшөндөгөҙмө?

— Әгәр ат таҙартыу өсөн бер сәғәт ваҡыт етмәһә?

— Ул ваҡытта самоподготовкаға бирелгән ваҡыт, йәғни үҙеңдең шәхси ваҡытың хисабына эшләйһең инде.

Быстрыйҙы күмәкләп таҙартып бөткәс, старшина бармағы менән ат йөнөнән кирегә һыпырҙы. Тирелә юлаҡ-юлаҡ булып һоро туҙан әҙҙәре ҡалды.

— Юҡ, атты насар таҙарттыҡ, туҙаны бөтмәгән, — старшина йәшниктән ҡара буҫтау киҫәге сығарып еүешләп алды. Шунан йөнөнә ҡаршы шул еүеш буҫтау менән һөртөп сыҡты. Артабан галифе кеҫәһенән ҡар шикелле ап-аҡ ҡулъяулыҡ тартып сығарҙы. Уның менән аттың ҡабырғаһын һөртөп, ҡулъяулыҡты бөтә отделение алдында елберҙәтеп күрһәтте.

— Бына был ат таҙартыу алымына «яҡшы» һуғырға була, — тип йылмайҙы. — Ә хәҙер инде аттың маңлай сәсен, ялын һәм ҡойроғон таҙартыуға күсәбеҙ, — тип старшина яңынан ентекләп өйрәтергә тотондо. — Бөгөн беҙ расписание буйынса Быстрыйҙың тояҡтарын таҙартып өйрәнергә тейеш инек, күреп тораһығыҙ, ваҡыт етмәне. Тимәк, беҙ һеҙҙең менән бөгөн бик һүлпән эшләнек.

Старшина бөгөнгө занятиеһын шуның менән тамамланы. Киске аштан һуң төрлө кеше төрлө урында йыйылып бөгөнгө занятиеның һөҙөмтәһе менән уртаҡлашты.

Заһретдин киске ашҡа бара алманы. Уға тейеш өлөштө ауылдашы котелогына һалып алып ҡайтты. Килтерелгән киске тамаҡты Заһретдин һәндерә ситендә ултырып етеҙ генә ашап алды ла ирендәрен ялап, ян-яғына ҡаранды. «Етмәйерәк ҡалды быға», — тип уйланы Ғилмишәриф, матрац аҫтына ҡуйған тоҡсайын сығарып, алюмин көрөшкәһенә ике ҡалаҡ талҡан һалды ла дневальный эргәһендә торған титандан һыу алып болғарға кереште. Шулайтып, ул көн дә киске тамаҡтан ҡайта ла талҡан менән билғау аҫтын нығытып ала. Заһретдин ауылдашының ашағанын

күреп йөрөй, уға мөлдөрәп ҡарай, тик Ғилмишәриф быны әллә күрмәй, әллә күрмәмешкә һалыша — талҡанын ашап бөтә лә, үс иткән шикелле, усы менән эсенә һуғып:

— Беҙгә талҡан булһа ла ярап ҡала ул. Сталауайҙа эсеп ҡайтҡан шыйыҡ өйрәнең өҫтөн бикләп тора, — тип йылмая.

Бер нисә көн шулай тилмереп ҡарап ултырғас, Заһретдиндың камил түҙемлеге шартланы. Вагондағы хәлде онотоп:

— Земляк, анау нәмәңде миңә лә әҙерәк һалып бирһәңсе, — тип бышылданы.

Ғилмишәриф уңайһыҙланыуынан нишләргә лә белмәне.

— Эй эттәгенәһе, мин ни яртаҡыл, һинең талҡан ашағаныңды белмәнем дә баһа. Әйҙә, әйҙә, ағай, рәхим ит, ашай ғына күр! Әле бында талҡан етерлек, — тип моҡсайын күрһәтте. Йылы һыуға болғап, тоҙ һалынған талҡанды ашап алғас Заһретдиндың спирт эскәндәй күңеле күтәрелеп, теле асылып китте:

— Иген ашы бит, шөйлә тамаҡҡа ял булып ҡалды, эскә төйөр төштө лә баһа! Әтеү анау балыҡ һурпаһы үтә төшә лә ҡуя, — тип һөйләнде.

* * *

Көн дә башҡара торған күнекмәләр ҡатмарлашҡандан-ҡатмарлаша барҙы. Башта аттың тояҡтарын таҙартырға өйрәттеләр, йүгән, нуҡта кейҙереү, ат эйәрләү, эйәр айылдарын нисек тартыу һөнәре лә ҡалманы. Казачий эйәрҙең[1] ҡапталынан, үндегенән алып ҡашағаһына тиклем, өҙәңге ҡайышын нисек ҡыҫҡартыу, оҙонайтыу ҡағиҙәләрен үттеләр.

— Ҡарасы, өҙәңгенең оҙонлоғо яурын башынан алып ҡул бармаҡтары осона тиклем тура килеп тороуын әйт, — тиеште ҡыҙылармеецтар.

— Был ат тигән нәмәнең ғәләмәте бигерәк күп икән дә! Ауылда ни тотоп йүгәнләйбеҙ ҙә сабабыҙ.

— Беҙ атты ауылда бигерәк әбижәйт иткәнбеҙ икән. Ҡайҙа уны былайтып көн дә буҫтау менән таҙартыу!

Һуңғараҡ ҡыҙылармеецтар казарма эргәһендәге аҡланда түңәрәкләп ултырып малда була торған сирҙәрҙе өйрәнделәр.

— Аттың да, әҙәм заты кеүек, һалҡын тейеп, грипп менән дә, дөрөҫ ашатмауҙан гастрит менән дә ауырыуы

---

[1]Бынан тыш спорт, строй өсөн махсус эйәрҙәр ҙә була.

мөмкин. Уның сирле икәнен белеүе бер ҙә ҡыйын эш түгел, — старшина эргәһендә торған отделение командирына өндәште. — Теге Мирныйҙы сығар әле! — Бер нисә минут үтеүгә арт аяғын быуынынан бөккән, муйынын һуҙып башын түбән эйгән бер аҡһаҡ турыны килтереп баҫтырҙылар.

— Ауырымаған, таҙа аттың күңеле күтәренке була, ул бер ҡасан да башын аҫҡа эймәй. Ә быны ҡарағыҙ! Ул хатта исемен әйткәнгә лә әйләнеп ҡарамай.

— Иптәш старшина, ни булған һуң был атҡа? Нимә менән ауырый?

— Ниндәйҙер разгильдяй был хайуанҡайҙы эҫеләй эсергән, йәғни тирләгән көйөнсә һалҡын һыу биргән. Шуға һалҡын тейгән. Күрәһегеҙме, ат йүткерә, икенсенән, тояҡтарына ревматизм тейгән.

— Һуң хәҙер ул атты нишләтәләр инде?

— Хәҙер уны лазаретҡа ебәреп дауалап ҡарайбыҙ, һауыҡмаһа инде, списать итергә тура киләсәк, — тип старшина аттың муйынынан һыйпаны. Ҡарамаҡҡа ҡаты күңелле старшина бына-быуна илап ебәрер төҫлө ине. Ул үҙ һүҙен дауам итте: — Ат һарайында үҙ кормушкаһын кимереп торған атты күргәнегеҙ бармы?

— Эйе, эйе, күргәнебеҙ бар.

— Бындай саҡта сирләгән ат һыҙланыуға түҙә алмай кормушка йәки берәй ағас кимерергә тотона, йәғни ошо мәлдә уға ауырыуынан айныған, һыҙлауы баҫылған төҫлө була. Бына шулай ул хайуан, әгәр телен белһәң!

Ат эйәрләү күнекмәләрен өйрәнеү ҙә башланды.

— Эйәрләй башлауҙан алда аттың ҡабырғаларын, һыртын ҡарап ал — һуғылған, эйәр өйкәгән урыны юҡмы? Башта һул яғына, ә унан уң яғына сығып, бына ошолай итеп, — тине лә старшина усы менән Быстрыйҙың ике ҡабырғаһын, һыртының эйәр ята торған урындарын һыпырҙы. — Күрҙегеҙме? Ат төндә аунаған, арҡаһына бысҡы табы, бысраҡ йәбешкән, ә улар, эйәр үндеге аҫтында ҡалып, Быстрыйҙың һыртын өйкәүе бар, — тип ул башта щетка алып ат арҡаһын таҙартты. Шулай һөйләнә, өйрәтә-өйрәтә, ат эйәрләргә тотондо. — Денникта саҡта эйәрҙең ҡайыштарын ныҡ тартырға ярамай. Ат бушаҡ ҡына һалынған эйәргә өйрәнеп алырға тейеш. Уны аҙаҡтан манежға сыҡҡас, атҡа атланыр алдынан ғына нығытып тарталар.

— Ә һуң нишләп бер ыңғай ныҡлап тартмайҙар? — тип һорай кемдер.

— Был атты насар ғәҙәткә өйрәтә: баштан уҡ тартмаһы нык тартылған ат денниктан сығырға теләмәй, ә ҡайһы береһенең һарайҙа торған урынында йығылыуы ла мөм-

кин. Шуға күрә лә ат үҙен эйәрләгәндә тынын эскә алып тартмаңды үтәрәк тартмаһын өсөн эсен юрый ҡабартып тора. Атты алдап булмай — аҡыллы хайуан.

— Әллә беҙ колхозда... — тип башланы берәү.

— Колхоздағы гәҙәттәреңде онот! — Старшина уға әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәне. — Хәҙер эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының атлы гәскәр уставына мөрәжәғәт итәйек. Унда бына нәмәләр яҙылған: «Атҡа атланыу өсөн «атлан!», ә төшөү өсөн «аттан төш» тигән команда бирелә. Атҡа атланыр алдынан уны үҙең менән йәнәш баҫтыралар. Атҡа атланыу өс алымда башҡарыла. Һул аяғыңды өҙәңгегә баҫып бөтә кәүҙәңде күтәргәс, башыңды түбән эймәйенсә, уң аяғыңды өҙәңгегә эләктерәһең. Өҙәңгене ҡулың түгел, аяғың эҙләһен. Эйәр өҫтөндә тура, тубыҡтарың менән ат ҡабырғаһын ҡыҫып ултыр, — тип өйрәтте старшина.

Был юлы ла эште Ғилмишәрифтән башланы. Башҡорт егете күҙ асып йомғансы эйәр өҫтөндә майшәм шикелле ултыра ине. Старшина шатланыуын йәшерә алмай ҡыҫыҡ күҙҙәрен йомғансы йылмайҙы ла:

— Бына һин, Яуымбаев, ауыҙҙан сыҡҡан һәр бер һүҙҙе отоп алаһың да ҡуяһың. Молодец! Һинән отличный кавалерист сығасаҡ. Күрҙегеҙме? Ошо егеттән өйрәнегеҙ! — тине.

Сират Зәһретдинға етте.

— Ну, иптәш Итәлмасов, хәҙер беҙ эшләп ҡарайыҡ инде, — тип уға, нисектер ышанмайыраҡ, команда биргән ише түгел, иғтибарлы ғына өндәште.

Зәһретдин, старшина өйрәткәнсә, теҙгенде ат муйынына һалып, һул ҡулының дүрт бармағы менән Быстрыйҙың ялына йәбеште. Баш бармағына, ат ялын ураны ла, әҙерәк уңға боролоп,. һул аяғын өҙәңгегә тыҡты. Ауыр кәүҙәһен өҫкә күтәрергә хәле етмәне. Өҙәңгегә эләктергән һул аяғының башы ат ҡултығына төртөлә башлағайны, Быстрый ҡапыл муйынын бороп, Зәһретдиндың арт һанын умырып тешләп алды. Теге ҡысҡырып ебәрҙе лә аяғын өҙәңгенән ысҡындырмайынса, һул ҡулы менән артын ҡапланы. Ошо мәлдә Быстрый урынынан ҡуҙғалды ла ергә йығылған Зәһретдинды һөйрәп алып китте. Старшина, уҡ һымаҡ атылып, аттың теҙгененә килеп йәбеште.

Ҡурҡыуынан ҡото осҡан Зәһретдинды, өҙәңгегә эләккән аяғын ысҡындырып, ергә баҫтырҙылар. Уның ҡағыҙ һымаҡ ағарған йөҙөнән башлап теҙ быуындарына тиклем бөтә кәүҙәһе ҡалтырай ине. Ни тиклем асыуы ҡайнаһа ла, старшина бер һүҙ ҙә әйтмәне. Зәһретдиндың тапалмай имен ҡалыуынан былай ҙа риза ине. Занятие бөткәнсе, старшина уға бер ни ҡушманы, тегенең кавалерия кешеһе булмауына тамам ышанғайны.

Кис, ятыу алдынан, Заһретдин ауылдашы эргәһенә килде. Өндәшмәй генә талҡан ашанып алды ла:

— Земляк, миңә был кавалерияһы бер ҙә оҡшап етмәй әле. Военкоматҡа саҡырыу ҡағыҙы килеп төшкәс, бер йүнле часҡа эләгермен тип тә уйланылғайны. Әллә анауы Белоногов булған нәмә минең кем икәнде аңғармайыраҡ ҡалды инде, тотто ла ебәрҙе бит ошонда. Етәксе эштә эшләгән кешеләрҙе әҙерәк ҡарабыраҡ ебәрергә тейештәр ҙә һуң. Яҙмышым шунандыр инде, — тип уфтанды. — Бына һиңә ифрат та уңай тура килде, бәхетең бар икән, малай, — тип өҫтәп ҡуйҙы. — Әллә, земляк, берәр икенсе часҡа күсереүҙәрен һорап ҙурыраҡ командирҙарына мөрәжәғәт итеп ҡарайһымы икән?

Ғилмишәриф моҡсайын матрац аҫтына тығып, кәүҙәһен турайтты ла:

— Ай-һай, ағай, кабы яңылыш булмағайы. Ошо урынында ғына тырышып ҡараһаң, нисек булыр һуң? — тип тура яуап бирергә ашыҡманы.

— Да, да... — тип һуҙып алды ла Заһретдин кире китте. Тумбочкаһына таянып бик оҙаҡ уйланғандан һуң ул казарма мөйөшөндәге каптеркала ултырған старшинаның ишеген шаҡыны.

— Да, да! Мөмкин! — тигән тауышты ишеткәс, ул баҙнатһыҙ ғына ишек аша атланы. Нишләптер уға ҡарата миһырбанлана төшкән старшина һалдатты үҙ эргәһенә саҡырҙы. Башлап үҙе өндәште.

— Тыңлайым, иптәш Итәлмасов, берәй йомошоң бармы? Әйҙә, һөйләп ебәр.

— Һөйләйһе юҡ, иптәш старшина, миңә икенсе эш бирегеҙ, — тине Заһретдин. Ошо һүҙен әйткәс, ҡапыл эсе бүҫкәреп ҡалған шикелле булды. Уның ҡарауы старшина, сөм-ҡара күҙҙәрен уйнатып, аптыраулы ҡараш ташланы.

— Нисек инде ул икенсе эш? Бында гражданкалағы кадрҙар бүлеге юҡ, беҙ эш тәҡдим итмәйбеҙ. Һине Ҡыҙыл Армияға хеҙмәт итеү өсөн ебәргәндәр. Ватанды һаҡларға, аңлашыламы?

— Аңлашыла, ләкин мин кавалерияла хеҙмәт итә алмайым.

— Беҙҙә башҡа часть юҡ. Гражданкала ни менән шөғөлләндегеҙ?

— Мин старателдәрҙән алтын ҡабул иттем.

— Во, нисек икән! Ләкин бында ундай һөнәрҙең кәрәге юҡ. Беҙгә кавалеристар әҙерләргә ҡушылған. Шулай ҙа юғары начальство менән һөйләшеп ҡарармын.

Старшинаның һүҙен ишеткәс, Заһретдиндың эсенә йылы йүгерҙе. «Бирҙе хоҙай, ошондай ҙур часта берәй ҡулайлы эш табып бирерҙәр әле», — тип ҡыуанды.

## V

Рядовой Зәһретдин Итәлмасовты хужалыҡ взводына күсерҙеләр — йөк ташый торған ылаусы иттеләр. Ул тәүге көн ҡыҙылармеецтарҙың ашханаһына утын ташыны. Икенсе көн ҡала пекарняһынан икмәк килтерергә ҡуштылар. Быныһы бик фажиғәле көн булды.

Ул, ҡыҙылармеецтар һаҡлап торған пекарня ихатаһына инеп, атын икмәк ҡабул итә торған тәҙрә төбөнә туҡтатты. Бричкаһы өҫтөнә ҙур брезент йәйеп, өлгөһө алынған тәҙрә аша үҙ эскадроны өсөн ике йөҙ буханка арыш икмәге ҡабул итеп алды. Яңы ғына мейестән сыҡҡан, тәмле еҫ аңҡытҡан йылы буханкаларын брезент менән ҡапланы ла юлға сыҡты. Ҡала уртаһындағы баҙар майҙаны аша үткән саҡта ҡара бушлат кейгән ФЗО малайҙары көтмәгәндә Зәһретдиндың арбаһына ябырылды. Береһе бысаҡ менән брезентты ярып ебәрҙе, ә ҡалғандары йөгөнән байтаҡ икмәген талап алды. Зәһретдин айбарланып ҡулындағы сыбыртҡыһын болғауҙан башҡа артыҡ ырата алманы. Ашханаға килтереп икмәк тапшырғанда туғыҙ буханка икмәге етмәне. Быны шунда уҡ вазифаһынан бушаттылар ҙа ун биш тәүлеккә гауптвахтаға яптылар. Бына ошонда ғына ул үҙ яҙмышы тураһында ныҡлап уйланырға ваҡыт тапты... Нишләп кенә шул тиклем бешәлкәһеҙ кеше булып сыҡты? Атлы ғәскәрҙән бер ни ҙә ҡулынан килмәгән өсөн ҡыуып тигәндәй ебәрҙеләр, ә бында нindәй бәләгә тарыны! Нисек инде ул, ә? Бөтә кешенеке кеүек башы бар, хатта яҡшыраҡ та, сөнки иҫәп-хисапҡа шәп, эш эшләрлек аяҡ-ҡулы ла имен, ә бына булдыҡһыҙлығы һәр яҡлап ҡырын һуға.

Уйлана торғас, бөтә ғәйепте ҡатыны Мәһитапҡа япһарҙы. «Тик ул ғына мине иркә бала кеүек тәрбиәләне, тәмле-татлы ашатты, эсерҙе, йортта бер нindәй ҙә эш ҡушманы, ә үҙем, күрәһең, эшкә бик атылып тормағанмындыр инде. Тора-бара үҙемдең дә ҡара эшкә дәртем һүнде, тере ялҡауға әйләндем. Ысынлап та, минең ҡулға салғы тотоп бесән сапмағанға, балта алып утынға бармағанға биш былтыр заман үтеп китте бит. Бесәнен өмә менән саптырҙым, утынын старателдәр килтереп бирҙе. Аҙна һайын мунса яҡтырып арҡамды ла ҡайын миндек менән үҙем сапҡаным юҡ бит. Уныһын да, «ҡулыңды яндыраһың» тип, Мәһитап саба торғайны. Алтын үлсәнең, күпме мәғдән һинең аша үтте, ә ат әйәрләп, шуға атланырға ла өйрәнмәгәнһең. Мәжнүн! Юҡ, был рәүешле йәшәп булмай киләсәктә...» Уйланды, ҡаты уйланды Зәһретдин. Бер нисә көн үтеүгә, гауптвахтаға уның хәлен белергә тип талҡан килтергән Ғилмишәриф ауылдашын таныманы.

Улар һөйләшкән рәшәткә артында маңлайы йыйырсыҡтар менән һырлана төшкән, элекке моңһоҙ, гәмһеҙлек бәҫе баҫҡан битендә уйсан, етди һыҙаттар өҫтәлгән бөтөнләй икенсе кеше баҫып тора ине. «Үҙгәргән ағай, бик ныҡ үҙгәргән, бер нисә көн эсендә битенә ҡартлыҡ сырайы кергән, һөйләшеүе лә бөтөнләй икенсе», — тип уйланы Ғилмишәриф.

— Земляк, уйланым, уйланым да жалающи булып фронтҡа китергә хәл иттем, — тип оҙатып ҡалды Зәһретдин. Гауптвахтанан сыҡҡас, уны фронтҡа әҙерләнеп ятҡан запас полкка оҙаттылар. Ул винтовканан атыу күнекмәләрен, практик занятиеларҙа дошманға һөжүм итеү, оборона тотоу, яҡын бойҙа ҡоралһыҙландырыу алымдарын өйрәнде лә үҙе теләп фронтҡа китә торған беренсе маршевый ротаға яҙылды.

Эшелонға тейәлерҙән алда өҫтөнә өр-яңы кейем кейенеп, ауылдашы янына килеп китте. Зәһретдиндың рухы күтәренке, күңеле бик ашҡынған төҫлө күренде.

— Йә, Ғилмишәриф ҡусты, (был уның беренсе тапҡыр яҡташын исеме менән атауы ине) әҙме-күпме бергә хеҙмәт иттек. Ауылда саҡта ни осрашып һөйләшергә тура килмәгәс, мин һине сәпсим белмәгәнмен икән, һин ысын да ир икәнһең. Улай-былай булһа, ҡустым, бәхил итешәйек. Заманалар ауыр, бәлки, барыбыҙға ла тыуған төйәкте кире ҡайтып күрмәгә насип та булмаҫ, — тине. Ғилмишәрифкә төбәлгән һорғолт-йәшкелт күҙҙәрендә йәш күренде. Ҡулының һырты менән күҙ йәшен һөрттө лә: — Ярай ҡустым. «Фронтҡа оҙаттым» тип еңгәңә бер-ике ауыҙ булһа ла хат яҙып ебәрерһең. Минең нишләптер ҡулға ҡәләм тотҡо килмәй, хат яҙырға күңел төшмәй, — тип ашығыс ҡына ҡулын бирҙе лә йүгерә-атлап казарма мөйөшөнә йүнәлде. Боролошҡа еткәс, артына йәнә бер әйләнеп, һаман урынында баҫып торған ауылдашына тағы ҡарап алды. Ғилмишәриф тә, үҙенең берҙән-бер яҡынын юғалтҡан кеше кеүек, бойоҡ ҡына казармаға атланы.

## VI

Оборона һуғыштарында сафтары байтаҡ һирәгәйеп, ныҡ ҡаҡшаған часты яңы ғына алғы һыҙыҡҡа килгән маршевый роталар алмаштырҙы. Ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа: «Шырпы тоҡандырмаҫҡа!», «Тәмәке тартмаҫҡа!» — тигән команда килеп етте. Взвод командиры: «Бөгөн таң һарыһында һауаға атылған ҡыҙыл ракетанан һуң атакаға күтәреләбеҙ», — тип траншея буйлап йөрөп сыҡты. Марш менән килеп байтаҡ ҡына талсығыуға ҡарамаҫтан, бер кемде лә

йоҡо алманы, һәр кем ҡоралын, ҡоралынан алда үҙен атакаға әҙерләне. Донъяны шомло тынлыҡ баҫты. Быңдай мәлдә һәр кем үткәнен дә, алдағыһын да уйларға мәжбүр.

Заһретдин да һалҡын винтовкаһын Маһитабын ҡосаҡлаған кеүек ҡосаҡлап, күңел йомғағын тағатып, үткән ғүмерен, йылдар ҡатламын аҡтара. Уның ғүмере лә гел генә ал да гөл булманы бит. Ауыл халҡы ни күрһә, ул да шуны күрҙе, улар татығанын татыны. Аслыҡ та, ялан-ғаслыҡ та, әсеһе-сөсөһө лә бөтә ауылдаштары менән ҡуша барҙы: крәҫтиән эше, комсомол, ликбез... Илгә алтын кәрәк булғас, үҙ атаһы менән ошо эшкә кереште. Забойға төштө, үҙҙәренең яңғыҙ ҡола атты кәлешкәгә[1] егеп һары балсыҡ ташыны. Машерт төбөндә бер ҡулына көрәк тотоп балсыҡ болғаны, ә икенсе ҡулы менән үҙҙәре йырған канауҙан Дарыуҙы йылғаһының һыуын тартты. Бер аҙ эшләгәс иҫәп-хисапҡа сослоғон белеп ҡалған артель рәйесе уны алтын ҡабул итеүселәрҙең ҡыҫҡа сроклы курсына ебәрҙе. Бына шунан алып ошо көнгә тиклем старателдәрҙән көн һайын алтын ҡабул итте. Ҡайҙандыр алтын эҙләргә килгән кешеләр араһында үҙенең сибәрлеге, ҡиәфәте менән берҙәй айырылып торған, янбаштарына төшкән һап-һары сәсен ике толомлап үргән диңгеҙ кеүек сөмбәй ҙур зәңгәр күҙле Маһитап күп тә үтмәй уға йәр булды. Заһретдиндың артыҡ күркәмлеге булмаһа ла, битенең мәтелегенә ҡарап тормай Маһитап уға тормошҡа сыҡты, ауыл ҡыҙҙары кеүек: «Китсе, китсе, шул мәтене, төҫ тиһәң төҫө, һын тиһәң һыны юҡ, торғаны һыу мискәһе», — тип торманы, ир затының өҫтәл башында ултырыуын да, аҡсаны табыуын да яратты. Эйе, ирҙең һылыулығы бер ҡискә...

Хаталанманы ул, Заһретдиндың ҡеҫә тултырып алып ҡайтҡан бондары, турысайға тейәп алып ҡайтҡан төк-төк тауарҙары берҙе-ике, иште ҡуш итергә торған Маһитапҡа хуш килде. Өлгөрөм ҡатын турысайҙы егеп, сылтлап торған кырандасҡа төрлө-төрлө сатин, атлас тауарҙар тейәп, рудник баҙарына ла йөрөштөргөләп ҡайтты. Мал малды ишәйтте, бол болдо арттырҙы. Маһитаптың аҡсаһы, байлығы артҡан һайын, Заһретдиндың өйө лә, ихатаһы ла үҙгәрә барҙы. Элек күршеләре кереп йөрөр өсөн ситән аша уйылған бәләкәй ҡапҡа бөтөнләйгә ябылды, ә торараҡ емерек ситән урынына шәм һымаҡ ҡарағайҙан сысҡан да үтә алмаҫлыҡ бейек ҡойма пәйҙә булды. Нигеҙҙәре серей башлаған иҫке өйөн мал һарайы итеп эшләп, өр-яңынан йорт һалдылар. Ҡыйығын ҡалай менән яптырҙылар.

[1]Алтын балсығы ташыу өсөн аҫтынан ҡап уртаға асылып китә торған йөк арбаһы.

Маһитап өйгә, малға хужа булып алғас, Зәһретдиндың, зимагорлыҡ ҡылыҡтарын әкренләп үҙ яйына ҡайыра башланы. Башта көн дә ҡайһыһы туҫтаҡ, ҡайһыһы моҡсай тотоп йомошҡа йөрөгән ауыл тулы туғандарынан беҙҙерҙе, ә унан инде зимагор старателдәрҙән айырҙы.

Иҫерек Зәһретдинды ҡултыҡлап килеп ингән бер нисә старателде эт тә ашамаҫлыҡ һүҙҙәр менән баштан-аяҡ ҡойондорғайны, тегеләр нисек табан ялтыратҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

Бына шулай итеп, ғүмер һөрә ине бит ул Зәһретдин. Әгәр ошо ҡәһәр һуҡҡан Гитлер һуғыш башламаһа, әле лә хөрриәт донъяла типтереп йәшәп ятыр ине. Юҡ, бөгөнгө Зәһретдин ғәмһеҙ, кеше хәсрәтенә күҙ йомоп үтә торған элекке Зәһретдин түгел инде. Ошо ҡыҫҡа ғына армия хеҙмәте күп нәмәгә өйрәтте. Ауылдашы Ғилмишәрифкә әле лә тәме тел осонда торған бойҙай талҡаны өсөн мең рәхмәтле. «Имен-аман ауылға әйләнеп ҡайтырға насип булһа, Маһитаптың ай-вайына ҡарамай, ҡорбан салыр, бөтә мөлкәтемде уртаға һалып, ауылдаштарымдың береһен дә: олоһон да, кесеһен дә, ҡалдырмай ҡунаҡ итер инем. Өй беренсә йөрөп, ауылды урап сығыр инем. Тәкәбберлегемде ҡабул итә алмай, минән ситләшеп, оҙатырға ла килмәгән ағай-энемдең һәр береһенең тубығына ятып күҙ йәшем менән илап бәхиллек биреүҙәрен үтенер инем», — тип ант итте. Бына ниндәй уйҙар борсоно ҡыҙылармеец Зәһретдинды атака алдынан булған был тын кисте.

* * *

Зәһретдин ҡулындағы ҡоралын нығыраҡ ҡыҫып тотто. «Ни күрһәк тә бергә күрәсәкбеҙ, кәрәк ерендә атып та, штыгың менән сәнсеп тә дошманды бергә дөмөктөрәйек. Бирешмә инде, ныҡ тор», — тип Зәһретдин мылтығы менән һөйләшеп алды. Ысыҡтан тирләгән винтовкаһын, штыгын гимнастерка салғыйы менән һөртөп ҡоротто. Бил ҡайышына беркетелгән патронташындағы патрондарҙы яңынан барлап сыҡты. Салбарының алғы бәләкәй кеҫәһенә һалынған: «Итәлмасов Зәһретдин, 1902 йыл тыуған, 1050 уҡсы полк, 2 батальон, 3 рота, өй адресы: Башҡортостан, Ҡусҡар районы, Ялан ауылы, Итәлмасова Маһитап», — тип яҙылған медальонын да тағы бер һәрмәне. «Кеҫә төбөндә ҡыҫталып ятҡан, дошман менән алышҡан-фәләндә төшөп ҡалырлыҡ түгел», — тип үҙен тынысландырҙы. Ни өсөндөр, фотоға төшөргә йыйынған кеше һымаҡ, өҫ-башын һыйпап гимнастеркаһының сырыштарын тартҡыланы, пилоткаһын төҙәтте. Штыгының осо менән итек табанына

йәбешкән еүеш бысраҡты таҙартты. «Ярай әле, кисә генә күлмәк-ыштанды өр-яңынан алмаштырҙылар. Атакала үлеп-фәлән ҡалһам, өҫ-башым шаҡшы фашистан пағыраҡ булһын, битемдә саң, ҡатҡан бысраҡ ҡалмаһын», — тип Маһитабы биргән сигеүле батист ҡулъяулығын сығарып, һурығып, яңаҡтары эскә батҡан йөҙөн һөрттө. Бәйге сабыр алдынан бер һыҙыҡҡа теҙелә алмай ярһыған аттарҙыҡы кеүек дөпөлдәп типкән йөрәген тотоп ҡараны. Ғәжәп, күңелендә бер ҡарыш та ҡурҡыу әҫәре юҡ, ә йөрәге ашҡына.

Бына, ниһайәт, пушка, минометтарҙың гөрһөлдәгән тауыштары ишетелде. Әйтерһең дә, ҡиәмәт ҡупты, ерҙең аҫты өҫкә әйләнде — снаряд, мина шартлауынан ер һыҡранып һелкенде, ҡолаҡтар тондо, бөтә донъя геүләне. Ярты сәғәт самаһы барған артиллерия әҙерлеге уның туҡтауын түҙемһеҙлек менән көтөп ятҡан боецтарға мәңгелек булып тойолдо. Ҡапыл ер һелкенеү туҡталды ла, йөрәктәргә әллә ни төрлө шөбһә һалып, тирә-йүн бөтөнләй һил булып ҡалды. Күп тә үтмәй, күкһел томан менән ҡапланған иртәнге һалҡынса һауаны йыртып ҡыҙыл ракета юғарыға атылды ла, әкренләп һүнә-һүнә, ергә төштө.

— За Родину! За Сталина! — тигән ҡеүәтле оран яңғыраны. Һуғышсылар менән бергә Заһретдин да окобынан сыҡты. Мылтығын нығыраҡ ҡыҫып тотоп, себен кеүек, зыйлап осҡан пуляларға, снаряд, мина тауыштарына ҡолаҡ та һалмай алға йүгерҙе.

Ошо секундта Заһретдин өсөн, ниндәй генә ауыр ғазаптар булһа ла еңеп, тау башына менеп етеүҙән дә оло бурыс юҡ ине. Бәләкәй генә ҡалҡыулыҡтың икенсе яғына төшкәс, япраҡтары ҡара янып ҡойолған сауҡалыҡ күҙенә салынды. Заһретдин уны Ирәндек ҡуйынына һырынып ултырған йәшел сауҡалыҡ тип хис итте. «Нисек тә ҡайындарға барып етергә кәрәк, шул саҡта тере ҡалырмын», — тип уйланы. Тере ҡайындар уның ус эсенә тотоп килгән йәнен ҡурсалап алып ҡалыр кеүек ине. Шәп йүгереүҙән тыны бөтөп, беренсе ағасҡа бәрелде лә уңға боролоуы булды, һул ҡолағының япрағын йыртып пуля зыйлап үтеп китте. Үҙ траншеяларын ташлап тау түбәненә ҡаса башлаған фашистарҙың береһе үксәһенә баҫып килгән Заһретдинға таба әйләнде лә яңынан атты. Ләкин был пуля Заһретдинды аяп үтте.

Үс алыу теләге менән йөрәге ярһыған ҡыҙылармеец бөгөлә-бөгөлә йүгереп ҡасып барған дошманды ҡыуып етте лә бөтә көсөнә штыгы менән немецтың артҡы һанына сәнсте. Ғүмерендә тәкә лә салмаған кешенең әҙәм ғүмерен ҡыйыуы Заһретдинда артабан да ҡаты үс алыу тойғоһон уятты, дошманға нәфрәт ҡомарын арттырҙы.

Ул хәрәкәтһеҙ ятҡан бер немецты аҙатлап үтте лә, «Ура!» ҡысҡырып һуғышсылар менән түбәнгә атлыҡты. Дошман икенсе һыҙыҡ траншеяла нығынып ҡалыу өсөн киңерәк ара ҡалдырырға ашыҡты. Әммә тәүге уңыш менән дәртләнгән ҡыҙылармеецтарҙың алдағы төркөмө икенсе һыҙыҡ траншеяға бәреп инә башланы. Көтмәгәндә Заһретдин алдында тирә-яғы әлморон, селек ҡаплаған тәрән генә соҡор пәйҙә булды. Был шунда уҡ уңға ялтайҙы. Ҡапыл уның алдына соҡор түгел, йәшел каска кейгән, ауыҙын арандай асып, зәңгәр күҙле һонтор немец ҡалҡып сыҡты. Билендә ялпаҡ алюмин котелок, яурынына дүрткел ранец аҫылған. Бына ике һалдат: береһе — илбаҫар, ә икенсеһе, үҙ илен һаҡлаусы, күҙмә-күҙ осрашты.

Заһретдин шаҡ ҡатып торған немецҡа ташланды. Тегенең дә, Заһретдиндың да запас обойма сығарып мылтығын яһарға ваҡыты ҡалмағайны. Ҡапыл хәнйәр штыгын Заһретдинға һуҙған фашистың мылтығын ул бөтә көсөнә бер яҡ ситкә һелтәне лә, запас полкта өйрәткәндәренсә, «длинным с выпадом коли!» — тип үҙ-үҙенә команда биргәндәй булды. Аҙымын киң баҫып, уң тубығына сүкте лә немец ҡабырғаһына штыгын ҡаҙаны. Теге ҡанға мансылған ҡулдары менән үлемесле йәрәхәтен баҫып бөгәрләнеп йығылды ла әсе тауыш сығарып тыпырсынырға тотондо. Ярһыған Заһретдин: «Быныһы Маһитабым өсөн!» — тип уйларға ла өлгөрмәне, кемдер мылтығын ҡулынан бәреп төшөрҙө. Немец бит! Иҫерек шаҡшы ауыҙын йырҙы ла битенә мыҫҡыл ҡатыш йылмайыу йүгертеп: «Коммен-коммен, швайн», — тип ике буш ҡулын ҡайҙа ҡуйырға белмәй торған Заһретдинды үҙенә саҡырҙы.

Был бер аҙым ситкә ялтанды ла ике ҡулы менән ҡораллы фашистың боғаҙына йәбеште. Шул секундта Заһретдиндың эсен яндырып ниндәйҙер йылы шыйыҡса аҡты. Күҙ алды ҡараңғылана башланы, күңеле болғанып ҡоҫҡоһо килде. Һауала йөҙгән болоттар нишләптер түбәнгә түңкәрелде, аяҡ аҫтындағы ер уйылып аҫҡа төшә башланы. Һүнеп йомола башлаған күҙҙәрен күккә, күк көмбәҙендә армыт-армыт булып һуҙылған Ирәндек тауҙарына оҡшаған болоттарға төбәне. Шул болоттар артынан алыҫта тороп ҡалған тыуған төйәгенә һуңғы сәләмен әйтәһе килде. Һалдат тора-бара, бөтөнләй иҫен юйҙы. Рядовой Заһретдин Ватандың бер бәләкәй генә киҫәген тәшкил иткән таҡтөйө, һөйгән Маһитабы өсөн өнһөҙ генә донъянан китте.

Шулай итеп, ире фронтҡа китеп, бер ай ваҡыт үтеүгә, Маһитап уның командирҙары яҙған хатты алды. «Иҫәнмеһегеҙ, Маһитап Мирғәлиевна! Ҡайнар сәләм тапшырғандан һуң часть командованиеһы һәм уның политик бүлеге үтә ҡайғылы хәбәр еткерә. Һеҙҙең ирегеҙ, рядовой Итәлмасов

Заһретдин, 1902 йылда Ялан ауылында тыуған, сентябрҙең 30-сы көнө Усть-Хоперск ҡалаһының көнбайышында 217,4 ҡалҡыулыҡ өсөн барған аяуһыҙ һуғышта, тиңдәшһеҙ ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, батырҙарса һәләк булды. Атакаға ташланған беҙҙең сафтарҙың беренсеһе булып ул дошман траншеяһына бәреп инде. Ҡул һуғышында штыгы менән ике фашисты дөмөктөрҙө. Өсөнсөһө менән үлемесле алышҡан саҡта арттан атылған дошман пуляһы уның ғүмерен өҙҙө, мәгәр йән биргән саҡта ул фашисты ҡулынан ысҡындырманы, быуып үлтерҙе. Уның батырлығы тураһында «Ватан өсөн» гәзитендә баҫылып сыҡҡан мәҡәләне һеҙгә иҫтәлек итеп һалабыҙ. Уның шәхси әйберҙәрен почта аша алырһығыҙ. Һеҙҙең ирегеҙ рядовой Итәлмасов күрһәткән батырлыҡтары өсөн үлгәндән һуң орденға күрһәтелде. Хөрмәтле Маһитап Мирғәлиевна! Һеҙ ирегеҙ рядовой Итәлмасовтың ҡаһарманлығы өсөн хаҡлы ғорурлана алаһығыҙ. Немец фашистарына — үлем!

Уны Усть-Хоперск ҡалаһынан көнбайыштараҡ, 30 км ерҙә, үҙе һуғышып алған 217,4 ҡалҡыулыҡ битендәге туғандар ҡәберлегенә оло хөрмәт менән күмдек.

Часть командиры полковник **Яровой.**
Политбүлек начальнигы подполковник **Нагорный**».

## VII

Бөгөн төндә Ғилмишәрифтәр станцияға килгән аттарҙы бушатырға барҙы. Теплушкаларҙа килеп аяҡтары, кәүҙәләре ойоған меҫкен аттар ҡыя түшәлгән таҡтанан ергә төшә алмай интекте, үҙ-ара иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан шикелле, кешнәшеп алды. Ергә төшкәс тә, ойоған аяҡтарында тора алмай кәүҙәләре менән ҡалтыранды, ә ҡайһы берҙәре шунда уҡ ергә йығылып, аунарға кереште.

Ғилмишәриф нуҡта чумбурынан тотоп сығарған ат уны күреү менән әкрен генә кешнәне лә таҡтанан төшкән саҡта, ирендәрен дерелдәтеп, ҡултығына башын тығырға маташты. Буйы-һынына, ҡойроҡ-ялына ҡарап Ғилмишәриф атты төҫмөрләргә лә самалағайны, ләкин бөтә ергә өлгөргән Заровняевтың: «Тиҙ ҙә тиҙ!» — тигән фарманы ентекләп ҡарарға мөмкинлек бирмәне. Етмәһә, ҡараңғы. Шулай ҙа ат уның артынан бер аҙым да ҡалмай йылы тынын уның елкәһенә бөркөп килә бирҙе. Хатта һарайға инмәй, аяҡтары менән ер сапсып бының артынан китергә ынтылды. «Был ни ғәжәп! Әллә мине таныны инде был хайуан?» — Ғилмишәриф бер аҙ аптырап торҙо ла казармаға атланы.

Башҡа яҡтарҙа сентябрҙә лә ҡояшлы, йылы көндәр була, ә бында төньяҡ Урал тауҙарына тартым ерҙә, сентябрь айы һалҡынса була. Бигерәк тә иртә менән, күҙгә төртһәң күренгеһеҙ ҡараңғы төндөң таңға ялғанған сағында, ҡырау төшә лә ер өҫтөндәге уйһыу ерҙәрҙә йыйылып ятҡан күләүектәрҙе бер аҙ туңдырып, шөкәрә генә боҙ менән ҡаплап та ала. Бындай хәл һалдат халҡы өсөн бик шәп ваҡыт түгел. Ни көҙ, ни йәй. Әле йәйге форманы ҡышҡыға, йәйге норманы ҡышҡы нормаға — паекка алмаштырмаған осор, иртәле-кисле асҡаҡ һалдатты һыуыҡ бөрөп ала. Көнө лә йонсоу, һалдаттың да йәйге учениеларҙан үшәтләнеп талсыған сағы. Башҡа яҡтарҙа сентябрь айы икмәктең, йәшелсә, еләк-емештең өлгөргән сағы, муллыҡ айы. Малы ла, әҙәме лә оҙайлы ҡыш бауырына әҙерләнә, елеге май йыя. Ә бында нимә? Бер картуф, уныһын да, нигеҙҙә, станцияла үткән-һүткән поезд халҡына һаталар. Казармала ятҡан һалдаттарға өсөнсө нормаға тәғәйен аҙыҡ-әүҡәттән башҡа нәмә эләкмәй.

Бына бөгөн дә шундай бер ҡыраулы иртәлә старшина Заровняев «подъем» иғлан итте лә сәғәтен усына тотоп иҙән уртаһына баҫты. «Бер ҡараһаң, әҙәм аптырамалы инде был старшина», — тип хайран ҡала Ғилмишәриф. Был ни хикмәт? Һимермәй ҙә, ябыҡмай ҙа, бөтә кешенән һуң ята, иртә тора, ә тышҡы рәүешен ҡарасы: әйтерһең дә, кейгән кейемен кемдер иртүк кәлеплэп, һылап-һыйпап биреп тора. Өҫтөндә бер сырыш юҡ, гимнастеркаһына таҡҡан еҙ төймәләре ҡыуыҡһыҙ зәғиф шәм яҡтыһында ла, бесәй күҙе шикелле, баҙлап тора. Башын аҫҡа эйһә, күләгәһе йып-йылтыр итеп таҙартылған итеге йөҙөндә сағылып китә. Ә яҫы ҡайышының еҙ айылы ялтлап балҡып тора, ә шпорҙары!.Шул беҙ йөрөгән бысраҡтан йөрөй, беҙ тапаған ерҙе тапай ҙа баһа, бер ниндәй суҡраҡ та йәбешмәй микән быны тылсымлы итегенә?

Иртән, Ғилмишәрифтең ашҡынғанын һиҙенгәндәй, старшина уларҙы туп-тура ат һарайына алып китте. Килгәс тә, яңы аттарҙы урамға сығарып ҡулсаларына бәйләргә ҡушты. Ғилмишәриф кисәге атты бәйләгән денникка атлыҡты. Килеп инеү менән ишек аша башын һалып торған аҡ йондоҙло атҡа күҙ ташлауы булды, йөрәге һикереп китте, күҙенән бер нисә бөртөк шатлыҡ йәше бәреп сыҡты. Уның алдында «Ҡыҙыл ялан» колхозының өйөр айғыры Әүхәҙи тора ине.

Ишекте емереп сығырҙай булып тыпырсынған бурыл айғыр күҙҙәрен еүешләтеп, ҡылған төҫлө ял ҡаплаған муйынын Ғилмишәрифтең яурынына һалды. Ҡалтыранған ирендәрен элекке көтөүсеһенең күкрәгенә терәне. Әүхәҙи тыуған яҡтан сәләм тапшырырға, хәл-әхүәлен һөйләргә

теләгәндәй, башын сайҡап алды ла Ғилмишәрифтең икенсе яурынына үрелде. Әлекке көтөүсеһе генә өнһөҙ тора һәм атын ҡосаҡлап һөйә ине.

Аттарҙы сығарып бәйләнеләр. Старшина башта уларҙы урап ҡарап сыҡты. Йөрөнө-йөрөнө лә бөтә аттарҙан да берҙәй айырылып торған Әүхәҙи янына туҡтаны. Морононан һыйпарға уйлағайны ла, айғыр муйынын һуҙып, ҡолаҡтарын шымайтты. Күрәһең, күпте күргән старшина аттың кәйефен шундуҡ аңланы.

— Сильный конь, с норовом, — тип ситкәрәк китеп ҡарап торҙо ла, әүрәтергә тырышып, ауыҙ эсенән әллә низәр һөйләнә-һөйләнә, ҡулын һоноп янына яҡынлашты. Был юлы айғыр старшинаның салғыйын умыра тешләп алды ла тешенә эләккән буҫтау киҫәген ергә төкөрҙө. Эскадрон «пырх» итеп көлөп ебәрҙе. Старшина атҡа ҡарата бер ниндәй ҙә тупаҫлыҡ күрһәтмәне: «Но ничево, ағайыңдар һинән былайыраҡтарҙы ла өйрәткән кеше әле», — тип үҙен тынысландырҙы.

Шул арала Әүхәҙи нуҡтаһының чумбурын тартып өҙҙө лә теҙелеп торған эскадронға таба китте. Ҡыҙылармеецтар ҡаса башланы — ҡурҡтылар. Ә Әүхәҙи, муйынын һуҙып, Ғилмишәриф эргәһенә килеп туҡтаны, томшоғон уның күкрәгенә ышҡырға тотондо. Бөтә эскадрон аттың был серле ҡылығына аптыраны. Ғилмишәриф айғырҙың муйынынан ҡосаҡлап нуҡтаһынан ғына тотто ла бүрәнәгә килтереп бәйләне. Старшина уның эргәһенә осоп тигәндәй килеп баҫты ла:

— Ҡыҙылармеец Яуымбаев, быны нисек аңларға?! Мине умырып тешләп алды, ә һиңә иркәләнә!

— Был беҙҙең колхоздың гүләүәй йылҡыһының өйөр айғыры Әүхәҙи — «Ворошиловсы һыбайлылар» түңәрәгендә менеп өйрәткән атым.

Старшина ҡыҙылармеецтың һүҙенә ышаныр-ышанмаҫ ҡиәфәттә:

— Улай булғас, был айғыр тураһында бөтә мәғлүмәттәрҙе әйтеп сыҡ, — тине.

Ғилмишәриф бөтә кеше ишетерлек итеп:

— «Ҡыҙыл ялан» колхозы, 1938 йылдан алып РККА фонды, төҫө бурыл, маңлайында аҡ урайы — йондоҙо бар, айғыр, исеме Әүхәҙи, атаһы — Әбүбәкир, инәһе — Хаҙыя, таҙа ҡанлы башҡорт тоҡомонан, 1935 йылдың 25 апрелендә тыуған. Тыштан артҡы уң аяғы өҫтөндә «ФКА» тигән, йәғни «Фонд Красной Армии» тигән тамғаһы бар. Промерҙарын[1] әйтәйемме?

---

[1]Промерҙар — кавалерияға алынған аттарҙың буйы-һынының үлсәүҙәре.

— Бейеклеген генә әйт тә...

— Бейеклеге мундаһынан ергә тиклем 170 сантиметр.

— Барыһы ла дөрөҫ. Хатта паспортында күрһәтелмәгән тыуған көнөн дә әйтеп ҡуйҙы, — тине ветврач.

Сит ерҙә ауылдашы, хатта үҙе атланып йөрөгән аты менән осрашыуына Ғилмишәриф кенә түгел, бөтә эскадрон шатланды. Тик эскадрон өсөн был дөйөм шатлыҡ ғәрсел, көнсөл старшина — «ат профессоры» Заровняев күңеленә бер таш булып ятты. Ошо сәғәттән алып Ғилмишәрифкә булған мөнәсәбәте ҡырҡа үҙгәрҙе. Ә үҙе Әүхәҙигә атланып ҡала урамынан саптырып үтеү теләге менән яна башланы.

— Кисә килгән аттарға биш көн карантин! Устав буйынса карантин ике аҙна булырға тейеш. Ләкин срокты ҡыҫҡартабыҙ, ошо карантин мәлендә ат һарайына инеп, буталып йөрөүҙе ҡәтғи тыям! — тип иғлан итте бер аҙ баҫыла төшкән старшина. Һуңғы һүҙенең бигерәк тә Ғилмишәрифкә ҡарай әйтелгәнен бөтә кеше аңланы.

Ғилмишәриф, тойғоһона бирелеп, армияла йәшәп килгән икенсе бер тәртипте хәтеренән сығарҙы. Кемдең дәрәжәһе юғарыраҡ, шул кеше кавалерияла яҡшыраҡ атҡа атлана. Бармағы менән төртөп күрһәткән шул ат — начальниктыҡы. Армияла кешеһен дә, атын да үҙ начальниктарын хөрмәтләргә өйрәтә торған борон-борондан килгән йола, тәртиптәр етерлек. Башта үҙҙәрен яҡшылыҡ менән яраттырырға тырышалар, улай барып сыҡмаһа, башҡа юлдары ла бар.

Беҙҙең старшина ла ошондай юлды һынап ҡарарға булды.

Ул, эскадронды таратып ебәргәс, ветврачты саҡырып алды ла:

— Һин теге Яуымбаевтың атын манежға сығар әле, ипкә килтерәйек, — тине. Ләкин һарайға инеп киткән ветврач урамда ҡалған Заровняев эргәһенә йүгереп кире сыҡты.

— Юҡ, юҡ, иптәш старшина, яҡын барырлыҡ түгел, үрәпсеп, ажғырып тора.

— Ничево, ничево, ундай сығынсыҡтарҙы өйрәтә торған саралар ҙа етерлек! — Старшина һарайға ыңғайланы, артынан ветврачты ла эйәртте. Әүхәҙи быларҙы ҡолаҡтарын шымайтып ҡаршы алды. Ләкин донъя күргән старшинаны ҡолаҡ шымайтып ҡына ҡурҡытырлыҡ түгел ине. Әммә ат та иҫәр түгел, старшинаға арты менән боролдо ла шартлатып ишеккә типте. Был урынында шып туҡтаны ла ветврачҡа ымланы. Ә теге, икенсе яҡтан ат алдына сығып, рәшәткә аша таяҡ менән төрткөләп аттың башын старшина торған ишек яғына борҙо. Шуны ғына көтөп торған Заровняев ҡапыл ишекте шар асты ла аттың

моронона йәбеште. Һул ҡулы менән Әүхәҙиҙең үңәсенән һығып тотоп, уң ҡулы менән аттың морон кимерсәгенән эләктереп алды, аттың башын аҫҡа баҫып, сәбәләнеп йөрөгән ветврачҡа:

— Давай, давай закрутку! — тип ҡысҡырҙы. Әүхәҙи башын күтәреп старшинаны һелкеп ырғытырға тырышты. Бер нисә тапҡыр уны иҙәндән күтәреп тә алғайны, ләкин аяуһыҙ старшина бурауыҙ һымаҡ ҡыҫып тотҡан ҡулдарын ысҡындырманы. Ат бөтә көсөнә тыпырсынды, ажғырып төрлө яҡҡа әйләнгеләп туланы, ләкин уны һелкеп ырғыта алманы. Ҡылдан эшләнгән закрутка менән Әүхәҙиҙең ирендәрен ҡыҫып борҙолар ҙа бөтә кәүҙәһе ҡалтыранып иҫтән яҙа башлаған айғырҙың нуҡтаһы өҫтөнә йүгән, шунан башын өҫкә күтәрмәһен өсөн мартингал һалдылар. Бер нисә минут эсендә ҡара тиргә төшөп, еүешләнгән күҙҙәрен өҫкә текәгән атты закрутканан тартып, һөйрәп тигәндәй, манежға сығарып эйәрләнеләр. Хәҙер атҡа Заровняев хужа. Ул бесәй шикелле ат өҫтөнә һикереп менде лә:

— Закрутканы ысҡындыр, — тип ҡысҡырҙы. Әүхәҙи сайҡалып алды ла торған ерендә туп кеүек ырғырға тотондо. Артҡы аяҡтарын өҫкә ташлап, һыртында ултырған рәхимһеҙ кешене һелкеп ташларға ынтылды.

— Ә һин әле козлить[1] итергә маташаһыңмы? Ничево, ничего, ашыҡма, уныһына ла сара табырбыҙ, — тип ауыҙ йырҙы эйәргә сайыр һымаҡ йәбешкән старшина. Аяғындағы шпорҙары менән аттың ҡабырғаһын тызыны. Бындай мөғәмәләне ғүмерендә лә күрмәгән айғыр унық һайын ҡарышты, торған урынынан бер аҙым да ҡуҙғалманы. Старшина ауыҙын йырғыслап, ҡамсы менән дә ярып ҡараны, ләкин ат тағы ла нығыраҡ ҡарышты. Шунан, артын борҡотоп, өҫтөндәге кешене ергә алып һелкте, әммә-сос старшинаны йыға алманы. Теге бесәй шикелле аяғы менән төштө.

Тамам сығырынан сыҡҡан старшина аттың янбашына ҡамсы менән бер нисә тапҡыр һыҙыра тартты ла, ялына йәбешеп, яңынан уның өҫтөнә атланды. Хәҙер Әүхәҙи арт аяҡтарына торҙо, алғыларын юғары күтәрҙе — старшинаны артҡа шылдырып төшөрөргә самаланы. Ләкин старшина көслө аяҡтарын нығыраҡ ҡыҫып бөтә кәүҙәһе менән алға эйелде лә бының муйынына йәбеште. Ат, өҫтөндәге кешенең көслө ҡулдарынан ысҡынырға теләп, муйынын борғоланы, һыртын бөгөп, бөтә кәүҙәһе менән һелкенде, әммә старшинаны барыбер ергә ырғыта алманы. Шулай

---

[1] Аттың башын түбән баҫып, һыртын бөгөп бер урында һикереүе.

бер урында күп кенә тапанып торғас, старшина һуңғы сараһын уйлап сығарҙы. Аттан һикереп төштө лә:

— Давай был сыгынсыҡты кешәнләйек, — тип һарайҙан арҡан алып килергә ҡушты.

Тамам кирелəнгəн атты кешəнлəп тə артыҡ эш ҡыйрата алманылар. Артҡы бер аяғы үҙ муйынына ныҡ тарттырып бәйләнгән Әүхәҙиҙең ҡымшанырға ла әмәле ҡалманы. Муйынын дуға кеүек бөгөп ҡан һауған йәшкелт күҙҙәрен маңлайына атты ла, бөтә тәнен дерелдәтеп, үҙ яҙмышын көттө. Старшина башы ла, аяғы ла ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп шаҡарып бәйләнгән аттың һыртына ултырҙы ла бөтә гәләм алдында мәсхәрәләнгән ғорурлығы өсөн көтмәгәндә атты ҡамсыларға тотондо.

Арғымаҡ, старшина һуҡҡан һайын, тыпырсынды. Ҡамсы менән һуҡҡан эҙҙәренән юлаҡ-юлаҡ булып ҡабарып сыҡҡан урынын дерелдәтте. Ахырҙа арыған старшина ҡамсыһын ергә ырғытты ла шпорҙары менән тибенә башланы. Быңдай язаны көтмәгән Әүхәҙи ҡапыл ҡабырғаһына ауҙы. Итегенең йөҙлөгөн өҙәңгенән ысҡындырып өлгөргән Заровняев ат аҫтына эләкмәне. Ерҙә дырҫ-дырҫ тын алып ятҡан Әүхәҙиҙе яңынан ҡамсыланы ла кешәнен систе. Күҙ төптәренә тиклем ҡара тиргә төшкән ат аяғына баҫып бөтә көсөнән һелкенде лә, ике ягында баҫып торған ике кешегә күҙҙәренән ҡәһәрле осҡон атып, һарайына йүнәлде. Был инде, ун биш йыл атлы ғәскәрҙә хеҙмәт итеп, дошман алдында ла сигенмәгән Заровняевтың ат алдында беренсе еңелеүе ине.

— Был атты бөгөн ашатмағыҙ! Ул һыуынырға тейеш! — тип әмерен бирҙе лә каптеркаға ҡарай атланы.

Уның ҡайтыуын дүрт күҙ менән көткән Ғилмишәриф, ниҙер булғанын йыртыҡ итеген ҡаплап, һөмһөрө ҡойолоп килеп инеүенән үк һиҙенде. Ул һылтау табып шунда уҡ һарайға йүгерҙе.

Күңеле һиҙгән икән шул: тәне ут кеүек янып, йөндәре ойошҡан Әүхәҙи ҡан һауған ҡабырғаһын стенаға терәгән. Ғилмишәрифте күргәс, үҙ ҡайғыһын һөйләргә теләгәндәй ыңғырашып алды, Әүхәҙи кормушкаһын кимереп тора ине.

Юлаҡ-юлаҡ ҡамсы эҙҙәрен күргәс, ат йәнле Ғилмишәрифтең күҙенә йәш эркелде, тамағына төйөр тығылды. Ҡара тиргә төшкән, ауыҙ ситтәре иҙелеп бөткән. Тимәк, атты кемдер көсләп менергә маташҡан. Был тик старшинаның ғына этлеге! Старшинаға булған ихтирамы көл булып елгә осто. Ғилмишәриф ҡулын әсе тир йылыһы бөркөп торған ат ялы араһына тығып бер аҙ торҙо ла, һалҡын һыуға мансылған сепрәкте аттың ҡабарған, яллаңып сыҡҡан урындарына һалды. Хайуан муйынын бөгөп яҡташының арҡаһынан иркәләне.

Әүхәҙиҙе бер нисә көн урамға сығармай тоттолар. Заровняев камил ябығып йонсоғандан һуң аттың уға буйһоноп баш һалыуын көттө. Әммә малҡай ябығыу түгел, Ғилмишәрифтең тырышлығы менән көн дә матурайҙы, ялтыраны. Ғилмишәриф старшина ҡушҡандың киреһен эшләне. Уны ваҡытында таҙартты, ашатты, эсерҙе. Ат старшинаға мөнәсәбәтен тиҙ генә үҙгәртергә теләмәне, ҡолаҡтарын шымайтып ҡаршы алды, һалҡын ҡараш менән оҙатып ҡалды. Старшина ла тиҙ бөгөлөп төшә торғандарҙан түгел: Әүхәҙигә йәшертен генә килеп уны тәрбиәләп йөрөгән Ғилмишәрифкә ҡарата үтемлерәк сара эҙләне. Нисек кенә булмаһын, Ғилмишәрифте үҙ атынан айырырға, ситләтергә уйланы, сөнки үҙе атлана алмаған атҡа рядовой Ғилмишәрифтең менгәнен эскадрон күреп йә ишетеп ҡалһа, Заровняевҡа был часта урын ҡалмаясағын бик яҡшы һиҙә ине. Был тиклем мәсхәрәне нисек күтәрә алһын? Ошоға тиклем бер кемгә лә билдәле булмаған ауыл егете рядовой Яуымбаев эскадронда ғына түгел, ә бөтә училище күләмендә дан ҡаҙанасаҡ. «Билдәле, был атты эскадрон командирына ла тәҡдим итеп була, ул да яҡшы ат күрһә йоҡоһонан яҙа. Ләкин Әүхәҙиҙең эскадронда тороп ҡалыуы килешеп етмәҫ, сөнки ул Яуымбаев бар ерҙә башҡа кешене яҡын ебәрмәйәсәк», — тип уйланы Заровняев.

## VIII

Бер нисә көн үтеүгә эскадрон командованиеһының саҡырыуы буйынса училищеның ат белгестәре, шул иҫәптән ат өйрәтеү буйынса инструктор, эскадрон старшинаһының күптәнге танышы, хеҙмәттәше Дон казагы майор Пустовой яңы аттарҙы ҡарарға килде. Уларҙы бер тапҡыр урап сыҡты ла бөтәһенән дә аша ҡарап торған бурыл айғырға сат йәбеште:

— О, бына был исмаһам ат! Был хайуан өсөн йәнең дә йәл түгел, — тип телен шартлатып ҡуйҙы. Артынан бер аҙым ҡалмай йөрөгән ветврачтан:

— Йә, документын күрһәтегеҙ әле был хайуандың. Ниндәй тоҡомдан, ата-инәләре кем? — тип һораны.

Ветврач, Әүхәҙиҙең паспортын алып, мәғлүмәттәрҙе уҡып сыҡҡас:

— Ғәжәп хәл. Таҙа ҡанлы башҡорт тоҡомонан бындай аттарҙы ошоға тиклем осратҡаным юҡ. Улар, нигеҙҙә, ҡола төҫтә, сыҫҡан һыртлы була: баштары ҙур, муйындары йыуан, көслө, ләкин байтаҡ тәпәш, бәкәлдәрендәге сәсмәүҙәренә үҫкән йөнө услап алмалы, үҙҙәре сиктән тыш

сыҙамлы була. Был хайуандың тик ял-ҡойроғо ғына башҡорт атыныҡы. Ә үҙе ысын альбинос[1], — тип уны тыңлап тороусы кешеләргә башҡорт аты тураһында тулы мәғлүмәт бирҙе. Промерҙарын күҙе менән самаланы ла: — Был ысын стипль-чез[2], конкур[3] аты. Бына исмаһам һын, бына был инде беҙҙең кавалерияның данын күтәрә, биҙәй торған спорт аты буласаҡ, — тип эске шатлығын йәшерә алмай телен тағы шартлатып алды. Ләкин үҙе ҡолаҡтарын шымайтып, нуҡта чумбурына тартылып торған ат эргәһенә килергә шикләнде. Майор үҙен уратып алған бөтә кешене һөҙөп ҡарап сыҡты ла: — Атты эшлектән сығара яҙғанһығыҙ. Ул бөтөнләй ҡарышҡанға оҡшай. Бына закрутканан һуң әле ирендәре лә уңалып бөтмәгән, — тип ул Әүхәҙиҙең аҫҡы-өҫкө ирендәрендә түңәрәкләнеп өтөлөп сыҡҡан, көрән ҡутырына ҡулы менән төртөп күрһәтте. — Кемегеҙ һуң менергә маташҡайны? — тип майор тирәләп торған атлыларға һорау бирҙе. Аҫҡа төбәлеп, итегенең башы менән нишләптер ер соҡоп торған Заровняев, ҡапыл йоҡоһонан уянған кеше шикелле:

— Өсөнсө көн мин атланырға маташҡайным, — тип яуап бирҙе.

— Йә, йә, шунан?..

— Шунан шул. Был ат мине мендермәне. Уның характеры минекенә ҡарағанда нығыраҡ булып сыҡты, иптәш майор.

Бөтә ат белгестәре старшинаның яуабынан ҡысҡырып көлөп алды. Тағы ла нығыраҡ йәнләнә төшкән майор күҙҙәрен хәйләкәр ҡыҫып:

— Ай-ай, ай-ай! Бына һиңә кәрәк булһа, беҙҙең кавалерияла һин дә атлана алмаған ат килеп сыҡты бит, ә! Был мәсхәрәне нисек күтәреп йөрөмәк кәрәк, иртәгәнән башлап һиңә, шпорҙарыңды тапшырып, йәйәүле ғәскәргә күсергә тура килер, ахыры, — тип майор старшинаның былай ҙа әсенеп торған күңел йәрәхәтенә тоҙ һалды. Атлы ғәскәрҙән йәйәүлегә күсеү кавалерист өсөн иң ҙур яза икәнен белгән кешеләр бер-береһенә ҡарап йылмайҙы.

— Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул — иртәгә был дөлдөлдө беҙҙең ат һарайына күсерегеҙ. Беҙҙә, әлбиттә, иптәш старшина, һинең һымаҡ атаҡлы кавалеристар юҡ, шулай ҙа

---

[1]*Альбинос* — кешеләр һәм хайуандарҙың ата-бабаларынан килгән нормаль пигментацияһының юғалыуы. Бабаларының тоҡомона оҡшамай, ғәҙәттә, аҡ төҫлө булып тыуыуы.

[2]*Стипль-чез* — 4 км-ҙан 8 км-ға тиклем (ҡаршылыҡтар ҡуйылған)ябыҡ дистанцияла аттарҙың сабышы.

[3]*Конкур* — ун дүрт ҡаршылыҡ ҡуйылған кәртәле майҙанда атлы-спорт ярыштары үткәреү.

был атты мин үҙем өйрәтеп ҡарарға уйлайым, — тип әмер бирҙе. Оялышынан кишер һымаҡ ҡыҙарған старшинаға көмөш шпорҙарын зыңҡылдатып (бәлки, шпорҙарының һуңғы сылтырауылыр) уксә шаҡып:

— Тыңлайым, иптәш майор, барыһы ла һеҙ ҡушҡанса булыр, — тип әйтеүҙән башҡа әмәл ҡалманы.

Кис, ҡараңғы төшөү менән, бөтә эскадрон казармала саҡта, старшина, артына текә таҡта ҡуйылған бричкаға тағып, Әүхәҙиҙе кавалерия училищеһының ат һарайына оҙатты. Казармалағы иптәштәре төнгө йоҡоға талғас, Ғилмишәриф йәһәт кенә кейенеп үҙҙәренең ат һарайына йүгереп килде. Ләкин Әүхәҙиҙең денниғы буш ине. Аҫау айғырҙың һыу төбөнә төшөп юғалған таш кеүек ғәйеп булыуы күп кеше, шул иҫәптән Ғилмишәриф өсөн дә, сер ине.

## IX

Кавалерия училищеһы бинаһы, хужалыҡ блоктары, ат һарайҙары, манежы ла бөтә ҡыҙыл кавалерияға үрнәк булырлыҡ итеп йыһазландырылған. Училищеның начальнигы — граждандар һуғышы осоронда атаҡлы Беренсе атлы армияла эскадрон командиры булып хеҙмәт иткән, атлы ғәскәрҙәрҙә исеме киң таралған, Ставрополь казагы генерал-майор Вербицкий ине. Генералдың ат йәнле кеше икәнен күптән белгән майор Пустовой Әүхәҙиҙе ике-өс көн ашатып тәрбиә итте лә училище начальнигына күрһәтергә теләп манежға алып сыҡты. Аттың генерал күңеленә хуш килеүенә уның бер ҙә шиге юҡ ине.

Вербицкий учениеларҙы өлгөлө үткәргәне өсөн Әрмән компартияһының Үҙәк Комитеты бүләк иткән Баликджан[1] исемле аҡ күк айғырына атланып түгел, «Эмка» машинаһына ултырып килде. Билдәле, генерал ат ҡарарға сыҡҡас, башҡа командирҙар ҙа ҡалмай. Штаб начальнигы полковник Поддубный ҙа кабинетында нисек ултырһын? Ҡул ҡуяһы ҡағыҙҙарын тиҙ генә йыйыштырып йәшерен бүлексәгә тапшырҙы ла начальнигы артынан урамға сыҡты. Әүхәҙи тигән ат Вербицкий күңеленә хуш килһә, Поддубныйҙың күптән эсен көтөрләтеп йөрөгән аҡ күк Баликджан үҙенә ҡала ла баһа! Бер үҙе өс атҡа атланып йөрөмәҫ бит инде! «Уға училище начальнигының аты күсһә, үҙенең дончағы Аскетты миңә ҡалдырмай кемгә бирһен?» — тип уйлай штаб оператив бүлексәһе начальнигы майор Изотов.

---

[1] *Баликджан* — ҡәҙерле бала, малай.

Кавалерияла ҡупшы ат борон-борондан үҙ-ара дәғүә сығанағы. Бында һинең баһаңды атланып йөрөгән атыңа ҡарап билдәләйҙәр. Атың күркәм булһа, һиңә ихтирам да, хөрмәт тә бар. Мәгәр инде аҫтыңдағы атың бер баҡтаһын да ҡоймаған үжәт хайуан икән, теләһә ниндәй алтындай кеше самауыр еҙенә әйләнә. Хатта кавалерия часында хеҙмәт иткән командирҙарҙың ҡайһы саҡта ғаиләһе ныҡлығы ла ирҙең ниндәй атҡа атланып йөрөүе менән бәйле. Командир ҡатындары частағы бөтә яҡшы аттарҙы исемләп белә. Һүҙ араһында шуны ла әйтеп китәйем: командир ҡатындары, балалары — часта үткәрелгән ат спорты ярышының иң актив тамашасылары. Ҡайһы берҙә бисәләре, судья ҡуйған очкоға риза булмайынса, ярышта ҡатнашҡан ирҙәрен яҡлап үҙ-ара талашыуға, илашыуға тиклем барып етә.

Бына ни өсөн начальниктың бөгөн манежға ат ҡарарға килеү теләге бөтә кавалерия училищеһының командирҙарын ҡужғытты. Ҡулына ғәҙәттәге шыйыҡ сыбығын тотоп, өҫтөнә һылап ҡуйғандай, килешеп торған өр-яңы мундирын кейеп машинаһынан килеп төшкәс тә, манежда йыйылған командирҙарын күреп, генерал аптырабыраҡ та ҡалды. Уға килеп рапорт биргән майор Пустовойға:

— Бында ниндәй командирҙар йыйылышы? Уны кем тәғәйенләгән? — тип һораны. Әммә тауышына ни тиклем генә ҡатылыҡ билдәһе ҡушып ҡуйыртырға тырышмаһын, ирендәренә, көлөп торған күҙҙәренә ҡарап бының тик яһалма ғына ҡәтғилек икәнен барыһы ла аңланы.

— Ҡайҙа, теге ҡанатлы дөлдөлөгөҙҙө күрһәтегеҙ әле, ниндәй мал икән? — тип генерал бәйле торған ат яғына йүнәлде.

— Рәхим итегеҙ, иптәш генерал! — Пустовой алдан төштө. Әүхәҙи үҙенә яҡынлашҡан ят кешеләрҙе күргәс, йәшкелт күҙҙәрен тәгәрәтеп алды ла көслө муйынын дуға һымаҡ бөгөп башын өҫкә сөйҙө, нуҡта чумбурын өҙөргә маташты. Ә быны алдан һиҙенгән Пустовой чумбурға өҫтәп нуҡта дүңгәләгенә тимер сынйыр ҙа бәйләп ҡуйғайны. Әүхәҙи башын ергә эйеп, дүрт аяғын бөрә баҫты ла бар көсөнән чумбурға аҫылынды.

— Был ат түгел, ысын йыртҡыс! — тине тәжрибәле генерал. — Бер ҡулда яҡшы итеп өйрәтеп алғанда бының менән спортта ла, сабыш буйынса ла рекордтар ҡуйырға була. Ғөмүмән, ат шәп. Башҡорт аты булыуға ҡарамаҫтан, уларҙан байтаҡ бейек, буйы оҙон, һомғол, тимәк, йөрөк ат. Алғы бәкәлдәре нәҙек, ҡоро, тояҡтары текә, йомро — саптарҙар тоҡомонан. Промерҙары классик аттарҙыҡынан бер ҙә ҡайтыш түгел, — тип бөтә кеше ишетерлек итеп үҙ-үҙе менән һөйләшеп алды.

Бер аҙ торғас теҙгенен бушатҡан атҡа тағы ҡараны:

— Шулай ҙа был дөлдөл минең өсөн түгел. Был атҡа атланырға йәшем үткән инде минең. Бәлки, берәй йәшерәк кеше өйрәтергә тотонор, — тип үҙ командирҙарына һорау менән ҡараны. Ләкин бәйле көйөнсә лә теләһә ниндәй сит кеше өҫтөнә ташланырға торған өйөр айғырына атланырға теләп алға аҙым атлаған берәү ҙә табылманы. Генерал яҡты хыял менән манежға йыйылған командирҙарының өмөтөн өҙөп ҡайтып китте. Ошонан һуң Әүхәҙиҙе ат һарайына яптылар ҙа бөтөнләй унан төңөлдөләр.

Ошо ваҡиғанан күп ваҡыт та үтмәне ат һарайының бер башындағы тренер бүлмәһенең ишеген шаҡыныллар. Эстән: «Инегеҙ!» — тигән көр тауыш ишетелде. Әкрен генә асылған ишектән яуырын, киң яңаҡлы бите көнгә янған, ҡыҫығыраҡ, ләкин үткер күҙле бер ҡыҙылармеец килеп инде лә, ҡапыл аптырап аҫтан өҫкә ҡараш атҡан майорға:

— Һеҙгә ремонт эскадроны ҡыҙылармеецы Яуымбаев мөрәжәғәт итә, — тип һүҙ башланы.

— Йә, йә, иптәш ҡыҙылармеец, йомошоғоҙҙо һөйләп бирегеҙ, — тип майор өҫтәл артына уңайлаңҡырап ултырҙы ла, — «вольно!», — тип өҫтәп ҡуйҙы. Һап-һары итеп йыуылған иҙәндә үҙенең бысраҡ аяҡтарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй алмашлап баҫып торған Ғилмишәриф, башта ыҡмығыраҡ итте лә һуңынан һүҙен шыма ғына теҙеп алып китте. Ул һис бер нәмәнән дә шикләнеп тормай:

— Минең көтөү көткәндә менеп йөрөгән колхоз айғырын беҙҙең старшина бына ошонда оҙатҡан булырға кәрәк, — тип туп-тура һүҙ башланы. Ә үҙе, әйтерһең дә, айғырҙың ҡайһы денникта тороуын да алдан белгән шикелле, бармағы менән төртөп һарайҙың ат торған икенсе осона күрһәтте.

— Йә, йә, бик ҡыҙыҡ. Ул ниндәй айғыр? Ғөмүмән, был ни тигән һүҙ? «Колхоз айғыры, мин менеп йөрөгән ат!» Ҡыҙыл Армияға алынған бөтә айғырҙарҙы ла ҡасандыр, кемдер менеп йөрөгән, ә хәҙер уларға кемгә ҡушыла, шулар менә. Һеҙгә аңлашыламы?

— Аңлашыла.

— Шулай булғас, шуның менән әңгәмә тамам, — тип майор урынынан тора ла башланы. Һүҙҙең ошо рәүешле бөтөүен көтмәгән Ғилмишәриф, үҙ ҡарашын ҡайҙалыр ситкә төбәп:

— Иптәш майор, ул атты күпме генә яфалаһағыҙ ҙа уға атланып йөрөргә минән башҡа бер кемдең дә ҡулынан килмәйәсәк. Минең һуңғы һүҙем шул, — тине лә Ғилмишәриф ҡулын козырек аҫтына алып, китергә рөхсәт һораны. Боролоп сығып китергә әҙерләнгән ҡыҙылармеецтың киң арҡаһына бер ҡараш атты ла майор:

— Туҡта әле, әҙерәк сабыр ит, — тип сөйҙә элеүле торған ҡамсыны ҡулына алып итегенең ҡуңысына бер нисә тапҡыр шапылдатып һуҡты. Берәр нәмәгә икеләнгәндә уның электән дә шулай итек ҡуңысына һуҡҡылап ала торған ғәҙәте бар ине. Ишек төбөндә туҡтап ҡалған Ғилмишәрифтән:

— Йә, ул ат тураһында ниҙәр беләһең?, — тип һораны. Әҙерәк йәнләнә төшкән Ғилмишәриф яуап урынына:

— Барыһын да, — тип кенә ҡуйҙы.

— Йә, һөйләп ебәр, — тип Ғилмишәрифте алдына ултыртты ла, имтихан алған уҡытыусы шикелле, уны тыңларға әҙерләнде. Эстән әҫәрләнеп, күңеле ашҡынған Ғилмишәриф:

— Айғырҙың исеме Әүхәҙи, 1935 йылдың 25 апрелендә тыуған, — тип ҡабаланып урыҫ һүҙҙәрен бутай-бутай һөйләй башлағайны, майор уны ҡапыл туҡтатты ла:

— Иптәш ҡыҙылармеец, әгәр беҙ уны һиңә күрһәтһәк, ул һине танырмы? — тип һорауы булды, Ғилмишәриф ҡапыл ике усынан төрөпкә яһаны ла иренenә терәп бөтә һарайҙы яңғыратып: «Әүхәҙи!» — тип ҡысҡырҙы. Ат һарайының теге башында сыңғырлатып кешнәгән тауыш ишетелде. Шатлығын йәшерә алмаған майор, ишекте асты ла:

— Рәхим ит, иптәш ҡыҙылармеец, — тип Әүхәҙи торған денниктың ишегенә күрһәтте. Ғилмишәриф йүгереп килеп денниктың ишеген асты ла Әүхәҙиҙең муйынына ташланды. Ҡыуанысынан ирендәрен дерелдәтеп иркә генә кешнәү тауышы сығарҙы ла Әүхәҙи, элекке үҙ көтөүсеһенең ҡояшҡа ҡарайып янған тоҙло битен яланы. Ат менән кеше башҡа бер ҡасан да айырылмаҫҡа һүҙ биргән төҫлө ҡосаҡлашып ҡына торҙолар. «Ҡыҙыл Ялан» колхозының өйөр айғыры Әүхәҙи оло һынауҙар, ғазаплы яраланыуҙар үтеп үҙенең элекке хужаһын эҙләп тапты, инде башҡа мәңге айырылмаҫҡа табышты улар.

Майор Пустовойҙың икенсе көн Вербицкийға инеп, хәлде аңлатып, ҡыҙылармеец Яуымбаевты ремонт эскадронынан училищеға үҙенә тренерлыҡҡа өйрәнсек итеп күсереүен һорауҙан башҡа әмәле ҡалманы.

Бер нисә көн үткәс, күңеле тынысланып, ашай-эсә башлаған, инде хәҙер йөндәре ҡояшҡа ялтырап торған бурыл айғырҙы Ғилмишәриф манежға сығарҙы. Эйәрле атына, әйтерһең дә, ул ҡулынан ысҡынып ҡасып бара, һырынған Ғилмишәрифтән майор ҡоро ғына һорап ҡуйҙы:

— Һин үҙең һәм атың ниндәй әҙерлек үткән?

— Был ат колхозда «Ворошиловса һыбайлылар» программаһын үтте, ә мин инде ремонт эскадронында «Кавалеристың тәүге хәрби әҙерлек» кимәлендә күнекмәләр өйрәндем.

Майор Пустовой ат менән бер йәнгә әйләнгән, шатлығынан битендә яҡты нурҙар балҡыған Ғилмишәрифкә бер аҙ ҡарап торҙо ла:

— Йә, әйт әле, иптәш ҡыҙылармеец, манежға сменаны[1] сығарғанда аттарҙы Устав буйынса ни рәүешле теҙергә тейешбеҙ? — тип һораны. Эскадронда тәүге ат күнекмәләре алған Ғилмишәриф бик аптырап ҡалманы.

— Трензель[2] аҫтынан ат тотоп торған кеше менән икенсе йәнәш ат араһында аралыҡ ике метрҙан да кәм булырға тейеш түгел. Был яҡын торған аттар бер-береһе менән тибешмәһен өсөн шулай эшләнелә.

Яуабына ризалығын белдереп, тренерҙың башын һелкеп торғанын күргәс:

— Ә манежда аллюр[3] башлағанда иң алға айғырҙы, унан аттарҙы, ә иң арттан бейәләрҙе ҡуябыҙ, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

— Ә һуң нишләп смена йөрөшөн манежда айғыр башлай?

Ғилмишәриф әҙәпле генә көлөмһөрәне лә:

— Айғыр булған өсөн ул манеждағы хәрәкәтте алдан башларға тейеш, шунһыҙ айғыр алдында торған ат менән талаша башлай, — тине. Тамам күңеле бөткән тренерҙың:

— Атҡа мен! — тип команда биреүе булды, Ғилмишәриф, ҡанатлы ҡош кеүек, Әүхәҙиҙең һыртына менеп тә ултырҙы. Байтаҡтан бирле атланмау сәбәпле, эйәрләүҙе һәм атланыуҙы онота ла башлаған айғыр бер урында тыпырсынып алды. Ләкин өҫтөндә таныш кешенең ултырыуын белеп, ул башын ташлай-ташлай команда көттө. Тренерҙың манежға, әйтерһең дә, бөтә училище сыҡҡан, көр тауышлы командаһы яңғыраны.

— Смена, по головному номеру, дистанция две лошади, ездой налево шагом ма-..-р..-ш!

Йөрәге ярһыған Әүхәҙи сыҙамай юртыуға күсергә самаланы, ләкин Ғилмишәриф уға эйелеп ҡолағына ниҙер шыбырлаған төҫлө итте лә, уның башын тартты. Әүхәҙи тиҙ генә тыныслана алманы. Манежды урталағас, тренерҙың икенсе командаһы ишетелде. «Строевой рысью ма-а-рш!» Әүхәҙи тренерҙың шул командаһын ғына көткән шикелле, еңелсә юртыуға күсте. Ә инде Ғилмишәриф шенкелдарын[4] ҡыҫып, ҡулына тотҡан теҙгенен бушатты. Ғилмишәрифтең үҙен-үҙе онотоп ҡапыл артын эйәр өҫтөн-

[1]*Сменаны* — манежға уйнатыу өсөн сығарылған аттар төркөмөн смена тип атайҙар.

[2]*Трензель* — ат ауыҙлығының осо беркетелгән тимер дүңгәләк.

[3]Аттың беренсе аҙымынан алып сабыуға тиклем хәрәкәтен аллюр

[4]Төҙ быуынынан алып аяҡ табанына тиклем кавалеристың ат ҡабырғаһын ҡыҫып торған аяҡ аралары шенкель тип атала.

дә яңылыш һуғып алғанын күреп ҡалған тренер яңынан ҡысҡырҙы:

— Облегчайся под внутреннюю левую ногу! — Бынылһы инде Әүхәҙи алғы һул аяғын күтәргән моментта ғына эйәр өҫтөндә күтәрел, ә ергә баҫҡанда эйәргә лыпын ултыр, — тигәнде аңлата ине. Шунан һуң Әүхәҙиҙе тренерҙың командаһы менән Ғилмишәриф строевой, йәғни иң шәп, юртыуға күсерҙе. Тренерҙың бөгөнгө занятиеһы Әүхәҙиҙе атланған Ғилмишәрифтең ҡаҡ, тигеҙ манежды шаңҡытып, кавалеристар телендә «гладкие скачки» тип аталған йәнфарман сабыуы менән тамамланды. Сәғәтенә ҡарап торған тренер ярһыған атынан һикереп төшкән Ғилмишәриф арҡаһынан ҡағып:

— Һуңғы ике йөҙ метр аралыҡта һинең атың сәғәтенә 65 километр тиҙлек менән үтте, беренсе көн өсөн бик юғары һөҙөмтә, — тип маҡтап ҡуйҙы.

Бөгөн үҙ атына атланған Ғилмишәриф тә, үҙ хужаһын атландырып манеж буйлап уҡ һымаҡ атылған бурыл айғыр ҙа һуңғы көндәрҙә уларҙы солғап алған ғазаплы бәләләрҙән әрселеп, күңелдәрен тынычлап таң сыҡтылар.

Училищеның казармалары ла икенсе төрлөрәк. Ике ҡатлы ағас һәндерә урынына тимер карауат, курсанттар ятып йөрөгән одеял-түшәктәре лә яңыраҡ. Нисә әйтһәң дә, училище инде, бында уҡыған курсанттары ла башҡасараҡ күренә. Нигеҙҙә, заманына күрә төплө белем алған бер сама йәштәр. Ашатыу-эсереү ҙә бүтәнсәрәк. Эскадронда өсөнсө тип йөрөтөлгән норма урынына курсанттарға аҙыҡтүлек паегының туғыҙынсыһын бирәләр. Был инде һәр курсантҡа көнөнә илле грамм һары май, етмеш биш грамм ит һәм кеше башына бирелгән арыш икмәгенең ике йөҙ грамы аҡ икмәк тигән һүҙ.

Бындағы курсанттарҙың киске самоподготовка ваҡытында үҙ-ара һөйләшеүҙәре лә бөтөнләй икенсе. Эскадронда буш ваҡытта ҡыҙылармеецтар араһында һүҙ күберәк ауылда тороп ҡалған ҡатын, бала-саға, мал-тыуар, утынбесән тураһында барһа, бында бөтөнләй киреһенсә. Казармала өйкөм-өйкөм булып йыйылып ултырған курсанттарҙың дөйөм хәбәре тик фронт хаҡында ғына. Бөтә халыҡ фронтҡа ашҡына, хатта ҡайһы бер сабырһыҙыраҡтарының станция аша фронтҡа үткән эшелонға тағылып алғы һыҙыҡҡа ҡасып китеү осраҡтары ла булғылап тора икән. Бына бөгөн дә ҡыҙыл мөйөштәге ваҡ ҡына флагтар менән төрлө урынынан ҡаҙалып бөткән СССР-ҙың картаһы алдында өйөлөп торған курсанттар араһында шаулы ғына һөйләшеү булып алды. Дүрт һанлы, төп кеүек йыуантыҡ бер курсант уртаға сыҡты ла, тоҡорой ҡулына ҡылыс тотҡан шикелле, һауала һелтәнә-һелтәнә һүҙгә кереште.

— Бында туғыҙынсы паек кимереп нишләп ятырға? Ҡорал бирһендәр ҙә фронтҡа оҙатһындар.

— Дөрөҫ, дөрөҫ! Беҙ барып немецтың яғаһынан алмаһаҡ, кем булдыра алһын уны?

— Беҙҙең ҡылыстар ҡайралған, аттарыбыҙ әҙер, команда ғына булһын, унан күҙе тонған фашисты нишләтергә белербеҙ беҙ!

Бындай һүҙҙәр — гәҙәттә, «кавалерия — ҡыҙыл армияның кендеге», «ҡайҙа данлыҡлы атлы ғәскәр — унда еңеү» тигән традицияларҙа тәрбиәләнгән, үҙен бөтә төр ғәскәрҙән өҫтөн ҡуйып танау сөйгән курсанттар хәбәре. Ғөмүмән, кавалеристар — борсаҡ шыттырыбыраҡ һөйләшә, шапырыныуҙы ярата торған, тәкәбберерәк халыҡ. Араларындағы бер нисә кеше баҙнатһыҙ ғына икеләнеү кеүегерәк һүҙ ысҡындырҙы:

— Әле ошо көнгә тиклем беҙ ысын пушкаларҙан атҡаныбыҙ ҙа юҡ бит әле.

— Программа буйынса ҡаралған «Кавалерия полкы эскадроны оборонала» тигән тактик занятиеларҙы ла үтмәгәнбеҙ, ул нисек була инде?

Икеләнеүсе был бер нисә кешене ҡалғандары шундуҡ бөрөп алдылар:

— Ағас пушканан аттың да инде, шул һиңә етмәгәнме ни?

— Бер көн күрше артдивизионда пушкаларҙың атҡанын ҡарап торҙоң бит, еткән!

— Хәҙер оборонаны түгел, һөжүм итеүҙе өйрәнергә кәрәк, шул оборонаны яҡшы белгән өсөн Волгаға килеп еттек бит инде!

— Бында ятып барыбер һуғышырға йүнләп өйрәнеп булмай инде ул, тиҙерәк фронтҡа, вот все! Фронт үҙе өйрәтер әле.

Ә ҡайһы берәүҙәре үтәрәк тә фәстереп ебәрә. Бөгөн кискә казармаға ҡайтып ингән курсанттар ауыҙынан Ғилмишәриф тағы ла ҡыҙығыраҡ, тағы ла мөһимерәк һүҙҙәр ишетте. Улар араһында үҙенең ике яҡҡа тырпайып торған ажар мыйығы менән дә, оло йәше менән дә айырылып торған сверхсрочник, взвод командирының ярҙамсыһы, башҡаларға ҡарағанда ла ашараҡ һуҡтырып ебәрҙе. Ҡыҙыл Армияның күренекле полководецтары тураһында һүҙ сыҡҡас, ул ике күҙенең береһен дә йоммай:

— Әгәр ошо беҙҙең атлы ғәскәр булмаһа, Ҡыҙыл Армияла телгә алырлыҡ йүнле хәрби начальник булыр инеме? — тип үҙенә үҙе һорау бирҙе лә ҡул бармаҡтарын бөгә-бөгә һанарға кереште. Ленинград фронтында, Мәскәү аҫтында фашистарҙың кәрәген биргән армия генералы Жуков кем? Һуғыштан алдағы атлы полк, атлы дивизия командиры. Һигеҙ йыл буйы Белоруссияла атлы дивизия

менән командирлыҡ итеүе бушҡа түгел. Атлы дивизия Ҡыҙыл Армияның стратегик[1] ғәскәре ул. Әгәр ул атлы ғәскәрҙә хеҙмәт итмәһә, иптәш Сталин уны Халхин-Голға японцарға ҡаршы Совет ғәскәрҙәре төркөмөнә командующий итеп ебәрәме? Сроды ла ебәрмәй. — Үҙен һырып алған, уның хәбәренән ҡыҙыҡһынып күҙҙәре янып торған йәш кавалеристарға ул бер ҡараш һирпеп алды ла һүҙен дауам итте:

— Ана, беҙҙең батька Вербицкий уның полкында эскадрон командиры булып хеҙмәт иткән. Ул Жуковты үҙен дә, кешене лә йәлләмәй торған, бик талапсан командир ине, тип һөйләй.

Взвод командиры ярҙамсыһы рәтендәге бер нисә кеше уны хуплап һүҙгә ҡыҫыла:

— Хоть беҙҙең Семен Михайлович Буденныйҙы ал. Атлы ғәскәр менән командалыҡ итмәһә, ул разе маршалға тиклем барып етә алыр инеме? Уның һүҙен башҡалар ҙа элеп ала:

— Ә маршал Тимошенко кем? Граждандар һуғышы ваҡытында Деникинды ҡыйратып, Врангелды Ҡара диңгеҙгә алып барып ауҙарған Беренсе Атлы армияла комбриг булған түгелме?

Башҡалар ҙа уның һүҙен ҡеүәтләй:

— Конечно, булған. Дөп-дөрөҫ.

— Ә маршал Ворошилов? Беренсе Атлы армияла ул да атҡа атланып хәрби Совет ағзаһы булып йөрөгән дә баһа.

— Ә генерал-лейтенант Рокоссовский?

— Уныһы кем һуң?

— Фашисты Мәскәүгә ебәрмәй тотоп торған. 16-сы армияның командующийы.

— Һанап китһәң, күптәр әле ул. Беҙ уның эре-төрөһөн, газетала баҫылғандарын ғына беләбеҙ.

Ҡайҙандыр килеп араға ҡыҫылған музыканттар взводының трубачы ла тауыш сығарып ҡуйҙы:

— Әллә кавалеристар Ҡыҙыл Армияның командирҙары араһында ғына тип уйлайһығыҙмы? Бик тәрән яңылышаһығыҙ. Мировой лирик тенор Сергей Яковлевич Лемешев башта кем булған тип уйлайһығыҙ? Белә белһәгеҙ, ул да беҙҙең брат-кавалерист. Йырсы булырҙан алда ул башта кавалерия училищеһына инеп уҡып сыҡҡан, белдегеҙме?

— Ә батшаның күренекле генералдары Брусилов, Игнатьев һәм башҡалары кем? — тип кемдер был һүрелә башлаған әңгәмәне оҙайтырға теләп тауыш бирә.

---

[1]Дошманға ҡаршы оборона тотоу һәм һөжүм итеү мәсьәләләрен үҙ аллы хәл итә торған соединение. Бынан тыш уҡсы соединениелар составында тактик тип аталған кавалерия ла була.

— Ҡуй әле, шул батшаға тәрилкә тотоп йөрөгән генералдарыңды!

— Әй, уларҙың бысағымамы кәрәктәре? Совет атлы ғәскәренән үҫеп сыҡҡан үҙебеҙ кеүек ярлы-ялпы генералдар бөткәнме?

Шулай итеп, бөтә күренекле йүнле командирҙар барыһы ла ҡасандыр атҡа атланып, улар һымаҡ уҡ ат ҡойроғона йәбешеп йөрөгән ябай атлылар булыуын, әгәр инде кавалеристар әйтмәксе «ат ергә бәреп һуҡмаһа, шпорҙар ҡамасауламаһа» бындағы әңгәмәлә ҡатнашҡан һәр икенсеһе, полкты булмаһа ла, кәм тигәндә эскадронды дошман өҫтөнә атакаға ташларға әҙер икәнлегенә ысын күңелдәренән ышанып, һәр кем үҙ йомошона тарала. Ҡыҙыҡ халыҡ ул кавалеристар!

Ситтә генә һүҙгә ҡушылмай былар хәбәрен тыңлап торған Ғилмишәриф тә эстән генә уларҙың күбеһенең фекерен хуплай. Ул да фронтҡа ашҡына, тик уны бер генә нәмә борсой — үҙ Әүхәҙие кем менән ҡала? Ярай ҙа һуң үҙ айғырын уға бөтөнләй беркетһәләр, ҡайһылай ҙа шәп булыр ине. «Башҡа курсанттарҙың барыһының да үҙҙәренә беркетелгән аттары бар ҙа һуң. Мин кемдән кәм. Уға атланабыҙ тип бер тапҡыр маташып ҡаранылар ҙа инде. Бының аҙағы ни менән бөттө? Етмәһә, мин училищела башҡа курсанттар хоҡуғында ла түгел. Минең буйһонған хужам хәҙергә майор Пустовой бит әле. Мин бында ла шул ат өйрәтеү менән ғүмер уҙҙырырмын микән?» — тип уфтана Ғилмишәриф.

«Подъем»дан һуң ат һарайында Әүхәҙиҙе таҙартып бөтөүгә башҡа курсанттар үҙ аттарының саңын йәһәт кенә ҡаҡҡылап алдылар ҙа эскадронлап стройға теҙелделәр. Бына гел генә туры төҫтәге аттарға атланған беренсе курсанттар эскадроны ат һарайы эргәһенән Ғилмишәрифтең былай ҙа ашҡынған йөрәген елкендереп ер һелкетеп үтеп китте. Фуражкаһына һыймаған сәсен сикәһенә сығарып алғы шеренгыла барған бер курсант, баҫҡан өҙәңгеләренә майшәм кеүек күтәрелә биреп, йыр башлап ебәрҙе:

*Если есть запас патронов,*
*То товарищу отдай.*

Бөтә эскадрон ул башлаған көйҙө йоҡонан уянып мыжғый башлаған ҡаланы, иртәнге һалҡынса һауаны яңғыратып берҙәм эләктереп алды ла ҙур дәрт менән артабан дауам итте:

*Эй, вы поля, зеленые поля,*
*Красна кавалерия, садись на коня.*
*Да, да, эй вы поля...*

Ғилмишәриф бөтә бөтмөшө менән стройға ынтылды. Бер ниндәй дошман да ҡаршы торалмаҫлыҡ, алдындағы бөтә кәртәләрҙе лә емереп үтерлек булып тойолған бына-бына һуғыш яланына оҙатылырға тейешле эскадронға ашҡынды.

Майор Пустовой Ғилмишәриф менән индивидуаль занятиеларға күсте.

Башҡа учебный эскадрондар өсөн программа буйынса спорт ярыштарына өйрәнеү, ат сабыштырыу, конкурҙа ҡуйылған төрлө бейеклектәр аша һикереүҙәр ҡаралһа ла, училищеның командованиеһы уны ныҡ ҡына ҡыҫҡартып, подразделениеларҙы тиҙерәк һуғышҡа әҙерләү занятиелары менән алыштырҙы. Курсанттар «Эскадрон оборонала», «Атлы полк дошманға ҡаршы һөжүмдә» тигән занятиелар, яҡын бойҙа ҡылыс менән эш итеү, атлы ғәскәр атакаһында эйәр өҫтөндә карабиндан атыу алымдарын өйрәнделәр. Үҙ аттарын экренләп атыш тауышына, ғөмүмән, киләсәк һуғыш шау-шыуына өйрәттеләр. Һуңғы ваҡыттарҙа «Училище бөтөнләйе менән фронтҡа оҙатыла икән», «башта уның бер нисә эскадронын ғына ебәрәләр икән» тигән хәбәр көндән-көн ҡуйыра, йышая башланы. Бер көн шулай ошо хәбәрҙе ҡаға-һуға булһа ла ишетеп ҡалған Ғилмишәриф, ҡаты режимда тороп эстәре тартылып, бөтә тороҡ оҙон кәүҙәһе тағы ла һомғоллана төшкән айғырын етәкләп һарайҙан сығып килгәндә, майор Пустовойға тап булды. Хәҙер ул үҙ командирын бик һирәк осрата башланы. Иртән тора ла үҙ атына атланып эскадрондарға олаға. Ғилмишәрифкә ике аҙнаға расписание төҙөп биргән дә уның менән тик бер нисә спорт алымдарын өйрәнеп бөткәс, имтихан алған шикелле генә осратып үҙ фекерен әйтә лә тағы юғала. Ә бына бөгөн һарай ишегендә үҙе күренде. Ғилмишәриф теҙгенде һул ҡулына алды ла уң ҡулы менән честь бирҙе. Майор ҡайҙалыр ашыға ине, шуның өсөн үҙ ҡыҙылармеецының һуңғы көндәрҙәге эше менән артыҡ ҡыҙыҡһынып торманы. Ләкин ниндәйҙер һораулы күҙ ҡарашы менән төбәлгән Ғилмишәриф эргәһенән майор былай ғына үтеп китә алманы. Асығын ғына әйткәндә, донъяның байтаҡ эсе-сөсөһөн татыған төрлө ат эйәренә ышҡып тиҫтәләгән салбар туҙҙырған майор күптәнән инде ошо Ғилмишәриф һымаҡ ат йәнле, әйткәнде урын-еренә еткереп башҡара торған, арыу-талыуҙы белмәй бөтә ғүмерен атҡа бағышлаған кешене эҙләй ине. Әмәлгә ярағандай, бына уның ҡулына «күктән көткәнен ерҙән килтереп бирҙе хоҙай». Аты ла, үҙе лә сыҙамлы, беше ике йән майор күңеленә хуш килде. Майор ҙа эстән генә генералды өгөтләп ошо егеткә офицер званиеһы бирҙереп, үҙенең урынына, ваҡытлыса ғына булһа ла, ҡалдырып фронтҡа китеү теләге менән яна ине.

— Йә, Яуымбаев, ни йомош? Тиҙерәк һөйлә лә, мин бик ашығам, — тине майор уға боролоп.

— Иптәш майор, бер нисә көн элек училищеның бөтөнләйе менән күтәрелеп фронтҡа китеүе тураһында ишеткәйнем. Шул хәбәр ысынмы? — тине. Уның үтенес менән төбәлгән баҙнатһыҙ битендә ҡыҙыллыҡ билдәләре күренде. Үҙ һорауынан үҙе уңайһыҙланып, ул аяҡтарын алмаштырып баҫты ла ҡулы менән атының морононан һыйпаған булды.

Майор, белмәмешкә һалышып, үткер күҙҙәренә һораулы һыҙаттар йүгертте лә, һорауға иғтибар итмәгән һымағыраҡ:

— Ҡалалағы бисәләр хәбәрен күберәк тыңла. Улар һиңә күккә тиклем ете саҡрым юл, ике яғы ла йәшел урман тип һөйләүҙәре лә мөмкин, — тине лә китә башланы. Уның яуабынан урынында ҡатып ҡалған Ғилмишәрифкә күҙ ҡырыйы менән генә хәйләкәр ҡараш атты ла урынынан ҡуҙғала башлаған майор: — А впрочем, «Баҙарҙа хәбәр таралһа, шул турала начальствоның приказын көт» тип бөйөк полководец Суворов белмәй генә әйтмәгәндер, — тип йылмайҙы. Майорҙың кинәйә менән әйтеп ҡуйыуы Ғилмишәрифтең быҫҡып яна башлаған һуғышҡа китеү теләге менән талпынған йөрәгенә яңынан ялҡын өҫтәне.

Ғилмишәриф бөгөн ауылдан хат алды. Адресын алтынсы класта уҡып йөрөгән күрше малайы, хатын ҡыҙы, быйыл дүртенсе синыфҡа барырға тейеш Миңленуры, яҙған. Эстәлегенә ҡарағанда, хатҡа яҙылған һүҙҙәрҙе әсәһе Райхана әйтеп торған булырға тейеш. «Иртәнге иҫкән елдәр аша Урал тауындай ялҡынлы сәләм ебәргәндән һуң, хеҙмәтеңдә уңыштар теләйбеҙ. Немецтарҙы ҡырып бөтөрөп, һау-сәләмәт Тыуған илгә кире әйләнеп ҡайт, атай», — тиелгән. Күрше-күләндән сурытып-сурытып сәләм теҙгәндән һуң ауыл хәлдәрен яҙған. «Үрге ос Көшөл Фәтхетдиндең өлкән улы Ғәлләметдин аяғынан ранин булып ҡайтып төштө. Ғатау апаның[1] командир малайҙары башынан ранин булып Мәғниттә гүспиталдә ята. Зәлифә инәйем эргәһенә барып килде, ордины ла бар, ти. Һинең менән әрмиәгә ҡуша киткән Мәте Заһретдин апаның командирҙарынан ташҡа баҫылған кантур ҡағыҙы килде. Өс немецты ҡырып, аҙаҡтан үҙе лә үлгән, үҙе үлһә лә батырлығы өсөн ордин бирәсәктәр, ти».

Ошо урынға еткәс, Ғилмишәриф ҡапыл күңеле болоҡһоп, хат уҡыуҙан туҡтаны. Уның күҙ алдына ике ай тулыр-тулмаҫ алда моңһоу ғына ҡулын болғап, хушлашып киткән ауылдашы Заһретдин килеп баҫты. Шул күрешеү

---

[1]Беҙҙең яҡтарҙа үҙ атаһынан өлкән ир кеше, яҡыны.

һуңғы булған икән. «Бында уның хеҙмәтен көлкөгә һабыштырырға маташһалар ҙа, фронтҡа барғас, бирешмәгән икән. Маладис, Зәһретдин ағай, батырлығың өсөн. Ялан ауылының ысын ҡаһарманы булып үлгәнһең. Етмәһә, орден да бирәләр ти бит әле. Бына шулай ул минең ауылдаштар», — тип Ғилмишәриф эстән генә хеҙмәттәше менән маһайып та алды. Шунан китап битенең юлы араһына яҙылған хатты яңынан ҡулына алды. «Һин киткәс, яҡын-тирәлә ямғыр яуманы. Үҙең сәсеп киткән ерҙән егерме биҙрә картуф алдыҡ. Әсәйем ала башмаҡты, ҡойроҡло өлкән һарыҡты хөкүмәт налогына тотондо. Әбдрафиҡ апам менән икәүләп Мәғнит баҙарына барып һатып ҡайттылар. Әсәйем миңә ҡышҡыға бишмәт, Фәрхинурға табанлы бәләкәй генә быйма, ҡустыма егеүле уйынсыҡ ат алып ҡайтҡан».

Ошо урынға еткәс, Ғилмишәриф хатынан тағы ла айырылды. Күҙ алдына «атай мине лә алып кит», тип муйынына аҫылынған тоҡос танаулы өс йәшлек «Ғилмишәрифтең донъяһын көтә торған малайы Ишмөхәмәт» килеп баҫты. Донъяла иң ҡәҙерле иркә йән эйәһе бар күңелен солғап алды, зиһенен айҡаны, һәр машинала атаһының ҡайтыуын тәҙрә төбөндә зарығып көтөп ултырған кинйәһен күкрәгенә ҡыҫып һөйгөһө, иркәләгеһе килде.

«Быйыл утын менән нишләрбеҙ инде? Ат менән тиҙәк баҫтырырға ирҙәр булманы. Ҡышҡыға бер ҡалып та тиҙәк һуға алманыҡ». Ғилмишәриф тағы ла тәрән ҡайғыға тарыны. Нишләргә? Бик тә булмаһа: «Һыуыҡ өйҙә ҡыш сыға алмаҫһығыҙ, ситәнде булһа ла һүтеп яғығыҙ», — тип яҙырға тура килә инде.

«Мәте Зәһретдин апамдың ҡатыны Маһитап инәй бөтә йортон, мөлкәтен һатып, үҙҙәренең яғына ҡайтып китте. Хәҙер уларҙың өйөндә МТС ауылдарҙан килгән ҡыҙҙарҙы трактырға уҡыта. «Тәки үҙ яғы тартҡан икән. Яландың үҙенә лә, халҡына ла ылыҡмай ғүмер итте шул», — тип уйлап алды Ғилмишәриф. Артабан: «Хатҡа Ишмөхәмәттең ҡулын төшөрөп ебәрәбеҙ», — тип уҡыны. Бармаҡтарын йәйеп, тарбайтып китап битенә төшөрөлгән ҡул һүрәтенә Ғилмишәриф көлөмһөрәп ҡарап ала. Хаттың иң аҙағында: «Һиңә әсәйем бик күп ялҡынлы сәләм әйтеп ҡала», — тип бөтөргәндәр.

Ауыл хәбәрҙәре Ғилмишәрифтең күңелен айҡап, тыныс ҡына йоҡларға бирмәй, төрлө уй-хәсрәткә дусар итә. Ул бөтә әҙәмдең һары ҡайғыһын, яңы ғына етеш донъяға күсеп кешеләрсә йәшәй башлаған үҙ ауылдарының пыран-заран килеүен әсенеп уйланы, фронтта баш һалған ауылдаш ирҙәренең донъяһы вайран булып ятып ҡалыуы өсөн ошо һуғышты башлаған ләғнәт Гитлерҙы ҡарғаны, кеше

иленә, кеше мөлкәтенә ҡанлы ҡулдарын һуҙған эйәрсәндәрен ҡәһәрләне.

Ғилмишәриф бөтә күңеле менән үҙен фронтта тоя. Майор Пустовой үҙенең сираттағы осрашыуында уға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла үҙенә саҡырҙы:

— Йә, иптәш Яуымбаев, хәҙер ниндәй күнекмәләр башҡараһың? Эштәр нисек бара? — тип серле генә һорап ҡуйҙы.

— Хәҙер мин, иптәш майор, ҡаршылыҡтар аша һикергәндә ат өҫтөндә дөрөҫ ултырыу алымдарын өйрәнәм: башта атлатып, унан юрттырып.

— Дөрөҫ. Хәҙер ни стадияһына еттең?

— Кәртәләр аша ат аяғын тейҙермәй юрттырып үттем дә кавалеттиға[1] күстем. Иртәгәнән башлап Әүхәҙиҙе һикертә башлайым. — Ғилмишәрифтең һүҙен иғтибар менән тыңлап торған майорҙың күҙе уйсанланып китте, йөҙөндә етди һыҙаттар сағылып ҡалды:

— Иптәш Яуымбаев, хеҙмәтең өсөн бик ҙур рәхмәт. Һинән бик шәп спортсмен сығаһы ине. Тренировкаларҙы ла бик яҡшы, аныҡ итеп башҡарырға өйрәнә башлағайның. Атың тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Спорт аты, килмәгән урыны юҡ. Ул ат менән мин үҙем дә эшләргә уйлағайным, тик һине йәлләнем, бигерәк тә һинең өсөн йәнен бирергә әҙер торған ошо хайуанды, — тип Әүхәҙигә йылы ҡараш ташланы.

— Иртәгәнән башлап, иптәш Яуымбаев, мин һине курсанттарҙың учебный эскадронына ебәрәм, Әүхәҙи ошонда спорт аттары менән тороп торор, ул бында ерегеп тә өлгөрҙө. Был ҙур эш. Иртәгәнән башлап — беренсе эскадронға! Дай пять! — тип майор Ғилмишәрифтең ҡулын һелкә-һелкә изге юл теләне. Был сентябрь айының сыуаҡ көндәре ине.

Курсанттар эскадронында ун биш көнләп тактик занятиелар, карабиндан атыу, һәр аллюрҙа ҡылыс менән сабыу алымдарын үтеп бөткәс, ямғырлы, бысраҡ, йонсоу төндәрҙең береһендә кавалерия училищеһында «тревога» иғлан иттеләр. Ғилмишәриф, ниҙер һиҙенеп, сыҙамай торған Әүхәҙиенә атланды. Хәҙер инде унан мәңгегә айырылмаҫ өсөн атланды. Училищеның бер нисә эскадронын эшелондарға тейәү башланды. Башта командованиены, штабты, шунан һуң ҡылыссы эскадрондарҙы, иң һуңынан хужалыҡ подразделениеһын тейәнеләр. Рядовой сабельниктарҙан торған Ғилмишәриф эскадроны беренсе эшелонға эләкте.

---

[1]Ике башы 20—35 сантиметр бейеклегендәге түмәрҙәргә һалынған кәртәләр аша һыбайлы ат йөрөтөү.

Н. ҡалаһынан төндә эшелондарға тейәлеп ултырып киткәндең ун бишенсе көнөндә эскадрондарҙы Саратов өлкәһенең көньяғында Сталинград өлкәһе менән сиктәш бәләкәй генә станцияның бер тупигына төшөрҙөләр. Оҙаҡ ҡына ваҡыт ябыҡ вагондарҙа килгән аттар ергә төшөү менән, бер-береһе менән иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан шикелле кешнәшеп, өр-яңынан танышып алдылар. Ҡайһы бер салтыраҡ аттар, эйәләренә баш бирмәй, теҙгендәренән тартылып ирекҡә талпынды, оҙон юл буйы ашаған ҡыу бесәндән ерекһеп, урман ситендә күпереп үҫкән ҡурпыға ынтылды.

Уларҙы алғы һыҙыҡҡа байтаҡ ер етмәҫтән бушатҡандар икән. Икенсе көнөнә килгән эскадрондарҙы яңынан комплектланып ятҡан кавалерия дивизияһына ҡуштылар. Дивизия һуңғы ҡаты бәрелештәрҙә ҡатнашып, кешеһен дә, атын да күп кенә юғалтҡан, ныҡ ҡына туҙынған булып сыҡты. Яңы килгәндәрҙең өр-яңы кейемдәрен, эйәрөпсөндәрен, менеп килгән аттарының тиреһе лә сыйылмағанын күреп, бындағылар:

— Былар әле өҫ-баштарын бысратырға өлгөрмәгән!

— Әйтерһең дә, фронтҡа ҡоҙа булып килгәндәр!

— Ничего, беҙ ҙә шулай туйға килгән шикелле килгәйнек тә ул... — тиештеләр.

Уларҙың барыһы ла тигәндәй ҡара янған. Күбеһенең яңаҡ һөйәктәре сусайып сыҡҡан, кейгән гимнастеркаларының һырты тирҙән тоҙланып ағарған, шинелдәре лә ныҡ ҡына нужаға тарыған, күбеһенең салғыйҙарында пуля тишеп үткән тамға, аяҡ кейемдәре лә төрлөсә. Тик ҡайһылары ғына итектәренә шпор таҡҡан. Яңы килгән кавалеристарҙың бөтәһенең дә йылтырап, сылтырап торған шпорҙарына ҡарап:

— Һеҙ нимә? Әллә немецты ялтыр шпорҙарығыҙ менән ҡурҡытырға самалап килдегеҙме? — тип мәрәкәләне. Ә һәр береһенең ҡабырғаһына тағылған, сыбыҡ киҫеүҙән артыҡ, бер ниндәй ҙә ысын эшкә ҡушылмаған ҡылыстарға ҡарап: — Был нәмәләрегеҙҙе һуғыш бөткәс уҙғарыла торған парадтарҙа тағырһығыҙ. Ә хәҙергә бына ошолайтып эйәрегеҙ аҫтына беркетеп, ныҡлап бәйләп ҡуйығыҙ, — тип оборона тотҡанда үҙҙәренең нисегерәк итеп ҡылыс йөрөтөүҙәрен күрһәттеләр. Ә бер, бөтөнләй кавалерисҡа оҡшамаған ҡарт, сығышы менән Башҡортостандан булырға кәрәк, Ғилмишәрифтең ялтырап торған ҡылысының эфесын һәрмәп ҡараны ла:

— Клинок на войне только один машаҡат, — тип ҡуйҙы.

— Һеҙ, моғайын, һуғышырға: «Шашки наголо, галопом марш!» — тип өйрәнгәнһегеҙҙер әле. Ул командаларҙы һуғышта бик тә һирәк ишетергә тура килә.

Килгәндең икенсе көнөндә яңыларҙы баштан-аяҡ ҡоралландырҙылар. Карабин, ҡылыс, ә бер нисә взводҡа хатта автомат та тараттылар. Яңы килгән ҡыҙылармеецтар аттар менән танышыу, частарға бүлеү эштәрен тамамлағас, төнгә ҡаршы юлға сыҡты.

— Беҙҙең хәрәкәтте бер кем дә белергә тейеш түгел! Бышҡыра, кешәннәй торған аттарығыҙға моронса кейҙерегеҙ. Котелоктарығыҙҙы дыңғырҙатмағыҙ, сепрәккә урағыҙ, күмәкләп бер эҙҙән генә йөрөгән йыртҡыс кеүек барығыҙ! — тип командирҙар әлдән-әле, бигерәк тә яңы килеүселәрҙе, киҫәтеп торҙо һәм, тура килгәндә, командирҙар атын да, кешеһен дә дошман менән һуғышыу оҫталығына өйрәтә барҙы. Ғилмишәриф ялан почтаһын алғас та, эйәр өҫтөнә мишендән йыртып алынған ҡағыҙ киҫәге һалып, йәшелерәк һыртына бер нисә һүҙҙән генә хат сыймаҡланы. Хаттың аҙағында ул «Ат уйната-уйната, фронтҡа яҡынлашып киләбеҙ», — тип яҙҙы. Ғилмишәрифтең менеп һуғышҡа китеп барған атының колхоздарының өйөр айғыры Әүхәҙи икәнен Ялан ауылында бер кем дә, шул иҫәптән, үҙ ҡатыны ла белмәй ине әле.

Алғы һыҙыҡҡа яҡынайыуҙы төҫмөрләүе ауыр түгел. Алыҫта гөрһөлдәгән орудие атыштары көслөрәк ишетелә башланы. Емерелгән ауылдар, күмергә әйләнгән йорттар, һерәйеп ултырып ҡалған яңғыҙ-ярым мейес мөрйәләре әле генә был ерҙәрҙе һуғыш уты ялмап үтеүен һөйләп тора. Сталинград тирәһендәге ҡомло ерҙәр көҙгө ямғырҙар арҡаһында әҙәм үтә алмаҫлыҡ һорғолт бутҡаға әйләнде. Боеприпастар, кейем-һалым, фураж тейәлгән автомашиналарға ғына түгел, егеүле аттарға ла алға барырлыҡ рәт ҡалманы. Юлда батып ултырған транспорттың иге-сиге юҡ.

Әмәлгә ярағандай, ноябрь баштарына һыуытып ебәрҙе, кисәге ҡуйы һорғолт батҡаҡ боҙға әйләнде. Уның ҡарауы, инде йоҡа ғына кейемле кавалеристар эйәр өҫтөндә шыҡырайып ҡатты, хәрәкәт туҡтаған урындарҙа юлда тирләп килгән аттар өшөүҙән ҡалтыранды. Ярай әле, бөтә частарҙа ла ер аҫтынан булһа ла табыусы, йүнсел, йоҡоһоҙ хужалыҡ кешеләре бар. Улар эскадрондарға һырма салбар, ҡыҫҡа тиртун, йылы эске кейем таратып бирҙе. Һәр кавалерист һуғыш алдынан тәғәйен ике боекомплект алды. Тик биш көнлөк аҙыҡ-түлек, фураж ғына, транспорт етешмәү сәбәпле, эскадрондарға килтереп еткерелмәне.

Фронтҡа яҡынайған һайын бесән наҡыҫланды, туҡтаған урында кавалеристар ҡулдарына көрәк тотоп, ундабында өлтәйеп ултырған тамырҙарҙы, туңған үләндәрҙе ҡаҙып килтереп аттары алдына һалды. Ғүмер баҡый бүтәгәле йәшел ҡылғанға, ә көҙөн өҙлөкһеҙ ямғырҙарҙа күтәрелеп ҡалған ҡурпыға күнеккән Әүхәҙи баштараҡ Ғилми-

шəриф алып ҡайтҡан ҡамышлы үлəнде мороно менəн генə этеп ҡуйһа, ə хəҙер бысраҡ тамырҙары менəн дə ашап ҡуя.

Эскадрон тимерселəре бөтə аттарҙың да дағаларын өр-яңынан тикшереп, ашалған, һынғандарын алмаштырып сыҡты. Һəр кем үҙен дə, атын да һөжүмгə əҙерлəне. Атлылар аттарын, эйəр аҫтындағы ҡаптал, үндектəрен, үҙ ҡорамалын тикшерҙе, майланы, туҙандан таҙартты. Ҡыҙылармеецтар үҙҙəре лə палатка ҡороп, бушаған тимер мискəнəн мейес эшлəп, мунса ойоштороп ебəрҙе. Эскадрондар һөжүм итеү урынына, яҙғы ташҡын йырып аҡҡан тəрəн генə үҙəккə, тупланды.

— Иртəгə таң менəн көслө артиллерия əҙерлеге башланасаҡ. Шунан һуң беҙҙəн алда фронт тотҡан уҡсы частар, дошмандың алғы һыҙығын өҙөп, танкылар өсөн юл əҙерлəйəсəк. Танкылар артынан дөйөм команда менəн шул йырындан дошман өҫтөнə ташланасаҡбыҙ, — тип кистəн командирҙар аңлатып сыҡты. Был 19 ноябргə ҡараған төн ине.

Ошо команданы көткəн шикелле, Əүхəҙи ҙə төндө бик тынысһыҙ үткəрҙе. Ятып та ҡараны, һуңғы төндə үҙ эргəһендəге бер соҡор төбөнə ултырып төнəп алырға маташҡан Ғилмишəрифте мороно менəн төртөп уятты ла уға оҙаҡ ҡына моңайып ҡарап торҙо. Ғилмишəриф өшөгəн ҡулдарын уның ялы төбөнə тығып йылытты, муйынынан һыйпаны.

Таң һарыһы беленгəс тə, артиллериянан атыу башланды: бөтə донъя ҡупты, ер ҡалтыранды. Сəғəттəн ашыу барған атыш ҡапыл ғына туҡтап ҡалды. Ракета һауаға сөйөлөү менəн таңды яңғыратып йəйəүлелəрҙең «Ура!» һөрəне яңғыраны. Бер аҙ ваҡыт үтеүгə, геүлəгəн танкылар тауышы ишетелде. «Былар инде йəйəүле ғəскəр дошман һыҙығын йырған араға ынтылды», — тип самаланы Ғилмишəриф. Эскадрон командирының «По коням!» — тигəн һөрəн һалыуын көтөп алыуы Ғилмишəрифкə мəңгелек булып тойолдо. Бына, ниһайəт, көҙрəтле команда яңғыраны. Ғүмерендə лə Хоҙайға ышанмаған Ғилмишəрифтең ауыҙынан: «Йə, Хоҙай, хəйерле сəғəттə», — тигəн һүҙ ысҡынды.

Эскадрон һөҙəк ярға күтəрелде лə бер нисə секунд туҡтап ҡалды. Янған танкыларын, емерелгəн автомашиналарын, тəгəрмəстəре менəн өҫкə ауған мотоциклдарын, ҡыйратылған пушка-минометтарын ҡалдырып, дошман фронт буйлап сигенə. Уларҙы борсаҡ һымаҡ һибелгəн беҙҙең пехота ҡыҫырыҡлай. Бына һөжүм итеүсе танкылар колоннаһы барып инде лə, ҡасып барған дошманды тапап, иҙеп үтə башланы.

Эскадронда фарман яңғыраны: «Шашки к бою! Галопом за мной в атаку, ма-а-рш!» Теҙелеп торған йөҙәрләгән һыбайлы хәрәкәткә килде. Кавалеристар теҙгендәрен ат ихтыярына биреп, шенкелдәрен ҡыҫты, турайған кәүҙәләрен алға иңкәйтте. Зыңлап тартылған ян керешенән осҡан ҡауырһынлы уҡ кеүек, атлылар алға, ҡасҡан дошман өҫтөнә ябырылды. Алда осраған ваҡ-төйәк соҡорҙар, емерелеп ятҡан тимер сыбыҡ кәртәләр аша һикереп, Әүхәҙи ҙә үҙ ауылдашын алға, дошман өҫтөнә алып сапты. Туң ерҙә сыр-сыу килеп, кешнәшеп сапҡан йөҙәрләгән аттарҙың тояҡ тауышы, ҡылыстарын уңлы-һуллы болғап алға ынтылған кавалеристарҙың берҙәм, көслө «Ура!» һөрәне ҡасып барған дошман йөрәгенә ҡурҡыныс һалды. Артына әйләнеп ҡарай-ҡарай ҡасып барған фашист пулянан, мина һәм снаряд ярсығынан үлергә риза, ләкин үткер ҡылыстан башы ҡыйылып, ергә тәгәрәүенән ҡото оса. Был имәнес үлем уларҙың теләһә ниндәй батырын да тетрәтә. Шуның өсөн дә улар бик берҙәм ҡаса. Ҡайһы берәүҙәре башын ҡылыстан һаҡлау өсөн винтовкаларын, автоматтарын баш осона арҡыры ҡуйған.

Әүхәҙи бөтә эскадрондың алдына килеп сыҡты. Бына Ғилмишәрифтең ҡылысынан ялтанған фашист аттың һул яғына сыҡты ла, төрлө яҡҡа тайпыла-тайпыла юрғалап, йүгереп ҡотолорға уйланы. Ә Ғилмишәриф уны сабыу урынына ҡылысының осо менән үңәсенән сәнсеп үтте. Фашист бер аҙ сайҡалып торҙо ла, бысылған ағас һымаҡ, ергә ауҙы. Әүхәҙи Ғилмишәрифте икенсе немец яғына алып сапты — ат та эште төшөндө, күрәһең. Шул саҡ эскадрон командирының бик етди командаһы яңғыраны:

— Дошман кавалерияһы флангынан атакалай!

Дошманды эҙәрләп алға ынтылған кавалеристар сафына засадала ултырған румын кавалерия часы килтереп бәрҙе. Хәҙер эскадрон аттарын һулға, бейек йәйпәк һыртлы, гел генә ерән аттарға атланып, көтмәгәндә һөжүм башлаған румын атлыларына ҡаршы китте. Муйынын һуҙып йән-фарман сапҡан Әүхәҙи ауыҙын асып иң алда сабып килгән дошман айғырына ташланды. Теште̣ре менән өҫтөндә румын офицеры ултырған айғырҙың муйынынан эләктереп алды ла үҙенән байтаҡ ауырыраҡ та, бейегерәк тә булған атты ергә ауҙарҙы. Йығылып төшкән румын офицерының пуляһы Ғилмишәрифтең һул аяғын яндырып үтте, әммә был һелтәп өлгөрҙө — румындың башы ла ергә тәгәрәне.

Ғилмишәрифтең итек ҡуңысы йылы ҡан менән тулды. Теҙгендең, ауыҙлыҡтың бушағанын һиҙеп, Әүхәҙи йөрөшөн әкренәйтте лә ергә шылып төшкән хужаһының башы осона туҡтаны. Бер ни ҙә аңламаған ат ерҙә ятҡан хужаһын мороно менән төрткөләне.

Ғилмишәриф сорлап аҡҡан ҡанын индивидуаль пакетындағы жгут менән бәйләп туҡтатты, яралы аяғын өҫкә күтәреп, ергә салҡан ятты. Күп тә үтмәй, санэскадрон кешеләре уны арбаға һалып, ялан госпиталенә оҙатты. Әүхәҙи повозка артынан үҙен ҡамап тоторға маташҡан кешеләрҙән ҡасып урманға инеп юғалды. Ғилмишәрифтең иптәштәре яҡын-тирәләге урманлыҡ, соҡор үҙәктәрҙе байҡап сыҡтылар ҙа, төңөләп, эскадронға кире ҡайттылар.

Әүхәҙи бер нисә көн урмандан хужаһын эҙләп йөрөгәндән һуң үҙҙәренең эскадронына килеп сыҡты. Хужаһынан башҡа бер кемгә лә баш бирмәйәсәген белгән кешеләр айғырҙы хужалыҡ взводына килтереп тапшырҙылар. Ул туҡмалһа туҡмалды, бында ла арҡаһына бер кемде лә атландырманы. Тик бер генә кеше, иллене ҡыуып барған, элекке колхоз конюхы Безбородов ҡына тел асҡысы таба алды арғымаҡҡа. Тик ул ғына муйынына ҡамыт һалды, уны егеп эскадронға боеприпас, аҙыҡ-түлек ташырға кереште. Шулай бер-береһенә өйрәнеп кенә барғанда, Әүхәҙиҙең янбашына снаряд ярсығы тейеп, тегене ветлазаретка оҙаттылар.

Һуғышта ҡаты яраланып ветлазаретҡа эләккән аттарҙы мөмкинлек булғанда халыҡ хужалығына тапшырыу тәртибе бар, инде бөтөнләй өмөтһөҙ булһа, «расход»ҡа ебәрәләр ҙә итен кухняға тапшыралар. Атлы ғәскәрҙә «йылҡы ите харам» тип йөҙөн сырып, танауын ситкә борған кеше юҡ, кавалеристарҙың барыһы ла ат итенең ҡәҙерен яҡшы белә. Иллә бер генә кавалерист та астан үлһә үлә, үҙе атланып йөрөгән атының итенә тотонмай.

## XII

Ғилмишәрифтең яраһы ауыр ғына булып сыҡты. Медсанэскадронда тәүге ярҙам күрһәттеләр ҙә тылға оҙаттылар. Башта һул аяғының тубыҡтан өҫ яғына гипс һалдылар. Бер нисә аҙна үтеүгә, гипс аҫты тәҡәт бирмәй ҡысыта башлағас, йоҡоһоҙлоҡтан һәм ҡысыныуҙан үлер сиккә еткән Ғилмишәриф ҡултыҡ таяғының осо менән гипсты төйгөләргә кереште. Военврач асыуланып алды ла, гипсты аҡтарып, мыжғып торған бөжәктәрҙән таҙартты. Яңынан гипс һалдылар. Ошонан һуң ғына әҙәм рәтле ашай, йоҡлай башланы Ғилмишәриф. Ләкин йоҡоһо бик самалы ғына булды. Егермеләп кеше ятҡан, стеналарына камфара, тағы әллә ниндәй дарыу һәм серегән еҫ тә һеңеп бөткән госпиталь бүлмәһендә тыныс йоҡо буламы? Кешеләрҙең һыҙланып ыңғырашыуы, төштәрендә һуғыш мөғжизәләрен күреп ҡысҡырып уяныуҙары бер кемгә лә вайымһыҙ йоҡлап ятырға ирек бирмәй.

Әүхәҙи хәтәр яҙмыштың икеһенән дә имен-аман ҡотолдо. Быға, беренсенән, һәр кеше һоҡланырлыҡ буйы-ҡиәфәте ярҙам итте, «расходка» ебәрергә командирҙың да ҡулы барманы. Икенсенән, Сталинград янындағы һуғыштарҙан һуң, уларҙың атлы часы май айына тиклем оборонала торҙо. Әүхәҙиҙе ветлазаретҡа ҡуйып дауаларға һәм аҙағына тиклем һауыҡтырырға булдылар. Янбаш һөйәге ныҡ ҡына онталған булыуына ҡарамаҫтан, ҡорһаҡ аҫтынан аҫылынған көйө дауаланылар. Икенсе ай тигәндә ат, әкренләп һылтыҡлай-һылтыҡлай, үҙенең бер нисә сантиметрға ҡыҫҡарып ҡалған аяғына баҫты. Яҙ ҡояшының үткер нурҙары һарай тәҙрәһендә уйнай башлағас, Әүхәҙиҙең йөрәге тыныслығын юғалтты. Ул тышҡа, ireккә ашҡынды, майҙансыҡта кордаға бәйләп йөрөтөлгән үҙ ҡәрҙәштәренә сәләм биреп сыңғыратып кешнәп тә алғыланы.

Ғилмишәриф иһә төндәр буйы Әүхәҙие менән һаташып сыҡты. Йә атына атланып, баш ҡоҫа башлаған арыш баҫыуына ыңғайлаған өйөрҙәрен ҡайырҙы, йә ҡулына тотҡан ҡылысын ҡояшта ялтлатып һелтәй-һелтәй айбарланып дошман өҫтөнә ябырылды. Башына ниндәй генә төш инмәһен, һәр ҡасан үҙен Әүхәҙи өҫтөндә күрҙе, унан башҡа күҙ алдына килтерә алманы. Өндә иһә иптәштәре эргәһенә, фронтҡа ашҡынды.

Таяҡтарын ташлап, үҙ аяҡтарына баҫҡас, уны комиссиянан үткәрҙеләр. Төрлөсә тикшереп ҡарағандан һуң, комиссия: «Рядовой Яуымбаев Ғилмишәриф һауыға башлаусылар батальонына оҙатылырға тейеш», — тигән һығымтаға килде. Ғилмишәриф улар ҡушҡан бөтә нәмәне лә эшләп күрһәтте, тик яралы аягын кәрәгенсә бөгөп сүкәйеп ултыра ғына алманы. Бөгөлмәгән ағас кеүек төҙ аяғын алға этәреп уң аяғында сүкәйҙе.

Госпиталь начальнигы ҡушылған күнекмәләрҙе тырышып башҡарған Ғилмишәрифтең арҡаһынан һөйөп:

— Бик сыҙамлы, беше кавалерист булып сыҡтың! Молодец! — тип комиссияның башҡа ағзаларына ҡарап алды. Улары ла госпиталь начальнигының һүҙен ҡеүәтләгәс, военврач: — Бер нисә көндән документтарығыҙҙы алырһығыҙ ҙа, в батальон выздоравливающих в добрый час! — тип һүҙен тамамланы.

— Һин нимә, иптәш Яуымбаев, бик күңелһеҙ? Әллә үҙеңдең һауығыуыңа риза түгелһеңме?

— Иптәш военврач, мин яңынан үҙ часыма, кавалерия полкына әләгергә теләйем.

— Шулаймы? — тине военврач көләмһерәп. — Барығыҙҙы ла үҙегеҙ теләгән часҡа ебәреп ятырға бында генеральный штаб түгел. Кемде ҡайҙа ебәрергә ҡушылған —

шунда ғына оҙатам! Һеҙ бөтә Рәсәй буйлап үҙ часығыҙҙы эҙләп йөрөй башлаһағыҙ, ни килеп сығыр? Һеҙҙе тиҙерәк фронтҡа оҙатырға кәрәк. Асылда бөтә частар ҙа бер үк. Шул уҡ совет кешеләре, шул уҡ һуғышсылар! — тип һүҙ бөткәнгә хисаплап китә лә башланы.

Ғилмишәриф шул уҡ төндә таныш сестра аша алдырған кейемен ашыҡ-бошоҡ кейҙе лә ике простыняны ялғап икенсе этаждан баҡсаға һикерҙе. Апрель айының таңына һоҡланып баҡсала бер аҙ хәл йыйғас, рәшәткә аша төшөп, көнбайышҡа ҡарап юл тотто. Ул фронтҡа ҡасты. Бындай хәлдәр бик йыш булмаһа ла, осраштырып торғас, икенсе көнөнә тауыш ҡуптарыусы артыҡ күренмәне. Тик госпиталь начальнигы ғына, яуап биреүҙән ҡурҡып, үҙ госпитале буйынса приказ сығарып элде: «Рядового Яуымбаева Гилмишарифа, долженствующего быть отправленным в батальон выздоравливающих, с 3 апреля 1943 года полагать дезертирующим из эвакогоспиталя нр. 1447 и снять из всех видов довольствия». Госпиталь буйынса Смерш вәкилен саҡырып, ҡулына үҙ приказының күсермәһен тотторҙо. «Рядовой Яуымбаев Гилмишариф дезертировал из эвакогоспиталя» тигән яҙыу илдең төрлө мөйөштәрендә урынлашҡан бөтә ғәскәрҙәр штабын урап сыҡты, ләкин кавалерист һыуға батҡан шикелле юғалды, табылманы.

Өс аҙнанан һуң төрлө ыҙалар сигеп, әллә нисә төрлө кордондар аша үтеп, үҙенең кавалерия полкын эҙләп йонсоуҙан үлер сиккә еткән Ғилмишәриф тураһында икенсе приказ сыҡты. «Рядового Яуымбаева Гилмишарифа полагать с 27 апреля 1943 г. прибывшим в часть по излечении после ранения из госпиталя, поставить на все виды довольствия и откомандировать в распоряжение командира первого эскадрона». Бер нисә аҙнанан һуң сафҡа теҙелгән атлы полк алдында Әүхәҙиенә атланған Ғилмишәрифкә «...ҡыйыу эш итеүе менән бөтә эскадронды үҙ артынан әйҙәгәне һәм ошо бойҙа ҙур батырлыҡ күрһәтеп, ике фашисты дөмөктөргәне өсөн» «Ҡыҙыл Йондоҙ» ордены тапшырҙылар.

Ошо хәлдәрҙән һуң кавалерия полкы июль аҙаҡтарына тиклем Ворошиловград ҡалаһынан төньяҡтараҡ оборона тотто ла, өҫтәлмә көс, ат һәм боеприпастар менән тулыландырылып, Көнбайышҡа ҡарап юл алды.

Ғилмишәриф менән Әүхәҙи 1943 йылдың сентябрь айында — Днепр, бер аҙҙан Буг йылғаһын кистеләр. 1945 йылда Польшаның Калиш ҡалаһы өсөн барған һуғыштарҙа Әүхәҙиҙең муйынынан дошман пуляһы тишеп үтте. Ғилмишәриф, Әүхәҙиен күсмә ветлазаретҡа тапшырып, атһыҙ ҡалған кавалеристарҙан төҙөлгән йәйәүле эскадрон составында көнбайышҡа юлын йәйәү дауам итте. Ул үҙ

атынан күҙ яҙманы, хәлен һораша-һораша йөрөнө. Яраһы тартылып, уңала башлағас та, полк ветлазарет начальнигының ай-байына ҡуймай, Әүхәҙиҙе эскадронға алып ҡайтты. Ялға туҡтаған саҡтарҙа ҡасып киткән фашист бюргерҙарының усадьбаһында атын яҡшылап тәрбиәләргә тырышты. Шулай ине лә бит, фашист минаһының ярсығы Ғилмишәрифте йәнә эҙләп тапты. Был юлы ярсыҡ уң аяғының сирағын ватып киткәйне. Үҙенең, бигерәк тә медицина эскадроны командирының үтенесен хисапҡа алып уны тылға оҙатмай, хәрәкәт итеүсе армияның ялан госпиталендә генә ҡалдырҙылар. Инде түшенә икенсе «Ҡыҙыл Йондоҙ» ордены һәм ике «Батырлыҡ өсөн» миҙалы таҡҡан коммунист Ғилмишәриф атлы полктың танылған боецына әйләнде. Бер нисә тиҫтә километрҙа фронттың алғы һыҙығына эйәрә килгән госпиталдә уны бер ваҡытта ла иғтибарһыҙ ҡалдырманылар. Ҡыҙыл Армия ойошторолоуының 27 йыллығына арнап үткәрелгән тантаналы йыйылышта Ғилмишәрифкә полк командованиеһының йылы ҡотлау хаты һәм күстәнәс килде. Иптәштәренең иғтибары яраһының тиҙ төҙәлеүенә ярҙам итте, күрәһең, апрель баштарында таяҡһыҙ йөрөй башланы. Йөрөй башланы ғына түгел, үҙ Әүхәҙиенә атланған Ғилмишәриф апрелдең аҙағында Берлиндан көньяҡ-көнбайышта ятҡан Бранденбург ҡалаһы өсөн барған һуғыштарҙа ҡатнашты. Был ике ауылдаш өсөн һуңғы алыш булды. Еңеү көнөн тантаналы үткәреп, һыбайлылар кубанкаларын ҡылыстары осона элеп һауаға сөйҙөләр ҙә бөтөнләйе менән ялға туҡтанылар.

Америка ғәскәрҙәрен беҙҙекеләрҙән бүлеп торған Эльба йылғаһының һул ярында атлы полк көҙгә саҡлы Совет командованиеһының оккупация йомоштарын үтәп торҙо.

Һуғыш бөткән йылдың көҙөндә Ғилмишәриф «строевой хеҙмәткә яраҡһыҙ» табылып демобилизацияға тәғәйенләнде. Илгә ҡайтыу хәбәре бер яғынан сикһеҙ ҡыуандырһа, икенсе яғынан хәсрәткә һалды: Әүхәҙиҙе ҡалдырып китһәһе килмәне уның. Ошо мәсьәлә буйынса таныштары, иптәштәре менән кәңәш итергә уйланы. Йәкшәмбе көн уңайы менән ҡыҙмаса булып алған егеттәр уның изге теләген көлкөгә күтәрҙе.

— Һин нимә, Геннадий!? (Уны эскадронда шулай атайҙар ине). Үҙ аҡылыңдамы, әллә әҙерәк яңылыша башланыңмы?

— Лучше һин ауылыңа мотоцикл менән ҡайтып төш. Ана ҡасҡан фашистарҙың мотоциклы өйөлөп ултыра бит.

Әүхәҙиҙе еҡеп йөк ташып алған Безбородов ҡарт уйға батҡан Ғилмишәриф ҡырына килеп ултырҙы ла:

— Билдәле, Авдей — ул Әүхәҙиҙе шулай атай ине —

яҡшы ат. Һис кенә лә һүҙ тейҙерерлек түгел. Ләкин ул өйгә ҡайтып етә алмай, астан үлеп ҡаласаҡ. Балаларыңа кейем-һалым һәм бисәңә кустәнәстәр алып ҡайтһаң яҡшы булмаҫмы? Уларҙың өҫтө-башы бик туҙғандыр бит, — тип кәңәш бирҙе.

Икенсе бер йәшерәге, эскадронда яңыраҡ ҡына хеҙмәт итә башлаған боец, килде лә:

— Һин бисәлеккә йәш немка алып ҡайт — бына исмаһам ауылыңды таң ҡалдырырһың! — тип һөйләнә генә башлағайны, тегене шундуҡ бөрөп алдылар.

Нисек кенә өгөтләһәләр ҙә, иптәштәре Ғилмишәрифте үҙ йүндәренә күндерә алманы. Тегене кейем-һалым да, мотоцикл да, башҡа донъя кәрәк-ярағы ла ҡыҙыҡһындырмай ине. Французларға ҡаршы һуғышҡан башҡорт полктары ла илдәренә аттарына атланып ҡайтып ингәндәр түгелме? Мин нисек өс йыл буйы үҙем менән бергә һуғыш уты аша сығып, тере ҡалған атымды ят кеше ҡулына ҡалдырып ҡайтып төшәйем? Ауылдаштар белеп ҡалһа, миңә ни әйтер? Юҡ, уны бында фашист илендә ҡалдырып китә алмайым. «Иртәгә үк барып полк командирынан һорайым. Рөхсәт итмәһә, унһыҙ барыбер бер ҡайҙа ла китмәйем», — тигән ҡарарға килде.

## XIII

Икенсе көнөнә иртән үк тороп, өҫтө-башын йүнәтеп, штабҡа, полк командирына китте. Яуымбаевты ишетеп кенә түгел, күреп тә яҡшы белгән командир яҡшы ҡабул итте. Ҙур тулҡынланыу менән йомошон һөйләп биргән Ғилмишәрифте үҙ эргәһенә ултыртты:

— Тыңла, иптәш Яуымбаев. Бына мин ҡыҙыл кавалерияла егерме биш йыл хеҙмәт иттем. Был осорҙа төрлө мөғжизәләрҙе күрергә тура килде. Ҡыҙылармеецтарҙың буйҙаҡ килеп, бисә алып ҡайтҡандарын да күргән бар, демобилизацияланған егеттәрҙең йәшереп, үҙҙәре менән шашка алып ҡайтып киткәндәрен беләм, әммә әллә ҡайҙа, йәһәннәм аҫтындағы ятҡан иленә, менеп йөрөгән атын биреп ҡайтарыуҙы һораған ҡыҙылармеецты үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр күрәм.

Ғилмишәрифтең ҡояшта янған киң яңаҡтарында көрән таптар күренә башлағас, полковник түҙмәне, аяҡ үрә баҫты ла, кабинетында арлы-бирле йөрөй башланы. Шунан Ғилмишәриф алдына баҫты ла яңынан өгөткә керешә.

— Понимаешь, Яуымбаев? Ат — кавалеристың боевой ҡоралы, тип яҙылған уставта. Һин шуны беләһеңдер бит?

— Беләм, бик яҡшы беләм, иптәш полковник.
— Белгәс һуң, нишләп минең йәнемде ҡыяһың?

Яуымбаев та үҙ урынынан тороп полковник алдына баҫты.

— Иптәш полковник! Минең менән өс йыл бергә һуғышып, ике тапҡыр яраланған ат — ул минең ауылдашым бит. Уны яҡты донъяға күҙен асҡан көнөнән бирле беләм. Ишеү мин ауылда ла уға атланып йөрөнөм. Шул үҙ ҡулым менән тәрбиәләп, үҙем өйрәтеп менгән атымды мин бында сит кеше ҡулына ни йөрәгем менән ҡалдырып китәйем? Ул бында барыбер һәләк буласаҡ, сөнки ул минән башҡа бер кемде лә яҡын ебәрмәй. — Ғилмишәрифтең тулҡынланып һөйләүенән әҙерәк икеләнә башлаған полковник яңынан үҙ урынына барып ултырҙы.

— Да... да, — тип һүҙҙы. — Беләм, уныһын да беләм.

Полк командирының Әүхәҙиҙе белеүенә Ғилмишәриф һис тә ғәжәпләнмәне, сөнки атты йәндәй күргән командир тураһында часта төрлө легендалар йөрөй:

«Беҙҙең полковниктың йөрәгендә өтөрлөк, сибәр военврач ҡатынды күҙенә лә элмәй үтеп китеүе мөмкин, ләкин күңеленә оҡшаған яҡшы ат эргәһендә туҡталмай ҡалмай».

— Бына нимә, иптәш Яуымбаев. Семь бед — один ответ. Атың менән Башҡортостаныңа ҡайтып китеү яуаплылыгын мин үҙ өҫтөмә алып, пожалуй, рөхсәт тә итермен. Быға һинең — полктың данлы һуғышсыһының хаҡы бар. Ләкин үҙ сигебеҙгә еткәнсе, һине үҙ атың менән бер ниндәй тимер юл ведомствоһы ла ҡабул итмәйәсәк. Аңланыңмы?

Полковниктың яҡшы һүҙенә ҡыуанған Ғилмишәриф:

— Аңланым, иптәш полковник, бик яҡшы аңланым. Мин Башҡортостанға һыбай ҙа ҡайтып етә алам! — тине.

— Бигерәк тә бер ҡатлы ғынаһың шул һин, иптәш Яуымбаев, — тип йылмайҙы полковник. — Һәр станцияла хәрби комендант, һәр бер туҡтаған ерҙә досмотр. Барып етә алмаҫһың. Юлда тоторҙар ҙа атыңды алып ҡалырҙар, үҙеңде лә һөйрәкләп йөрөтөүҙәре мөмкин. Ә һин ат һорағас, нишләп ҡылысын да һорамайһың? Ҡылысһыҙ... ниндәй кавалерист? Ҡылысһыҙ ат өҫтөндә йөрөү — ул ялан аяҡҡа шпор тағыу менән бәрәбәр! Шәхси ҡылысыңды ла тағып ҡайт. Беҙҙең полк өсөн ул ҙур юғалтыу түгел, ә һинең өсөн үҙең хеҙмәт иткән часың тураһында бер ҡиммәтле иҫтәлек булыр.

Күңеле тулған Ғилмишәрифтең полк командирын ҡосаҡлап алғыһы килде, ләкин «рәхмәт»тән башҡа бер ни әйтә алманы.

— Рәхмәт потом. — Берәр сәғәттән минең янға инеп сығырһың. Ә ҡылыс тураһында ҡайғырма, янындағы арматурный исемлеккә яҙып бирерҙәр.

Ғилмишәрифте теп-теүәл бер сәғәттән яңынан штабҡа саҡырттылар. Ул тағы командиры алдына килеп баҫты.

Полковник:

— Беҙҙең күрше атлы дивизия ике көндән һуң, Союзға ҡайтыу өсөн, эшелондарға тейәләсәк. Тейәлеү Преемниц вокзалында 22.00 башлана. Һинең турала мин шул дивизияның парадный[1] полк командиры, минең коллега, подполковник Фондеранцев менән һөйләшкәнмен. Һине полкка минең адъютант оҙата барыр, — тине лә өҫтәл аҫтындағы кнопкаһына баҫты. Ҡайыштарына ҡыны семәрләп эшләнгән ҡылыс элгән, өр-яңы кобуралы пистолет таҡҡан ҡалмыҡ егете лейтенант Балаев килеп инде. Полковник һөңгө кеүек турайып торған лейтенантҡа йөҙөнә яһалма етдилек һыҙаттары өҫтәп фарман бирҙе:

— Беҙҙең полктың геройын, иптәш Яуымбаевты, күрше дивизияның парадный полк командиры подполковник Фондеранцев йә уның урынбаҫары подполковник Довнар менән таныштыр. Эштең ниҙә икәнен улар белә. Ҡалғанын үҙҙәре һөйләшер. Теләһә ҡайҙа кереп оҙаҡлап йөрөмә, ҙур хужалыҡҡа[2] саҡыралар, тиҙҙән шунда китәбеҙ. Ә һин, ысын кавалерист, хуш! Полк байрағына тап төшөрмәй намыҫлы хеҙмәт итеүең, батыр һуғышыуың өсөн ҙур рәхмәт! Гражданкала ла тырыш, намыҫлы бул! Полкты онотма, уның менән бер ҡасан да бәйләнеште өҙмә! Бында һине юлға әҙерләү буйынса кәрәкле күрһәтмәләр бирелгән, — тине лә урынынан торҙо. Үҙенән ашараҡ ҡарап торған ҡыҙылармеец эргәһенә килеп, өс тапҡыр битенән үбеп алды: «Улым! Хуш бул, һин Ватан алдындағы үҙ бурысыңды тулыһынса үтәнең, выжданың таҙа, тағы ла бер рәхмәт!» — тип Ғилмишәрифтең ҡулын ҡыҫып һелкә-һелкә ишеккә тиклем оҙатып ҡуйҙы. Бындай уҡты көтмәгән һалдаттың күңеле йомшарҙы, күҙенә йәш килде.

Күрше полкка барып ҡасан, кемдәр менән ҡайтып китергә тейешлекте һәм башҡа шарттарҙы белгәндән һуң, Ғилмишәриф юлға әҙерләнә башланы. Яуымбаевтың үҙ аты менән илгә ҡайтып китеүен эскадрон белеп тә өлгөргән. Һәр кем кәңәше менән булһа ла ярҙам итергә ашыҡты. Уны өр-яңынан, энәнән-ептән кейендерҙеләр. Башына — яңы кубанка, аяғына шығырҙап торған итек бирҙеләр. Даны бөтә дивизияға таралған тегенсе старшина Гершко-

---

[1]Һәр кавалерия дивизияһында байрам тантаналарында ҡатнаша торған бер өлгөлө атлы полк була.

[2]Икенсе, үҙенән юғары соединение тигәнде аңлата.

вич, үҙе үлсәүҙәрен алып, бер көн эсендә Ғилмишәрифкә өр-яңы мундир текте. Яурынына атлылар кейә торған оҙон шинель урынына түш һәм салғыйҙары ҡара каракүль менән ҡайылған бекешаһын һалды. Обоз-әйбер складынан көндәлеккә кейеп йөрөү өсөн бер пар өр-яңы обмундирование бирелде. Үҙен кейендереп, күҙҙән үткәргәс, атына тотондолар. Һыртына нағышлап ҡыҙыл йондоҙ төшөрөлгән ҡара буҫтау серге[1] яптылар, өҫтөнә арчактары[2] көмөш ялатылған, үндек һәм капталдары өр-яңы булған казак эйәре һалдылар, нуҡта, йүгәнен, хатта уның ат ауыҙына кейҙерә торған мундштугын да алмаштырҙылар. Эскадрон ветеринары, аттың яраларын ҡарап, ветаптека әҙерләп бирҙе. Дағаларын алмаштырып, уны ғәҙәттәге сөйө менән түгел, ә шөрөп менән нығыттылар.

Ғилмишәрифте атҡа атланған көйө күргеләре килде. Уны фотоға төшөрҙөләр. Китәһе көнө йөҙөнә: «С этой боевой шашкой отважный кавалерист Яуымбаев с боями прошел от Сталинграда до Бранденбурга», — тип яҙылған, суҡлы ебәк эфеслы ялтлап торған өр-яңы ҡылыс тапшырҙылар. Эскадрон командиры, ҡыҫҡа ғына телмәр һөйләп, полк командованиеһының иҫтәлекле яҙыуын уҡығас, Ғилмишәрифтең тамам күңеле тулды, йәнә күҙенә йәш эркелде.

Ғилмишәриф ҡылысты ҡабул итеп алғас, башын эйеп, өс тапҡыр үпте лә дерелдәгән бармаҡтары менән ҡылысын биленә таҡты. Эскадрон командиры:

— Геннадий, бәлки, бер нисә һүҙ әйтерһең? — тип бышылданы. Башҡорт егетенең һүҙ әйтерлек хәле ҡалмағайны, өҙәңгеһендә баҫа биреп, тын алды ла:

— Барыһы өсөн дә рәхмәт һеҙгә, иптәштәр! — тип ҡысҡырҙы. Уның тыныс, әммә ысын йөрәгенән сыҡҡан тауышы иптәштәренең көслө «Ура!» оранына барып тоташты. Аҙаҡтан инде эскадрон командиры Ғилмишәрифкә полк командованиеһының күстәнәсен тапшырҙы.

«Вольно, разойдись!» командаһы яңғыраны. Кавалеристар быны уратып алды.

— Ну, малай, килештерәһең! Ат өҫтөндә ултырыуыңды ҡара!

— Генерал да и только!

— Ауыл бисәләренең йөрәген яндыраһың инде!

Кисен Ғилмишәрифтең башына уй төштө: «Туҡта әле, күктән төшкән шикелле, бөтөнләй хәбәр-хәтерһеҙ, ҡайтып төшөү килешмәҫ», — тип Германия иленән ҡатыны Райха-

---

[1]Ат япмаһы.

[2]Атлының эйәргә тотоноп менә торған алғы һәм артҡы алюмин ҡашағаһы.

нağа һуңғы хатын яҙып һалырға булды. «Йәш күкрәгенән урғылып, ҡайнарланып-парланып сыҡҡан ялҡынлы сәләмдәрен» ҡатыны, бала-сағаһына, туған-тыумасаһына бәйнә-бәйнә теҙеп сыҡты ла, аҙағына түбәндәге юлдарҙы өҫтәне:

«Ҡәҙерле йәмәғәтем Райхана! Мин ҡайта тип артыҡ өҙгөләнмә. Бары белән байрам. Тормошоғоҙҙо күрмәһәм дә ни рәүешле икәнен аңлап торам. Һиңә шул да мәғлүм булһын: ауылға бер үҙем генә ҡайтмайым. Өс йыл һуғыш утын бергә йотҡан, фронттың йәмғе әсе-сөсөһөн минең менән ҡуша татыған йән дуҫым менән ҡайтып төшәм. Хәҙергә уның кем икәнлеген яҙмайым, күҙмә-күҙ осрашып күргәс танышырһығыҙ. Һеҙҙе бер күреүгә зар-интизар булып, һағынып, ҡәләм тибрәтеүсе ирең һәм балалар атаһы Ғилмишәриф».

## XIV

Вагонға килеп ингәс тә, Ғилмишәрифтең дә, атының да өр-яңы өҫ-башына, ялтырап торған һары күндән эйәрөпсөнөнә ҡарап яңы юлдаштары гәжәпләнеп ҡуйҙы. Көнләшеү, ғәжәпләнеү тойғоһо һирпелгән ҡараштан уңайһыҙланыпмы, Ғилмишәриф ситкә боролдо: ят кавалеристарҙың береһе, күрәһең, абруйлыраҡы инде, дуэлгә сығырға йәтешләнгән шикелле, ҡылысының эфесына тотондо ла:

— Эй, земляк, нимә унда һыуыр һымаҡ яҡтыға сығырға ҡурҡып ултыраһың? Кил бында, тәмәкең бар икән, ҡунаҡ булырһың, — тип һөрәнләне.

Ә икенсеһе, күрәһең, иптәшенең өндәшеүен йомшағыраҡ тойоп, һүҙҙе етдиерәк һуҡмаҡҡа төшөрөргә уйланы.

— Ул һиңә ҡайҙан төшөп ҡалған земляк була һуң?

— Ә как же, беҙ уның менән Берлин юлында бер ҡояш йылыһында сылғау киптергәйнек, — тип телләште теге.

— О, улай булғас, ул һинең бик яҡын дуҫың икән.

— Ул ҡәҙәре яҡын булғас, бәлки, гражданкала икәү бер ҡыҙға йөрөгәнһегеҙҙер әле!

— Булғандыр, булғандыр, — Ғилмишәриф кеҫәһенән еҫе аңҡып торған еңел тәмәке сығарҙы ла тегеләр янына барып баҫты. Ят юлдаштары шунда уҡ ҡағыҙ йыртып, ҡулдарын уға һуҙҙы, хуш еҫле тәмәке һура-һура, бының кемлеген, ҡайһы полкта, нисек хеҙмәт итеүен төпсөнөргә тотондолар. Ғилмишәриф әллә ни асылып барманы. Өҫтән-мөҫтән генә таныштырҙы үҙе менән. Әммә күкрәгендәге ялтлап ҡалған орден, миҙалдарын күргәс, тегеләрҙең мөнәсәбәте бермә-бер үҙгәрҙе.

— Бына, исмаһам, был иптәш һуғышҡан тиһәң дә ярай! Үҙ атың менән ауылыңа ҡайтып төш әле! — тине.

— Ох, егеттәр, бөтә боевой снаряжение менән атыңа атланып ҡайтып төш тә, ҡылыс эфесының төбө менән Манькаының тәҙрәһен шаҡып тор ине, әй!

Преемництан ҡуҙғалып киткәндең егермеңсе көнөндә атлы ғәскәр тейәлгән эшелон, Ғилмишәрифте үҙ аты менән Ҡарталы станцияһында ҡалдырып, көнсығышҡа елде. Ҡола ялан уртаһында ултырған Ҡарталының тирәҫтән өргән һалҡын әсе еле йылы теплушкаға өйрәнеп өлгөргән ике юлсыны өтөп алды. Ғилмишәриф станция начальнигына инеп документтарын күрһәтергә, атына ла, үҙенә лә әүҡәт-фураж таптырырға, берәр йылы урын булмаҫмы, тип әйтергә уйлағайны. Ләкин асыҡ платформа тура килеүенән, юлда аты менән ҡуша туңып ҡуйыуынан ҡурҡып, артабан һыбай сығырға булды. Ауылдарға һуғыла-һуғыла, өсөнсө көнөндә Ялан ауылынан илле саҡрымда ятҡан үҙ станцияһына килеп етте.

Ғилмишәрифтең Германиянан «ауылға бер үҙем генә ҡайтмайым, өс йыл һуғыш утын бергә йотҡан, фронттың йәмғе әсе-сөсөһөн үҙем менән ҡуша татыған йән дуҫым менән ҡайтып төшәм», — тип яҙған һуңғы хаты йөҙ өйлө Ялан ауылының аҫтын-өҫкә килтерҙе. Иң башта ошо һүҙҙәр өс йыл буйы уны тилмереп көтөп ултырған Райханаһының йөрәген телгеләне. Күҙ йәштәрен тамыҙа-тамыҙа, хаттың шул урынын ҡат-ҡат уҡыны. Иҫ белә башлаған өлкән ҡыҙы Миңленур: «Әсәй, нишләп шул тиклем илайһың, атайым ҡайтам тип яҙған да инде», — тип тынысландырырға тырышты. Ә әсәһе уның һайын быуылып иланы.

Тынyслана төшкәс, кәштәлә ятҡан көҙгө киҫәген алып оҙаҡ ҡына үҙ-үҙенә текләп ултырҙы. Ҡайһы ерем килешмәне икән был аҙғын иргә? Әүрәп йөрөгән кешеһе ниндәй бисә икән? Мәрйәләр, ату кем булһын, Германиянан немец бисәһен тотторoп ҡайтармаҫтар бит инде?

Ғилмишәрифтең абайламайыраҡ яҙған һүҙҙәре хат эсендә генә ятып ҡалманы, күрше-күлән ҡолағына ла барып етте. Ялан ауылының бөтә өйҙәрен урап сыҡты. Ә оҙон ҡолаҡ ҡәйенеңгәһе:

— Ишеттегеҙме, Ғилмишәриф ҡәйнеш Германиянан килен алып ҡайтып килә, ти бит! Йәнтүрә ҡарттың әфисәр малайы бер кахул алып ҡайтҡайны, был унан да арттырып ебәрә икән, — тип сурытты. Ҡалғандары тағы өҫтәне:

— Бына һиңә яр аҫтынан яу сыҡҡан! Һуғышҡа киткәндә бер шомбай ғына кеше ине, сит ерҙәрҙә йөрөп кеше лә йышылалыр, күрәһең.

— Балалары йәл бит әле. Береһенән-бере матур ғына үҫеп килгән өс балаһы бар.

Көнсөләрәктәре:

— Әйҙә, беҙ генә страдать итмәйек әле, иренә арҡаланып күп ултырҙы! Беҙ күргәнде Райхана ла татыһын, — тине.

Ә ҡайһы бер әсе теллерәктәре:

— Китсе, китсе, әҙәм страмы! Ғүмер баҡый ирһеҙ ултырһам да, шул көтөүсене ҡосаҡлап ятаһым юҡ! Уға барған кешеһен дә әйтер инем инде, — тип ебәрҙе.

## XV

Ошо мәлдә Ғилмишәриф, ауылға ла еттем тип, үҙен һәм атын һуңғы тапҡыр тәртипкә килтереп, Ҡыҙыл йылғаһына терәлеп тигәндәй ятҡан текә ҡабаҡ өҫтөндә һыбай тора ине. Ул күҙҙәрен тыуған ауылы тирәһендәге таныш яландарға текәлгән армыт-армыт булып төньяҡтан көнсығышҡа һуҙылған күк Ирәндек һырттарын, Йәнгүҙәй, Күсем таштарын күргәс, һуғыш йылдарында үҙ юлдашы булған берҙән-бер көйөн һуҙып ебәрҙе.

*Алыҫтарҙан күгәреп әй күренгән*
*Болот микән, әллә тау микән?*
*Минең генә ғәзиз туғандарым*
*Ошо донъяларҙа бар микән?*

Ирәндектең урта һыртынан һулдараҡ Билән тауҙы күргәс, Заһретдинды иҫенә төшөрөп кубанкаһын систе, оҙаҡ ҡына шул түбәгә ҡарап торҙо. «Ошо түбәнең итәгендә өйкөм-өйкөм сауҡалыҡтар араһында ултырған таҡтөйөндә алтын ҡабул итә торғайны бит Заһретдин ағай. Хәҙер алтыны ла, үҙе лә юҡ. Ҡуян-Сағыл түбәһендә әллә ҡайҙарҙан күренеп ултырған өс тағанлы тимер маяҡ та юҡ. Кемгә хәжәт булды икән? Әмин ҡыуағының кәртәһен дә емереп ташлағандар. Ә түбәнендәге ҡыуағының эҙе лә ҡалмаған. Өс тирәктең береһе генә тороп ҡалған. Ҡырҡып яҡҡандарҙыр инде. Ҡыҙыл йылғаһы йырындары буйындағы таллыҡтар ҡайҙа? Бомба төшмәһә лә, снаряд, миналар шартламаһа ла һуғыш шауҡымы бында ла килеп еткән, уның афәт еле минең тыуған яҡты ла ялмап үткән икән. Тик бына бер Салғыя ташы ғына киткәндә нисек ҡалһа шулай ултыра. Хатта ул да тәпәшәйеп, ергә һеңгән шикелле.

Ҡапыл текә ҡабаҡ аҫтында, тигеҙ табаға һибелгән борсаҡ шикелле йөрөп ятҡан аттар күренде. Арыу-талыуҙан

тик кенә торған Әүхәҙи бөтә кәүҙәһе менән һелкенде лә, башын күтәреп улар яғына боролдо. Шунан морон тиштәрен тырпайтып сыңратып кешнәп ебәрҙе. Айғырҙың көслө тауышы текә ҡабаҡ ташына бәрелде лә әллә ҡайҙарға барып һүнде. Сит илдәрҙә йөрөп ҡайтҡан ҡәрҙәшенең сәләмен алып бейәләр ҙә нескә генә кешнәп яуап бирҙе.

Хәҙер айғырҙы тотоп тороуы ҡыйын. Ғилмишәриф Әүхәҙиҙе Ҡыҙыл йылғаһы буйына борҙо. Эсһен әле шуның һыуын туйғансы, һағынғандыр. «Әйҙә, Днепр, Висла һәм Одерҙарҙа ла һуғарҙым мин һине, үҙебеҙҙең Ҡыҙылдыҡынан да татлыраҡ, шифалыраҡ ниндәй һыу булһын?» — тип һөйләнде.

Ана Ҡыҙылдың арғы ситендә бер ҡыҙ бала тулы биҙрәләрен ергә ҡуйған да, ике күҙен Ғилмишәриф яғына теклән, ҡатып ҡалған. Ҡарап торҙо-торҙо ла ике ҡулын ике янбашына һуҡты:

— Атаҡ, атаҡ, Ғилмишәриф ағай, һин түгелме һуң?!

Ғилмишәриф ҡыҙҙы таныманы, шулай ҙа:

— Өҫтөнә баҫтың! — тип һөрәнләне йылға аша. Ҡыҙ көйәнтәһен ырғытты ла тыҡрыҡтан ауылға йүгерҙе. Ихатаға етер-етмәҫтән тыны бөтөп:

— Райхана еңгә, һөйөнсө! Ғилмишәриф ағайым ҡайтып килә! — тип ҡысҡырҙы. Аш-һыу әҙерләп йөрөгән Райхана яулығын төҙәтә-төҙәтә, еүеш ҡулын итәгенә һөртә-һөртә, йүгереп урамға сыҡты:

— Ҡайҙа? Бер үҙе генәме? Янында бисә-фәлән юҡмы?

— Ниндәй бисә? Һыбай килә ята ла!

Ул да булмай артынан бер көтөү бала-саға эйәртеп һылтыҡлаған атына атланып Ғилмишәриф үҙе өй алдына килеп туҡтаны. Шул ыңғайҙан атынан һикереп төштө лә ни ҡылырға ла белмәй аптырап торған ҡатынын ҡосаҡланы:

— Райхана, илама, шатлан! Ҡайттым бит! — тип бышылданы. Шунан атаһы эргәһенә яҡын килергә баҙнат итмәй торған кинйә малайын күтәреп алды: — Үәт, минең донъя көтә торған малайым! Ҡайһылай үҫеп киткән! — Шунан бер атҡа, бер ҡылыслы кавалерисҡа ҡарап ҡатҡан ауылдаштары эргәһенә атланы. Барыһы менән дә ҡул бирешеп ихлас күрешеп сыҡты.

Ишек алдында кеше күбәйгәндән-күбәйә. Һуғышсының да хәлен һорашалар, хәтәр эйәр-өпсөн менән эйәрләнгән Әүхәҙиҙе лә тикшерәләр.

— Ҡарап-ҡарап торам да, ҡустым, менеп ҡайтҡан малың беҙҙең яҡтың йылҡыһына оҡшай түгелме? — тип һораны бер ҡарт.

— Насыръян ағай, үҙебеҙҙең өйөр айғыры Әүхәҙи ҙә

baһa! Танымайһыңмы ни? Һуғыш утын бергә үтеп, бына насип булғас, шуның менән ҡуша Яланға ҡайтып төштөк.

Ғилмишәрифтең яуабын ишеткәс, кешеләр бер аҙ телһеҙ ҡалды, ышанмағандай, йәнә атты уратып ҡарарға тотондолар. Шунан йәнә һораша башланылар, ғәжәпләнеүенән телдәрен шартлаттылар:

— Ҡара һин, әйтһәң, әҙәм ышанмаҫ! Кире әйләнеп ҡайтҡан тиһең, ә?!

— Әй, хайуан, ниҙәр генә күрмәне инде бының башы? Ауылды таныймы икән? Онотманымы икән?

— Ана, ҡара-ҡара, нисәмә еренән ранен булған меҫкенең.

— О, Ғилмишәриф ағайҙың ҡылысын ҡара!

Ғилмишәриф, хәл-әхүәл белешеп тын алғандай иткәс, ауылдаштарын өйөнә саҡырҙы.

— Әйҙә, ағай-эне, сәйгә рәхим итегеҙ. Артыҡ һыйхөрмәт юҡ та, барынса булыр, — тине, үҙе атын һарайға индереп бәйләне. Райхана ла, ян-яғына ҡарап алды ла:

— Эйе, эйе, шулай булмай ни! Әйҙәгеҙ, барығыҙ ҙа өйгә рәхим итегеҙ. Сәйем әҙер, — тип килгәндәрҙе өйөнә саҡырҙы. Шулай ҙа күстәнәс көткән бала-сағанан башҡаһы, әҙәп һаҡлап, өйгә инергә ашыҡманы.

— Ярар, ярар, ҡустым, алыҫ ерҙән юлда арып-талып килгәнһең. Әйҙә, ана хәҙергә бала-сағаң менән бул. Иншалла, насип булһа, әле бергә булырбыҙ. Имен-һау ҡайтып үҙеңде күргәс, беҙгә хәҙергә шуныһы ла еткән, — тине Насырйән ҡарт. Ғилмишәриф өйөнә инеп юғалғас та, ат янына йыйылған халыҡ тиҙ генә тарала һалманы: һаман көтмәгәндә килеп тыуған был мөғжизәгә шаңҡып тора бирҙе.

Өйҙә көлдөксәләге самауыры менән булашҡан Райхана улын тубығына алып ултырған иренә боролдо ла:

— Алып ҡайтып килгән йәндәй иптәшеңде әллә берәй стансыла аҙаштырып ҡалдырҙыңмы? — тип һорап ҡуйҙы. Үҙ хатаһын килеп төшкәс тә аңлап алған Ғилмишәриф ауыҙын йырып тәҙрә яғына ымланы.

— Ана бит, күрмәйһеңме ни? Һарай ситәнендә бәйле тора! Шул инде минең өс йыл буйы бергә йөрөгән йәндәй дуҫым, — тине. Ошо һүҙҙе ишетеү менән Райхана, ҡуҙһалғысын көлдөксәгә ырғытып, иренең муйынына килеп аҫылынды:

— Ай, минең бәгерем! Иптәшем менән ҡайтам, тип яҙған хатыңды уҡығас, йоҡоларҙан яҙғи булдым, хыяллыйға әйләнә яҙҙым бит. Хатта ғәрлегемдән нишләргә лә белмәнем, — тип һөйләнә-һөйләнә ирен үбергә тотондо. Ошо мәлдә ер йөҙөндә уларҙан да бәхетле бер кем юҡ ине.

* * *

Ғилмишәриф атына атланып колхоз идараһына китте. Һуғыштан ҡайтҡан һәр ауылдашы өсөн шатланып бөтә алмаған колхоз председателе Ҡәһәрмәнов, һалдат килеп ингәс тә, ҡоластарын йәйеп уға ынтылды:

— Үәт, исмаһам, һуғышсы, үәт, исмаһам, кәүәлерис! — Председатель һалдаттың затлы кейеменә ҡарап, устарын шапылдатып бер-береһенә һуғып алды ла телен шартлата бирҙе. — Был рәүешле ҡайтып төшөүеңде һис тә көтмәгәйнек. Ҡара һин, мынауы шпорҙарын, ҡылысын!.. Ҡайһылай үҙеңә килешеп тора бит әле! — Ҡәһәрмәнов ҡарт Ғилмишәрифтең ҡылысын самалап ҡараны. — Үҙе йәтеш кенә күренһә лә, һәлмәк кенә икән!

— Ҡәһәрмәнов ағай, ҡылыс ҡарамаҡҡа еңел тойолһа ла, һелтәү көсө ҡырҡ һигеҙ килоға, йәғни өс ботҡа бәрәбәр. Самалап ҡара, — тип көлөмһөрәне Ғилмишәриф.

— Әй, ҡустым, ҡустым, ҡайҙан килгән ти ул беҙгә ундай көс-гәйрәт? Бөтә булған ҡарыуҙы беҙ ошо «Ҡыҙыл ялан» колхозына һалдыҡ инде. Бигерәк тә ошо дүрт йыл ҡаҡшатты, — тип ул үҙ урынына ултырҙы ла ҡаты көрһөнөп ҡуйҙы. Бер аҙ ултыра торғас, етди һүҙгә күсте:

— Ҡустым, был ҡорамалыңды кәрәк урынға тапшырып, бер аҙ ял иткәс, колхоз эшен башларһың бит инде?

— Ҡәһәрмәнов ағай, ҡорал бер ҡайҙа ла тапшырылмай, миңә бүләк итеп, мәңгегә бирелгән. Документы бар, законный ҡағыҙ менән беркетелгән.

— Һәл-лә-лә!.. Улай ҙа була икән. Өйөмдә генә торасаҡ, тиһең, ә?

— Ҡәһәрмәнов ағай, мин армияға йәйәү алынып — колхозға бынамын тигән атҡа атланып ҡайттым...

Ҡарт председатель һаман һүҙҙең айышына төшөнә алмай ҡаңғыра:

— Ниндәй ат? Бер ҙә төшөнә алмай һандырап ултырам әле, — тине. Ғилмишәриф председателдең ҡултығынан тотоп, тәҙрә эргәһенә килтерҙе лә идара ҡоймаһында бәйле торған бурыл атҡа бармағы менән төртөп күрһәтте.

— Был ниндәй хайуан?

— Ул хайуан түгел, беҙҙең колхоздың өйөр айғыры.

— Китһәнә, ҡустым, былай ҙа ҡаңғырған башты бутама әле.

Ғилмишәриф баштан-аяҡ ат тарихын аңлатып биргәс, колхоз председателе урынынан тороп яңынан тәҙрәгә кил-

де. Ҡыуанысынан күҙенән ырғып киткән бер нисә бөртөк йәшен һөрттө.

— Юҡ, юҡ, ҡустым, былай ярамаҫ! Сабыр ит, әллә ҡайһы тарафтарҙан килгән үҙ атыбыҙ менән күрешмәһәк, бөтөнләй хилаф булыр, — тип ул йәһәт кенә кейенде лә ат эргәһенә сыҡты.

— Эй, хайуан, тыуған ауылыма, таныш өйөрөмә ҡайтып килдем тиһең инде, ә? — тип ат менән һөйләште лә, уға мөлдөрәп ҡараған бурылдың муйынынан шапылдатып һөйҙө.

Улар яңынан идараға инде. Ҡәһәрмәнов өҙөлөп ҡалған һүҙен дауам итте:

— Ҡустым, үҙеңә тейеш ашау-эсеүен бирербеҙ. Берәр ай ял итеп, ҡунаҡ булып алғас, колхоз эшенә сығырһың бит? — тип председатель ауылдашына һораулы ҡараш атты, сөнки күптән түгел ҡайтҡан бер-ике фронтовик еңел тормош эҙләп ауылды ташлап ситкә китеп барғайны.

— Ҡунаҡ ҡайғыһы юҡ, ағай. Иртәгә үк эшкә тәғәйенләгеҙ, — тип бекешаһының төймәләрен ысҡындырып, мундир кеҫәһенән портсигарына тығылды. Ҡапыл асылып киткән түшендәге наградаларын шәйләп, председатель, папиросын ҡабыҙа-ҡабыҙа, тағы урынынан торҙо.

— Ҡара, ҡара, ҡайһылай ҙа батыр һуғышҡанһың икән, ә! Ике «Ҡыҙыл Йондоҙ» ордены, биш-алты миҙал! Әле ауылға был тиклем түш тултырып ҡайтҡан батырҙы күргән юҡ ине. Прәмә атлы маршал һымаҡ ҙурлап ҡайтарғандар бит үҙеңде! Һүҙ юҡ, һүҙ юҡ. Бик ҙур афтарит менән ҡайтып төшкәнһең. Маладис!

Йүгереп сығып ауыл Советы председателен, парторгты саҡырып индерҙе, уларҙың да артынан эйәргән кешеләргә Ғилмишәрифтең бекешаһын килеп үк асты:

— Бына, күрегеҙ «Ҡыҙыл ялан» колхозының ҡаһарманын! Орден, миҙалдарын тотоп ҡарағыҙ! Бына, фашистарҙың башын ҡыйған уның ҡылысын күрегеҙ! — тип шашканы ҡынынан һурып өҫтәлгә һалды. Кемдер ҡылыс йөҙөндәге яҙыуҙы уҡып ишеттергәс, бөтә кеше уңайһыҙланыуынан нишләргә белмәй уртала баҫып торған Ғилмишәрифте, төрлө яҡҡа әйләндереп ҡарарға тотондо:

— Бына шулай һуғыша ул беҙҙекеләр, любой дошмандың аталарын таныта ул беҙҙең егеттәр! — тип Ҡәһәрмәнов, һуғыштан үҙе йөрөп ҡайтҡан шикелле, маҡтанып иҙән буйлап йөрөп алды.

Кәнсәгә йәнә халыҡ йыйылып китте. Йәнә һорашырға тотондолар. Шунан уйынлы-ысынлы ҡиәфәттә Ғилмишәрифкә эш һайлай башланылар. Яңы ғына армиянан ҡайт-

ҡан Бикбирҙин фамилиялы йәш егет, колхоз парторгы, шундай тәҡдим индерҙе:

— Өс көндән Октябрь байрамын үткәрәсәкбеҙ. Ғилмишәриф ағайҙы үҙе алып ҡайтҡан атына атландырып ауыл халҡы алдында бер нисә һүҙ әйтеүен һорарға кәрәк. Етмәһә, коммунист та булып ҡайтҡан. Әш мәсьәләһендә шуны әйтәм: беҙҙең КТФ мөдире Малыбаев ағай үлеп ҡалды. Бына беҙгә әҙер коневод. Унан да шәберәген эҙләп тораһы ла юҡ, — тип йәнәшендә ултырған Ғилмишәрифкә ымланы.

## XVI

Әүхәҙи үҙ хужаһы менән Октябрь байрамы демонстрацияһына сыға алманы. Һуғышта яралар алып, оҙаҡ юл үтеп йонсоған мал өс аяғына ғына баҫып тора башланы. Арт аяғына ныҡ көс төшөү сәбәпле, өс аяғында тороу ҙа бер ғазапҡа әйләнде, күрәһең. Тора-бара ат Ғилмишәрифте яҡкан көйөнсә генә ҡаршылай башланы. Йәшкелт күҙҙәрендәге нур көндән-көн һүнә барҙы. Ахырҙа, хайуанды ике яҫы ҡайыш менән түшәмгә тарттырып бәйләп ҡуйҙылар. Әүхәҙи барыбер ҙә мантый алманы, унын һаулығы көндән-көн насарайҙы. Ҡар төшөп, ҡыш һыуығы һарайға бәреп инә башлағас, хәле бөтөнләй мөшкөлләнде. Февраль аҙаҡтарына ул бөтөнләй ашауҙан да яҙҙы. Район ветлечебницаһынан килгән ветеринария врачы ауырлыҡ менән генә тын алып торған арыҡ атты төрлө яғынан тыңлап ҡараны ла:

— Ике яҡ үпкәһенә лә бик ҡаты һалҡын тейгән. Хәрәкәтһеҙ оҙаҡ тороу арҡаһында йөрәге лә насарайған. Алғы аяғының сираҡ һөйәге лә, онталған янбаш һөйәге лә төҙәлмәҫлек остит, йәғни һөйәк сире, менән ауырый башлаған, — тип һөйләне. — Был малҡайҙың ғүмере һанаулы ғына ҡалған. Әгәр итен һәм тиреһен файҙаланырға ниәтегеҙ булһа, һуйырға рөхсәт итеп китәм, — тине.

Ярһыған Ғилмишәриф тегене һарайҙан ҡыуып сығарҙы.

Яугир атты, ата-бабалар йолаһы буйынса, өҫтөнә ҡыҙыл йондоҙло серге ябып, һыртына үҙе менән ҡайтҡан эйәрҙе һалып, сағыл үҥерендә ҡаҙылған ҡәбергә аяғүрә баҫтырып күмделәр. Баш осона ҡыҙыл йондоҙ, аҫҡараҡ дағаһын һәм тимерлектә һуғып эшләнгән ҡылыс һәм мылтыҡ рәүешен, кавалеристарҙың эмблемаһын ҡаҡтылар. Ҙур шыма ташҡа сүкеп: «Бында Бөйөк Ватан һуғышының

яугиры, алған яралары һөҙөмтәһендә тыуған иленә ҡайтып үлгән Әүхәҙи исемле колхоз аты ерләнде. 1935 йылдың 25 апрелендә тыуған, 1946 йылдың 3 апрелендә вафат булған», — тип яҙып ҡуйҙылар.

Күҙ еткәс, Ғилмишәриф атының ҡәбере өҫтөнә ике йәнәш ҡайын ултыртты. Йыл һайын, 9 Майҙа, ҡулына ялан сәскәләре тотоп ейәндәре менән бергә үҙе ошо ҡәбергә килде.

...Һуңғы тапҡыр килгәндә сәстәре ағарған, кәүҙәгә ныҡ ҡуранысланған был яугир үҙе лә «өс аяҡ»та тора ине.

Еңеүҙең 50 йыллығы байрамына тиклем бер йыл ғына ҡалғайны.

*Хикәйәләр*

## ДАҺИ МАҢЛАЙЫ

Ошо даһи маңлайынан башланды ла инде был күптәнге ғибрәтле ҡисса. Юғарынан бөйөк шағир А. С. Пушкиндың үлеүенә 100 йыл тулыуға арнап сығарған дәфтәрҙең береһен дә ҡалдырмай йыйып алырға тигән ҡәтғи әмер килеп төштө. Йәнәһе лә ниндәйҙер яуыз дошман дәфтәр тышында сығанаҡ бармағына ҡашлы балдаҡ кейеп, уң ҡулы менән сикәһен терәп ултырған бөҙрә сәсле, атаҡлы шағир портретында СССР-ға ҡаршы уҫал һүҙ төшөргән. Уның ҡайһылыр бер өлөшөндә (ә ҡайһы икәнен белеү һис тә мөмкин түгел) «Бөтһөн социализм!» тигән яуыз дошман һүҙе яҙылған имеш. «Был фашистик Германия агентының эше», «Был беҙҙең арала әле тамыры ҡоромаған хас дошмандың ҡоротҡослоғо», «Арабыҙҙа оялаған яуыз дошманды йолҡоп ырғытайыҡ», тигән лозунгылар яңғыраны уҡыусыларҙың дәфтәрҙәрен йыйған мәлдә. Лупалар йәки ҙурайтып күрһәтә торған быялалар аша һәр дәфтәрҙе бөтә кластарҙа ла ентекләп тикшерҙеләр. Берәүҙәр «Долой» тигән һүҙҙең «Д» хәрефен тапты, ә инде «ҡурҡҡанға ҡуш күренә» тигәндәй, ярамһаҡ бөтөнләй ошо хәтәр һүҙҙең үҙен табырға тырышты һәм таптылар. Бер һүҙ менән әйткәндә, тик фәҡирлеккә генә бай заманда барлы-юҡлы аҡсаға алған ҡайһы бер биттәре яҙыла башлаған дәфтәрҙәрҙән ҡолаҡ ҡаҡтыҡ. Улар баш-тояғы менән ғәйеп булды. Башҡаса оло яфаға тарыған Пушкин портреты төшкән дәфтәрҙәр күреү, аҙаҡҡы тышында «О вещем Олеге» тигән шиғырын уҡыу беҙгә ҡабат насип булманы. Дөйөм фәҡирлек тупрағында «гөрләп сәскә атҡан» социализмға ҡаршы яуыз дошмандың мәкерле ударын кире ҡағып та өлгөрмәнек, бына мин үрҙә әйткән «Даһи маңлайы» кампанияһы тоҡанып китте. Ул саҡтарҙа бөтә нәмә лә «кампания» тип йөрөтөлә торғайны. Сәсеү — кампания, иген утау — кампания, заем тип халыҡтың барлы-юҡлы

аҡсаһын йыйыу, шулай уҡ кампания. Һарыҡ йөнө ҡырҡыу ҙа кампания. Ә налог йыйыу тураһында һөйләп тораһы ла юҡ, — таба алһаң аҡсаңды түлә, ә аҡсаң юҡ икән, кокардалы фуражка кейгән Уполминзаг вәкиле яңғыҙ мөгөҙөнән тотоп туҡал һыйырыңды ла алып сығып китә. Заманы шулай булды, теге «сәскә атҡан социализм»ды ошо рәүешлерәк төҙөнөк инде. Әммә һүҙ ул турала түгел.

Был ваҡиға оҙон тәнәфес ваҡытында булды. Шуныһын да әйтеп китергә кәрәк, беҙҙең класс ижтимағи хәле буйынса ике ҡатламдан тора: ҡорама юрған кеүек ямаулы ыштан-күлдәк кейгәндәре — ауылда социализмды ҡороп коммунизмға ҡарай ныҡлы аҙым атлаған колхоздың ялан аяҡ малайҙары, ә өҫтәренә шевиот костюм, сигелгән яғалы күлдәк, аяҡтарына сакауай табанлы ботинка кейгәндәре -- рудник, йәғни ҡала балалары, уларҙың «аңһыҙ атайҙары» ошо «ауыл социализм»ынан нишләптер һырт биреп ҡасып киткәндәр ҙә, ул ваҡыттағыса әйткәндә, ошо рудникка килеп оялағандар. Маҡсат бер — улар ҙа социализм ҡора, айырма шунда ғына — уларҙың тамаҡтары туҡ, өҫтәре бөтөн, эш хаҡы алалар. Ә беҙ — кругом шып-шыма һыуәлләди. Ә был хатта хәйерлерәк тә, сөнки ул заман өсөн ни тиклем ярлы булһаң, шул тиклем почетлыраҡ, сөнки ундай кеше «мин элекке батрак», ә хәҙер «ярлы» тип күкрәк һуға ала. Уның ҡарауы, быңдай кешенең һүҙе үтемле йыйылыштарҙа. Тырышып-тырмашып әҙәмсә донъя көтөргә ынтылған кеше — социализмдың дошманы, хосуси милек ҡоло, сәйәси аңы томаланған капитализм ҡалдығы.

Бына ошондай балаларҙан уҡмашҡан инде беҙҙең класс. Ләкин оҙон тәнәфестә ижтимағи һәм тәржемәүи хәлгә (биографияға) ҡарап тормайбыҙ. Шаярабыҙ, ике арандай тәҙрәнән ҡарап торған ҡояш көңләшерлек итеп зыҡ ҡубабыҙ. Һәр кем үҙ һөнәрен күрһәтә, тамаша ҡылыусылар күп. Бына тәбәнәк кенә, йыуан класс отличниғы Салауат Хисбуллин бер тубығын бөгөп өҫтәл өҫтөнә һалған да докладҡа керешкән:

— Иптәштәр! Германия тураһында һүҙҙе бөтөрөп, Японияға килгәндә, ул Ҡырым ярымутрауында урынлашҡан бәләкәй генә бер хөкүмәт. Унда йыл һайын ер тетрәүҙәр булып тора. Бына шуға күрә лә уның эшсе-крәҫтиәндәре ҡаты ергә, Уралға ынтылалар. Ҡаңғырмағыҙ әле, тыңлағыҙ. Хөббөниса еңгә, йоҡлама! Хәйернисә еңгә, балаңды тый, маҙаһыҙлай!

Ул шул заман драматургы яҙған пьесала һүрәтләнгән, ауылға халыҡ-ара доклад һөйләргә килгән лекторҙың һүҙҙәрен ҡабатлай. Ә танауына еҫ ингән олораҡ класташтар серле ҡаш атып, мөхәббәт нуры менән тулған мөләйем ҡараштары менән бер-береһен наҙлы иркәләй, пар күгәр-

сендәй гөрләшә. Улар класс ығы-зығыһына ҡушылмай, сөнки яңы сәскәгә үрелгән ҡайнар һөйөү хисен компанияла иғлан итмәйҙәр, ул аулаҡты хуш күрә. Мөхәббәт гыуаһһыҙ хасил була, аулаҡ-ауҡанда морон төртә.

Был мажараларға һис иғтибар итмәй кластағы иң фартауай егет Василий Вандин өр-яңы пинжәген яурынына һалған да йәнәһе, уны кейһәң, затлы кейемдең бәҫе китә, ҡара таҡтаға яҙып, бөтә егеттәрҙе ҡыҙҙар менән парлап сыға. «Салауат-Ғәйшә — мөхәббәт, Мөхәррәм-Зина — мөхәббәт», сират Валя менән Лоҡманға килеп етә. Валя ҡурсаҡтай биҙәкләп кейенгән, балериналарға тартым, серәкәй билле, нығыраҡ өрһәң осорға торған күбәләктәй, тел өҫтөнә һалып, тамсы һыуһыҙ йотоп ебәрерлек фәрештә. Ә Лоҡманы инде әле үҙ иңенә бер тапҡыр ҙа пинжәк һалмаған, унның ябыҡ янбашын ҡаплап торған ямауҙарҙан инәү һалынған салбар ҙа, ыштан да булып хеҙмәт иткән нәмә кейгән, ялан аяҡлы ауыл малайы. Фәрештә менән фәҡирҙең ҡасан тигеҙ булғаны бар. Бына шуға күрә лә Лоҡмандың сей елкәһенә тейеү өсөн, ул махсус рәүештә эре хәрефтәр менән «Валя-Лоҡман — ҡайнар һөйөү», тип таҡтаға аҡбур менән яҙып ҡуя. Класс уртаһында торған Лоҡмандың ғәрлегенән асыуы ҡабара, дерелдәгән йоҡа ирендәрен ҡымтып, ул ҡулына тотоп торған таҡта сепрәген бөтә көсөнә Вандинға ырғыта. Ләкин ҡәһәр һуҡҡыр сепрәк, Вандинға түгел, таҡта өҫтөндә текә яғалы хәрби френч кейеп, мәкерле күҙҙәре менән класс эшен даими күҙәтеп торған даһи Сталин портретына эләгә һәм унның бөтә донъя пролетариаты менән етәкселек иткән тәрән аҡыл һандығын — маңлайын ҡаплай. Быны күреп ҡалған бөтә класс «аһ» итә, һәммә балалар йөрәген ҡурҡыу хисе солғап ала. Бына-бына ниндәйҙер фажиғә килеп сығыу ҡурҡынысы күңелдәрҙе өшөтә. Бөтә класс маңлайы һәм бер күҙе сепрәк менән ҡапланған даһиға текәлеп, өнһөҙ ҡала. Коридорҙа ҡыңғырау шылтырай...

Етмәһә, еүеш сепрәк осонан бөтә донъяға яҡты нур сәсеп торған юлбашсының битен бысратып, аҡбур төҫө менән буръяҡланған тамсы тама. Ҡояшҡа тиң даһиҙың кер ҡунмаҫ мәрмәр йөҙөндә бысраҡ юлаҡтар. Был хәл аяҡ үрә ҡатып ҡалған балаларға зәңгәр күк йөҙөн кинәт кенә ҡара болот ҡаплап киткән төҫлө күренә.

Бына таушалған, күн мендәргә оҡшаған портфелен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, эре-эре атлап, телеграмм бағанаһы оҙонлоғо тарих уҡытыусыһы Вәлиханов килеп инде. Бисмилла урынына үҙ дәресен даһи исеме менән башлаған һәм тамамлаған был кешене класта бер кем дә яратмай, сөнки ул һәр бер ваҡиғаны, хатта коридорҙағы сүпте лә даһи исеме менән бәйләй.

Портфелен шапылдатып өҫтәлгә ташланы ла, ул баштарын түбән эйеп, шымып ҡалған балаларҙы төпкә батҡан күҙән күҙҙәре менән тишерҙәй итеп ҡарап сыҡты. Яурыны аша артҡа ҡарашын һирпеп таҡталағы дәрескә ҡағылышлы булмаған әхлаҡһыҙ һүҙҙәрҙе күреп, оҙонса, ҡаҡса йөҙөн һытты:

— Кем бөгөн дежур? — тип һораны һәм журнал битен аҡтарырға кереште. Лоҡмандың ҡуян ҡойроғондай тулаған йөрәге алҡымына килде, ямаулы күлдәк эсендәге бөтә ябыҡ тәне, тапма тотҡан кешенекеләй дерелдәй башланы.

— Мин, — тигән һүҙҙе Лоҡман кипкән ирендәре араһынан көскә һығып сығарҙы.

— Таҡтаны һөрт, — тигән уҡытыусының тауышын ҡолағы менән түгел, йөрәге менән ишетте лә, таҡта янына баҫып, еңенең осо менән Вандин яҙыуҙарын һөртөргә кереште. Таҡта эргәһендә аҡбур саңы күтәрелде.

Вәлиханов үҙ урынынан тороп, ҡапыл таҡтаға боролдо ла: «Ҡайҙа сепрәгең?» — тип һорарға ла өлгөрмәне, уның оҙон кәүҙәһе кинәт уртаға мурт итеп һынғандай булды. Ул үҙ урынына килеп ултырҙы ла аршин оҙонлоғо бармаҡтары менән битен ҡаплап: «Уф, даһи маңлайында бысраҡ сепрәк», — тип ыңғыраşты. Уның былай ҙа май күнәсеге кеүек оҙон бите аҫҡа тартылды, эйәге һалынып төштө. Тишеккә оҡшаған ике күҙе сырт йомолдо. «Ҡәбәхәттәр, йәш ҡороҡҡостар, кемегеҙҙең эше был?» — тип һыҡтайшыңшый кластан йүгереп сығып китте.

Күп тә үтмәй үҙе артынан ул саҡтағы ҡара төтөн булып ҡуйырған сәйәсәт магистраленән бик ситтә торған мәктәп директорын эйәртеп алып килде. Беренсе гильдия сауҙагәрҙәргә тартым, өҫтөнә жилетлы пинжәк кейгән түңәрәк ҡорһаҡлы директор математиканан һәм физиканан уҡыта ине. Революциянан алда классик гимназияның бер нисә баҫҡысын да эләктереп ҡалған шикелле. Бына улар икәүләп шаҡ ҡатып даһи портретына ҡарап тора. Береһенең битен оло хәсрәт, һары һыҙаттар ҡаплаған, ә икенсеһенең тулы шешмәкле битендә борсолоу эҫәре юҡ, имән өҫтәл тояҡтары кеүек аяҡтарын салышайтып баҫҡан да, тынып ҡалған, тик ҡулдарының ике бармағын жилетының ҡабырға кеҫәләренә тыҡҡан да, ҡалған итләс бармаҡтарын, фортепьяно телдәренә баҫҡан шикелле, түңкәрелгән ҡаҙанға оҡшаған ҡорһағында бейетә. Етмәһә, директор, сылбырлы сәғәтенең һауытын сылтыратып аса ла, ваҡытҡа ҡарап ала. Директорҙың вайымһыҙлығына шартларҙай булып, урынында тыпырсынып торған Вәлиханов:

— Бына шул, директор иптәш, мин һеҙгә еткерҙем, даһи маңлайына бысраҡ ағыҙып торған сепрәкте үҙегеҙ күрҙегеҙ. Былай яуыз ҡороҡҡослоҡ былай ғына ҡалырға

тейеш түгел, — тине. «Шулаймы, дөрөҫ әйтәмме?» тигәндәй, ул артына әйләнеп, класҡа төбәлде. Ләкин ул үҙ һүҙен хуплап, эйәк ҡағып ултырған бер кемде лә күрмәне.

Улар, шаулап нисек килеп ингән, шул рәүешле, бер-бер артлы класс бүлмәһенән сығып китте. Элгәрге һымаҡ, баш осонан хәүеф болоттары таралғас, класс башлыҡтары был юлы һөрән һалып ҡалҡып сыҡманы. Ваҡиғаның етди икәнлеге уларға ла барып етте, буғай, сөнки шымып ҡалдылар.

Бына тиҙҙән класта тәфтиш башланды. Тәфтиш теҙгенен үҙ ҡулына алып, ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла тартҡылап бөтә көсөнә «класта оялаған хас дошман»ды фаш итергә тырышҡан Вәлихановҡа баш ҡалҡытып быңдай «яуыз»дың исемен әйтеүсе бер бала ла табылманы. Башҡа саҡта бәләкәй генә низағтар арҡаһында ла шау килеп талашҡан, ә ҡайһы мәлдә мөхәббәттең сеймәлгән нескә ҡылдарын тағата алмай бер-береһе менән яғалашыу хәленә еткән уҡыусыларҙы ифрат та тәрән яуаплылыҡ тойғоһо бер епкә бәйләне — улар бер ауыҙҙан өндәшмәүҙе хуп күрҙе.

Уҡыусылар ауыҙынан бер һүҙ ҙә ишеттерә алмағас, тарихсы Вәлиханов тәфтишкә саҡырған бөтә уҡыусыларҙы ла кире үҙ артынан эйәртеп алып сығып китте. Ләкин күп тә үтмәй ул класҡа яңынан килеп инде. Бер аҙ Сталин портретына текәлеп торҙо ла үҙ ултырғысына баҫып, ҙур һаҡлыҡ менән, портрет бәйләнгән епте сисергә кереште. Балалар көткәнсә ул аҫылынып торған сепрәкте иҙәнгә ырғытманы, уны, киреһенсә, даһи маңлайына нығыраҡ йәбештереп, ике ҡулын алға һуҙған килеш, шул портретты уҡытыусылар бүлмәһенең өҫтәл башына терәп ҡуйҙы. Бер нисә минуттан иң өлкән 8-се класс уҡыусыларын уҡытыусылар бүлмәһенә берәм-берәм тәфтишкә өндәштеләр. Бында ла был яуаплы эште — «балалар араһындағы сәйәси диверсия эшен», — тарих уҡытыусыһы үҙ ҡулынан ысҡындырманы. Бөтәһенә лә шул уҡ бер һорау бирелде: «Был ҡороҡослоҡто яуыз ниәт менән кем эшләне?» Тәфтиштән үҙ класына кире әйләнеп ҡайтҡан, ҡобаралары осоп, ҙур бошонҡолоҡ хистәре ҡаплаған етди йөҙҙәренә һәм баш баҫып, бер нөктәгә теклән ултырыуҙарына ҡарағанда, уларҙың ошо ҡайғыға тарыуҙарын тойомлау ауыр түгел. Ысынлап та, 8-се класс бөгөн, көтмәгәндә, ҡырҡ ятып, ҡырҡ торғанда ла башҡа килтермәҫлек ауыр хәсрәткә тарыны. Ҡыр кәзәһе шикелле ғәмһеҙ һикерешеп уйнап йөрөгән балалар күңелендә юлбашсы исеме менән бәйле оло сәйәсәт яуаплылығы урын алды, сөнки ошо мәлдә ғәләм буйлап ғәйепһеҙ кешеләр башын ҡыйып йөрөгән ҡылыс йөҙө әҙерәк тупаҫлана төшһә лә, уның дәһшәтле саҡҡыларынан дөрләп янған тамуҡ уты әле бөтөнләй һүнмәгәйне. Ил өҫтөнә килгән ҡырғын дауам итә ине әле.

Иң аҙаҡтан уйынан бәлә сығарыусы класс дежурныйы Лоҡманды саҡырҙылар. Ул ишек асҡан мәлдә тарих уҡытыусыһы, иконостас алдындағы сиркәү батюшкаһы кеүек, ҡылған гәйептәре өсөн гәфү үтенгәндәй портрет алдында баҫып, тынып ҡалғайны. Өҫтәлдең ике башында ике кеше ултыра: уның береһе, беҙгә таныш, мәктәп директоры, ә инде икенсеһе, немец теле уҡытыусыһы, ниндәйҙер бер мәжлестә теле асылып китеп: «Ворошиловтың пинжәген һатып эскән Сталин», — тип ысҡындырғаны өсөн яуапҡа тарттырылып йөрөгән мәктәп шағиры Йәмил ине. Ул үткер күҙҙәре менән ишек асып ингән Лоҡманды ялан аяғынан ялан башына тиклем үлсәп сыҡты ла: «Эх, ҡустым, ҡустым», — тип ҡуйҙы. Уның был кинәйәле һүҙени аңлатҡанын Лоҡман, билдәле, төшөнә алманы, ә директор ағаһы иһә тулы битенә йәлләү йүгертеп: «Был эштә минең һис кенә лә гәйебем юҡ», тигәнде белдергәндәй һорғолт күҙҙәренән мөләйем, йылы ҡараш ташланы. Лоҡмандың туңып өлгөргән күңеленә йылы өргәндәй булды. Уның ҡарауы, Вәлиханов текә ҡабағында йөнтәйеп үҫкән ҡаштарын бергә төйнәп, ишек төбөндә ҡайғы-хәсрәт гәменә бирелеп торған малайға утлы ҡарашын һирпте. Был мәрхәмәтһеҙ ҡараштан ирей башлаған Лоҡман күңеле яңынан боҙға әйләнде.

— Йә, килдеңме? Киләсәкке халыҡ дошманы, көсөк, — тип ҡаршыланы уны тарихсы. — Һинең килеп йөрөүеңдең, юғиһә, хәжәте лә ҡалманы инде, сөнки һинең класташтарың был боҙоҡлоҡтоң башы һиндә икәнен бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙеләр инде, — тип йылмайҙы Вәлиханов. — Тик һинең үҙ ауыҙыңдан ишетке килгәйне, — тип өҫтәне уҡытыусы.

Был хәбәрҙе ишетеү менән нәфрәт менән тулған йөҙө һытылып директор үҙ аҫтындағы ултырғысты шығырлатып, урынында ҡуҙғалып ҡуйҙы. Ә Йәмил уҡытыусы һылтыҡ аяғын алға ташлап, бәләкәй генә бүлмәлә ситлеккә бикләнгән ҡырағай йәнлек кеүек, арлы-бирле йөрөп алды. Ә инде Лоҡмандың бөтә көсөнән: «Алдашаһың, һатлыҡ йән, ошаҡ тоҡсайы», — тип түбәһе менән түшәм терәп торған уҡытыусының йөҙөнә төкөргөһө килде. Ләкин үҙен бер аҙ ҡулға алды ла тарихсы талап иткән бөтә һорауҙарға ла тыныс ҡына яуап бирҙе. «Эйе, мин ташланым ул сепрәкте», — тине ул иң аҙаҡтан. Тик «таҡта сепрәген даһиға ниндәй уй менән ырғыттың? Әллә совет власына һинең берәй үсең бармы?» тигән һорауға ғына аныҡ яуап бирә алманы.

Ул көндө лә, иртәгәһенә лә Лоҡман үҙ ауылдаштарына, туғандары эргәһенә ҡайта алманы, сөнки уны мәктәптең һалҡын баҙына бикләп ултыртып ҡуйҙылар. Баҙ ҡапҡасын асҡас та ҡараңғы соҡорҙан Лоҡман битенә еүеш, серегән

еҫ бәрелде. Бындай язаны көтмәгән бәләкәй Лоҡман, ҡапыл артына әйләнеп, уҡытыусыһының итәгенә һырышты. «Ағай, мине унда бикләмәгеҙ, ҡурҡам» — тип ялбарҙы, йәшле күҙҙәре менән уҡытыусыға текәлеп уның бәгерен уятырға теләне, ләкин ниндәйҙер тупаҫ көс уны ауыҙы арандай асыҡ баҙ төбөнә осорҙо. Ул ҡысҡырырға ла өлгөрмәне, ниндәйҙер һаҫы еҫле елемгә оҡшаған бысраҡ өйөмгә инеп батты. Тик үҙ артынан шыҡылдап ҡапҡас ябылғанын, «Әйҙә, өйрәнә тор, эт көсөгө» тигән үҙ уҡытыусыһының тамаҡ төбөнән сыҡҡан тауышын ғына ишетте. Ҡурҡышынан тибеүҙән туҡтаған йөрәген ҡулы менән баҫып, Лоҡман байтаҡ ҡына хәрәкәтһеҙ ятты. Бер аҙҙан баҙ мөйөшөндә ҡыштырлаған тауыш ишетелде, ҡараңғыла энә күҙәүендәй генә ике ут уның ҡалтыранған йөрәгенә килеп ҡаҙалды. Унда ла, бында ла сыйылдаған нескә тауыштар ишетелде. Бысаҡ йөҙө ҡалынлығындай ғына ектән баҙ төбөн ҡояш нуры телгеләп үтте. Ләкин иреклектә шул тиклем ҡәҙерһеҙ, ә инде тотҡонлоҡта барлыҡ ниғмәттәргә биргеһеҙ ҡояш яҡтылығы шунда уҡ юҡ булды. «Был һуңғы эңер яҡтылығы булғандыр», — тип уйланы Лоҡман. Тирә-яғын һәрмәнә торғас ул был баҙҙа ҡасандыр картуф-кәбеҫтә һаҡланғанын тойомланы. Ҡайҙандыр яртыһы сереп, ылбырап бөткән бер нисә тоҡ тартып сығарҙы. Бөгөн ауыҙына тәғәм дә ҡапмағаны иҫенә төштө, тик нишләптер артыҡ ашағыһы килмәне, ләкин тамағы кибеп ныҡ сарсағайны. Әйтерһең дә, кемдер уның ауыҙына тоҙло, ваҡ ҡом тултырған, хатта яңаҡтарын ҡыбырлатҡан саҡта ул ҡомдоң шығырлауын да ишеткәндәй тойолдо Лоҡманға. «Ни өсөн сикә тамырҙары был тиклем дә һулҡылдай икән, баш сатнап уртаға ярылып килә лә баһа», — тип аптыраны йәш тотҡон. Ләкин ниндәйҙер шомло тауыштар, баҙ эсендә ҡыптырҙап әллә ниндәй йәнлектәрҙең ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла сыйылдап сабыуҙарынан тамам ҡото осҡан Лоҡманды йыртыҡ тоҡ аҫтында бөгәрләнеп ятырға мәжбүр итте. Үҙәгенә килеп тығылған ниндәйҙер бер төйөн кинәт кенә ярылды ла йомолған күҙҙәренән эсе йәш булып уның янған битенә тәгәрәне. Ул буҫығып, ҡурҡышынан да, ғәрлегенән дә бик оҙаҡ илап ятты. Башта иҙән өҫтөн шығырҙатып йөрөгән ауыр аҙымдар тауышы ла тынды. Бөтә донъяны һил һәм шомло ҡараңғылыҡ баҫты. Баҙ тулы ҡомаҡ, сысҡандар тауышын ишетеп, дер ҡалтырап ятҡан Лоҡман, йоҡлап китеүҙән ҡурҡып, нисек тә уяу булырға тырышты. Уның башынан ус төбөнә генә һыйырлыҡ бала сағы, ауыл клубында күрһәтелгән тауышһыҙ кино кадрҙары кеүек, бер-бер артлы теҙелеп үтте. Иҫендә ҡалған һәр бер ваҡиғаны ул бала бизмәненең мыҫҡалына һалып сама-

ларға, үлсәргә тырышты. Атаһы менән ҙур ҡалаға барып, ит һатҡан саҡта, ун стакан шәрбәтле һыу эсеп, юл буйы ҡоҫоп ҡайтыуын хәтерләне. Ошо ваҡиға уның әҙерәк һыуға сарсауын баҫҡандай итте. Тамағы асығыуҙан умыртҡа һөйәгенә йәбешкән ҡарынының өҙләкһеҙ быҒырлауы икенсе бер, ҡыҙыҡ та һәм ҡыҙғаныс та ваҡиғаны күҙ алдына баҫтырҙы. Ҡасандыр, әле Лоҡман уҡырға барыр алдынан, улар атаһы менән ҡайҙалыр ҡая ташлы, бөтә тирә-йүне шыр урман менән ҡапланған бер юлһыҙ төбәккә транса һәм тәгәрмәс туғындары эшләү өсөн ағас тейәргә барҙылар. Улар фатир төшкән кешеләр Лоҡман атаһының сыбыҡ осо ҡоҙа тейешле булып сыҡты. Киске тамаҡ мәлендә «бәләкәй ҡоҙа» Лоҡманды ла дөйөм табынға ултырттылар. Бына нәҡ ошо табында булды ла инде ул мәсхәрәле хәл. Көн буйы ас йөрөгән бала ағас табаҡ уртаһында өйөлөп туралған иттең иң ҙурына, иң татлыһына, һимеҙ һарыҡ һебәһенә ынтылды. Ҡалаҡ менән был ҡабырғаны үҙенә яҡынайтып алып килгән мәлдә генә мыйыҡтары өҫкә тырпайып торған хужа кеше:

— Был бәләкәй ҡоҙаның ҡалағы күҙле икән, табаҡтан ниндәй киҫәк эләктереп алырға икәнен күреп тора, — тип ҡысҡырып көлөүе булды, былай ҙа оло кешеләр араһында ҡыҫылып, баҙнатһыҙ ғына ултырған Лоҡмандың ҡалағы табаҡҡа төштө лә китте. Шулай итеп көнө буйы тәғәм ҡапмаған Лоҡман урмандан ас йөрөп ҡайтты. Был күңелһеҙ ваҡиға ла Лоҡмандың ас тамағын туйҙырманы, һебә итенең татлы тәмен тойоп, теле аҫтына йыйылған үтле һыуҙы ул көс-хәл менән йотоп ебәрҙе.

Төн буйы ҡараңғы түшәмгә ҡарап күҙ йоммай сыҡҡан Лоҡман, күрәһең, таң һарғайыуға ҡарай, талсығып, бер аҙ сырымға киткән. Ул башта үҙе уйлап, хәтер ебенә теҙгән буталсыҡ ваҡиғаларҙы яңынан төшөндә башынан үткәрҙе. «Һай, бәләкәй ҡоҙа, ит ашарға бик маһир икән», — тип теге тырпайған мыйыҡлы ҡоҙа Лоҡмандың башынан баҫып һебә һоғондорҙо. Шунан һуң үҙҙәренең ауыл клубында утыҙлы шәм менән яҡтыртылған шығырым залға ҡарап, ниндәйҙер доклад һөйләп торған Сталин эргәһенә килеп, ул күлдәге эсенә йәшергән пугачын сығарҙы ла уның тәс маңлайы уртаһына төҙәп атып та ебәрҙе. Трибуна артына йығылған даһиҙың бите буйлап ҡан аҡҡанын күреп, Лоҡман пугачын иҙәнгә ташланы ла, ҡаса алмай ҡатып ҡалды. Нишләптер ер һелкеткән көслө атыу тауышы яңынан ҡабатланды. Ҡурҡышынан йөрәге табанына төшкән Лоҡман рудникта иртәнге сәғәт алтыла тау тоҡомо шартлатҡан мәлдә һаташып ятҡан икән. «Тиҙҙән таң атыр, был баҙҙы барыбер асмай булмаҫ, тикшерерҙәр ҙә сығарырҙар», — тип малай таңғы өмөтөн яҡшыға юраны.

Бәлә сығарыусыны баҙға бикләп ҡуйғас та, Вәлиханов эштең яртыһын эшләнгәнгә хисаплап, дәррәү директор кабинетына барып инде. Әтелгән урындыҡҡа ултырып-нитеп тормай, туп-тура һөжүмгә күсте.

— Теге малайҙы кәбеҫтә баҙына бикләп ҡуйҙым. Ләкин әле был эштең башы ғына. Был ҡортоҡостар төйөнөн аҙағына тиклем тағатып бөтөрөү беҙҙең бурыс. Һеҙгә хәҙер үк НКВД-ға шылтыратып, следователь саҡырырға кәрәк. Бына мин һеҙгә, Мардан Марданович, шуның өсөн керҙем, — тип теҙҙе Вәлиханов.

«Ярар, бер аҙ шаулашып алырбыҙ ҙа, класс йыйылышы үткәреү менән ҡәнәғәтләнербеҙ, башҡаса был эште ҙурайтып маташмаҫбыҙ инде», — тип бөтөнләй тынысланған Мардан Ғәзимов, күҙлеген алып, ситкә ҡуйҙы ла, сыпыҡ күҙҙәрен сырт-сырт йомоп, тарихсыны тәүге күргәндәй оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы.

— Һуң, нишләп әле уны һин бикләп ҡуйҙың? Һинең ундай эшкә ни хаҡың бар? Бәлки, ул малай таң атҡансы аҫылынып үлеп тә ҡуйыр? — тип директор нисек кенә тыныс булырға тырышмаһын, ҡалтыранған тауыш менән тарихсы күңеленә шөбһә һалды.

Бындай урынлы һорауҙарҙан артына шөр ебәргән Вәлиханов, башта ауыҙын да, күҙҙәрен дә ҙур асып аҡайып торҙо ла, кинәт боролоп, топ-топ баҫып мәктәп баҙына йүгерҙе. Тупһаға еткәс, әҙерәк тороп тынын йыйҙы ла, былай ҙа еүешлектән бүртенеп, ҡалтайып бөткән иҙәндәрҙе шығырлатмаҫ өсөн, ойоҡсан, аҡрын ғына, бесәй кеүек баҫып, тәҙрәһе бер генә күҙле ярым ҡараңғы һалҡынса йортҡа инде һәм баҙ ауыҙына ҡолағын ҡуйып, тауыш тыңланы. Аҫтан, өҙөк-өҙөк һыҡтау тауышын ишетеп, яңынан соланға сыҡты. Лоҡмандың тауышы уҡытыусы ағаһының берәй бәлә-ҡаза килеп сыҡмағайы, тип дөпөлдәп типкән йөрәген бер аҙ тынысландыра төштө. Ул ышаныслы аҙымдар менән яңынан директор бүлмәһенә килеп инде.

— Давай, НКВД-ға шылтырат. Бындай мөһим эште йәшереп ҡалдырыу сәйәси һуҡырлыҡ тип атала, — тип ул яңынан директорға йәбеште.

Бөтә күңелен икеләнеү тойғоһо солғап алған директор, барлыҡ эске рухын усына төйнәп:

— Бәлки, шул көйөнсә генә бер юлға ҡалдырып торорбоҙ. Нисек әйтһәң дә был класта ике учком ағзаһы бар — Хисбуллин комитет рәйесе, был малай шул комитеттың сәркәтибе түгелме әле? Йыйылыш үткәреп һөйләшербеҙ ҙә, түңәрәкләрбеҙ был балалар шаярыуын, — тип директор эште аҡрынлап үҙ яйына һалмаҡ булды.

Мәктәп хужаһының яй һуҡмаҡҡа ылдым ғына төшөп барған был хәбәре Вәлихановтың йомро шәрифенә беҙ ме-

нән сәнскәндәй итте. Ул ҡапыл һиҫкәнеп, директорға балта һабы кеүек оҙон үңәсен борҙо.

— Һеҙ нәмә? Синфи дошмандарға ҡаршы көрәш көндән-көн ҡыҙған мәлдә был сәйәси енәйәтте йәшереп ҡалдырмаҡсыһығыҙмы? Һеҙҙең бындай позицияны уларға булышлыҡ итеү, тип аңларғамы? — тип Вәлиханов урынынан тороп уҡ китте. Бер аҙ бүлмә буйлап йөрөп алғас, «по крайней мере беспринципность... бесхребетность...» тип ауыҙ эсенән мығырҙаны. Директорҙың бик тиҙ ҡуҙғалырға уйламағанын күреп, ул стенаға беркетелгән, еҙ самауырҙай телефонға йәбеште. Уның шундай етди ҡыланыуы былай ҙа ике уртала ҡалған директорҙы телефонға үҙенә тотонорға мәжбүр итте. «Өлгөрөп ҡалырға кәрәк, юҡһа, былай ҙа гимназия буйынса эш йөрөткән НКВД Лоҡман менән ҡуша үҙеңде лә алып китеүе бар», — тип йөрәге ҡабынған мәктәп хужаһы Вәлихановты ситкә этте лә, киле төйгөсөндәй телефон трубкаһын ҡулына алды.

Телефон ҡолағын дығырҙатып бора-бора оҙаҡ маташҡандан һуң уны РОНО мөдире менән тоташтырҙылар. Мардан Ғәзимов уға ҡаға-һуға һәр һүҙе һайын тарихсыға ҡарай-ҡарай, хәлде һөйләп бирҙе.

— Йыйылышмы? Юҡ, булманы шул. Вәлиханов риза түгел. Тик НКВД-ға ғына, тип ныҡыша, — тип һүҙен тамамланы директор. Телефон трубкаһында РОНО мөдиренең «так... так... да... да...» тигән шөбһә ҡатыш икеләнеү ымлыҡтары ишетелде. Телефон трубкаһын элеп тә өлгөрмәне мөдир, алдында килбәтһеҙ ҡулдарына ҡайын суҡмар тотҡан, һөңгө кеүек оҙон, тарихсы Вәлихановтың шәүләһе пәйҙә булды. Үҙенә буйһонған кеше менән һөйләшкән саҡта ҡабара башлаған тәкәбберлек хисе, дауыл осорғандай, ҡайҙалыр юҡ булды. Был ҡурҡыныс шәүләнән мөдирҙең ҡорос ихтыяры ла мурт итеп урталай һынды — был факт ауырлығын үҙ өҫтөнә алырға уның да хәленән килмәне — НКВД-ға шылтыратты.

Ҡояш Салғыя ташына үҙенең иртәнге нурҙарын һирпкән мәлдә төн буйы килеп тиргә батырған атын НКВД кешеһе мәктәп ихатаһына килтереп туҡтатты. Уның артынса уҡ башына теүәтәй, кәзәки кейгән, билен йәшел билбау менән быуған ҡаҡса ғына йәтеш кәүҙәле бер ауыл кешеһе йылп итеп директор кабинетына инеп юғалды. Дәрестәр башланыр алдынан, ҡояш битенә сыҡҡан көнйылыҡҡыс шикелле, коридор һырып торған бала-саға, наганлы, аяғына краги ҡуңыслы ботинка кейгән НКВД кешеһен күреп, дауыл өргән ҡамғаҡтай, күҙ асып йомғансы берәмберәм юҡ булды. Бөтә мәктәпте шөбһәле тынлыҡ баҫты.

Мәктәп ҡабырғаһына төкөп эшләнгән тар ғына директор кабинетында ла шомло тынлыҡ урынлашты. Урт-

тары эскә кергән, ҡаҡса бите ҡараңғыла ятып, шытҡан картуф һабағы кеүек ағарған, ҡоралды кешенең араға килеп инеүе бөтә мәктәпте сығырынан сығарҙы. Уның ҡарауы, был «сәйәси эште» ҡулына торомбаш тотоп яндырып ебәргән Вәлиханов күңелдәре ирәбеләнеп, ете ҡат күк йөҙөнә менгәндәй булды. НКВД вәкиленә урын күрһәтте һәм үҙе уның эргәһенә сәнселде. «Йә, ниндәй бола сығарып ятаһығыҙ бында? Һөйләп бирегеҙ...» тигәнде аңлатып власть кешеһе йөнтәҫ ҡаштарын өлтәйтеп директорҙы уҫал ҡарашы менән өтөп алды. Быны йөрәге менән һиҙгән директор:

— Ы... ы... беләһегеҙме иптәш, күрәһегеҙме иптәш... — тип бер-ике һүҙ менән аңлата торған мәсьәләне теле осонда әүәләргә тотондо. Шуны ғына көтөп торған Вәлиханов урынынан һикереп тороп, дилбегәне үҙ ҡулына алды. Төрлө биҙәктәр менән сыбарлап, был сәйәси ҡоротҡослоҡтоң асылын һөйләп бирҙе.

— Ҡайҙа, килтерегеҙ әле, иптәш Сталин портретын, — тип бойорҙо вәкил.

Вәлиханов асҡан ишеген дә япмай уҡытыусылар бүлмәһенән әлеге лә баяғы портретты өҫтәл ҡырына килтереп терәне. Бүлмәгә Сталин үҙе килеп ингәндәй, бөтәһе лә берҙәм аяҡ үрә баҫты. НКВД вәкиленең минут һайын төрлө төҫкә кереп, секерәйеп торған күҙҙәренән ҡаҡса битенә йәш тәгәрәне. Ғилман ҡарт та бик нескә күңелле кеше булып сыҡты. Бөтә донъя пролетариатының остазы тураһында бәйеттәр сығарып, халыҡ араһында шуларҙы йырлап йөрөгән, колхоз активы һаналған кеше ине ул. Әле быйылғы район һабантуйында ғына Ленин бабай сығарған декреттары Сталинға ятып ҡалды шул, тигән үҙ бәйеттәрен «Бөйрәкәй» көйөнә һалып йырлағаны өсөн был колхозсыға һабантуй комиссияһы 3 метр аҡмитҡал «тауар» (материя) бүләк иткәйне. Әле бына бөгөн дә өҫтәлендәге кергә батҡан үңербаулы аҡ күлдәкте ҡатыны ошо аҡмитҡалдан тегеп кейҙергәйне. Шуға күрә район вәкиленең ҡайғыһын уртаҡлашып, балауыҙ һыҡмаға уның өсөн бөтә нигеҙлектәр ҙә бар ине. Ул ҡулына йомарлап тотҡан керле теүәтәйенең осо менән күҙенә йомарлап эркелгән йәшен һелкте. Ә Вәлихановтың ҡулындағы бөхтә итеп бөкләнгән ҡулъяулыҡ күптән еүешләнгәйне инде. Был кампанияла тик директорҙың ғына шешмәкле күҙҙәре ҡоро ине. Ул һис бошонмай һәйкәл кеүек ултырыуын дауам итте.

Сталин портретын Вәлиханов өҫтәл өҫтөнә терәп ултыртты. Юлбашсы маңлайының бер өлөшөн һәм уның күҙен ҡаплап торған ялбыр сепрәк шул көйөнсә ҡатып өлгөргәйне. Һул яҡ бите буйлап аҡҡан бысраҡ һыу һары эҙҙәр ҡалдырғайны. Власть вәкиле сумкаһынан ҡағыҙ

сығарып, протокол төҙөргә тотондо. Ә башта унын Сталин портреты икәнлеген тағы ла бер дөрөҫләргә тырышҡандай бер нисә ҡат урап сыҡты. Ҡулына тотоп ҡараны.

— Тәс маңлайына һуҡҡандар, бәдбәхеттәр! Дошман ҡалдыҡтары, — тип ҡаты һүгенде лә, вәкил үҙ урынына ултырып протокол яҙа башланы.

— Эйе, эйе, нәҡ маңлайына тейгән, — тип Вәлиханов уның һүҙен ҡабатлап, ҡайғыһынан ҡаты көрһөнөп ҡуйҙы.

Башта протоколға тарихсы һүҙе, һуңынан директор әйткәндәр теркәлде.

— Давай, килтерегеҙ әле теге эт ҡойҡаһын, — тип вәкил Вәлихановҡа ҡараны.

Шуны ғына көткәндәй, ул йүгереп сығып та китте. Лап-лоп йүгереп килеп, ул баҙ ҡапҡасын асты. Уны һаҫы серегән еҫ ҡаршы алды. Аҫта тере йән эйәһенең барлығы һиҙелмәгәс, уның саҡ торған йөрәге тағы ҡайҙалыр аҫҡа өҙөлөп төшөп киткәндәй булды.

— Эй, һин тереме, нишләп тауыш бирмәйһең? — тип ҡысҡырҙы бишкә бөгөлөп. Ҡапыл төшкән яҡтыға шешмәкләнеп ҡыҙарған күҙҙәрен ҡулы менән ҡаплап, тәне һыныҡҡан Лоҡман урынынан торҙо. Ләкин уның өҫкә күтәргән ҡулдары Вәлихановтың аҫҡа һонған ҡулдарын эләктерә алманы. Уйламай-нитмәй Вәлиханов тәрән баҙға үҙе һикереп төштө, өҫкә күтәреп Лоҡманды баҙҙан сығарҙы сығарыуын, ләкин тубығынан серек картуфҡа батып, соҡор эсендә үҙе тороп ҡалды. Ҡапыл уның башына: «Кешегә соҡор ҡаҙыма, юғиһә, үҙең төшөрһөң», тигән халыҡ әйтеме килде. Ул ҡулын берсә өҫкә һуҙып һикереп ҡараны, берсә оҙон аяҡтарын нимәгәлер терәп иҙән таҡтаһына тотонорға маташты, ләкин лапылдап бутҡа булып ятҡан серетмә өҫтөнә ауҙы. Эт ылҡаһы булып бысранған Вәлихановты баҫҡыс төшөрөп, өҫкә сығарҙылар.

Бер төн эсендә ҡайғы-хәсрәттән һәм ҡурҡыныслы мажаралырҙан төҫө ҡасҡан, бысраҡ, өҫтө ҡырмыҫҡа иләүенә батҡан Лоҡмандың тупһа аша эскә атлауы булды, уны көтөп ултырған ҡыҙыу ҡанлы атаһы кинәт урынынан тороп, бер нисә ҡат зыр әйләнде лә, иҫенә лә килмәгән малайын уңлы-һуллы сикәләргә тотондо.

— Яҡшынан яман тыуған, сусҡа, эт! Ана ни рәүешле итеп ҡуйғанһың Сталин иптәште, башың серегер, бына өйгә генә ҡайт әле, арҡа тиреңде һыҙырып аласаҡмын, — тип малайының үңәсенә йәбеште.

— Гражданин Ҡунаҡбаев, бында самосуд ойоштororға ярамай. Барыһы ла совет законы буйынса хәл ҡылынырға тейеш, — тип район вәкиле улар араһына төштө.

— Быңдай законһыҙлыҡҡа мин гыуаһ була алмайым, — тип Вәлиханов коридорға сығып ҡасты.

Тәфтиш башланыр алдынан Ғилман ҡарт: «Минең улым бик әҙәпле бала ул, етмәһә, комсомол ағзаһы, Сталин иптәштең портреты беҙҙең өйҙә лә тора. Ул бындай эшкә бара торған малай түгел», — тип яҡлашырға ла уйлағайны, ләкин был сетерекле эштең фажиғәле аҙағын күҙ алдына килтерҙе лә, туған улын власть вәкиле алдында туҡмап, үҙе ситтә боҫоп ятып ҡалыуҙы хуп күрҙе. Һәм уның был мәкерле уйы барып та сыҡты буғай, сөнки был эштә ата касафатының юҡлығы улар араһындағы мөнәсәбәттән ап-асыҡ күренде.

Ни тиклем генә ныҡып, ҡабат-ҡабат һорауҙар биреүгә ҡарамаҫтан, Лоҡман власть кешеһенә артыҡ бер ни ҙә әйтә алманы. «Үҙем ташланым, бер кем дә ҡотортманы», тиеүҙән башҡа уның ауыҙынан һүҙ сыҡманы. Тәфтишкә саҡырылған уның класташтары башта «күрмәнек, кем икәнен белмәйбеҙ»гә һылтанырға маташҡайны, ләкин Лоҡмандың «бушҡа тартҡылашмағыҙ, мин барыһын да нисек булған, шулай һөйләгәнмен» тип ҡырт киҫеүе класташтарын аптырашҡа ҡалдырҙы. Улар баштарын яурындарына йәшереп, берәм-берәм директор кабинетынан сығып, үҙ кластарында артабанғы яҙмыштарын көттө.

* * *

Ул саҡтағы бөтә тиҙлектән көсөргәнешле эшләп ил ялмап йөрөгән язалау машинаһы был эшкә лә үҙ ҡарарын сығарып, оҙаҡ көттөрмәй тәсдиҡ (раҫлау) итеп мөһөр баҫты.

Ҙур сәйәси хата эшләгәне, бөйөк Сталин исемен мәсхәрәләгәне өсөн ВЛКСМ ағзаһы Лоҡман Ҡунаҡбаевты комсомол сафынан сығарҙылар. Уның бәлиғ булмауын иҫәпкә алып, иректә ҡалдырырға хәл ҡылдылар. Йәйә эсенә элекке комсомол ағзаһы Л. Ҡунаҡбаев үҙ ғәйебен тулыһынса таныны, тип яҙып ҡуйҙылар.

Балалар араһында сәйәси һәм тәрбиәүи эштең йомшаҡ ҡуйылыуы һәм бөйөк Сталин менән бәйле киҫкен ваҡиғала сәйәси һуҡырлыҡ күрһәткәне өсөн М. М. Ғәзимовҡа сәйәси ышанмаусанлыҡ иғлан итергә, уны директорлыҡ вазифаһынан бушатып, ошо мәктәптә ябай уҡытыусы итеп ҡалдырырға, тигән район мәғариф бүлегенең бойороғо сыҡты.

Был сәйәси ғәйепте асыуҙа ҙур революцион һәм большевистик һиҙгерлек күрһәткәне өсөн тарих уҡытыусыһы В. Ғ. Вәлихановҡа район мәғариф бүлегенең рәхмәтен белдерергә һәм Ҡоруҙәк урта мәктәбе директоры итеп тәғәйенләргә, тип әйтелде был бойороҡтоң икенсе пунктында.

Күп тә үтмәй оҙон тәнәфес ваҡытында бөтә мәктәп балаларын һыҙыҡҡа теҙеп, ошо бойороҡто уҡып ишеттерҙеләр. Был ҡағыҙҙы еренә еткереп, ташҡа баҫҡан һымаҡ, уҡыу өсөн бөтә тырышлығын һалған тәбәнәк кенә уҡыу-уҡытыу мөдире эргәһендә, бейек ҡоймалай текә баҫып торған яңы директорҙың оҙон кәүҙәһе тағы ла өҫкә тартылғандай күренде. Уның ҡарауы, яңы мәктәп хужаһы алдында сафта өнһөҙ ҡатып ҡалған уҡыусы балалар бер аҙға сүгеп ҡалғандай, даһи маңлайына аңғармаҫтан, яңылыш ҡына килеп тейгән еүеш сепрәктең бысраҡ тамсылары ошо сафта торған һәр бер уҡыусының яҡты йөҙөнә мәңгелек ҡара тап булып тамғандай тойолдо.

Ошо линейканан һуң Вәлиханов 8-се класс бүлмәһенә юлбашсының икенсе портретын килтерҙе. Бик оҙаҡ ҡарап торғандан һуң уны юғарыраҡ урынға үҙ ҡулы менән элеп ҡуйҙы. Был юлыһы уның аҡыллы маңлайына таҡта сепрәге тейерлек түгел, сөнки даһи башына ярым хәрби фуражка кейеп төшкән портрет ине.

Кеше йөҙөнә сәсрәгән был бысраҡ тамсыларҙы ил өҫтөнә килгән дәһшәтле һуғыш та таҙарта алманы. Сәйәси йәһәттән хәүефле тамғаны йөрөткән, әле көс-гәйрәте урғылып-ташып тороуына ҡарамаҫтан, ир уртаһы М. Ғәзимовты хәрәкәт итеүсе армияға түгел, ә хеҙмәт армияһына оҙаттылар. 1942 йылдың йәйендә дошман беҙҙең Көньяҡ фронтты ҡыҫырыҡлап, Волгаға һөжүм башлағас, Урал заводтарының береһендә эшләп йөрөгән Мардан Мардановичты бер төркөм кешеләр менән фронтҡа, алғы һыҙыҡҡа ебәрҙеләр. Улар барып туҡтаған часта икенсе һанлы форма — исемлеккә ҡарап, уның юғары белемле математик икәнлеге асыҡланғас, артдивизион командалығы уны топографист-корректировщик итеп үҙенә алғайны. Ләкин өс-дүрт көндән уның артынса килеп төшкән контрразведка ҡағыҙы һалдат яҙмышын бөтөнләй икенсе яҡҡа бороп ебәрҙе. Уны Сталинград фронтында яңы ғына төҙөлә башлаған штрафбатальонга тәғәйенләнеләр. Ул тәүге һуғышта уҡ ил өсөн башын һалды.

«Халыҡ дошмандары»на ҡаршы көрәш тулҡынында өҫкә ҡалҡып сыҡҡан Вәлиханов һуғыш башланып киткәс: «Мин фәләнсә синфи дошманды органдар ҡулына тотоп бирҙем. Минең тылда ла кәрәгем тейеүе бар», — тип бронь талап итеп, күп кенә тупһаларҙы тапап ҡарағайны, ләкин уның үтенесенә ҡолаҡ һалыусы булманы — ҡулына повестка тотторҙолар. Ләкин ул, башҡа үҙ ауылдаштары кеүек, батырҙарса һуғышып тыуған илен кинәндермәне. Немецтар менән тәүге бәрелештә үк әсир төштө һәм шул китеүҙән кире әйләнеп ҡайтманы.

Был ҡара тамға фронтта йөрөгән Лоҡманды ла эҙләп тапты. 1943 йылдың йәйендә үҙ орудиеһы менән дошмандың бер нисә миномет расчетын юҡ иткәне өсөн уны «Ҡыҙыл Йондоҙ» ордены менән бүләкләнеләр. Электән дә баҫалҡы, ләкин һәр приказды урын-еренә еткереп үтәй торған был сержантка ғашиҡ булып йөрөгән партбюро секретары уны сираттағы һөжүм алдынан партияға инергә күндерҙе. Алғы һыҙыҡта ошо мәсьәләне ҡараған партия йыйылышында эш бөттө тигәндә генә бында ҡатнашҡан контрразведка уполномоченныйы үҙ планшетынан ус аяһындай ғына ҡағыҙ киҫәге сығарып уҡыны. Был ҡәһәрле ҡағыҙҙа түгелмәй-сәселмәй Лоҡмандың сәйәси хата өсөн ғәйепләнеп, комсомол сафынан сығарылыуы, бәлиғ булмау сәбәпле яуапҡа тарттырылмай ҡалыуы хаҡында яҙылғайны. Партия йыйылышы уны фирҡә сафына ағза итеп алыуға ҡаршы тауыш бирҙе. Ярай әле, уның бәхетенә «ул ниндәй сәйәси хата, һөйләп бирһен» тип коммунистар ныҡышып торманы, юғиһә, атакаға даһи исеме менән күтәрелгән һуғышсылар берәй уңайлы урында Лоҡманды атып китеүе лә мөмкин ине.

Шулай ҙа тыныс холоҡло Лоҡман үҙ асыуының ҡоһорон бер кемдән дә алырға теләмәне. Ил алдында үҙ бурыҫын намыҫ менән үтәне. Яңынан бер орден менән бүләкләнеп, һуғышты Кенигсбергта тамамланы, ләкин тыуған Башҡортостанына әйләнеп ҡайтманы — үҙ иптәштәре менән Украина яҡтарына сығып китте. Шунда үҙ бәхетен тапты — Настя исемле үҙе кеүек үк бик баҫалҡы, талымһыҙ, донъя көтөүгә тырыш украинкаға өйләнде. Күмер шахтаһында эшләп, беренсе исемлек менән льготалы пенсияға сыҡты. Ләкин иленән айырылып ҡалған Лоҡман тора-бара үҙенең башҡорт икәнен дә онотто, үҙ туғандары эргәһенә бик һирәк ҡайтты.

Һуңғы ҡайтыуы ла фажиғәле булды. Ауылында донъя ҡуйған бер туған ағаһын ерләргә тип ашығып ҡайтып килгән саҡта Лука Конакбиевты (ул һуңынан үҙен шулай йөрөттө), аҡсаһын талау ниәте менән, юлда таксистар үлтереп китте.

Шулай итеп, ҡасандыр уйламаҫтан ғына килеп сыҡҡан даһи исеме менән бәйле был ваҡиға кешеләр яҙмышын төрлөсә һындырып, фажиғәле нәтижәләр менән тамамланды.

# ЯУ ЯЛМАҒАН МӨХӘББӘТ

Илдә һуғыш бара. 1942 йылдың июль аҙаҡтары. ПО-2 самолеттарынан торған төнгө бомбардировщиктар полкын Сталинградтан йөҙ саҡрым төньяҡ-көнсығышҡа, Волганың һул яҡ ярында ятҡан Балыклей ауылына күсерҙеләр.

Был полк авиация училищеларын тамамлап сыҡҡан летчиктар, техниктар менән комплектланғайны.

Әлегә береһенең дә фашист менән күҙмә-күҙ осрашҡаны юҡ, барыһының дошманды туҡмауга ҡулдары ҡысып, дәрте урғылып тора.

Яңы килеүселәр — әле өҫтәрендәге осоусылар формаһы таушалып та өлгөрмәгән йәш кенә лейтенанттар, сержанттар һәм старшиналар араһында әллә нисә милләт кешеһе бар ине. Уларҙы бер оло маҡсат уҡмаштыра — тиҙерәк задание алып, дошман өҫтөнә бомбалар яуҙырырға.

Күңелсәк халыҡ йыйылған. Кистәрен шығырҙап торған портупея, билдәренә пистолетһыҙ ғына һары күн кобура таҡҡан йәш лейтенанттар Волга ярындағы баҡсаға тансаға йөрөй. Йөҙ саҡрымда барған ҡаты һуғышҡа бер кемдең дә иҫе китмәй, һуғыштан алда ауыл малайҙары тынлы оркестры уйнаган түңәрәк сәхнәлә яңғыҙ гармунға, иртәгә һуғышҡа инәсәк хәрби кешеләр, вальсҡа төшә, тангола өйөрөлә.

Бына бөгөн дә 1-се эскадрилья егеттәре һыланып-һыйпанып тансаға йыйынды.

Осоусылар бик дуҫ, берҙәм халыҡ. Улар гелән төркөм-төркөм булып бергә йөрөй. Былай күңеллерәк тә. Икенсе яғы ла бар — хәүефһеҙерәк тә. Йәшлек — йәшлек инде. Үҙ ҡыҙҙарын көнләшеп, бында элегерәк килгән пехотинецтар, артиллеристар, бигерәк тә Волга флотилияһы моряктары, яңғыҙ-ярым йөрөгән летчиктарҙың ҡабырғаларын һанап ҡайтарырға ла тартынмай.

Ҡырҡ кеше бер яры, ҡырын кеше бер яры тигәндәй, эскадрильяла иптәштәренә ылыҡмайыраҡ, өнһөҙ-һүҙһеҙ ситтәрәк йөрөгән бер егет бар. Фамилияһы — Сухорученко, исеме — Иван. Занятиелар бөткәс, егеттәр уны тегеләй-былай тарҡылап ҡарай, ләкин ул үҙенең диңгеҙ кеүек зәңгәр күҙҙәрен алыҫҡа төбәй ҙә «Юҡ, эшем бар», йә: «Баш ауыртыбыраҡ тора әле», ти ҙә быларҙан тиҙерәк һыҙыу яғын ҡарай. Ул палатка эргәһенә түңкәрелгән йәшник өҫтөнә барып ултыра. Матур ҡаҡса битенә моңһоу саҡкылар йүгертеп, пилоткаһы эсенә һыймай, ике сикәһенә өлтәйеп сығып торған еҙ сәсен һыйпай ҙа, башын бер яҡҡа ҡыйшайтып, тәрән уйға сума, шул ҡиәфәттә бик оҙаҡ ултыра.

Ә унының штурманы — сөм ҡара сәсле, ҡуйы ҡашлы, ҡарсыға танауы аҫтында бәләкәй генә мыйыҡ ҡалдырған әрмән егете Исоян командирының киреһе — ул бер минут та тик тора алмай, орсоҡ кеүек өйөрөлә, төрлө мәҙәктәр һөйләп, бер кемгә лә бошонорға ирек бирмәй. Тик ул үҙ командирының йөрәгенә генә һуҡмаҡ һала алмай ыҙалана. Ҡайһы саҡта эскадрилья егеттәре Исоянды төрлө яҡтан ҡыҫымға ла ала.

— Әйт әле, Исоян, һинең командирың ниңә һәр ваҡыт бойоҡ?

— Баш баҫып, һинең командирың һәр саҡ нимә уйлай?

— Әллә командирыңдың балтаһы һыуға төшкәнме?

Исоян үҙен уратып алған иптәштәренә мут ҡына ҡарай ҙа ҡара янған йоҙрогон ҡолағына терәй. Йәнәһе, ул ҡолағына ҡуйылған радиоалғыстан «яуап көтә». Шунан һуң ул ап-аҡ тештәрен күрһәтеп киң йылмая ла:

— Һеҙҙең Ҡара диңгеҙ шикелле тәрән һорауҙарығыҙға айырым-айырым яуап бирергәме? Әллә бер генә яуап та етәме? — тип үҙе һорау бирә.

— Әйҙә, нисек тә ярай! Тик дөрөҫ булһын.

Исоян уртағараҡ сығып, аяҡтарын айыра баҫа ла, һул ҡулын бөйөрөнә таянып, уң ҡулының һуҡ бармағын башы осона, зәңгәр күккә күтәрә.

— Беренсенән, әфәнделәр, һеҙ — буласаҡ Советтар Союзы Геройҙары! Һеҙ барығыҙ ҙа донъяға тыуып, яҡтыға тәү тапҡыр күҙегеҙҙе асҡанда баҡырып илағанһығыҙ, шулаймы?

— Шулай!

— Шулай булғас, дауамын тыңлағыҙ! Ә ул донъяға ҡысҡырып көлөп тыуған. Ул үҙенең беңзобагындағы көлөү запасын һеҙҙән бик күп алда тотоноп өлгөргән. Төшөндөгөҙмө, Нестеровтар? — Бөтәһе лә бер тауыштан:

— Төшөндөк, Исоян! — тип ҡысҡыра.

— Икенсенән, минең командир — киләсәктә һауа ыласыны булырға тейеш. — Исоян йәшник өҫтөндә моңайып ултырған Сухорученкоға ҡарап ҡуя. — Ул, эсе ғилем менән лыҡа тулы «йәшник» өҫтөндә осоп, Гитлер ояһын көлөн күккә осороп ҡайтырлыҡ яңы самолет хаҡында уйлап ултыра.

Исоян, шарҡылдап көлгән ҡайһы берәүҙәргә хәйләкәр генә бармаҡ янап алғас:

— Шауламағыҙ! Чапайға уйларға ҡамасаулайһығыҙ! — тип иҫкәртә.

— Исоян, өсөнсө һорауға яуап бирмәнең?

— Әле унының балтаһы һыуға төшмәгән. Ғөмүмән, унының бер нәмәһе лә һыуға төшмәгән. Бына дошмандың алғы

һыҙығын бомбаға тота башлағас, ул гитлерсылар өҫтөнә балта түгел, ә үлемесле бомба яуҙырасаҡ. Аңлашыламы?

— Аңлашыла!

Исоян мәрәкәсел иптәштәре ҡулсаһын йырып сыға ла командиры эргәһенә барып ултыра. Тиҙ генә һөйләшеп китә алмайҙар. «Әллә үҙе тураһында минең юҡ-бар һөйләгәнде яратманы микән?» Исоян командирына оҙаҡ текләп ултыра. Ләкин уның уйсан, хәрәкәтһеҙ йөҙөнән бер ни ҙә белерлек түгел. Ни хикмәт?

Был хикмәтте уның үҙенән башҡа бер кем дә белмәй. Башҡа егеттәр отбойҙан һуң баштары яҫтыҡҡа тейгәс тә йоҡоға китә. Ә Сухорученко өсөн төн бер оло ғазапҡа әйләнә. Ул тәүҙә төн ҡараңғылығын тишерҙәй булып ҡарап ята, ә унан инде, таң һарғая башлағас, бер аҙ ғына серем итеп ала. Шунан көндәгесә «Подъем!» яңғырай.

Уның ҡайғы-хәсрәте шунда: уларҙың полкы бомбаға тоторға тейешле дошмандың алғы һыҙығы Сталинградтан ун биш саҡрымға төньяҡтараҡ ятҡан тыуған төйәге Сиротинск ауылы аша үтә. Уйпатта ултырған ошо аулаҡ ауылда ул башлап тәпәй баҫҡан. Мәктәпте тамамлаған. Был ауылда уның ата-әсәһе, үҙенән кесе туғандары йәшәй. Сирень ҡыуаҡтары менән уратып алынған иң ситке йортта уны йоҡонан яҙҙырған иң ҡәҙерле йән эйәһе — Надя йәшәй. Дөрөҫөрәге йәшәй ине. Ул хәҙер ҡайҙа икән? Бына Сухорученконың мейеһен ниндәй һорауҙар ҡайната...

1941 йылдың июнь айында урта мәктәп тамамлауына аҙна ла үтмәне, ҡәһәрле һуғыш башланып китте. Кластан күп егеттәр авиация училищеһына китергә ғариза бирҙе. Билдәле, барыһы ла үҙ теләктәренә өлгәшә алманы, ҡайһы берәүҙәре аҙаҡтан танк училищеһына, ә икенселәре авиамеханиктар әҙерләй торған мәктәптәргә эләкте. Бер һүҙ менән әйткәндә, һуғыш уларҙы, борсаҡ һымаҡ, төрлөһөн төрлө яҡҡа сәсте. Ә Сухорученко үҙе тыуып үҫкән яҡтарға — һуғыштан алда атаһы менән емеш-еләк, ҡарбуз һатырға тип баҙарына килеп йөрөгән Балыклейға эләкте. Ә Надя үҙ класындағы бер төркөм ҡыҙҙар менән башҡа асҡа тәғәйенләнде.

«Беҙҙе Ворошиловград өлкәһенә радистар мәктәбенә оҙаттылар. Минең бәхетем өсөн башыңды һаҡла, иҫән булһаҡ, яңынан күрешербеҙ...» тип яҙғайны ул үҙенең һуңғы хатында. Уның ошо хаты Сухорученконың түш кеҫәһендә ята. Ул хат бөкләнгән урынынан йыртыла башлаған. Таң беленә башлағас та ул ошо тылсымлы өскөл хатты бик ҙур һаҡлыҡ менән генә сығара ла күҙенә үк терәп уҡый. Ул уны уҡымай, яңынан күҙҙән генә үткәрә, сөнки ул күптән инде ятланып бөткән, күңеленә һеңгән. Шул хатты ҡулына алғас та башына ҡыҙыл беретка,

өҫтөнә нескә билен һығып торған аҡ күлдәк, аяғына аҡ юлаҡлы бареткалар кейгән ҡылған сәсле, моңһоу зәңгәр күҙле, илгәҙәк Надя унының күҙ алдына килеп баҫа.

Бөгөн Сухорученколар звеноһы тәүге заданиеға оса.

«Сиротинск ауылы эргәһенән үткән дошмандың алғы һыҙығындағы ут нөктәләрен, беренсе, икенсе линия траншеяларын, әгәр мөмкин булһа, ауыл уртаһындағы ҡалҡыулыҡта ултырған элекке мәктәпте — хәҙер фашистарҙың пехота дивизияһы штабын — бомбаға тоторға». Ошондай задание алғас, Сухорученко сайҡала биреп ҡуйҙы. Ҡапыл ғына тыуған мәктәбе, ғәзиз класы иҫенә төштө. «Әгәр мөмкин булһа...»

Унының аптырабыраҡ торғанын күреп, командир:

— Иптәш лейтенант, әллә заданиены төшөнөп етмәнеңме, — тип өндәште. Сухорученко, ҡапыл йоҡоһонан уянған кеше шикелле, һиҫкәнеп китте лә, итек үксәләрен бер-береһенә шаҡылдатып:

— Есть, — тип честь бирҙе һәм тышҡа сыҡты.

Бына улар — командир, штурман Исоян, механик — самолетҡа ултырҙылар ҙа, кис, август ҡояшы офоҡта ҡыҙарып байығас, төп аэродромдан фронт һыҙығы яғына ҡарай осто. Йүнәлеште билдәләп, ун биш минут самаһы осҡас, тынғыһыҙ Исоян, ултырған урынында орсоҡ һымаҡ өйөрөлөп:

— Ҡара, ҡара, иптәш командир! Ҡояш яңынан сығып килә, — тип ҡысҡырҙы. Был ғәжәп күренеште өндәшмәй генә байтаҡтан күҙәтеп килгән командир:

— Күрәм, күрәм! Һуҡыр түгелмен дәһә! — тип еңелсә һуҡранды. Был ике фронттың бөтә көнбайышты ҡаплап алған һуғыш шәфәғе ине.

Сухорученко самолетын фронт һыҙығынан туғыҙ-ун саҡрымдағы запас аэродромға имен-аман ултыртты. Бында, төнгө ҡараңғынан файҙаланып, алдан уҡ бөтә кәрәкле нәмә ташып ҡуйылған. Бомбаһы ла, ер аҫтына йәшерелгән бензобактар ҙа төп аэродромдан киләсәк самолеттарҙы көтә.

Мотор бөтөнләй һүнгәс, механик, планшетын төҙәтеп маташҡан командирға яҡын килеп:

— Иптәш командир! Ниндәй бомбалар тағабыҙ? — тип һораны. Тәүҙә дошмандың алғы һыҙығын бомбаға тоторға кәрәклекте иҫкә төшөргән Сухорученко:

— Давай, хәҙергә иң ваҡтарын эләктерәйек әле, — тине.

— Унының ни ун килонан да бәләкәйе юҡ инде. — Быға әҙерәк күңеле ҡырылған командир:

— Ун икән ун. Тейеүен тейһә, ул да ҡысыуынды ҡандырыр, — тип ҡуйҙы. Бында ла үҙенә урын таба алмай йөрөгән штурманына ҡарап:

— Әгәр етмәһә, Исоянды ырғытырбыҙ, — тип мәрәкәләне. Исоян да юғалып ҡалманы.

— Механикты ырғытыу файҙалыраҡ булыр! Ул миңә ҡарағанда һонтороораҡ та, һөйәге лә эрерәк, — тип механикка ымланы.

Әҙерлек тамамланғас, улар өсәүләп самолетты ерҙән күтәреләһе йүнәлешкә бороп ҡуйҙы. Командир менән штурман кабиналарына инеп ултырҙы. Командир эске тулҡынланыу менән:

— Контакт! — тип ҡысҡырҙы. Самолет пропеллерының осона тотонған механик:

— Есть контакт! — тине лә бөтә көсөнә пропеллерҙы әйләндерергә тотондо. Тирә-йүнгә ыңғай ғына эшләп киткән самолет двигателе тауышы өҫтәлде.

Ике йөҙ килограмға «ауырайған» ПО-2 тейешле юғарылыҡҡа күтәрелде лә, аҡрын ғына боролоп, көнбайышҡа юл алды. Аҫҡа ҡарап барған Сухорученко ике фронт шәфәғендә ялтырап, бөгәрләнеп ятҡан йыланға оҡшап көньяҡҡа һуҙылған йылғаны күреп: «Әһә, быныһы Дондың һул ҡушылдығы Иловля... Бынан ун-ун биш саҡрым тирәһендә Сиротинск ауылы булырға тейеш», тип уйлап ҡуйҙы. Ошо һанаулы ғына минут эсендә башынан төрлө уйҙар, хәтирәләр үтте.

...Теп-теүәл бер йыл элек улар бөтә кластары менән Иловля станцияһына экскурсияға барғайны. Ваняның эргәһендә һәр саҡ Надя булды. Әле штурвал тотоп килгән Сухорученко Надяны эргәһендә ултырғандай тойҙо.

Тәмле хыялдарға бирелеп, матур йәшлегенә кире әйләнеп ҡайтырға самалап килгән командирҙы зенит пушкаһының ҡапыл шартлаған снаряд тауышы һиҫкәндереп ебәрҙе. Ул аҫҡа төбәлде.

Дон йылғаһының уң яҡ яры буйлап һуҙылған тыуған ауылы Сиротинскиҙың ҡарағусҡыл шәүләһен, уның бирге осонан ғына Волга йылғаһына табан һыҙыҡ күрҙе. Бының дошман траншеялары икәнлегенә шик ҡалманы. Ул самолетын шул һыҙыҡтар буйлатып көньяҡҡа табан борҙо ла радио аша Исоянға:

— Ут асырға! — тип команда бирҙе. Штурман, уң ҡулындағы бомба баштары беркетелгән ырғаҡтарҙы үҙенә тартып, бомбаларҙы берәм-берәм ергә ырғытты.

Бына байтаҡ еңеләйгән самолет көнсығышҡа, летчиктар телендә «подскок» тип аталған запас аэродромға, йүнәлде. Быларҙың иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуына сикһеҙ шатланған механик, самолет моторы һүнер-һүнмәҫтән, ҡулдарын алға һоноп, уларға ынтылды. Сабырһыҙ Исоян иң беренсе булып һикереп төштө лә механикты ҡосаҡлап алды.

— Слушай, механик, ер ҡорто, һин бында ерҙә ятып ни күрәһең? Бына беҙ командир менән күп нәмә күрҙек. Немецтарҙың арт һабағын уҡытып ҡайттыҡ! — тип маҡтанды. Штурмандың маҡтанғанын ҡарап торған Сухорученко:

— Әйтерһең, һин бөгөн немецтарҙы бөтөнләй юҡ итеп ҡайтҡанһың. Байтаҡҡа етәсәк әле был эш беҙгә. Давай механикка ярҙам ит! — тине, шелтәләп.

Улар бомба тотҡостарға бомбалар теҙҙе, самолетҡа бензин өҫтәне.

— Хәйерле юл! — ҡул болғап, изге теләк теләп торған механикты ерҙә ҡалдырып, улар яңынан һауаға күтәрелде.

Биш-алты минут үтеүгә дошман траншеяларына яҡынайҙылар. Көтмәгәндә аллы-артлы снарядтар шартлай башланы. Уларҙың самолетҡа теймәй йә алда, йә артта шартлауына ҡыуаныпмы, ғүмерҙә лә бошмаҫ Исоян:

— Командир! Ул снарядтар нисек беҙгә теймәй икән? — тип һораны. Асыуынан нишләргә белмәгән командир:

— Һин ошонан да ахмағыраҡ һорау уйлап таба алманыңмы? Бик башыңды ватма, һиңә тигәне зениткаларҙың көбәгендә ята, ти, голова! Үҙ эшеңде бел — ут ас! — тип ҡысҡырҙы.

Таң атҡансы Сухорученко экипажы алғы һыҙыҡҡа өс тапҡыр барып ҡайтты. Балыклейҙа уларҙы яңы ғына боевой заданиенан ҡайтҡан иптәш егеттәре һырып алды. Барыһы ла шат, һәр кем тәүге боевой осошо тураһында ихлас һөйләргә тотондо. Улар Сухорученконан да оҙон-оҙон хәбәр көттө.

— Ну, нисек?

— Нисә челнок яһаның?

— Күпме бомба ташланың?

Сухорученко: «Барыһы ла нормала. Өс тапҡыр барып әйләндем», — тине лә, заданиенан иң аҙаҡ әйләнеп ҡайтҡан командирға рапорт биреп, теге йәшниге өҫтөнә барып ултырҙы.

Уға ике төрлө тойғо тынғы бирмәй ине. Фашистарҙы бомбаға тотоу — изге эш... Волгаға тиклем килеп еткәндәр икән, уларҙың ҡылған ҡәһәрлектәре өсөн тап-таман. Ләкин бына үҙ ҡулың менән тыуған ауылыңды... бала саҡтан ялан-аяҡ йүгереп йөрөгән дала-баҫыуҙарыңдың ҡыртышын аҫтын өҫкә әйләндереп ташлау... Дошмандың окоптары һәм траншеялары Надяларҙың өйөнә яҡын ине шикелле... Ә Надя?! Ул, бәлки, мин ташлаған бомба ярсыҡтарынан яраланып, үҙҙәренең ихатаһында хәлһеҙ ятәлыр? Ә уның үҙ туғандары, бүтән ауылдаштары? Сиротинскиҙы бер мин генә бомбаға тотһам бер хәл, ике эскад-

рилья барып ҡайтты бит. Ә башҡа летчиктар Сиротинскиҙың мин тыуған ауыл икәнен белмәйҙәр ҙә.

Сиротинск ауылының да, фашистарҙың да көлөн күккә осорҙоҡ, тип кем уҙарҙан маҡтанышалар бит әле. Эх, егеттәр! Һеҙ ул ауылда минең өсөн был донъяла иң ҡәҙерле кеше барлығын белмәйһегеҙ шул! Ә белеп тә ни эшләр инеләр? Әллә Сиротинск һинең тыуган ауылың тип уны бомбаға тоттормаҫ инеңме? Һәр кемдең фашистар баҫып алған ҡалаһы, ауылы, һөйөп туймаған йәре, ҡәҙерле ата-әсәһе, туғандары бар бит. Ҡулына ҡорал алып, дошманға ҡаршы үлемесле көрәшкә сыҡҡан һәр кеше һинең һымаҡ икеләнә башлаһа, ай-һай...

Мәскәүҙе француздарға ҡалдырып сыҡҡан Кутузовтың, уның сая генералдарының Мәскәүҙә туғандары, яҡындары булмағанмы ни?

Граждандар һуғышы осоронда ҡулдан ҡулға күскән ауылдарҙа, ҡалаларҙа аҡтар йәки ҡыҙылдар яғында һуғышсыларҙың яҡындары йәшәмәгәнме? Ул ғына ла түгел, ҡайһы бер осраҡта атаһы аҡтар яғында, ә уландары үҙ атаһына ҡаршы ҡыҙыл ғәскәр яғында һуғышмағанмы ни? Бына шулай булғас, иптәш лейтенант, еңеү хаҡына үҙ ауылыңды бомбаға тотоу — һинең мөҡәддәс бурысың. Ил бойороғо шундай.

Оҙаҡ уйланыуҙарҙан, байтаҡ эске кисерештәрҙән һуң ғына Сухорученко үҙ-үҙен еңә алды.

Көн артынан көн үтә торҙо. Көн һайын бер нисә осош яһанылар.

Был хәүефле осоштарҙан бөтә экипаждар ҙа аэродромға иҫән-һау әйләнеп ҡайта алманы. Нескә күңелле Сухорученко баштараҡ иптәштәре өсөн үтә ныҡ ҡайғырҙы. Торабара кеше үҙ тәбиғәтенә һыймаҫлыҡ нәмәләргә лә күнегә икән. Беҙҙең лейтенант менән дә шулай булды.

Сираттағы заданиенан ҡайтҡас, Сухорученко үҙҙәренең төп аэродромынан арыраҡ өҫтө брезент менән ябылған йөк машинаһын күрҙе. Лейтенант «полуторкаға» иғтибар ҙа итмәгән булыр ине, тик уның аэродром территорияһында бер нисә көн буйы тороуы ни эшләптер сәйер тойолдо.

Төнгә ҡаршы ҡайһы бер летчиктар бөтөнләй икенсе заданиеға китте. Баяғы грузовиктан өҫтәренә төрлө кейем, биттәренә маска кейгән бер нисә кеше төштө лә осорға әҙерләнгән самолеттарға йүнәлде. Улар кабинаға менеп ултырыу менән, самолеттар һауаға күтәрелде. Иртәнсәк задание үтәп ҡайтҡан экипаждарҙы бында ҡалған иптәштәре һырып алды.

— Һеҙ бөгөн ҡайҙа остоғоҙ?

— Штурман кабинаһына кемде ултыртып алып киттегеҙ?

Ләкин был һорауҙарға аныҡ ҡына яуап биреүсе булманы.

Былдай «серле заданиены» үтәү сираты Сухорученкоға ла килеп етте.

Уны башта штабҡа саҡырҙылар. Унда бер нисә ят офицер бар ине. Бер ҡаҡса майор Сухорученкоға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла:

— Лейтенант Сухорученко һеҙ булаһығыҙмы? — тип һораны. Лейтенант, былай ҙа оҙон кәүҙәһен турайтып, үксәләрен шаҡылдатып:

— Нәҡ үҙе! — тип яуап бирҙе.

— Боевой приказды тыңла. — Майор ҡулындағы сәғәтенә ҡарап алды: хәҙер биш минуттан 22-00. Теүәл 22-00 һин һауаға күтәрелергә тейешһең. Үҙең менән бөгөн гәҙәти булмаған йөк алып китәһең. Яҡынырaҡ кил әле, — тип, ул өҫтәлгә йәйелгән ошо районды топографик картаһына эйелде. — Ул йөктө һин, бына ошо квадрат уртаһына еткәс, ергә ырғытырға бурыслыһың, — тип, ул бармағын Сиротинск ауылынан биш-алты саҡрымдағы әрәмәлеккә төрттө.

Сухорученконың йөрәге жыу итеп ҡалды, ләкин ул тулҡынланыуын һиҙҙермәҫкә тырышты. Ҡалтыранған тауышына бер аҙ көрлөк билдәһе өҫтәп, ул:

— Китергә мөмкинме? — тип һораны һәм сығып китергә ашыҡты.

— Мөмкин! — Майор, Сухорученко ишек тотҡаһына тотонғас, уны яңынан туҡтатты:

— Уның менән үҙ-ара һөйләшеү, контактҡа инеү ҡәтғи тыйыла. Быны иҫеңдә тот! Ҡалғанын барыһын да ул үҙе башҡарыр. Төнгө сәғәт берҙә, үлеме, тереме — бына ошонда бул, — тигәс, хатта иҙәнгә үксәһе менән тибеп үк ҡуйҙы.

— Йә ошо күрһәтелгән сәғәттә ҡайтып етәһең, йә һине һауала атып төшөрәләр. Икенең бере. Ә заданиенан һуңлап ҡайтыуҙың аҙағы хәрби трибунал менән бөтөүе ихтимал. Ярай, һиңә ышанам.

Сухорученко честь бирҙе лә аэродромға ашыҡты. Ул самолетына килеп еткәндә, теге грузовиктан төшкән шәүлә лә быға яҡынлашты. Ир-атҡа оҡшатып оҙон-оҙон баҫырға тырышыуына ҡарамаҫтан, буй-һынына ҡарап, уның ҡатын-ҡыҙ икәнлеген төҫмөрләү ауыр түгел ине.

Заданиеға киткән самолетты механик менән штурман оҙатып ҡалды.

Сухорученко ярты юлды үткәс: «Бигерәк күңелһеҙ бит, эс боша, әллә берәй һүҙ ҡушайыммы икән?» — тип тә уйлағайны, ләкин майорҙың иҫкәртеүе хәтеренә төштө лә өндәшмәне. Ул уйҙары менән тағы элеккеләргә әйләнеп ҡайтты.

...Туғыҙынсы класты тамамлағас, ул Надя менән, велосипедҡа атланып, Ивановка ауылындағы уның туғандарына барғайны. Талғын ағымлы йылғала һыу инделәр. Шул саҡ Сухорученко Надяның һығылмалы матур кәүҙәһен тәүге тапҡыр күргәйне. Уға оҙаҡ ҡарап торорға оялып, бер яҡ ситкә тайшанды, баҙнатһыҙ күҙен ситкә борҙо. Уның ҡарауы, Надя, уға һыу сәсрәтеп, ҡыңғырау тауышы сығарып ҡысҡырып көлдө лә:

— Эх, һин, иҫәр! Кил минең эргәмә! — тип, аптырап ҡалған егетенең ас биләнән һығып ҡосаҡланы ла һалҡын ирендәренән һурып үбеп алды. Ваня бөтә тәненә таралған ниндәйҙер иҫерткес тойғоға баш була алмай, арҡаһы менән һыуға йығылды. Шаптыр-шоптор килеп, һыуҙан торалмай ятҡан егетенә Надя көлә-көлә ҡулын һуҙҙы.

Татлы хискә бирелеп, мотор геүләүе ыңғайына йөрәк түрендәге мөхәббәт йомғағын әкрен генә тағатып килгән бер ваҡытта Сухорученконың яурынына ниндәйҙер йомшаҡ ҡул тейҙе.

— Һеҙ әллә ҡолаҡҡа ҡатымы? Мин килеп еттем, хушығыҙ.

Үтә таныш тауыш командирҙың бөтә тәнен телгеләп үтте. Ул бер генә секундҡа юғалып ҡалды. Ҡапыл башына һуҡҡан кеүек булды. «Был ни? Өнөммө, әллә төшөммө? Мин дошман тылына төшөрә торған «йөк»... Надя түгелме?» Уның штурвал тотҡан ҡулдарының дерелдәүе осоп барған самолетҡа ла күсте — ул да һауала ҡалтыранып ҡуйҙы. Икенсе тапҡыр таныш тауыш ҡатыраҡ яңғыраны.

— Үҙегеҙҙе ҡулға алығыҙ, иптәш лейтенант!

Ләкин Сухорученко бер нәмә лә ишетмәне. Үҙе алып килгән кешене һауанан ғына тейешле квадратҡа төшөрөү урынына ул самолетын шунда, Надя менән һәр йәй һайын еләк йыя торған һөҙәк тау итәгендәге әрәмәлеккә килтереп ултыртты. Кабинаһынан ергә төштө лә лейтенант артҡы кабинала урынынан күтәрелеп маташҡан «пассажирға» ярҙам ҡулы һондо. Уны ике ҡулы менән биләнән ҡосаҡлап алғас, уға донъяла иң ҡәҙерле кешеһенең эҫе, таныш тыны бәрелде.

— Надюша!

— Ваня! — Надяның эҫе күҙ йәштәре битенә тәгәрәне, ә Сухорученконың тамағына ниндәйҙер төйөр тығылды, теҙ быуындары ҡалтыраны, йөрәге дөрһөлдәп типте. Надя наҙлы, йомшаҡ ҡулдары менән һөйгәненең һаҡал үҫә башлаған сикәһенән һыйпаны, уның ярылып киткән ирендәренә үҙенең янып барған эҫе ирендәрен терәне. «Ваҡытында полкка ҡайтып ет, әгәр һуңлаһаң, хәрби трибунал...» Ҡәтғи приказды осрашыу шатлығы аҡһыл томан-

ға сорнаған кеүек булды. Улар шул таныш тау итәгендә таңды ҡаршыланы...

Ҡулына ауыр сумка тотҡан Надя күҙҙәренә шәүлә булып ҡына күренгән самолетты ҡулын болғап оҙатып ҡалды. Надяның дошман тылында башҡарасаҡ эше мөһим дә, хәүефле лә ине.

...Сухорученконы һаҡ аҫтында штабҡа алып барҙылар. Өҫтәл артында шул уҡ кешеләр, йоҡоһоҙ төн үткәргәнлектән, күҙҙәре ҡыҙарған майор. Лейтенант:

— Иптәш майор! — тип рапорт бирә башлағайны, майор уң ҡулын һелтәп, уны туҡтатты. Күҙе менән ымлап, ишара яһағайны, бүлмәлә майор менән лейтенант ҡына тороп ҡалды. Өҫтәл артында ултырған майор иҙәндә баҫып торған лейтенантҡа урын күрһәтте. Уның башын түбән эйеп, күҙ ҡарашын йәшереүе майорҙа нишләптер икеләнеү тойғоһо уятты. Һәр бер һүҙенә баҫым яһап:

— «Йөк»тө ҡайҙа ҡалдырып ҡайттың? — тип һораны. Лейтенант эйелгән башын өҫкә күтәрмәй, әкрен генә, ләкин асыҡ яуап ҡайтарҙы.

— Мин тапшырылған «йөк»тө һеҙ ҡушҡан квадратҡа иҫән-һау алып барып төшөрҙөм.

Майор уға:

— А ну, башыңды ҡалҡытып, минең күҙгә тура ҡарап, шул һүҙеңде яңынан ҡабатла әле! — тип бойорҙо. Сухорученко әйткән һүҙҙәрен яңынан ҡабатланы.

Бер аҙ өндәшмәй ултырғас, майор галифе кеҫәһенән көмөш портсигар сығарҙы һәм папирос алып ҡабыҙҙы.

— Беләһеңме, лейтенант, һин «йөк»тө тәғәйенләнгән урынға төшөрмәгәнһең, ә дошман ҡулына биреп киткәнһең тигән хәбәр алдыҡ.

Ошоға тиклем баҙнатһыҙ ғына ултырған Сухорученконы, әйтерһең, алмаштырҙылар — ул ҡапыл һикереп торҙо ла ҡаршыһында ултырған майорға шөбһәле ҡараш ташланы. Майор ҙа урынынан торҙо.

— Иптәш лейтенант! Пистолетығыҙҙы өҫтәлгә һалығыҙ! — тип бойорҙо ул.

Сухорученко шығырҙап торған портупеяһы менән әле таушалып та өлгөрмәгән кобураһын, пистолетын өҫтәл өҫтөнә һалды.

— Бына былай, пожалуй, дөрөҫөрәк булыр, — тип майор урынына кире ултырҙы. Лейтенантҡа ла ултырырға ымланы.

— Дөрөҫөн генә әйт әле, лейтенант! Әгәр һин ул «йөк»тө үҙ ваҡытында алып барып еткергәнһең икән, ни өсөн әйткән срокка ҡайтып етмәнең? Өс сәғәткә һуңлап ҡайттың? — Майор тағы ла папирос көйрәтергә тотондо.

Сухорученко турайыңҡырап ултырҙы. Күкрәген тултырып тын алды ла ҡаты көрһөнөп ҡуйҙы.

— Сиротинск — минең тыуған ауылым. Ул ауылда минең атайым, әсәйем, бөтә туғандарым йәшәй. Ә «йөк» — бергә уҡыған класташым, донъяла иң ҡәҙерле кешем. Ул ғына ла түгел, минең кәләшем. — Ошо сәйер хәбәрҙе ишеткәс, майор йоҡа ирендәрен ҡыйшайтып йылмайҙы ла ултырған урынында ҡуҙғалып ҡуйҙы. Ҡыҫыҡ күҙҙәренә икеләнеү саҡҡылары сығарып:

— Давай, давай, лейтенант, заливай! — тип көләмһөрәне, ышанманы. Ни тип яуап бирергә лә белмәгән Сухорученко:

— Һүҙҙе дауам итергәме, әллә кәрәкмәйме? — тигәс, тегеһе артыҡ иҫе китмәй генә:

— Нисек теләйһең — шулай эшлә, — тип башын ситкә борҙо. Ә Сухорученко уға бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе. Ләкин майор уны тыңлауҙан күптән туҡтағайны.

— Лейтенант, бында һинең мөхәббәт одиссеяһын тыңлап ултыра торған заман түгел. Хәҙергә мин һине һаҡ аҫтына алам. Әгәр инде беҙ дошман тылына төшөргән кешенән дөрөҫләү хәбәре килмәһә, һине һуғыш ваҡытының законы буйынса яуапҡа тарттырасаҡбыҙ. Все. — Майор ҡапыл урынынан торҙо. Һаҡсыны саҡырып индерҙе лә бойороҡ бирҙе:

— Лейтенантты — гаупвахтаға!

Ләкин теге яҡтан иртәгеһенә лә, иртәнән һуң да бер ниндәй ҙә дөрөҫләү хәбәре килмәне.

Биш көндән һуң Сухорученко хеҙмәт иткән төнгө бомбардировщиктар полкын икенсе урынға күсерҙеләр. Лейтенантты рядовой чинына төшөрөп, Сталинград фронтында яңы ғына формировать ителә башлаған батальонға оҙаттылар.

...1943 йылдың февраль баштарында ҡулына тәғәйенләү документы тотҡан, елкәһенә һалдат моҡсайы аҫҡан, өҫтө-башы ныҡ ҡына таушалған лейтенант Сухорученко үҙ полкын Миллеровоға яҡын ғына бер ауылда эҙләп тапты.

Бәләкәй генә ауыл ситендә төп аэродром төҙөгәйнеләр. Штаб землянкаһына арҡаһына һалдат моҡсайы аҫҡан ниндәйҙер пехотинецтың килеп инеүе бер кемде лә ҡыҙыҡһындырманы. Ул ярым ҡараңғы бүлмәгә атланы, ниҙер яҙып ултырған капитанға рапорт бирҙе.

— Иптәш капитан! Лейтенант Сухорученко хеҙмәтен артабан дауам итеү өсөн һеҙҙең ҡарамаҡҡа килде.

Капитан ҡапыл артына әйләнеп ҡараны ла, күҙлеген төҙәтеп:

— Һин теге беҙҙең полктан штрафбатҡа оҙатылған лейтенант Сухорученко түгелме? — тип һораны.

Сухорученко егеттәрсә:

— Так точно! — тине.

— Бына был осрашыу! Беҙ ни һине бөтә довольствиенан күптән списать итеп бөткәйнек инде. — Пакетты асып уҡығас, капитан уғата йәнләнеп китте. — Ҡара, ҡара һин уны! Тәнеңә фашистар тамға ла һалып өлгөргән икән. Күкрәгеңдә — орден, маладис! Шинелеңде сисеп ырғыт! Хәҙер мин һине полк командирына күрһәтәм, — капитан гимнастеркаһын төҙәтеп маташҡан Сухорученконы коридор башына әйҙәне. Башта капитан инеп китте. Бер аҙ торғас, уны полк командиры кабинетына саҡырҙылар, шул уҡ түп-түңәрәк кәүҙәле подполковник.

Документтары менән танышҡас, ҡыҫыҡ күҙҙәренә ҙур ҡәнәғәтләнеү сатҡылары йүгергән подполковник Сухорученконың орденына күҙ һалды.

— Туған полкың исеменә тап төшөрмәй батыр һуғышҡаның өсөн рәхмәт! — полк командиры Сухорученконың ҡулын ҡыҫты. Шунан ул ҡупшы хәрби кейем кейгән бәләкәй генә кәүҙәле обоз-тәьминәт службаһы начальнигын саҡыртып алды.

— Бына ошо лейтенантты үҙең нисек кейенгәнһең, шул рәүешле кейендер. Ә һин, Сухорученко, өс көн ял итерһең дә боевой задание алырһың. Самолет штурвалын онотманыңмы әле?

— Юҡ, иптәш подполковник!

— Улайһа, бик шәп.

Полкта яңынан хеҙмәт башлауына өсөнсө көн тигәндә Сухорученкоға боевой задание бирелде. Был ваҡытҡа уның элекке иптәштәренән байтағы юҡ ине инде. «Беҙҙең самолет сихырланған ул, немецтарҙың зенит снарядтары уны урап үтә», — тип һис бошмай йөрөгән Исоян да Сталинград өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа һәләк булған. Мунса инеп, өр-яңы лейтенант формаһын кейеп алғас, Сухорученко үҙенең элекке рәүешенә ҡайтты. Тик уның ҡаҡса бите элеккегә ҡарағанда етдиерәк, аҙымдары ла ышаныслыраҡ ине.

Ике аҙна үткәс, Сухорученко үҙ ауылынан тәүге хатына яуап алды. Хаттың адресын уҡығас та уның йөрәге ҡабынды, тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте, өскөл хат тотҡан бармаҡ остары дерелдәне. Хатты уның Надяһы яҙған! Надяның хатын аулаҡта, бер үҙе генә уҡыр өсөн, ул аэродром эргәһендәге сауҡалыҡҡа йүнәлде.

«Донъяла иң ҡәҙерле кешем, бәғрем, һаумы? Ҡайнар сәләмдәремде таң алдынан көнбайышҡа иҫкән елдәр артынан һиңә оҙатып, фашист илбаҫарҙарын дөмөктөрөүҙә тағы

ла күберәк уңыштарға өлгәшеүеңде теләйем». Шунан һуң күрше-күләндән, уның туғандарынан сәләмдәр теҙелгән.

«Һин мине ғәфү ит, Ванюша. Мин теге ваҡытта, рациям эшләмәү сәбәпле, командованиеға билдәләнгән ваҡытта килеп етеүем һәм заданиены уңышлы үтәүем хаҡында хәбәр итә алманым...

Минең Ванюшам! Бәлки, һин ишетергә лә теләмәҫһең, ләкин ысынын яҙмай хәлем юҡ. Һине һағынып әлһерәгән йөрәгем шулай ҡуша», тигән юлдарҙы уҡығас, Сухорученконың йөрәге жыу итеп китте, хәрефтәр уның күҙе алдында бейей башланы.

«Теге осрашыуҙан һуң мин ауырға ҡалдым. Хәҙер инде бына етенсе ай көнө-төнө һине көтөп һыҡтаған йөрәгем аҫтында мин шул ҡәҙерле йәнде йөрөтәм. Парашюттан һикереүе һинең өсөн хәүефле, тип мине армиянан демобилизовать иттеләр. Мәктәбебеҙҙе ауыл халҡы ҡайтанан төҙәтергә тотондо. Мин хәҙергә шунда уҡытыусы булып эшләп йөрөйөм. Еңеү яулап, иҫән-һау ҡайтыуыңды ысын күңелемдән теләйем. Һине тағы бер генә тапҡыр күрергә, һинең зәңгәр күҙҙәреңә бер генә ҡарарға насип булһа, үлһәм дә үкенмәҫ инем. Һине өҙөлөп һағыныусы Надюшаң».

Сухорученко хатты бер нисә ҡат уҡып сыҡты. Нескә күңеленең, ташҡан эске тойғоһоноң теҙгененә ихтыяр ҡуйып, эркелгән күҙ йәштәренә битен дә сылатып алды. Шул көндө үк ул Надяһына, йөрәк йылыһын ҡушып, бик оҙон хат яҙҙы. Уларҙың һүнмәҫ мөхәббәт менән һуғарылған хатлашыуы бер йылдан ашыу дауам итте.

1944 йылдың яҙында Владимир-Волынск өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа өлкән лейтенант Иван Сухорученконың самолетын дошман зениткаһы бәреп төшөрҙө. Сиротинскиҙан һуғыштың алғы һыҙығына тиклем тартылған бер мөхәббәт ҡылы шул ҡанлы һуғышта ғүмерлеккә өҙөлдө.

Туғандар ҡәберлеге... Мәрмәр плита өҫтөнә бер ҡарсыҡ эйелеп сәскә һала. Ул өҫтөнә ҡара күлдәк кейгән, башына ҡара бәрхәт яулыҡ ябынған. Эргәһендә — авиация полковнигы. Ул төҫө-ҡиәфәте менән Иван Сухорученконы ныҡ хәтерләтә ине.

# АЛЕКСЕЙ МУЛЛА

Башҡаларҙан ул бер яғы менән дә айырылмаған кеүек ине. Бөтә ауыл халҡы кеүек, иртә менән эшкә китә, кис ҡайта. Артыҡ бәрелеп-һуғылып, донъя ҡыйратып, үтә тырышып та бармай. Тыныс тәбиғәтле кеше ине ул. Колхоз йыйылыштарында һүҙ һорамай, ғәйбәт һатмай.

Ауылда «Йәнүәлид Имамшафиҡ» тип йөрөттөләр уны. Уң ҡулы һәр ваҡыт аҡ сепрәк менән суғына тиклем уралған булыр ине. Шуның өсөн колхоз бригадиры, элекке фронтовик Бурһыҡбай, ни тиклем генә ҡаты күңелле булмаһын, уны һәр ваҡыт йәлләй, еңел эшкә ҡуша торғайны.

Ләкин, олоғая төшкәс, күрше-күләндәре Имамшафиҡтың тышҡы ҡиәфәтендә ниндәйҙер үҙгәреш тоя башланы. Иң башта ул һуғым һуйғанда тире һыҙыра торған шынаға оҡшаған, аҫҡа ослайып төшкән һаҡал ебәрҙе. Айыра баҫҡан аҙымдарын икеләтә тарайтып, йыбырҙап ҡына йөрөй башланы. Сәс ҡырғанда ҡулының йомшаҡлығы менән ауылда даны сыҡҡан ут күршеһе Әхтәмдән аҙна һайын сәсен алдыра. Элек еткереп, өҫкә тарап йөрөй ине. Ҡайҙандыр Төркостан яғынан алдырып, осло күбә кеүек соңҡаһына ҡара, аҡ нағыш төшкән теүәтәй ҡундырып ҡуйҙы. Ҡуйы ҡара ҡашы аҫтында керпекһеҙ, төпкә батҡан күҙҙәре ялт-йолт итеп, бер нөктәгә туҡтала алмай, тауышы көслөрәк тә, көрөрәк тә сыҡты уның.

Киске тамаҡтан һуң, ҡулына ғүмерендә тотмаған ҡомғанын алып, әүәҫлек аҫтында оҙаҡ ҡына мыштырҙағанын һиҙеп ҡалды күршеләре. Ара-тирә, кеше-фәлән күренмәгәндә, ян-яғына ҡаранып, «кхем... кхем...» тип тамаҡ та ҡырғылап ҡуя.

Ауыл һыртындағы зыяратҡа берәй кешене ҡуя барырға тура килһә, башы семәрләп, йомро итеп эшләнгән дүрт быуынлы саған таяҡҡа таянып ҡына йөрөй башланы. Ясин, йыназа үтергә лә йыш ҡына саҡырҙылар үҙен.

Магазин тирәһендә лә уралмай башланы. Элегерәк араҡы килеүен алдан уҡ ҡайҙандыр һиҙеп, беренсе булып сират алып, ҡыш булһа, бәләкәй санаға, йәйен ҡул арбаһына араҡы тейәп ҡайта торған ғәҙәттәренән дә ваз кисте Имамшафиҡ. Ләкин эскене ул бөтөнләйгә ташламаны. Кистәрен, өйлә намаҙын атҡарғас, «аш алдынан» тип, юҡ-юҡ та тәхил шарабын ауыҙ иткеләне.

Кистәрен, ауыл һил булғас, ыҫпай ғына кейенеп, таяғына таяна ла, ауылдың иң түбән осона юл тота, Һаҡмар йылғаһына кәртә-ҡуралары терәлеп ултырған өйгә килеп инә лә, ғәйеп була Имамшафиҡ. Ауылдаштарын ҙур аптырашта ҡалдырҙы бының серле ҡылыҡтары.

Был йортта башта Ханнан хәҙрәттә, ә унан данлыҡлы Муллаҡай мәҙрәсәһендә байтаҡ ҡына һабаҡ алған, заманына ҡарата уҡымышлы ғына, ләкин Совет власы урынлашҡас, динен ташлап, мулла-монтағайҙарҙы бөтә ғәләм алдында фаш итеп, мәзинлегенән баш тартҡан, ләкин хәҙер юҡ-юҡ та им-том иткән, биш намаҙҙан ҡалмаған, шул уҡ мәзин исемен йөрөткән, Ғәбделвахит йәшәй. Бына бөгөн дә Имамшафиҡ, аҡ сепрәккә төрөп, ҡултыҡ аҫтына бер яртыны ҡыҫтырҙы ла, шунда йүнәлде. «Ҡайҙа бараһың, аш өлгөргән, тамаҡ эсеп кит», — тип ныҡышҡан бисәһе һүҙенә лә ҡараманы. Сөнки ул яҡшы белә, тегендә аш күптән өлгөргән, тик ошо ҡултыҡ аҫтында тамаҡты ҡымырйытып, «ғылт-ғылт» итеп сайҡалып килгән ҡәһәр төшкөр йылтыр ғына етмәй. Уның килеүен дүрт күҙ менән көткән Ғәбделвахит мәзин уны ыштан-күлдәктән генә соланда уҡ ҡаршы алды. «Афарин, Имамшафиҡ мырҙа, мәлен белеп кенә йөрөйһөң: аш күптән өлгөргән, һине генә көтәбеҙ», — тине лә, уның ҡултыҡ аҫтындағы сепрәккә төрөлгән йомро нәмәне күреп, ирендәрен шапылдатып тамшанды, һеләгәйен ең осо менән һөрттө.

Ишек асып инеүе булды, өҫтәл өҫтөндәге ағас табаҡта боҫорап ятҡан һарыҡ итенең еҫе Имамшафиҡтың танауына бәрелде. Ул тиҙ генә сисенеп ташланы ла бүлмә уртаһындағы өҫтәлгә уҙҙы.

Ул иң башта матур итеп йыйыштырылған мәзин өйөн диҡҡәт менән ҡарап сыҡты. Күҙҙең яуын алып торған, шәм ултыртыу өсөн заманында кәрнисләп сығарылған апаҡ мейес, уның ҡабырғаһында — газ плитаһы, ауылына ҡарата ниндәйҙер оҫта ғына кеше эшләп элеп ҡуйған биш-алты кәштәле шкаф, урындыҡтағы тимер ҡалай менән көпләнгән ҙур һандыҡ өҫтөндә — ҡаралты, кейеҙ, Мәхмүзә абыстай килен булып төшкәндә артынан килгән күбәләй яҫтыҡтар. Улар ҡат-ҡат итеп, түшәмгә тиклем өйөлгән. Ә унан ары — йоҡо бүлмәһенә инә торған ҡорғанлы ишек. Аяҡ аҫтына ҡулдан һуғып эшләнгән балаҫ түшәлгән. Буялмаған иҙәнде һап-һары итеп ҡырып йыуғандар.

Киске һөтөн уң ҡулына тотоп, ҡара көҙ булыуға ҡарамаҫтан, күлдәксән, алсаҡ йөҙлө, башына кәшимер яулыҡ ябынған Мәхмүзә еңгәй килеп инде. «Һаумыһың, Имамшафиҡ ҡәйнеш», — тип сәләм биреүгә, тегенең: «Һау ғынабыҙ әле, һеҙҙең хәйер-фатихала, алланың биргәненә мең шөкөр», — тип тороп уҡ сәләм алыуы, бигерәк тә һүҙенә «алла»ны өҫтәп ҡуйыуы дингә мөкиббән бирелгән Мәхмүзәгә оҡшап ҡалды. Ул әҙәпле генә итеп йылмайып ҡуйҙы. Ҡул сайҡаныулар ҙа ашҡа ултырҙылар. Ике ҡырлы стакан да өҫтәлгә килеп ҡунды. Дин әһелдәре,

бер яртыны ике бүлә бик ҙур ләззәт менән һуғып, ҡорот тешләштереп алдылар ҙа ҡарһаланып ашарға тотондолар. Аш алдынан һүҙ туҡтаны. Былай ҙа сибек кенә Мәхмүзә еңгә артыҡ алдыра алманы. Дүрт-биш ҡалаҡ ҡапҡылағас, ҡояшҡа янып ҡарайған ҡулының һыртын ике иргә күрһәтеп доға ҡылды ла тороп уҡ китте. Ә былар йәш һарыҡ итен ҡорһаҡтарына кинәнеп тыңҡысланы. Мәхмүзә еңгә икеһенә ике туҫтаҡ ҡоротло һурпа тотторҙо ла өҫтәл йыйыштыра башланы. Ҡәҙимге ҡыҙмаса булып алған ике дуҫ үҙ эштәренә тотондо. Имамшафиҡ, ҡағыҙ-ҡәләм алып, мәзин ҡаршыһына ултырҙы. Ә ул сәлләһен кейҙе лә, күҙен йомоп, бер нисә мәртәбә тамаҡ ҡырып алды.

— Иң әүәл изге мосолман ниҙәрҙе белергә тейеш? — тип үҙ-үҙенә һорау бирҙе, шунан ҡалтыранған тауыш менән теҙеп алып китте:

*Әғүзе биллаһи иннашайтан*
*ирражим,*
*Бисмиллаһи иррахман*
*иррахим...*

Тауышы көрәйеп, үҙ юлына төшә башлағас, бөтә пәйғәмбәрҙәр, солтандар, руханиҙар менән иҫәнлек-һаулыҡ һорашып сыҡты:

*Әссәләмәғәләйкүм йә*
*атамыҫ Ғәлиәссаләм...*

Имамшафиҡ, яҙып өлгөрә алмай ҡалһа, уны туҡтатып, яңынан һорашып ала.

Камил ҡыҙып алған мәзин үҙ һабағын түбәндәге мөнәжәт менән тамамлап ҡуя:

*Сорарларса әгәр бәндән*
*хисаби,*
*Сонарларса йәссулымдан*
*китаби...*

Имамшафиҡ уның һәр әйткәнен латин хәрефтәре менән ҡағыҙға теҙә барҙы. Шунан ясинға, йыназаға, ижап ҡабул итеүгә, яңы тыуған сабыйҙарға аҙан әйтеп, исем ҡушыу сүрәләренә төшөп киттеләр. Һәр бер яҙып алған сүрәнән һуң, мәзин һабаҡ тыңлатып ҡараны. Һуҡмыш ваҡытында оҙон көйҙәрҙе ҡәҙимге генә башҡарған Имамшафиҡҡа был доғаларҙы ҡабатлап сығыу артыҡ ҡыйынға тура килмәне. Ҡайһы бер сүрәләрҙе ул мәзиндән дә арттырып ебәрҙе. Йәшлек йәшлеген итә — тауышы көслөрәк тә, көрөрәк тә сыҡты уның.

Улар ҡыш буйына бөтә ҡөрьәнде латин хәрефенә күсереп, заманға ҡулайлаштырып, иң кәрәкле сүрәләрен ятлап алды.

Ҡорбан ғәйетендә Имамшафиҡ һарыҡ салды, ҡорбан башын, тиреһен мәзингә тотторҙо.

Бына шулай Имамшафиҡ ауылда яңы мулла, замана муллаһы булып китте. Урыны уңай тура килгәндә эсеүҙән, күңел асыуҙан да баш тартманы. Хоҙаның «амин» тигән көнөндә тура килгән еңелерәк холоҡло бисә-сәсәне лә ситкә типмәне. Үҙ йомош-юлына йәйәүләп йөрөмәне, «матай»ға атланды. Үҙе «өшкөрөм-төкөрөм» менән кешеләрҙе «дауалаһа ла», сырхаулап китә ҡалһа күрше ауыл докторы Варавинға малайының «Жигули»һында ғына барып әйләнде. Бик донъяуи, йүнсел мулла булып сыҡты ул.

Имамшафиҡ мулла тип кенә йөрөтә башланы уны ауыл халҡы. Үлемдән дә, тыуымдан да, һәр өйҙә әҙерләнгән аш-һыуҙан да ҡоро ҡалманы яңы мулла. Фидиә, фытыр, гүр саҙаҡалары ла мул ғына төшә башланы уға. Хәллерәк кеше үлеп китһә, саҙаҡаның мул төшөүен алдан һиҙеп, уны тәрбиәләп ерләргә атлығып торҙо, әгәр инде мәрхүмдең көнкүреше мөшкөләрәк булһа, төрлө сәбәптәр табып, йыназаһына бармай ҡалыу яғын ҡараны.

Ауылда боронғоно таныған башҡа кешеләр ҙә бар ине барлығын. Улар араһында бер нисә ҡыш мәҙрәсәлә уҡып, әфтиәктән ҡөрьәнгә сыҡҡандары ла юҡ түгел. Ләкин быларҙың ҡайһыһында мәҙрәсәлә уҡыған осорҙан тик ҡазыйҙың шыйыҡ тал сыбығы ғына иҫендә ҡалған, ә икенселәренең башында сүрәләрҙең өҙөк-йыртығы ғына. Шуға күрә был боронғо мәҙрәсә шәкерттәре тота һалып ураҙа, ҡорбан ғәйеттәрендә берәй дога уҡырға баҙнат итмәй, халыҡтан тартына.

Бер-ике урында киске «ауыҙ асыу» мәжлесендә элекке шәкерттәрҙең береһе, хәҙерге ауыл ҡарты, ҡөрьәндән сүрә уҡырға маташып ҡарағайны ла, уны Имамшафиҡ үҙ урынына тиҙ ултыртты. Теге ҡарт үҙ сүрәһен ослай алмай ыҡ-мыҡ итә башлағайны, ныҡ ҡына әҙерләнеп килгән Имамшафиҡ көр тауышы менән был сүрәне өр-яңынан үҙе уҡып ебәрмәһенме. Ошонан һуң ауылда бер кем дә уның муллалыҡ вазифаһына тығылманы. Үтә ныҡ әрһеҙлеге менән ул шулай йәмәғәт алдында үҙенең муллалығын раҫлап, мөһөрөн баҫып ҡуйҙы.

Исемен есеменә тура килтереү өсөн тышҡы ҡиәфәтен дә үҙгәртеп ебәрҙе. Башына, ҡайҙандыр табып, ҡырпыулы бәрхәт бүрек кейер булды. Өҫтөнә затлы сапан, аяғына семәрләп тегелгән ситек менән күн калуш кейҙе. Телен дә шымарта төштө. Ҡайҙандыр ғәрәп һүҙлеге табып, ныҡлап өйрәнергә тотондо. Һөйләшкәндә ике һүҙҙең береһендә төр-

киҙе ҡушып, һыйыр урынына — сығыр, ямғыр урынына — яғмыр, дөйәне — дәүә, ишәкте — химар, сусҡаны хинзир тип һөйләй башланы.

Имамшафиҡ ҙур ғына пландар ҙа ҡорҙо. Үҙенең дини мәртәбәһен ул әллә ҡайҙа алыҫта, офоҡ артында түгел, бына ғына, ҡул һоноп алырлыҡ ҡына урында тоя башланы. Халыҡтан төшкән хәйер-саҙаҡа аҡсаларын йыш ҡына Өфөгә ебәреп, Урал аръяғында Имамшафиҡ исемле бер яңы мулла барлығын диниә назаратына белдереп ҡуйҙы. Дини байрамдарҙы нисек үткәреү, хәйер биреү, саҙаҡа йыйыу тәртиптәрен нисек ойоштороу тураһында дини идаранан ҡайһы бер күрһәтмәләр ҙә ала башланы. Ғибәҙәт ҡылыу өсөн иҫке-моҫҡо булһа ла берәй махсус өй һатып алыу ниәте менән төшкән саҙаҡанан әҙерәк мая тупларға тотондо. Ул идаранан дини ғөрөф-ғәҙәттәрҙе атҡарыу өсөн рөхсәт рәүешендә ниндәйҙер рәсми шаһаҙәтнамә көттө.

Диниә назаратының ҡазыйы донъя ҡуйғас, уның урынына барып ултырырға хыялланды. Бер аяғы менән үҙен Өфөлә тип иҫәпләне. Шулай хыял диңгеҙендә тыныс ҡына йөҙөп, муллалыҡ вазифаһын теүәл, арҙаҡлы ғына атҡарып ятҡан бер мәлдә күңелһеҙ, бик тә сәйер бер ваҡиға уның пландарын селпәрәмә килтерҙе.

Йәкшәмбе ине был һөрөм менән ҡапланған, уның өсөн иң ҡараңғы көн...

Бригадирҙан ат һорап алды ла, кистән һуйып ҡуйған һарыҡ итен ҡабыҡ арбаға һалып, күршеләге рудник баҙарына китте. Ҡыҙыу бесән өҫтө булғанғалыр, күрәһең, баҙарҙа ит һатҡан кеше бик һирәк. Йәһәт кенә һатып бөттө лә, Имамшафиҡ уйға ҡалды. Ул бригадирҙан бер көнгә һорап киткәйне, хәҙер ҡайтып төшһә, көн бик иртә, ни алтара, ни полтара тигән кеүек, әле төш тә етмәгән. Әгәр бында туҡтап, Зубов знакумына инһә, күҙе лә йөҙө, ит һатып йыйған аҡсаһының тине лә ҡалмай, елгә осоп китеүе бар. Ауыҙың ҡыҙып, лавкала араҡы «осһоҙлана» башлаһа, барлы-юҡлы аҡсаңды эсеп бөткәнеңде көт тә тор. Донъя онотоп, кәпәс ташлап эсеп йөрөүҙәрҙең аҙағы ни менән бөтөүе уға көн кеүек мәғлүм. Башында ике фекер тартыша башланы. Беренсеһе, баҙнатһыҙ ғына: «Өйөңә имен-аман ҡайтып китеүең хәйерлерәк булыр, аҡсаң да яныңда ҡалыр», — тип бышылданы. Ә икенсеһе, әмер биргән кеүек, көслө тауыш менән, һәр һүҙенә баҫым яһап: «Ҡуй әле шул икеләнеп тороуыңды, ирме һин, әллә түгелме? Донъя барыбер ике килмәй, ҡулыңда форсат барҙа тотоноп ҡал, әйҙә, киттек знакумға», — тип уның яғаһына йәбеште. Саҡ торған Имамшафиҡтың икенсе бойороҡҡа буйһонмай әмәле ҡалманы. Бер яртыны ҡыҫ-

тырҙы ла: «Күптән знакумдың хәл-әхүәлен белгән юҡ, барып сығайым әле», — тип үҙен аҡларға тырышҡан кеүек мығырҙанды ла белеше өйөнә йүнәлде.

Зубов ҡунаҡты ҡуш ҡуллап ҡаршы алды. Хужа тиҙ генә өҫтәл йыйыштырҙы.

Тәндәре араҡыға бешеккән ике знакумға бер шешә йылтыр тамаҡ сылатырға ла етмәне. Тәпәшәк баҫҡысҡа арыҫлан кеүек етеҙ баҫып, хужа кеше сирек шешә менән мейес башына менеп китте. Унда «бүл... бүл...» итеп аҡҡан шыйыҡсаның таныш тауышы ишетелде. Өй эсенә апара, ниндәйҙер көйгән икмәк еҫе аңҡыны.

— Это, пожалуй, будет бик якши, первый сорт, первач, — тип маҡтай-маҡтай, бер сирек көмөшкәне Зубов өҫтәлгә килтереп ҡуйҙы. Берәр стакан төшөргәндән һуң, ике дуҫ апаруҡ егет булып алды. Әңгәмә ҡыҙғандан-ҡыҙҙы. Имамшафиҡ — русса, ә Зубов:

— Ай-вай, лимонад, сусандаған эсергә, — тип башҡортса көйләп маташтлы. Шунан патефон ебәреп, бейергә тотондолар. «Мәңге ташлашмаҫҡа, дуҫ булырға» һүҙ ҡуйышты ике әшнә, суп та суп үбештеләр.

Ҡалғаны ни менән бөткәндер, Имамшафиҡ бер нәмә лә иҫләмәй...

Зубов, аяғында саҡ баҫып торһа ла, иҫен бөтөнләй юйған Имамшафиҡтың атын екте. Уны арбаһына һуҙып һалды ла, кискә ҡаршы оҙатып ебәрҙе. Арбала бер ни белмәй хырылдап йоҡлаған мулланы ғүмер баҡый ике арала йөрөп өйрәнгән бурыл бейә туп-тура Һаҡмар ярына килтереп терәне. Икеләнгән кеүек, был ярҙа әҙерәк туҡтап торҙо. Шунан ғына тәүәккәлләп кисеү аша теге яҡҡа, Һаҡмарҙың текә уң ярына, сыҡты. Ләкин һикәлтәле боролмала ҡабыҡ арбаның бер яҡҡа ҡыйшайыуы булды, Имамшафиҡ янтайып, төшөп тә ҡалды.

Ул-был булманы, ләкин...

Иртәнсәк Ҡаҡтүбә участкаһына эшкә барыусы колхозсылар Һаҡмарҙың уң ярында, юл ситендә, ниндәйҙер кеше ятҡанын күреп ҡалды. Был ауыл муллаһы Имамшафиҡ булып сыҡты. Аттарын туҡтатып, арбаларанан төшкән кешеләр уға яҡын барырға батырсылыҡ итмәй оҙаҡ ҡына ситтән ҡарап торҙо. Араларынан олораҡ бер кеше килеп, уны ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла әйләндереп ҡараны. Беләген тотоп бер аҙ торғас: «Тере, йөрәге тибә, тик эргәһенә яҡын килерлек түгел, ҡоҫоп бөткән, әле лә иҫерек был әҙәм, айнымаған», — тип ҡысҡырҙы. Барыһы ла яҡын килеп уны ҡарарға, ҡапшарға тотондо. Уң ҡулын бәйләп йөрөгән аҡ сепрәге, нимәгәлер эләгеп, тағатылып киткән. Бинт аҫтында оҙаҡ бәйле йөрөгән ҡулының һырты бил ҡайышы киңлегендә мәрмәр кеүек ағарған. Ул еренә энә

менән соҡоп, «Алексей» тип, ә аҫтараҡ «Аня, я тебя люблю» тип яҙылған. Пинжәк төймәләре ысҡынған, күлдәк һәҙәптәре өҙөлөп төшөп ҡалған. Күлдәге иҙеүенән итәгенә тиклем йыртыҡ. Асылып ятҡан күкрәгендә — ҡанаттарын ике яҡҡа йәйгән сәмреғош татуировкаһы. Уның ҡанаттарына «Рай для темных, а мне и на земле неплохо» тип яҙылған.

Имамшафиҡ өсөн ошо ҡәһәрле хәлдән һуң уны ауылда «Алексей мулла» тип йөрөтә башланылар. Уның муллалыҡ ҡояшы мәңгегә байыны.

Ғүмерлеккә хур итер был һүҙҙәрҙе ул йәшерәк сағында холоҡ төҙәтеү йортонда булғанда яҙҙырғайны. Үҙ башына булған икән!

## ФЛЮГЕРҘАР

Был ваҡиға, билдәле, бөгөнгө түгел — күптәнге. Шулай ҙа бөгөнгө тормошта ла флюгерҙар бөтмәгән. Бәлки, был көлкө ҡатыш ҡыҙғаныс хикәйәт шундайҙарға фәһем булыр.

Партия комитетының секретары Батыр Бүребаевты унан ситтәрәк торған кешеләр, ишетмеш-мишетмеш менән генә белгән ағай-эне ҡаты ҡуллы, көслө ихтыярлы түрә, тиҙәр. Ысынлап та, уның төпкә батҡан күҙән күҙҙәре, текә ҡаялар уртаһында ятҡан сөмбәй күл кеүек, тәрән, серле, һәр саҡ төрлө төҫкә инеп, ялтырап тора. Бер ҡараһаң — сөм-ҡара, тыныс, икенсе ҡарамаҡҡа унда йәшен сатҡылары сағылып ҡалғандай. Өлтәйеп үҫкән, өйкөм селекте хәтерләткән, терпе ҡаштарын өҫкә сөйөп ул бер ҡараш атһа, валлаһи ғәләм, ниндәй батыр кешенең дә ғәйрәте ҡайта, башын түбән баҫмайынса булдыра алмай. Түрәнең был утлы, уҡлы ҡарашы күкрәгеңде тишеп үтә, тәндәреңде өшөтә. «Бына был, исмаһам, бер ажар ир икән», — тип хайран ҡала уның менән тәүгә күҙмә-күҙ осрашҡан кеше. «Күҙе шар һымаҡ уйнап тора бит, теләһә ниндәй самурайҙың ҡотон алырлыҡ», — тип тә ебәрәләр.

Ләкин уның менән бергә, бигерәк тә ҡул аҫтында эшләгән, уны яҡынданыраҡ белгән хеҙмәттәштәре Батырҙы — Бахыр, Бүребаевты күптән Төлкөбаевҡа әйләндереп өлгөргәндәр. Сөнки ул үҙ вазифаһынан түбән торған кешеләргә генә бүре, ә инде үҙенән эш буйынса бер ҡарыш

ҡына өҫтә булған түрәләргә ҡарата күптән инде төлкөгә әүерелгән. Ул ғына ла түгел, ҡурҡаҡ ҡуян ул. Географияны әҙ-мәҙ һупалаған ҡайһы бер кешеләр уға байтаҡтан бирле «Флюгер» тип ҡушамат таҡҡан, сөнки ул саҡ ҡына өҫтән өргән һил генә елгә лә башын бороп, танау ҡуйырға өйрәнгән. Уның һиҙгер танау тишектәре әле генә өргән йомшаҡ ел ағымының үҙ артынан әллә ниндәй Ҡотоп һалҡыны килтереүен алдан белеп тора — барометрың да хәжәт түгел.

Алыҫ офоҡта үҙенән бер иле юғарыраҡ түрә шәүләһе кәүҙәләнһә, уның һөңгө кеүек түшәм терәп торған буйы ҡапыл бишкә бөгөлә, ниндәй генә тоҡоро, тәбәнәк кәүҙәле булмаһын үҙенең алдында торған түрә, ул һәр саҡ килбәтһеҙ кәүҙәһен унан тәпәш, ҡайтыш күрһәтергә тырыша. Йәшлек сағындағы Наполеон Бонапарт тураһында уҡыған бер ҡиссаны ул бер ҡасан да иҫенән сығармай. Шулай бер саҡ Наполеондың алабарманыраҡ бер оҙон буйлы генералы данлыҡлы полководец янына баҫҡан да: «Император ғәлийәнәптәре, мин һеҙгә ҡарағанда юғарыраҡ икән дә баһа», — тип ысҡындырған. Ғәййәр, уҫал император үҙенең үткер күҙҙәренән саҡкылар осороп, һөнтөр генералды башынан аяғына тиклем ялмап ҡарап алған да: «Болван, юғары түгел, оҙон, һонторһоң. Әйткәндәй, һинең ул өҫтөнлөгөңдө, телеңде тыймаһаң, хәҙер үк юҡҡа сығарырға бойорормон», — тип тегенең ҡотон алған ти. Императорҙың үҙ генералы менән булған бына ошо бик тә фәһемле диалогын Батыр Бүребаев бик йәштән үҙ маңлайына киртеп, күңел һандығы төбөнә һалып ҡуйҙы. Бына был уға ғүмере буйы үҙенә теләһә ниндәй хәлдә лә — һыуҙа батамы, утта янамы — йәбешеп сығыу өсөн бер таяныс булды. Ул ғынамы һуң? Был замандың ғәрәсәтле, дауыллы тормош диңгеҙендә ошо бәләкәй генә бик тә кәрәк һабаҡты аңламау арҡаһында күпме ағай-эненең кәмәһе тулҡын өйөрмәһендә сатнаны, ә Батырҙың елкән кәмәһе ошо тулҡындар өҫтөндә сайҡала-сайҡала үҙ хәрәкәтен дауам итте, ел ыңғайына талғын ғына йөҙҙө лә йөҙҙө.

«Түрә алдында һинең тәкәбберлегеңдең хәжәте бер тин, уға түшәлеп ятып хеҙмәт ит, яҡшы сырай күрһәт, эйәгеңде бер сирек аҫҡа һуҙып, йылмайып тор, һатып алаһыңмы ни битеңә һирпелгән нурлы сырайыңды, күрһәт, йәлләмә. Түрә килгәндә, аслан, аҡыл эйәһе булып ҡыланма, телеңде тый, ул ни әйтһә лә, уның һүҙен күтәреп алырға әҙер тор. Һай, Түрәбай Түрәбаич, һеҙҙә баш тигәнең, хоҙай шулай һеҙҙең кеүек арҙаҡлы ирҙәргә генә бирә шул быңдай аҡыл һандығын, ә беҙ иҫәрҙәргә ҡайҙан килгән ти ул ундай тәрән фекер, ғилем даръяһы, тип

меҫкенләнеп ал, умыртҡа һөйәгең шартлағансы бөгөл, арҡа һөйәге баш түгел, төҙәлер».

Бына бисәһе ҡат-ҡат туҡыған ошо аҡыл менән йәшәне Батыр ғүмере буйы. Кеше боҙ ялағанда — ул тоҙ яланы, һабан һөрмәне, иген икмәне, ураҡ урманы, ләкин көрпә-сәткә ононан ҡойған ҡоймаҡ алдынан өҙөлмәне, тыу бейә-нең май эсендә йөҙгән бөйөрө кеүек, ғүмер һөрҙө.

Ләкин мулла ҡатаһыҙ, кеше хатаһыҙ булмай тигән шикелле, Батырҙың флюгеры ла бер саҡ «дауыл» күрһә-тәһе урынға «һил генә тыныслыҡ» вәғәҙә итеп, уны төп башына ултыртты.

Утыҙ ике тештең дә еге булмай түгел бит инде, ҡолаҡ та юҡ-юҡ та төрлө хәбәрҙәр ишетеп ҡуя. «Ҡурҡаҡ ҡуян», «Төлкөбай» тигән ҡушаматтар Бүребаев ҡолағына ла са-лынмай ҡалманы, әлбиттә, ләкин ул ишетмәмешкә һалышты. «Флюгер»ҙы ваҡытында майлап, төҙәтеп, кәрәк йүнәлеш биреп тороусы уның ҡатыны был һүҙҙәрҙе үҙенең иң яҡын әшнә һатыусыларынан ишетеп ҡайтты.

— Штобы ла ошо арала үҙеңдең Бүребай икәнеңде күрһәтеп ал. Баҫымсаҡҡа баҡа айғыр тигәндәй, әҙәмде бик шаштырма — күрһәт үҙеңдең кем икәнлегеңде. Бел-һендәр, әҙерәк өркһендәр, телдәрен тыйһын, — тигән һуң-ғы әмер алды Батыр үҙ өйөндә.

Бирәм тигән ҡолона — килтереп ҡуйған юлына тигән-дәй, оҙаҡламай Бүребаевҡа үҙенең хеҙмәттәштәре ара-һында кем икәнлеген күрһәтмәгә, әллә нисә йөйөнән бүҫе-лә башлаған абруйын аҙыраҡ төҙәтеп алмаға көтөлмәгән бер уңайы ла килеп сыҡты.

Уның власы булған районда партия биләмәһенә ҡара-ған бер ғилми-тикшеренеү институты эшләй, ләкин Бүре-баевтың, күпме генә сикәһе ҡорошмаһын, был институт кешеләренә һүҙе үтмәй, сөнки ул ғилем эйәләре менән бер тиң тороп һөйләшеү өсөн секретарҙың белеме таҡырыраҡ, шуның арҡаһында түрә уларҙың фәнни проблемаларында тәрән фекер йөрөтә алмай. Шуға күрә институтта ҡалын портфель һөйрәп, һәүетемсә ватылмай-бәрелмәй генә Ле-нин бабай һүрәте төшкән, ҡыштырҙап торған червонецтар-ҙы алып ятыусы ҡайһы бер ғилем эйәләрен күреп, уның эсе боша, көнләшеүҙән елкәһе ҡороша, ләкин, үҙе әйтмәк-се, «пока»ға түҙергә тура килә.

Бына шулай, йомран ояһын көткән эт шикелле, инсти-тут тирәһен һағалап йөрөгән бер мәлдә әләкте бит секретарь ҡармағына бер табыш. Ҙур ҙа түгел, бәләкәй ҙә түгел, күп ташбаш, селбәрәләрҙе ҡомһоҙ ҡорһағына оҙат-ҡан урта йәштәрҙәге көмөш-сыбар тәңкәле суртан — вете-ринария фәндәре кандидаты. Баҡтиһәң, ул, селбәрә, ваҡ ташбашты ашарҙан алда тамағын ҡул аҫтындағы спирт

менән майларға ла күнегеп алған икән. Тел бешмәһе тейгән һәүкәштәргә, еүешлектән тояҡ аралары боҙола башлаған бәрәндәргә, сусҡаларға дезинфекциялауға тотоноллорға тейешле спирт фән әһеленең ҡорһағын таҙартыуға киткән. Артыҡ та түгел, кәм дә түгел — теп-теүәл ун литр. Бынан тыш, эскә ут ялҡыны бәреп торған йылы төшкәндән һуң башҡа йүгергән тахил шауҡымы фән эшмәкәрен кәйеф-сафа ҡороу өсөн саф һауаға, йәшел тәбиғәт ҡосағына — икһеҙ-сикһеҙ хиләүәткә саҡыра. Саҡырыу менән ни хәйер — берҙән-бер автомобилдең дүрт аяғы ла итекһеҙ, вайран булып ята. Ләкин осҡор, зирәк аҡыллы Маматовҡа был башты ни өсөн биргәндәр һуң? Хөкүмәт машинаһын тәгәрмәсһеҙ ҡалдырып, күсәрҙәрен түмәр башына ултырта ла, үҙ «аппарат»ының аяҡтарын «кейендереп» ала. Шулай итеп, машина месьәләһендә генә түгел, башҡа мөһимерәк эштәрҙә лә хөкүмәт иҫәбенән үҙ донъяһын бөтәйтергә керешә был кандидат йораты. Һәр мосолмандың донъялыҡта ҡылған изге эштәрен һәм гонаһтарын яҙып бара торған Мөнкир һәм Нәнҡир фәрештәләр шикелле, Маматовтың донъялыҡта ҡылған, тауыҡ сүпләһә лә бөтөрә алмаҫлыҡ хилаф эштәрен Бүребаев үҙенең «ғәмәл дәфтәр»енә теҙҙе.

Бына шулай, уйламаған ерҙә теге ҡомһоҙ суртан партком секретары ҡулына айғолағынан эләккәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Хәҙер инде нисегерәк итеп уны бюроға саҡырып, фирҡә билетын тартып алыу тамашаһы ғына борсоно секретарь күңелен. Үҙенең эсенә һыймай ташып барған тойғолары менән ул флюгерына дөрөҫ йүнәлеш, аяҡтарын нисегерәк алмашлап баҫырға күрһәтмә биреп тороусы, тормош ҡанундарының барлыҡ матдәләрен (статьяларын) яттан белгән абызтүтәйе йәғни абыстайы менән уртаҡлашты. Иренең бер яҡҡа ауа башлаған абруйын нисегерәк төҙәтергә белмәй баш ватып яфаланған хәләл ефет, кухнялағы эшен ташлап, ире алдына килеп сәнселде.

— Анауы бойора тигән нәмәнде алдан әҙерләнеп, шаулатып үткәреп ебәр. Ул ултырышыңа әҙәмде күп итеп йый, әйткәнеңде үҙ ҡолаҡтары менән ишетеп, батырлығыңа хайран ҡалып ҡарап ултырһындар. Фәһем булыр. Әҙәм балаһына изгелек менән ярап булмай. Бер ҡулыңда кәнфит булһа, икенсеһендә ҡамсың жыйлап торһон. Хәҙерге иманһыҙ бәндәгә шул кәрәк. Абруйың әсетергә ҡуйған ҡамыр шикелле күҙ асып йомғансы сүмәләләй ҡалҡып сығыр. Исмаһам, минең дә кеше араһында йөҙөм асылып ҡалыр. Ир афтаритын бисәләр күтәрә, — тип аҡыл өйрәтте Бүребаевҡа хужабикә.

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ. Мир араһына сыҡмай магазин, склад тирәһендә генә буталһа ла башы эшләй хәйерсеңдең.

Ысынлап та, бер донъяһын шаулатып алайым әле, тип уйлай бюро алдынан йоҡоһоҙ ятҡан Батыр. Ләкин «Ну, бисәкәй, баш бар ҙа һуң үҙеңдә — ун ирҙә булмаған аҡыллы кәңәштәр бирәһең», — тип ауыҙ асырға хужа бик ашығып бармай. Улай тигәс тә Бүребайҙы әллә бик бер ҡатлы тип беләһегеҙме, өйҙә ятҡан бисәне маҡтап ҡотор-топ булмаҫ әле, дәрәжәле хужа абруйы иң башта уның үҙ өйөндә моронлана. Үҙ бисәң һине һанға һуҡмаһа, ҡырҡ ата балаһын бар — тыңлатып ҡара». Шуға күрә ул күңеле менән бисәһенең өгөтөн ҡабул ҡылһа ла тыштан ғына:

— Ярай, уны һинән башҡа ла белерҙәр. Бигерәк кәңәш бирергә оҫтарып киттең әле, — тигән булды ла бисәһенә һырт биреп ятты. Ләкин бисә һүҙендә ныҡлы дөрөҫлөк барлығын ул күңел ҡапсығына биклəп ҡуйҙы.

Иртә менән эшкә килеүгә уның күҙгә кеүек ялтырап торған өҫтәлендә «Бюро»ға тигән йәшел тышлы папка ята инде инде. Ул кабинетында бер аҙ үрле-түрле йөрөп алды ла креслоһына терәп тигәндәй эшләнгән махсус бүлмәгә инеп, уны шатлыҡ менән ҡаршы алырға йыйынғандай нур сәсеп торған бейек трюмо алдына килеп баҫты. Белен-нер-беленмәҫ аҡ юлаҡ төшкән ҡара костюм, сикәләренә ҡырау төшә башлаған күҙрә сәс, олпат кәүҙә, әле бер ниндәй ҙә сырыш бураҙналар төҫмөрләнмәгән туҡ бит, осҡор ҡарашлы баҙрайған күҙҙәр, бер һүҙ менән әйткәндә, оло түрәгә хас сифаттарҙы бергә йыйған Бүребаев, уны былай ҙа матурыраҡ итеп күрһәтергә тырышҡан көҙгө алдында тора. Ул ентекләп ҡырылған шыма битен йом-шаҡ устары менән наҙлы ғына һыйпай. Ҡабарыбыраҡ торған яҫы ирендәрен трибунала телмәр тотҡан рәүешкә килтереп, ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла салышайтып ала. Үҙенең килбәтле тышҡы ҡиәфәте бөрккән тәкәбберлек тойғоһо уның йөҙөнә сыҡҡан. Үҙен бер туҡтауһыҙ күҙәт-кән трюмо алдында ул тағы ла аллы-артлы йөрөп ала. «Туҡта, үҙ ярҙамсыларыма ошо трюмоны эш бүлмәһенә сығарып ҡуйырға әйтергә кәрәк. Комитетҡа ултырышҡа йәки башҡа йомош менән килгән кешеләр ошо көҙгө алдында үҙҙәрен нисек торорға белмәй, аптырап алһындар әле», — тигән осҡор фекер килә Бүребаев башына.

Ул әйләнмәле креслоға ултырып, көн тәртибен ҡарарға керешә. «Әһә, быныһы ҡышҡа әҙерлек хаҡында, ә дружи-налар эше тураһындағы отчет икенсе мәсьәлә икән. Иң һуңғыһы коммунистарҙың персональ эше. Туҡта-туҡта, нишләп һуң әле Маматовтың эшен иң һуңға ҡалдырып ҡуйғандар, юҡ, былай бармай. Уны беренсе итеп тикше-рергә кәрәк. Иң башта шуның эше менән ел-дауыл ҡуп-тарып, әле бюро ағзалары арымаған, уларҙың диҡҡәт-зиһендәре етди, тамаҡтары туҡ саҡта тикшереү урынлы

булыр, — тип секретарь ҡыҙыл уҡ менән институт эшмәкәренең эшен өҫкә сығарып ҡуя. — Персональ эштәр буйынса комиссияның тикшереү һөҙөмтәһе хаҡында ҙур ғына документ бар, партиянан сығарыу хаҡында һорап яҙған, хатта коммунистарҙың йыйылышында тәсдиҡ ителгән ҡарар менән ҡуша, документ теркәлгән. Быныһы бик мәхкүл. Коллективтың фекере ҙур таяныс. Үҙенең аңлатмаһы ла бар икән. Уны ваҡыт әрәм итеп, уҡып тороуҙың хәжәте юҡ. Билдәле, ул әҙәм аҡланырға тырышҡан инде. Уныһы беҙҙең өсөн мөһим түгел. Туҡта, был эш буйынса кемдәр саҡыртылған икән? Исемлекте ҡарап сығайыҡ әле. Институт етәкселәре бар, милиция начальнигы, прокурор бар. Яҡшы, яҡшы. Туҡта-туҡта, хәҙер үк прокурор менән һөйләшеп алырға кәрәк. Бюрола был эш буйынса Маматовты иң башта ул түшәп һалырға тейеш». Үҙе менән шулай һөйләшә-һөйләшә, Бүребаев бөгөнгө бюро көн тәртибен тикшереп, барлап сыҡты.

Бына шулай эш менән мәшғүл Бүребаев бюро башланыр сәғәтте һиҙмәй ҙә ҡалды. Был ҡиәмәт көнөнә иҫәп-хисап биреү өсөн саҡырылған ағай-эне берәм-берәм коридор стенаһына теҙелгән ултырғыстарҙан урын ала. Һандуғас балалары кеүек, бер-береһе менән йәнәш ултырған мөһабәт кәүҙәле олпат ирҙәрҙең сырайҙарына болот шәүләһе ятҡан, йөҙҙәре һытыҡ, ғәҙәттәге күтәренке кәйеф, тәкәбберлек һыҙаттары бөркөп торған алһыу биттәр тоноҡ, әйтерһең дә был ирҙәр барыһы ла оло ҡайғы-хәсрәткә дусар ителгән. Ғәҙәттәге тамаҡтан шаршы йылға ише гөрләп сыҡҡан тауыштар һүнеп ҡалған. Коридорҙа гүр тынлығы, бик хөрмәтле уҙамандарҙың кемеһендер ерләргә килгәндәрме ни? Бар әҙәм үҙ ғәменә инеп бикләнгән, һәр кемдең башын бында тик бер генә һорау тынғы бирмәй өҙләкһеҙ тишә: «Нисек итеп бәлә-ҡазаһыҙ алдағы сират күперенән ялмарға әҙер торған тамуҡ утына аумайынса үтеп китергә?»

Бына бюро залының ишеге кинәт асылды. Коридорға ҡупшы аяҡтарын сәнсә баҫып, серәкәйҙеке кеүек нескә билле, битенә мул ғына кершән һылаған ҡыҙ килеп сыҡты. Ул тәүҙә бөтә кешене барлағандай ике рәтте күҙ ҡарашы менән өтөп алды. Яҙмыштарын ҙур сабырлыҡ менән көтөп ултырған, уның уйынса «донъя имгәктәре»-нән үҙ өҫтөнлөгөн тағы бер тапҡыр күрһәтергә теләгәндәй, ҡыҙыҡай төрлө төҫкә буялған битенә тәкәбберлек һыҙаттары йүгертте, уның күңелендә һәр саҡ ғәҙел хөкөм йөрөткән был учреждениеға хисап менән килеүсе бөтә кешегә ҡарата тик асыулы нәфрәт тойғоһо ғына булырға тейешлеге уның бөтә ғорур ҡиәфәтенә сыҡҡайны. Ул ҡаҙалған энә кеүек дөм ҡара керпектәрен өҫкә сөйөп, утлы ҡарашын бер нөктәгә төбәне лә иғлан ҡылды:

— Кем дә кем Маматовтың персональ эше буйынса саҡырылған, барығыҙ ҙа ултырыштар залына үтегеҙ.

Бер төркөм кеше яй ғына урынынан тороп, асыҡ ишеккә йүнәлде. Ниндәйҙер һәләкәт тойоп, ит комбинаты ҡапҡаһына инмәй ҡаршылашҡан мал кеүек, ишек төбөнә килеп терәлгән был төркөм араһында ла бер аҙ сыуалыш булып алды. Уларҙың барыһы ла бәләнең башы Маматовты эткеләй-төрткөләй алдан индерергә теләне, ләкин үҙенең гәҙәттәге һары импорт күненән тегелгән затлы пальтоһын ҡалдырып, өҫтөнә мал араһында ғына кейерлек бишмәт һалып алған, башын элекке ғорур ҡиәфәттең әҫәре лә ҡалмаған яурынына йәшергән ветеринар алдан юл башларға ашыҡманы. Нисек кенә ҡарышмаһын, ултырыштар залына тәүге аҙымды ул башланы. Яҙғы сыуаҡ көн булыуға ҡарамаҫтан түшәмдең ике урынынан аҫылынып төшкән ыҫпай люстраларҙан, күңелгә ниндәйҙер шөбһә һалған, былай ҙа ҡояш нурҙарына мансылған залға электр утының һирпелеп тороуы ҡараңғыраҡ коридорҙан ингән кешеләрҙең күҙҙәрен сағылдырҙы. Килгән кешеләргә урын күрһәттеләр. Иң алғы — үҙ кендегендә төрлө яҡҡа әйләнеп торған креслоға Маматовтың үҙен ултырттылар. Башын ҡалҡытып, ярым түңәрәк булып ултырған бюро ағзаларына ҡараш ташлауы булды, уның былай ҙа һеркелдәп, нимәгәлер аҫылынып саҡ ҡына торған йөрәге өҙөлөп киткәндәй тойолдо. «Мөғәлләмов ҡайҙа юғалды икән, былар араһында юҡ та баһа», — тигән ҡурҡынслы уй уның башынан йәшен булып үтеп китте. Уның Мөғәлләмов тигән институт буйынса һабаҡташы, ветеринар булыуға ҡарамаҫтан, ҡалаға олағып, көнкүреш даирәһендә ҙур ғына вазифа биләгән был кеше — Маматовтың күптәнге әшнәһе. Ул ошо бәләгә юлыҡҡас, үҙ кешеһенә «ярҙам ҡулы һуҙырға» вәғәҙә иткәйне. Билдәле, үңәсенән боғалға эләккән Маматов та партия органдарында арҡаһын ныҡҡа терәгән был кешене ҡулдан ысҡындырмау сараһын күрҙе. Уның ғына түгел, хәләл ефетенең дә тыуған көндәрен дуҫтар бергә үткәрҙе. Хисапҡа инмәгән спирттың ғына түгел, төрлө юлдар менән хужалыҡтарҙан ҡалаға «аяҡланған» һарыҡ һебәләре, йылҡы ҡаҙыларының байтаҡ өлөшө Мөғәлләмовтың шкаф бейеклеге һыуытҡысында урын тапты.

Маматов, әллә ныҡ шөрләүҙән күҙ яңылыштымы икән, тип яңынан башын ҡалҡытты, ҡарашы ярым түңәрәктә буш урын күрҙе. «Төп башына ултыртты бит, сволочь, эт ҡойҡаһы», — тип бышылданы, тешен ҡыҫып. Әшнәһенең күпме взятка алғанын һанай ғына башлағайны, зиһене буталып, күҙ алды томаланды, сығарыласаҡ яза ҡарары уның уйын бүлде. Эске көсөргәнештән бәреп сыҡҡан

һалҡын тир уның умыртҡа һөйәге буйлап аҫҡа тәгәрәне. Маңлайын һөртөргә самалағайны ла, аяҡ үрә баҫып салбар кеҫәһенән бисәһе тыҡҡан батмустай биҙәкле батист ҡульяулыҡты сығарып алырға батырсылығы етмәне — ҡулының һырты менән генә маңлай тирен һирпте лә, бөтә донъянан ваз кисеп, ике күҙен йомдо. Уны бигерәк тә үҙенең иң алғы креслола ултырыуы, үҙ артындағы кешеләрҙең береһен дә күрә алмауы ныҡ ҡурҡытты. Кинәт уның күңелендә бәҙрәфкә сығыу теләге тыуҙы. Ындай мөмкинлектең булмауы әле уның күҙ алдында дәжжәл булып уйнаған бөтә дәһшәттәрҙе ситкә алып ырғытты. Уның барлыҡ бөтмөшөн тик бәҙрәф ҡайғыһы ғына солғап алды. Нәҡ ошо мәлдә генә уның сүңкаһына кемдер кендек менән тондорғандай итте... Бер аҙ һеңгәҙәп ултырғандан һуң иҫенә килгәндә, ул ниҙер һөйләй башлаған Бүребаевтың ҡуйы ҡаштары аҫтында осҡон сәсрәткән утлы ҡарашын күрҙе. Уның ҡылыс сабыуынан башын йәшергән кеше кеүек, ул ултырған креслоһында аҫҡараҡ сумырға тырышты. Аңы томаланыуҙанмы, әллә сиктән тыш тулҡынланыуҙанмы, Маматов секретарь һүҙен аныҡ ҡына төшөнә алманы, уның тауышы иҙән аҫтынан сыҡҡан кеүек, һаңрау ғына ишетелде, ләкин хужаның ҡулын болғай-болғай нәфрәт сәсеп һөйләүенән һүҙ үҙе тураһында барғанын аңланы. Бүребаевтың түшәм терәп торған күҙрә башы, өҫтәлгә терәгәндә сүместәй булып йомарланған йоҙроҡтары, һәм һәр бармағының һыртына үҫкән ҡуйы йөнөнә ҡарап, Маматов: «Кеше йәнен ала торған Ғазраил пәйғәмбәр тигәндәре ошо булалыр инде, бигерәк ҡот осҡос, фамилияһы ла Бүребаев, үҙе лә алғыр бүреләй бит, боғаҙыңдан эләктерһә, валлаһи ғәләм, иманыңды уҡырға ла өлгөрә алмаҫһың», — тип уйланы.

Уның Бүребаев хаҡында шулай уйларға бөтә нигеҙлектәре бар ине, сөнки уның «Ҡурҡаҡ ҡуян», «Флюгер» тип яҡындары араһында ғына йөрөтөлгән ҡушаматтары ғалимдар араһында әле таралып өлгөрмәгәйне, киреһенсә, былар даирәһендә уның бигерәк тә уҡымышлы ағай-энегә ҡарата бәгерһеҙ, аяуһыҙ етәксе булыуы хаҡында хәбәр ҡуйырғайны.

Беренсе һүҙҙе партия комиссияһы рәйесе Перцовойға бирҙеләр. Баштан ғалимға ҡарата теҙгенде нисегерәк тотоу хаҡында кәрәкле күрһәтмә алған был кеше, күҙлеген бер кейеп, бер ҡулына алып, нишләптер ауыр гобелендәр аҫылынған ҙур тәҙрәләргә үлемгә дусар ителгән сырай менән текләп ултырған Маматовты түшәп һалды. Ғәйепләнеүсене нығыраҡ фашлаған һәр һүҙе һайын тәжрибәле тәфтишсе Бүребаевҡа: «Йә, Батыр Батырович, һинең күрһәтмәне нисегерәк үтәгәнмен, арҡаһын бешерәмме тегенең?» — тигә-

нерәк һораулы ҡараш ташланы. Үҙенең йомшаҡ креслоһында артҡа ҡайҡайыңҡырап, сырайына оло ҡәнәғәтләнеү билдәләре йүгертеп ултырған Бүребаевтың осҡонло ҡарашындағы: «Давай, давай шул рәүештә дауам ит», тигән хуплау ишараһын тойоп, шашыуы камил «нозрый нөктәһе»нә килеп еткән рәйес үҙенең һуңғы кәртен ырғытты.

— КПСС ағзаһы Маматов дәүләт милкен систематик рәүештә урлауҙан тыш, үҙ коллективында эшләгән ҡатынҡыҙҙар намыҫына ла ҡул һуҙған кеше. Үҙ ҡулы аҫтында эшләгән ғаиләле бер нисә ҡатын менән енси бәйләнешкә ингән, ошо маҡсат өсөн эш ваҡытында беркетелгән машинаны файҙаланған. Һөҙөмтәлә ике ғаилә тарҡалыу алдында.

Докладсының был фашлау һүҙен ишеткәс, комитетта байтаҡтан бирле эшләп килгән бер-ике буйҙаҡ ҡатын: «Это уж не твое дело, старый хрыч, с любовью не шутят», — тип эстән үҙҙәренең ризаһыҙлыҡтарын белдереп ҡуйҙы. Элекке ултырыштарҙа ла был ике ҡатын үҙ ғаиләһен ташлап ҡайһы бер ирҙәрҙең икенсе мөхәббәт ҡосағына сумыуҙарын аҡлап сығыш яһағайны. Быларҙың береһе, ҡыраулана башлаған башын ниндәйҙер крем менән буяп ҡарайтырға тырышыуы арҡаһында, һары бумалаға оҡшағаныраҡ сәс йөрөткәне: «Коммунистарҙың да үҙ мөхәббәттәренә хоҡуғы бар. Коммунисмын тип партия билеты йөрөткән ирмен тигән ир уставтан ҡурҡып, һөйкөмһөҙ бисәһенең итәгенә йәбешеп ятырға тейешме ни? Марксистик идеология мөхәббәтте бер ҡасан да инҡар иткәне юҡ», — тип ҙур ғына нотоҡ һөйләп ташлағайны. Ошо ултырыштың аҙағынан Бүребаев үҙенең статистика секретары мөдире Платонованы саҡырып: «Ошо беҙҙең буйҙаҡ бисәләргә берәр урындан ир табып бирһәңсе. Сит бисәләр менән йөрөгән берәр коммунистың персональ эшен тикшерә башлаһаң, шуларҙы тешетырнағы менән яҡлап, саба ла сығалар ҙа баһа», — тип «партия поручениеһы»ла биреп ҡарағайны. Ләкин сектор мөдире хужа ҡушҡан эште башҡара алманы. Әле бына хәҙер ҙә Бүребаев улар ҡырында ултырған Платоноваға үҙенең үпкәле ҡарашын ташлап ҡуйҙы. Үҙ ғәйебен аңлаған ҡатындың йөҙөнә алһыу һыҙаттар йүгерҙе.

Парткомиссия председателенән һуң прокурор һүҙ алды. Фекерҙең ағышы ҡайһы үҙәнгә табан йүгергәнен һәр күҙәнәге менән һиҙеп ултырған дәүләт ғәйепләүсеһе тәүге докладсынан да арттыра төштө. Бындай саҡтарҙа вазифалы ағай-эненең танауы бигерәк тә һиҙгер була шул. Ошондай мәлдә тирмән ҡуласаһын әйләндерергә тотонған хужа менән ҡуша уға йәнтәслим бирелгәнлегеңде иҫбатлау

өсөн һыу ҡойоп ҡалмаһаң, иртәгә ул ҡуласа кирегә әйләнеп китеүе лә бар бит әле, тип уйланы закон кешеһе. Ул үҙенең ялҡынлы һүҙҙәр менән сыбарланған ҡайнар телмәрен:

— Батыр Батырович, быңдай дәүләт милкенә ҡул һуҙған бурҙар, кем генә булыуына ҡарамаҫтан, һис һүҙһеҙ, фирҡә сафынан ҡыуылырға тейеш. Ул ғына ла түгел, әгәр һеҙ бөгөн унан фирҡә билетын тартып алһағыҙ, мин иртәгә был кешегә, совет институтында оялаған ҡоротҡосҡа ҡарата, уголовный эш башлайым, — тип бөтөрҙө.

Ҡырҡ ятып, ҡырҡ торғанда ла быңдай нәтижәне көтмәгән Маматовҡа прокурорҙың был һүҙҙәре уның ҡолаҡ төбөндә ҡушкөбәктән атҡан кеүек ишетелде. Былай ҙа шөрләүҙең сигенә сыҡҡан Маматов йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалған был дәһшәтле һүҙҙәрҙән быуындары ҡалтырап, уның бөтә кәүҙәһе мамыҡҡа әүерелде. Төрмә тураһында әллә ниндәй сырмалсыҡ, береһенән-береһе шомло уйҙар йәшен тиҙлеге менән уның башынан үтеп китте.

Иң аҙаҡтан институттың директоры менән партия ойошмаһы секретарын торғоҙҙолар. Бәлки, ғүмер буйы үҙем менән бергә эшләгән минең оло коллегаларым миңә ҡарата берәр йылы һүҙ әйтеп, ҡурсалап алып ҡалырҙар, тигән өмөт менән Маматов, үҙенең «институт директорының фәнни-практик эш менән етәкселек итеүҙә һис бер һәләте юҡ. Ғалимдар тәҡдим иткән фәнни асыштарҙы практикаға индереүҙә директор бармаҡ та ҡыбырлатманы», — тип яңы ғына юғары органдарға ялыу төшөрөүенә ҡарамаҫтан, үҙ директорына меҫкенле күҙҙәре менән мөлдөрәп ҡараны. Хәрәкәттәре яй, олпат кәүҙәле институт хужаһы ғалимдарға ғына хас тыныслыҡ менән трибунаға атланы. Мәсьәләне бик ҡоро тоторға самалаған Бүребаевтың иҫәбенсә, бөтә сығыштар ҙа етди, ҡыҙыу темпта алып барылырға, ғәйепләнеүсене иҫенә килергә мөмкинлек бирмәйенсә бер һуғыуҙа шаңҡытып, үҙе әйтмәксе, «порошок онона» әйләндереү күҙҙә тотолғайны. Ләкин һүҙ алған директорҙың артҡы рәттән тороп, трибунаға ығыш ҡына йүнәлеүе, урынына баҫҡас, бер ни булмаған шикелле дүрткә бөкләнгән ҡулъяулыҡты яҙып күҙлеген һөртөп бөткәс, зал яңғыратып картуфҡа тартымыраҡ танауын һемгергәндән һуң ашыҡмай ғына, ентекләп һөртөнөп тороуы был мәсьәләне тикшереү менән мауығып, камил йөрәге ярһып өлгөргән Бүребаевты сығырынан сығарҙы. Асыуынан шартларға етешкән Бүребаев түҙмәне, ҡәләмменең төбө менән көҙгө кеүек ялтыр өҫтәлен төйгөсләп, ҡаштарын уҡмаштырып өҫкә сөйҙө лә:

— Профессор иптәш, бында беҙ һин фәнни конференцияла үткәргән докладыңды тыңларға йыйылмағанбыҙ.

Был практик конференцияға һеҙҙе бына мин йыйғанмын, уны мин үткәрәм. Был бер. Икенсенән, докладсы итеп түгел, ә яуап биреүсе итеп. Етеҙерәк ҡуҙғалығыҙ. Беҙҙең көн тәртибендә һеҙҙең генә мәсьәлә түгел, мөһимерәк эштәр ҙә ҡарала, — тип киҫәтеп ҡуйҙы.

Ләкин уның был репликаһы бушҡа ғына булды. Профессор күҙлеген танау кимерсәгенә элеп ҡуйҙы ла, ярым боролған хәлдә, Бүребаевҡа үҙе көтөлмәгән һорау атты.

— Нисек? Мин ниндәй яуапсы, минең аңлауымса, эш боҙған кешене генә яуапҡа тарттыралар, ә минең хөкүмәт алдында ла, партия алдында ла бер ниндәй ҙә гәйебем юҡ. — Бюроға үҙенең ни өсөн саҡырылғанын ныҡлап төшөнөп етмәгән, бындай хилаф эштәрҙән бик алыҫ торған ғалим, эш бөткәнгә һанап, ике ҡулы менән трибунаны ҡосаҡланы.

— Профессор иптәш, персональ эше буйынса ошонда саҡырылған, дәүләт милкен урлауҙа гәйепләнгән фән кандидаты Маматов һеҙ етәкселек иткән институтта эшләй. Һеҙ уның өсөн берҙәй мәсьүлиәтле. Бына шул мәсьәләгә һеҙҙең мөнәсәбәтегеҙҙе һәм дәүләт милкен һаҡлау буйынса иҫәп-хисап эшен яҡшыртыуҙа ниндәй саралар билдәләнгән? Шул турала һөйләгеҙ. Маматовтың енәйәт эштәренең башы һеҙ етәкселек иткән институтта урлашыуға юл ҡуйылыу арҡаһында килеп сыҡҡанын да онотмағыҙ, бюро шундай һығымта яһай. — Бүребаев үҙенең тауышын бер тонға түбән төшөрөп, байтаҡ ҡына өгөт-нәсихәт уҡып алды. Ярҙамға килегеҙ, нишләп шымып киттегеҙ, тигән һымағыраҡ, ул үҙен тирәләп ултырған ярандарына утлы ҡараштарын уйнатып ҡуйҙы.

— Ысынлап та, был ниндәй эш. Бәләнең башы институт етәксеһендә, дәүләт милкен урлашыуға, әрәм-шәрәм итеүгә был фәнни учреждениела бөтә шарттар тыуҙырылған. Уның етәксеһенең гәйебе лә Маматовтыҡы менән бәрәбәр, бер бизмәнгә һалып үлсәнергә тейеш, — тине, хужаһының һәр ҡарашын уҡырға өйрәнгән урынбаҫары, көрәшкә сығырға атлығып торғандай, талпынып ултырған йәш кеше.

— Күрҙегеҙме, профессор әфәнде нисек бер ни ҙә аңламаған бер ҡатлы кеше булырға тырыша. Бөтә бәләнең башы ла ошо етәксенән килә, үҙенең бөтә кешегә либераль мөнәсәбәте арҡаһында килеп сыҡҡан да инде был енәйәт. Үҙ учреждениеһында урлашыуға юл ҡуйғаны, үҙ эшсәндәрен тәрбиәләүҙе йомшартҡаны өсөн профессор Ғарифуллинға шелтә иғлан итергә тәҡдим итәм, — тип ысҡындырҙы Бүребаевтың һул ҡулында ултырған туҡ битле, йомро кәүҙәле кеше.

Нисек кенә ғәмһеҙ булмаһын, һуңғы тәкдим профессорҙы ла йоҡоһонан уятҡандай итте. Ул үҙенең күҙлеген танауы буйлатып аҫҡа төшөрҙө лә ошо тәкдимде керткән бюро ағзаһына сипыҒыраҡ күҙҙәрен тултырып байтаҡ ҡына текләп торҙо. Ғүмерендә беренсе тапҡыр партия органдары алдында сөъалда торған ғалим бындай тәкдимде ҙур ғәҙелһеҙлек итеп ҡабул итте.

— Был ниндәй баш-баштаҡлыҡ. Ике ай ғына элек финанс идараһынан килеп институтҡа тикшереү үткәреп киттеләр. Был тәңгәлдә институттың иҫәп-хисап эше яҡшы тип табылды, баш бухгалтер менән үҙемә айлыҡ эш хаҡы миҡдарында премия бирелде, — тип профессор тағы әллә ниҙәр теҙергә самалағайны ла, баяғы таныш тауыш:

— Унда ла шул үҙең шикелле либералдар ултыра, — тип бүлдерҙе. Был ике кеше араһында тоҡанып барған янғын арҡаһында мәсьәлә ҡарауҙың етдилеген юғалтып тыныс һуҡмаҡҡа төшөп барғанын Бүребаев үҙ ваҡытында һиҙеп ҡалды.

— Иптәштәр! Мәсьәлә көн кеүек асыҡ. Һеҙ ултырығыҙ, профессор иптәш, — ул трибуна артында, түшәмдән аҫылынып төшкән, көпә-көндөҙ сыуаҡлы көн булыуға ҡарамаҫтан үҙенең унарлаған шәменән бөтә залға электр уты һирпеп торған ҡиммәтле канделябрҙарға хайран ҡалып текләп торған Ғарифуллинға мөрәжәғәт итте. Ләкин профессор йәһәт кенә йыйыныр ҙа шатлығынан тиҙ генә урынына барып ултырыр, тип Бүребаев ныҡ хаталанды. Бер ни булмаған кеүек, ул яңынан күҙлеген ысҡындырып ентекләп һөрттө. Зал яңғыратып ҡабаттан танауын һеңгерҙе. Картуфтай танауын төрлө яҡҡа борғолай-борғолай таҙартып алғандан һуң, трибунала ятҡан бер-нисә ҡағыҙын быуаҙ папкаһына тыҡты. Профессорҙың вайымһыҙ ҡыланышы, бәлки, ихтыярынан ғәйре үҙен бөтөнләй иркен тотоуы, башҡалар кеүек үксә шыҡылдатып бөтә нәмәгә лә ризалашып, баш һелкеп тормауы, был зал эсендә бына-бына тоҡанырға торған теләһә ниндәй утынды ла һүндерә алыуына Бүребаев баштан уҡ ышанғайны. Шуға күрә лә ул был эпизодҡа артыҡ үҙ иғтибарын сарыф итмәҫкә булды. Уның өсөн айғолағынан килеп эләккән фән кандидатын партиянан сығарыу мөһим. Эсендә нәфрәт уты ҡайнауына ҡарамаҫтан Бүребаев профессорҙың ашыҡмай ғына үҙ урынына барып ултырыуын ҙур түҙемлелек менән көттө. Яңы ғына һайланып ҡуйылған партия ойошмаһы сәркәтибенән тәфтиш алып та торманылар. Ул шатлығынан нишләргә белмәй, йүгерә-атлай үҙ урынына барып ултырҙы.

Аяҡ үрә баҫып торған Бүребаев уң ҡулы менән күҙрәһен өҫкә һыйпап алды ла һүҙ башланы:

— Бына был кеше ябай ғына бур түгел, ғилемле уғры. Ул ошо ҙур ғилми дәрәжәне беҙҙең йәмғиәтебеҙҙе артабан үҫтереү, хөкүмәткә, партияға тоғро хеҙмәт итеү өсөн түгел, ә уны талау өсөн алған. Бындай диплом артына йәшеренгән дәүләт милкен урлаусылар, бәләкәй жулик-несундарға ҡарағанда, ун тапҡырға ҡурҡынысыраҡ. Тик бына шундай кеҫәләрендә партия билеты йөрөткән ғалимдар — ҡараҡтар ғына, данлы КПСС-тың абруйына күпме сәйәси зыян, серкеү килтерә. Беҙ киләсәктә лә бындай әҙәм аҡтығы кешеләргә аяуһыҙ булырға тейешбеҙ. Мин «Маматовты партиянан сығарырға» тигән проектҡа ҡушылам, әгәр бюро ағзалары ҡаршы килмәһә, был әҙәмдән бөйөк Ленин төшөрөлгән партия билетын ҙур ризалыҡ менән тартып алыр инем. Уның кеүек осраҡлы кешеләр намыҫ һәм выждан символы булған билетты йөрөтөргә хаҡы юҡ, — тине лә ул ян-яғына ҡаранып алды. Уны тирәләй ултырған бюро ағзалары ризалыҡ белдереп, бары берҙәй баштарын һелкте.

— Маматов, килтер билетыңды, — тип бойорҙо Бүребаев. Был комитетта фирҡәнән сығарылған кешеләрҙән билеттарын тик ишекте сыҡҡас ҡына алыу ғәҙәткә керһә лә, мәсьәләгә нығыраҡ иғтибар йәлеп итеү йәһәтенән хужа ул ҡағиҙәне боҙорға ҡарар итте.

Ҡобаралары осҡан Маматов, өнөммө, төшөммө тигән шикелле, ысынбарлыҡты инҡар итергә йыйынған кеше кеүек, әкрен генә аяҡ үрә баҫып, бер урында тапанып алды ла, түш кеҫәһен ҡапшай-ҡапшай, быуындары мамыҡҡа әйләнгән аяҡтары менән президиум өҫтәле алдына килеп баҫты. Тышы керләнеп төҫөн юғалтҡан портмонеһын асып ҡатырғаһы кителә башлаған билетын сығарып өҫтәлгә һалды, ләкин үҙ ғазраилының уҫал күҙенән ҡурҡып, башын күтәреп ҡараш ташларға батырсылығы етмәне. Бүребаев алдында әле кисә генә өҫтөнә көрән төҫтәге күн тун кейгән, һәр саҡ ҡултыҡ аҫтына затлы папка ҡыҫтырған, тәкәбберлек һыҙаттары йөҙөнөң һәр күҙәнәгенән бәреп торған фән эшмәкәре түгел, ә бите һурығыу ғына түгел, сирышҡан тоҙло ҡыярға оҡшаған, йыйырсыҡ бураҙналары ҡаплаған бер меҫкен баҫып тора ине.

— Һеҙгә, Маматов, сығырға мөмкин. Ә уның киләсәкке яҙмышын беҙҙең органдар совет законданына ярашлы рәүештә хәл итер, — тип ул алғы рәттә бер өҫтәл артында ултырған милиция начальнигы һәм прокурорға ишараланы.

Портфелен һөйрәп ишеккә йүнәлгән профессорҙы туҡтатып, Бүребаев:

— Бының ише дәүләт милкен туҙҙырыу факттары тик һеҙ етәкселек иткән институт ғалимдары араһында, башы-

нан аяғына тиклем серегән коллективта ғына булыуы мөмкин. Тиҙ арала ошо тәңгәлдә һығымталар яһамаһағыҙ, бына һеҙҙе лә, профессор иптәш, шундай яҙмыш көтә, — тип иҫкәртеп ҡуйыуҙы мәхҡүл күрҙе.

Бүребаев алдындағы ҡара ҡараға пероһын манып, әле Маматовтың тән йылыһы бөркөп торған билетты ҡулына алып, байтаҡ ҡына теклəп ултырҙы һәм уның тәүге битенә: «Дәүләт милкен урлаған өсөн — июлдә 19... йыл, бюро ҡарары нигеҙендә партия сафынан сығарылды», — тип резолюция һуҡты ла йоҡа ирендәренә йылмайыу һыҙаттары йүгертеп, сектор мөдире Платоноваға эйәк ҡаҡты. Уныһы, осоп килеп, Маматовтың юҡка сыҡҡан билетын әләктерҙе.

«Өйгә ҡайтыу менән үк был шатлыҡлы ваҡиғаны бисәгә сисмәйерәк торорға кәрәк әле. Бүребаевтың кем икәнен, нисегерәк эш йөрөткәнен башҡа урындан үҙ ҡолағы менән ишетһен», — тип Батыр Батырович ҙур кинәнес кисергән сырайына тағы ла етдилек сифаттары һирпеп, башҡа мәсьәләләргә күсеп китте. Уның өсөн бөгөнгө көн иң бәхетле, иң яҡты, күңелдәрҙе елкендергән көндәрҙең береһе ине.

Күп тә үтмәй, Батыр Батырович үҙенең тик аяҙ көн һәм зәңгәр күктә бергә йөҙгән, ошо ваҡытҡа тиклем талғын ғына алға ынтылған ғаилә елкәненә дөрөҫ йүнәлеш биреп тороусы хәләл ефетен эйәртеп, Ҡара диңгеҙ тарафтарына ял сәфәренә сығып китте.

Көнө-төнө прокурорҙың саҡырыу ҡағыҙын, суд ҡарарын көтөп, конфискация-фәлән тыуып китһә, тип үҙенең затлы әйберҙәрен, йыйыштырған мөлкәт-болын төрлө ергә урынлаштырып бөткән, тамам нервылары ҡаҡшаған Маматов үҙен бер аяғы менән төрмәлә тоя ине инде. Уны тик был органдарҙың эште ошоға тиклем һуҙыуҙары ғына аптыратты. Бүребаевтың уның башын төрмәгә тығасағына һис кенә лә шиге ҡалмағайны. Ләкин, күп тә үтмәй, уның ҡояшы яңынан балҡыр, күк йөҙөндә уның йондоҙо атасаҡ, тип ул ғүмерендә башына ла килтермәгәйне. «Ярар, бик ашыҡмайыҡ әле ул ҡәҙәр. Яныш барған эш юҡ, өлгөрөрбөҙ. Хужа ҡайтһын, тағы бер кәңәшләшербеҙ», — тип был сетерекле мәсьәләне ваҡытлыса кисектергән прокурор һуңынан үҙ-үҙен маҡтап бөтә алманы. «Ай, маладса, үҙемдә баш бар икән, иншалла», — тип шатлығынан доға ҡылды.

Бүребаев абыстайы менән Ҡара диңгеҙ пляжында тик уларҙы ғына наҙлаған, үҙ нуры менән тик уларҙы ғына мансыған көньяҡ ҡояшына дөм ҡара янып, тик уларҙы ғына иркәләгән диңгеҙҙә арҡырыға-буйға айҡай-байҡай

туйғанса ҡойоноп, тыуған яҡтарына ҡайтып төшөүгә, заманалар ҡырҡа үҙгәреп, талымһыҙ, һәүетемсә генә алға әйләнгән тирмән ҡуласаһы кирегә борола башлағайны. Ниндәй генә ғәрәсәт-дауылдарға ла ҡарамай алға елгән тормош кәмәһенең ҡомға терәлгәнен Бүребаев эш кабинетының ишеген асҡас та һиҙҙе.

Уның иң беренсе ҡабул иткән кешеһе прокурор булды. Ғәҙәттә, теләһә ниндәй хәлдә лә һалҡын ҡанлылыҡ хас булған, бик сәбәләнеп бармай торған был кешене бөгөн танырлыҡ түгел ине. Ул бите буйлап тәгәрәгән бөрсөк-бөрсөк тирҙәрен һыпырып алды ла «Уф!» тип, бер аҙ тынысланырға теләп күрәһең, ҡаты көрһөнөп ҡуйҙы.

— Бөлдөк, тыңла, — тине прокурор, һәм күҙ асып йомғансы иҫ китмәле яңылыҡтар тиреп һалды: — Гәзиттә уҡығанһыңдыр — беҙҙең өлкән хужаны алып ырғыттылар бит. Уның урынына мәркәздән икенсе кешене ебәрҙеләр. Ошо аҙнала ғына пленум булып үтте.

— Ялда ул гәзитте кем уҡыған. Былай ҙа туҙға яҙылмаған хәбәрҙәренән баш ҡатҡан, ләкин өлкән хужаның бушатылырға тейешлеге былай ҙа асыҡ ине инде, — тине Бүребаев элекке түрәлек рәүешенә яңынан ҡайтып. — Хужалар килә торор, бүреләр йөрөй торор, — тине секретарь, мыйыҡ аҫтынан ғына көлөмһөрәп.

— Әй, Батыр Батырович, бүреләр юлына ҡыҙыл сепрәктәр эленгәнгә оҡшай, — тине прокурор һаҡ ҡына.

— Аңламаным. Ул ни өсөн? Ошо партияға көнө-төнө бирелеп, 25 йыл фиҙаҡәр хеҙмәт иткән өсөнмө? — тине Бүребаев әҙерәк ҡайҡая биреп. Ул башын ҡырын һалып, танауы буйлатып, ҡарашын аҫҡа йүнәлтте.

— Өлкән хужа булып килгән кеше беҙ теге ваҡытта бер ҭауыштан партиянан сығарып ырғытҡан Маматовтың ике туған ағаһы булып сыҡты. Әйткәндәй, уның туған-тыумасаһы менән беҙҙең ҡала тулған.

Артҡа ҡайҡайыбыраҡ ултырған Бүребаевтың биленә кемдер аңғармаҫтан балта төйҙәһе менән тондорғандай булды. Прокурорҙың был шомло хәбәре уның башы аша боҙло һыу һипкәндәй тәьҫир итте. Бүребаев кинәт өҫтәленә бөгөлдө лә:

— Һин ул әҙәмде ултыртып ҡуймаһаң ярар ине? — тип серле ҡарашын төбәне. Уның көҙән күҙҙәрендә ялбарыу һыҙаттары төҫмөрләнде.

— Ярай, уныһына баш еткән, һине көтөүеңкерәп торолғайны, — тине прокурор, бер аҙ сырайы асылып.

— Уны бик яҡшы эшләгәнһең. Тик мине бынауы фирҡә мәсьәләһе генә бер аҙ борсой, нишләп ҡарарға икән? — тине Бүребаев үҙ бүлмәһендә закон йөрөтөүсегә тағы ла икеле ҡараш төбәп.

— Минеңсә, бында бер ниндәй ҙә иҫ китерлек урын юҡ — әгәр ул килгән хужаның башында әҙерәк аҡылы булһа, ундай ваҡ мәсьәләләргә иғтибар итмәҫ, әгәр инде уның кәпәсе аҫтында һоро шыйыҡсаһы самалы, һайыраҡ булһа, ул саҡта инде байтаҡ дауыл ҡуптарасаҡ, — тине прокурор күҙ алмаларын тәгәрәтеп. Ғүмер буйы иң яҡын әшнә булараҡ, үҙенә бирелеп хеҙмәт иткән закон кешеһенең икеле-микеле һөйләп ултырыуы былай ҙа арт шәрифе энәлә ултырған кеше кеүек тызынған Бүребаевтың барлыҡ бөтмөшөн шомға һалды.

— Ярар, Батыр Батырович, ул тиклем алдан ҡыҫҡырмайыраҡ торайыҡ әле. Хәҙергә эш уҙып киткәне юҡ, — тип тынысландырырға тырышты, битен һөрөм ҡаплап өлгөргән секретарға текләп.

Шулай итеп, бөгөн генә ялдан ҡайтып, әле санаторий тәьҫораттарынан айнып та өлгөрмәгән секретарь алдына шомло яңылыҡтар түгеп, прокурор бынан тиҙерәк тайыу яғын ҡайғыртты. Күпте күргән закон кешеһе хәҙер уның янында оҙаҡ булыуҙың нәтижәһе нисек бөтөү мөмкинлеген үҙенең һәр күҙәнәге менән һиҙә ине. Бүре хәҙер ҡурҡаҡ ҡуянға әүерелде, ясины бына-бына уҡылырға тейеш, был кешенән ситтәрәк тороу хәйерлерәк, юғиһә уға ҡаҙылған ҡәбер соҡорона икәүләп төшөп китеүең бар, тип уйланы прокурор үҙ артынан кабинет ишеген япҡас та.

Беренсе тәүлектә үҙен үҙе ҡайҙа ҡуйырға белмәгән Бүребаев, икенсе көн эшкә килгәс тә, ошо ауыр ваҡытта, кәңәш ҡороп алыу ниәте менән прокурорға шылтыратты. Ләкин уның секретары, үҙ симпатияһын күптән инде асыҡтан-асыҡ белдереп йөрөгән бер аҫыл ҡош: «Һеҙ таптырған прокурор үҙемә лә бик кәрәк тә һуң. Нишләмәк кәрәк — ул инде хәҙерге сәғәттә Ҡара диңгеҙ ярҙарындағы солярийҙа көньяк ҡояшы нурҙарында ҡойона. Уны кисә ялға оҙаттыҡ. Бына шунан һуң әле лә баш зыңҡып ултыра. Хөрмәтле Батыр Батырович, бәлки, уны мин алмаштыра алырмын», — тип телефондан көмөштәй тауышын сылтыратып, һайрарға тотонмаһынмы. Былай ҙа талағы ташып, күңел бошонҡолоғонан нишләргә белмәй вайран булып ултырған Бүребаев: «Һеҙҙең башығыҙҙа гел генә шул уйын-көлкө, кәйеф-сафа ҡороу. Безобразие, эш тураһында һис етди һөйләшеп булмай», — тигән тупаҫыраҡ тауышты ишеткәс, телефондың теге башында: «А как же, Батыр Батырович, беҙ һеҙҙең тормошоғоҙҙо матурлаусы тәбиғәт күбәләктәре, һеҙгә дәрт өҫтәүсе фәрештәләр, беҙ эргәгеҙҙә сутылдашып тормаһаҡ, һеҙ һаҙлыҡ тәлмәрйендәренең күңелен бәҫ баҫа башлай түгелме һуң?» — тип кеткелдәргә тотондо. Секретарь прокурорҙың алдында ултырған еңелсәк ҡатындың сырылдауын аҙағына тиклем

тыңлап ултырырға сабырлығы етмәне, трубкаһын ырғытып: «Ҡорсаңғының төшөнә һәр саҡ эҫе мунса инә, безобразие», — тип үҙ трубкаһын ҡолағына ҡыҫып, сихри яуап көткән ҡыҙҙы әрләп алды. «Бына был прокурор сволочь түгел тиең инде, ә? — тип кемгәлер мөрәжәғәт иткәндәй, ял бүлмәһенә асыҡ ишеккә теклəп ултырҙы ла: — Ул ғына ла түгел, ике йөҙлө һатлыҡ йән булып сыҡты», — тип таяҡтың йыуан башын: «Хөрмәтле Батыр Батырович, мин һәр саҡ һинең ышаныслы таянысың буласаҡмын, — тип аҙым һайын антын бисмилла урынына ҡабатлаған прокурорҙың башына төшөрҙө.

Бер нисә көн үтеүгә был килеп тыуған хәлдән нисек еңелерәк ҡотолоу мәсьәләһен кәңәш итешеү ниәте менән ул үҙ ярандарын, Маматовты фирҡәнән сығарған ваҡытта баш һелкеп, ҡеүәт биреп ултырыусы ярҙамсыларын йыйып һөйләшергә уйлағайны ла, теләгенә ирешә алманы. Көнкүреш даирәһендә хеҙмәт иткән, һәр саҡ Бүребаевтың күҙенә генә мөлдөрәп тороусы, уның өсөн утҡа ла һыуға ла ташланырға әҙер торған Мөғәлләмов Мәскәүгә оҙайлы командировкаға олаҡҡан, Бүребаевтың һәр әмерен үксә шаҡылдатып тыңлап тороусы милиция начальнигының больницаға инеп ятыуы асыҡланды. Шулай итеп, уның һәр һүҙен ҡушҡуллап ҡаршы алып торған тоғро дуҫтары, Бүребаевтың башы осонда болот ҡуйыра башлағас та, борсаҡ кеүек төрлө яҡҡа һибелеү сараһын күргән.

Ә тормош дауам итте. Инде хәҙер шатлығынан ете ҡат күк йөҙөндә осҡан Маматов урынына Бүребаев оло зарығыу менән үҙ яҙмышын көттө.

Бер көн эшкә килеү менән, Бүребаевҡа ҡала комитетынан шылтыратып, партия комиссияһы рәйесе Маматовтың фирҡәнән сығарылыуы менән бәйле бөтә тикшереү документтарын талап иттеләр. Һүҙ аҙағында йәне табанына төшкән Бүребаев ҙур һаҡлыҡ менән генә: «Бөгөнгө йәшәп килгән Устав буйынса беҙ сығарған ҡарарҙы ҡайтанан тикшереп, шик аҫтына алырға бер ниндәй органдың да хаҡы юҡ. Беҙҙең ҡарар иң аҙаҡҡы, хәл иткес ҡарар. Һеҙҙең был аҙымығыҙҙы нисек аңларға?» — тигән һорау ырғытты. Партия комиссияһы председателе телефонда көр яңғыраған тауышын байтаҡҡа түбәнәйтеп, һул усы менән трубканы ҡапланы ла: «Һин, Батыр Батырович, ҙур тәжрибәле партия работнигы ла баһа, аңларға тейешһең. Ундай фарманды ҡала комитетына кем биреүе мөмкин? Ел өҫтән өрә. Бик ҙур дауыл-гәрәсәт сығып китеүе лә мөмкин әле. Тик үҙ-ара ғына инде. Ләм-мим, алла һаҡлаһын», — тип шыбырланы. Бүребаев битенә ҡурғаштай килеп бәрелгән был һүҙҙәрҙең һәр береһе уның йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалды. Хәҙер инде бөрсөк-бөрсөк

һалҡын тирҙәр секретарҙың умыртҡа һөйәгенән аҫҡа тәгәрәне, хәҙер инде хужаның ике сикәһе шартлар сиккә етеп ҡыҫа башланы. Ул өҫтәл аҫтына беркетелгән төймәһенә баҫып, секретарын саҡыртты ла:

— Мин үҙемде бик насар тоям. Күрәһең, ҡартаям ахырыһы — Ҡара диңгеҙ климатына өйрәнеп кенә алған организм үҙ илебеҙҙә адаптация үтә алмай яфалана, ҡан баҫымы күтәрелгән. Бер-ике көн өйҙә ятып алмайынса тура килмәҫ. Уй, башым, уртаға ярылып бара, безобразие, — тип зарланып алды. Мәңге көләс сырайлы, инеү менән кабинетҡа һәр саҡ нур өҫтәгән серәкәй билле секретарь, ҡупшы аяҡтарын бергәрәк ҡыҫып, үҙ протесын белдергәндәй, осло үксәләре менән паркет иҙәнде кәзә бәрәсе кеүек туҡылдатып тыҙырға тотондо:

— Юҡ, еще раз юҡ, һеҙ ни в коем случае ҡарт түгел, үҙегеҙҙе улай кәмһетһәгеҙ миңә ҡыйын була. Бынан һуң, Батыр Батырович, ташлағыҙ ундай привычкағыҙҙы. Иначе мин һеҙҙе уважать перестану, — тип иларға етеште. Секретарының ихлас күңеленән әйткән татлы һүҙҙәре Бүребаевтың бошонҡо күңеленә сихәтле дауа булып ятты. «Бына был фани донъяла мине ысын күңеленән ҡурсалаған, яраткан бер йән кеҫәге генә ҡалды», — тип уйлап ҡуйҙы хужа, мөләйем йылмайып. Ләкин уның башында йомолоп, теле осонда тороп ҡалған изге фекерен һиҙгер ҡыҙыҡай барыбер аңланы, үҙенең шыма битенә уйсанлыҡ һыҙаттары һирпеп:

— Батыр Батырович, һеҙ, пожалуйста, үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ. Һеҙ беҙгә, в частности миңә, бик тә ҡәҙерле, кәрәк кеше. А что касается ындағы эш — ул ҡасмаҫ. Барыһы ла ажур ҙа, о' кей булыр. Ҡайҙа, кемгә как докладывать миңә можете ышанырға, — тип вәғәҙә итте лә, сейә кеүек һутлы иренено һуҡ бармағын арҡыры ҡуйып, мөләйем йылмайҙы.

Шулай итеп, ихлас, ҙур дәрт менән башҡарып ташланған ветеринарҙың персональ эше Бүребаевты ла аяҡтан йыҡты. Үҙ өйөндә ятҡан Батыр Батырович бөгөнгө килгән көндәлек матбуғатты ҡарап ултырған саҡта түбәндәге мәҡәләгә юлыҡты. «Ошо көндәрҙә генә республика үҙәгендә фәнни-тикшеренеү институт етәкселәре, күренекле ғалимдарының фәнни-практик конференцияһы булып үтте. Көн тәртибенең төп мәсьәләһендә һүҙ фән эшмәкәрҙәренең республиканың халыҡ хужалығын үҫтереүҙә индергән һәм индереләсәк өлөшө тураһында барҙы. Бигерәк тә ғалимдарҙың республика социаль-экономикаһының үҫешенә иғтибары йомшаҡ булыуы билдәләнде. Фән докторы, профессор Ғарифуллин етәкселек иткән фәнни-тикшеренеү институты коллективының эшмәкәрлеге ҡаты тәнҡит уты

аҫтына алынды», — тип әйтелгәйне был редакцион мәҡәләлә. «Тимәк, был бошонмаҫ профессорға ла барып еткәндәр. Былдай мәҡәлә сыҡҡас, нисә тиҫтә йылдар биология фәненә, республикала көтөүлек һәм болонлоҡтарҙы яҡшыртыу буйынса күп асыштар яһаған, бөтә ғүмерен фәнгә бағышлаған Ғарифуллин ағайҙы ла күпкә сыҙатмаҫтар, ахыры, — тип уйланы үҙенең бүлмәһендә, ситлеккә бикләнгән януар шикелле, арлы-бирле йөрөгән Батыр Бүребаев. Кинәт унын өйөндә ятып төрлө уйҙарға дусар булыу сәбәпле, бурһый башлаған күңелен был профессорҙы йәлләү тойғоһо солғап алды. — Бер көн, бюро ултырышы көнө, был хөрмәтле профессорҙы бушҡараҡ кәмһетеп ташланым шикелле. Тик әҙерәк уның институтты етәкләү эшмәкәрлегендә яуаплылығын көсәйтеү маҡсатында ғына әйтелгәйне. Ләкин хәҙер һуң инде — барыбыҙға ла, күрәһең, ошо үҙем ҡаҙый башлаған бер соҡорға төшөргә насиптыр. — Бына ошондай йәки ошоға оҡшаш буталсыҡ, береһенән-береһе шомлораҡ уйҙар уның мейеһен айҡаны. — Туҡта, былайтып үҙ-үҙемде язалап йөрөүҙән ни фәтеүә — врач килеп ҡарап, өс көнгә бюллетенде оҙайтып китте, янған йөрәккә бер аҙ ял булыр, күптән мине көтөп зарығып ултырған әрмән коньягын боҙорға кәрәк, — тип сервант барын асып ебәрҙе. Ләкин бөтәһен алдан күрергә күнеккән, үҙе әйтмәксе, «рулевой»ы, ул шешәне ҡайҙалыр йәшереп тә ҡуйған. «Тамаҡ майлау» мәсьәләһендә уның менән һүҙ ҡуҙғатыу файҙаһыҙ икәнен алдан белгәнгә күрә Батырға тик бисәһе яһап биргән һөтлө сәй менән генә ҡәнәғәтләнергә тура килде. «Шулай ҙа, улай тигәс тә, Бүребай ҙа башына бүрек кейгән ир ҙә баһа», — ҡатыны ҡайҙалыр сығып киткәнен көтөп кенә торҙо ла (сит бисәләр менән «доклад»ҡа керешһә, уның күпме ваҡыт торасағын ул электән бик яҡшы белә) секретарына шылтыратты. Күптән үҙ патронының тауышын ишетмәгән секретарь ҡыҙыҡайҙың оҙаҡ ҡына гәпләшеп алырға ла самаһы юҡ түгел ине, ләкин хужа мәсьәләне бик сомтор тотто. «Володяға әйт әле, бер ҡап сәй килтерһен, ул уның сортын белә»... Ләкин трубка һалыр алдынан: «Ул сәйҙең сортын мин дә беләм. Тиҙерәк һауығығыҙ, Батыр Батырович», тигән секретарының көмөш тауышын ишетте. «Ну, шельма, ҡыҙыҡай», — тип йылмайҙы Бүребаев трубкаһын һалғас. «Ер аҫтында йылан көйшәгәнде лә белә, бисәгә ҡарағанда ла һиҙгерерәк. Бигерәк нескә хисле, шуның наҙлы иркәләүе һуштан яҙҙыра бит, малай», — тип ул кемгәлер мөрәжәгәт иткәндәй булды.

Володя килеп еткәс, хужа күңеле шөйлә күтәрелә төштө, ләкин «тамаҡ майын» бер аҙ өҫтәгәйне, күңелен тағы

ла ҡара болот шәүләһе баҫты, ҡурғаштай ауыр сырмалсыҡ уйҙар унының мейеһен иҙҙе.

Бүребаев ҡан баҫымы күтәрелеп, сирләп китеү менән тормош ағышы туҡтаманы. Яңы эшкә тотонған өлкән хужаның эшмәкәрлеген көн дә матбуғат баҫып сығарған гәзиттәр уҡыусыларға еткереп торҙо. Ул үҙенең һәр сығышын: «Элекке етәкселектең йәйгән тамырҙарын юҡ итәсәкбеҙ, баҫыуҙарҙы ул ҡалдырған ҡый-үләндәрҙән ауыһыҙ таҙартасаҡбыҙ», — тип тамамланы. Ләкин ул һелтәгән ҡылыс күп осраҡта элекке етәкселек ҡалдырған ҡый-үләндәрҙе түгел, яңы башын ҡалҡытып, гөрләп үҫә башлаған йәшел үҫентеләрҙе юҡ итте. Әллә нисә етәксенең ҡылысы аҫтынан имен-аман ҡалған билсән, дегәнәк яңынан баш күтәреп, ҡотороп үҫте.

Шулай, бер һелтәгән саҡта фәнни-тикшеренеү институты директоры профессор Ғарифуллиндың башы осоп китте. Уны эш тамамланғас, кискә генә Өлкә Комитетҡа саҡырҙылар ҙа: «Мә, үҙ теләгең менән эштән китеүең хаҡында ғариза яҙ», — тип алдына ҡағыҙ-ҡәләм һалдылар. Үҙ вазифаһы өсөн тартҡылашырға күнекмәгән ғалим ҙур кабинетта үҙ ҡулы менән яҙылған ғариза ҡалдырып сыҡты. Фәндән башҡаны белмәгән профессор был эште тәбиғи хәл тип ҡабул ҡылды. Тик ҙур портфелен һөйрәп, әкрен генә үҙ институтына ҡарап атлағанда: «Был Өлкә Комитетта эшләгән теге йылғыр йәш егеттәр, быңдай тәҡдим яһарҙан алда, моғайын, минең Мәскәүҙәге хужалар менән кәңәш итешкәндәрҙер. Ә мин Мәскәүҙәге Фән академияһына ни ерем менән ярамаҡым икән. Ошоға тиклем академияла беҙҙең институт һәр саҡ маҡтап телгә алына килде лә баһа. Ә үҙем бер ваҡытта ла президиумдан төшмәнем. Бына бер ҡыҙыҡ — Мәскәү маҡтай, ә бында беҙҙән дә насар эшләгән институт юҡ. Был ни хикмәт?», — тип уйланды бер ҡатлы профессор.

Былар барыһы ла яңы ғына бурлыҡ өсөн фирҡәнән ҡыуылған Маматовтың өлкән хужа булып Мәркәздән килгән ағаһына ошаҡ нәтижәһе икәнен намыҫы саф ғалим башына ла килтермәне.

Бер нисә көндән институттың хужаһыҙ ҡалыуын ишетеп, Мәскәүҙән академик шылтыратып, Ғарифуллинды эҙләп тапты. Элекке институт директоры ваҡиғаның нисек килеп сығыуы хаҡында һаран ғына һөйләп биргәс:

— Ай-һай, профессор, бик тура ғына фекер йөрөтәһең. Һиңә һәм һинең институтыңа беҙҙең яҡтан бер ниндәй ҙә претензия юҡ тип әйтмәнеңме һуң? — тип һораны академик бер аҙ ғәжәпләнеп.

— Юҡ, ул турала һүҙ булманы. Улар һорамағас, мин бер ни ҙә әйтмәнем, — тип яуапланы профессор.

— Ничево, профессор, танауыңды төшөрмә, эшеңде дауам ит. Беҙ бик актив рәүештә был эшкә ҡыҫыласаҡбыҙ. Һинең эштән китеүеңә беҙ ҡырҡа ҡаршыбыҙ, әле ҡаты ғына кәрәкле органдарҙа яғалашасаҡбыҙ, — тип вәғәҙә бирҙе, көр тауыш менән академик.

Ләкин уның урындағы партия органы менән «яғалашыуы» бер нисә аҙнанан: «Үҙ теләге менән эштән китеүҙе һорап ғариза биреү сәбәпле фәнни-тикшеренеү институты директоры профессор Ғарифуллин Д. Ғ. иптәште 19... йылдың ... августынан эшенән бушатырға» тигән академик урынбаҫары имзаһы менән фарман килеп төштө. Тик шул саҡта ғына академияға бер аҙ ышаныс бағлаған профессор был юғары фән учреждениеһының партия органдары менән яғалашыу ҡеүәһенә тамам төшөндө, нишләптер «партия наш рулевой» тип йырланған билдәле йырҙың һүҙҙәрен ирекһеҙҙән ҡабатлап алды.

Был ваҡиғаларҙың барыһын да ишетеп, даими рәүештә эшкә тотонорға шөрләп өйөндә яҙмышын көтөп ятҡан Бүребаев үҙе тураһында ла шундайыраҡ эстәлекле фарман сығыуына һис бер шиге ҡалманы. Уның йылдар буйына «сыуаҡ, аяҙ көн» күрһәтеп торған барометры «болотҡа, ямғыр»ға тартып китте.

Институт хужаһы булып, партия органдарында эшләү ыңғайында ғына: «Социалистик ауыл хужалығын артабан үҫтереүҙә ауыл коммунистарының роле» тигән темаға яңыраҡ ҡына кандидатлыҡҡа диссертация яҡлаған Сәитборһанов тигән элекке комитет секретары килде. Күңелендә фәнни эҙләнеүҙәргә хас сифаттар әле күҙен дә асырға өлгөрмәгән был эшмәкәр иң башта яңы ғына бер-береһенә бинахаҡ яла яғыу, түрәләр алдында ялағайланыу һәм ғәҙеллек һуҡмағына төшә башлаған коллективтың фекерен өйрәнеү маҡсатында бөтә кеше менән оҙон-оҙаҡ әңгәмәләр үткәрергә кереште — кемдәр элекке директорҙы һағына, ә кемдәр уның эшмәкәрлегенә риза түгел, шуларҙы барлап сыҡты. Күп тә үтмәне, һуңғылары уның ышаныслы таянысына әүерелде.

Уның Маматов менән әңгәмәһе тәүге кистә генә бөтмәне, сөнки үҙенең Өлкә Комитетта эшләгән әшнәләре аша яңы эшкә тотонған өлкән хужаның был ветеринарға яҡын ғына ҡәрҙәш икәнен ул институтҡа килгәнсе үк белеп өлгөргәйне. Ул ғына ла түгел, үҙе эшләгән районда хужаның үгәй әсәһенән тыуған кешенең йәшәүен белә һалып, Сәитборһанов уның менән дә танышып алды. Бында күсерҙән алда колхоз эшенә бер ҙә яғылып бармаған шул әҙәмгә, колхоз идараһының ҡырҡа ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, көнкүреш комбинатынан кешеләр ебәреп уның өйөн ремонтлатты, әле байтаҡҡа сыҙарлыҡ таҡта

ҡыйығын ҡалай тимергә алмаштырҙы. Иң һуңынан колхоз производствоһы алдынғыһына тәғәйенләнгән машинаны өлкән хужаның ошо ҡустыһына һаттырып китте.

— Бына шулай ул донъя — ҡуласа — бер әйләнеп, бер баҫа. Беҙҙең кеүек ил ағаларының башы иҫән саҡта күңелең тыныс булһын. Һинең саф намыҫыңды бер кемдән дә тапатырға бирмәбеҙ. Фирҡә билетыңды башһыҙ Бүребаев бына ошонда бөтә коммунистар алдында, ғәфү үтенә-үтенә, килеп тапшырып китер. Белдеңме, Сәитборһанов ағаңдың кем икәнен, — тип күкрәк һуҡты яңы директор.

— Ә миңә бирелергә тейешле яңы ыңғай характеристика? — тине бөтә сырмалсыҡ ептең осон ҡулына тотоп алған Маматов. Улар икеһе лә кабинетта ҡыҙмаса булып, бахус иблисенә атланып алғайны инде.

— Вопросов нет, — тине Сәитборһанов тәхел шарабынан алһыуланған битенә йомартлыҡ сырайы һирпеп. — Иртәгә үк һине күккә тейҙереп маҡтаған характеристика ҡаланың парткомиссияһы өҫтәлендә ятасаҡ, — тип ул еүеш ирендәрен салышайтып, Маматовтың тирле ҡулын ҡыҫты. — Тик һин үҙ ағаңа Сәитборһановтың егет кеше, уға йәне-тәне менән түшәлеп, һепертке булып хеҙмәт итә торған абзый, тип ҡолағына төшөрөргә онотма, белдеңме?

— Это само собой разумеется. Беҙ ҙә бит әле эттең артҡы шәрифенән төшөп ҡалған малайҙар түгел, Сәитборһановтың изгелеген Бүребаевтың яуызлығынан ғына айыра беләбеҙ, — тип яуапланы Маматов.

Икенсе көнөнә эш башланыр-башланмаҫтан институт директоры кабинетында телефон шылтыраны.

— Һеҙҙе ҡала партия комиссияһынан борсойҙар, — тигән ҡоро ғына, ваҡ калибрлы мылтыҡтан атҡан кеүек, тауыш ишетелде.

— Тыңлайым, — тине директор бер ҙә иҫе китмәгән һын күрһәтеп.

— Ситуациялар үҙгәреп китеү сәбәпле үҙегеҙҙең работнигығыҙ Маматовҡа характеристиканы икенсерәк рәүештә яҙырға тигән фекер бар.

— Ул нишләп ситуациялар үҙгәреп тора. Ни ҡубып китте тағы? — тип директор, белмәмешкә һалышып, комиссия председателенә һорау ташланы.

— М..да. Уны нисегерәк тип әйтергә лә белеп булмай, одним словом, уға элекке бирелгән характеристика бармай, ыңғай штрихтар ҡушып, уны яңынан төҙөргә һәм тиҙ арала нарочный менән беҙгә килтереп еткерергә кәрәк. Эш ашығыс!

— Һеҙ ашыға тип беҙҙең бөтә эшебеҙҙе ташлап, характеристикаға тотонорға бер ҙә форсат юҡ. Үҙем Мәскәүгә командировкаға юлланырға торам, бер-ике аҙнаһыҙ кире

әйләнеп булмаҫ, — Сәитборһанов телефондың теге осондағы кешенең тура яуабынан ялтанырға тырышыу һыны күрһәтте. Юҡ командировкаһына һылтанып, тегене һаман мөйөшкә ҡыҫтаны.

— Зинһар өсөн, һеҙ был эште башҡарып китегеҙ инде, сөнки бик ҡыҫтайҙар, — тип ысҡындырҙы теге кеше.

— Кем ҡыҫтай, Маматовтың фирҡәлә булыу-булмауы кемде бик шулай ҡаты борсой? — тип директор теге кешенең боғаҙынан алды.

— Ну, директор иптәш, ул тиклеме ни нәмәгә кәрәктер инде, һеҙ башһыҙ кеше түгел дә баһа, ҡала партия комиссияһына ошондай тура күрһәтмәне кем биреүе мөмкин? — теге кеше мәсьәләнең асылына килеп терәлде. Ләкин уның был яуабы тормоштоң әсә-сөсөһөн үҙ елкәһендә күп татыған Сәитборһановты ҡәнәғәтләндермәне. Үҙ кабинетының мөйөшөндә ултырған партия ойошмаһының сейфына теклӛп ултыра торғас, уның башында «партия, партия йыйылышы...» тигән аныҡ фекер килеп төштө.

— Бына нәмә, мин уға ыңғай характеристиканы үҙем генә бирә алмайым, сөнки элекке директор беренсе характеристиканы тәүге партия ойошмаһында тикшертеп, уның тексын тәсдиҡ иткәндән һуң ғына ҡул ҡуйған. Шулай булғас, был ыңғай характеристика ла йыйылышта коммунистар тарафынан яңынан тикшерелергә тейеш, логично? — Сәитборһанов үҙ яуабына нөктә төртөп ҡуйҙы.

— Әй, һеҙ, Ғиззәт Сафич, ундай юлға бармағыҙ инде. Хәҙерге үҙгәреш заманында коммунистар ундай компромисҡа бармаҫтар шул. Тем более һеҙҙең күпселек коммунистарығыҙҙың Маматовтың персональ эшенә мөнәсәбәттәре нисек икәнлеге беҙгә ниндәйҙер дәрәжәлә билдәле.

— Шулай булғас, бына Иванов иптәш, һеҙ үҙ һорауығыҙға үҙегеҙ яуап бирҙегеҙ. Тимәк, ул эш барып сыҡмай, үтенесегеҙҙе ҡәнәғәтләндереп булмай. — Сәитборһанов теге кешенең көсһөҙ икәнен белеп, уны һаман ярға терәне.

— Ғиззәт Сафич, оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: был яңы килгән өлкән хужаның шәхси күрһәтмәһе, по крайней мере, мин өлкә партия комиссияһының тырышлыҡ һалыуынан шуны аңланым. Маматовтың фирҡәлә ҡалыу-ҡалмауы ошо ҙур хужабыҙҙың намыҫы менән бәйләнгән, сөнки ул һеҙҙең Маматовтың яҡын ғына ҡәрҙәше. Хәҙер төшөнгәнһегеҙҙер инде, беҙҙең дә хәл бик сетерекле бит, — тип Иванов бөтөнләй туғарылып, асыҡтан-асыҡ сиселеп ташланы.

«Әй, ҡустым, Иванов ҡустым, беҙ шурфҡа төшөрҙән алда, иң башта арҡан осона таш бәйләп, уның тәрәнлеген үлсәйбеҙ. Төшөргәме, юҡмы икәнен шунан һуң ғына хәл итәбеҙ. Дәдәңдәргә өлкән хужаның бер туған апаһы, йәғни

Маматовтың ғәзиз әсәһенең, институт ярҙамсыл хужалығында йәшәп ятыуы ла күптән мәғлүм», — тип эре тигеҙ тештәрен күрһәтеп йылмайҙы ла, ирәбеләнеп күҙҙәрен йомдо.

— Ай-ай, Иванов иптәш, баштан шулайтып ҡына әйтеп ҡуйһаң, ваҡыт әрәм итеп был тиклем сауҙалашып та ултырмаҫ инек. Әләйһә, хәҙер үк эшләп ҡуябыҙ инде уны. Яңы эшкә тотонған өлкән хужаның абруйын шулайтып төрлө яҡлап күтәрмәһәк, беҙгә урын биләп, нишләп ултырмаҡ кәрәк, — тип теҙеп алып китте директор. — Тимәк, партия йыйылышына һалып тормаҫҡа кәңәш итәһегеҙ инде?

— Конечно, конечно. Давай, был мәсьәләне ҡатмарлаштырмайыҡ әле. Үҙең генә хәл ит тә ҡуй. Бик ашыҡтыралар, пожалуйста, — Иванов оло ҡәнәғәтләнеү менән трубкаһын һалды

Ә Сәитборһанов эске түш кеҫәһенән таушалған блокнот сығарып, түбәндәге һүҙҙәрҙе ап-асыҡ итеп теркәп ҡуйҙы. «19... йылдың... авгусында ҡала партия комиссияһы председателе урынбаҫары Иванов менән телефон аша һөйләшеү булды. Ул мине партия сафынан сығарылған Маматовтың элекке бирелгән характеристикаһына ҡапма-ҡаршы, коммунистар рөхсәтенән тыш, ыңғай характеристика бирҙерергә мәжбүр итте. Ул республиканың бөгөнгө өлкән хужаһы Маматовтың ике туған ағаһы һәм бындай күрһәтмә бына ошо етәксенән бирелгән, тип нигеҙләне». Яҙып бөткәс айҙың числоһын ҡуйҙы ла, Сәитборһанов: «Ивановтар килер ҙә китер, донъя хәлен белеп булмай, уның ҡуласаһы көн дә төрлөсә әйләнеп тора. Берәр ваҡыт бик тә хәжәте тейеүе бар», — тип шуның ише яҙыуҙар менән тулған был блокнотын ул түш кеҫәһенә яңынан тығып ҡуйҙы. Йөрәген һәр саҡ терәп торған был блокнот урынына төшөп ятҡас, Сәитборһановтың тындары иркенәйеп киткәндәй булды. Ул үҙен тайғаҡ боҙ өҫтөнән ышаныслы аҙымдар менән юртып барған дағалы арғымаҡ һымаҡ тойҙо.

Бер нисә көндән партия ҡала комитетының бюро ултырышы булды. Ҡултығы аҫтына ҡалын портфелен ҡыҫтырып, күн пальтоһынан беленеп торған ҡорһағын алғараҡ сығарып, коридор буйлап эре генә атлап йөрөгән Маматовты бөгөн танырлыҡ та түгел ине. Әйтерһең дә, уның йәйпәгерәк битенә, көрәккә тартымыраҡ алға сыҡҡан эйәгенә бөтә ғәләм ирҙәренең тәкәбберлеге тупланған. Өҫтән аҫҡа атылған ҡарсығалай ҡараш теләһә кемеңде лә ялмап алырлыҡ. Был инде бер нисә ай ғына элек Бүребаев коридорында, төйләгәндән ҡасып башын йәшергән себештәй, мөйөштә бөршәйеп ултырған Маматов түгел ине инде.

Ҡала комитетының бюро ултырышы элекке ҡарарҙың нигеҙһеҙлеген иҫәпкә алып, дөрөҫ түгел тип тапты һәм Маматовты элекке стажы менән бер тауыштан фирҡә сафына ҡайтарҙы.

Был көндәрҙә әҙәм танымаҫлыҡ булып үҙгәргән, көн һайын тигәндәй үҙ яҙмышын көтөп зарығып бөткән Бүребаев кабинетында телефон шылтыраны. Телефон ҡыңғырауының ғәҙәти түгеллеген бөтә йөрәге менән тойған Батыр Батыровичтың йөҙө ҡасты. Ул дерелдәгән ҡулына һаҡлыҡ менән генә, нишләптер усын өткән тәҫлө тойолған, трубканы күтәрҙе.

— Был Бүребаев иптәшме? — тигән ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелде.

— Да, да, — тине Бүребаев тауышына ышаныс һәм тыныслыҡ һыҙаттары ҡушырға тырышып.

— Батыр Батырович, хәҙер һеҙҙе хужа менән тоташтырам, — тине лә теге ҡатын кинәт юҡ булды. Усы тирләү сәбәпле еүешләнә башлаған трубкала ниндәйҙер ҡытырлаған, телефон зыңғырлаған тауыштар ишетелде. Өлкән хужа «минутку» тине лә әллә кемдәр менән һөйләште, кемдәргәлер өҙөп-өҙөп ҡырҡа күрһәтмәләр бирҙе. Бүребаевтың йөрәге, үргә ауыр йөк тартҡан машина моторы кеүек, тибеүен йышайтты, күкрәгенә һыймай туланы. Ул үҙе ҡырында был тамашаны ҡыҙыҡһынып күҙәтергә тотонған бер-ике кешегә осо тирләй башлаған эйәге менән, сығып тороғоҙ тигән ишара яһаны. Үлһәм ошо өҫтәл артында гыуаһһыҙ йән бирәйем, тип уйланы һөйләшеүҙе көтөп, тамам хәлдән яҙған Бүребаев. Бына бер мәл телефон трубкаһынан кемдеңдер йыш мышылдап тын алғаны ишетелде. Күҙен йомоп, әллә ниндәй ҡурҡыныс хистәргә бирелеп ултырған. Бүребаевҡа был тауыш уның артынан кемдеңдер ҡыуып килеүен хәтерләтте.

— Бүребаевмы? — тине ышанысლы, саңғырап сыҡҡан тауыш.

— Эйе, Бүребаев. Һаумыһығыҙ, — уның исемен, атаһының исемен ҡапылғара әле әйтергә күнекмәгән Бүребаев ныҡ тулҡынланыуҙан буталып ҡалды. Телефонда уның сәләмен алыусы кеше булманы. Телефон сыбығының теге осонда шундуҡ ҡәтғи күрһәтмәгә күстеләр.

— Бүребаев иптәш, Ҡала комитетының бюроһы коммунист Маматовтың партиянан сығарылыу тураһындағы һеҙҙең ҡарарҙы юҡҡа сығарҙы һәм уны яңынан партия сафына алды. Һеҙгә, Бүребаев, тәүге партия ойошмаһына барып, коммунистарҙы нигеҙһеҙ эҙәрләү ниндәй күңелһеҙ нәтижәгә килтереүен аңлатып, билдәле, Маматов ҡына түгел, коммунистар алдында ғәфү үтенеп, юҡҡа ғәйепләнгән коммунисҡа үҙ билетын тапшырырға тура киләсәк.

Хәҙерге үҙгәреш заманы шундай ғәҙеллекте талап итә. Ғәйепһеҙ кешегә үҙегеҙ яҡҡан бысраҡты үҙегеҙгә таҙартырға тура килә. Ә унан ҡарарбыҙ. Хушығыҙ.

Бүребаевтың кинәт күҙ алды томаланды. Быуынһыҙға әйләнгән ҡулынан телефон трубкаһы шаҡылдап өҫтәлгә төштө. Биленән бөгөлгән ауыр кәүҙәһе янтайып кресло ҡабырғаһына ауҙы. Башта уға стеналар бер яҡҡа ҡыйшая башлап, ап-аҡ түшәм баш түбән әйләнгән төҫлө тойолдо. Шунан һуң ул төпһөҙ упҡынға осто, нәҡ шул мәлдә генә ниҙер серәкәй кеүек «дзин-дзин» итте лә тора-бара уныһы ла туҡтаны...

Иҫенән яҙған Бүребаевты «ашығыс ярҙам» машинаһында больницаға алып киттеләр. Консилиум: «Гипертоник кризис нигеҙендә кәүҙәһенең бөтә уң яғына фалиж, йәғни уң яҡ инсульт булған» тигән диагноз ҡуйҙы. Бер нисә көндән һуң ғына һушына килгән Бүребаевтың хәле сиктән тыш ауыр ине әле. Ул үҙен уратып алған кешеләрҙе танырға теләгәндәй, барыһына ла күҙен мөлдөрәтеп ҡарай. Ҡарашы уның башын тотоп ултырған ҡатынына килеп текләгәс, башта әкрен генә күҙ ҡойроҡтары еүешләнде, һуңынан бөрсөк-бөрсөк йәш ҡарайып үҫә башлаған сикә йөндәре араһынан аҫҡа тәгәрәне. Уның ошо хәлгә нисек төшөүен һәм өлкән хужа менән уның араһында ниндәй һүҙ булыуын хәҙергә генә түгел, ихтимал, киләсәктә лә бер кем дә белмәҫ.

Маматовтың фирҡәгә кире алынғанын белеп ҡалған институт коммунистары һис кисекмәҫтән партия йыйылышының ҡарарын һанға һуҡмаған ҡала партия комитеты өҫтөнән Үҙәк Комитетҡа коллектив ялыу яҙҙы. Был хатта эшкә тотонған өлкән хужа бурлыҡ өсөн фирҡәнән сығарылған Маматовтың ике туған ағаһы икәнлеге һәм был ғәҙелһеҙлек шуның нәтижәһендә килеп сығыуы тураһында асыҡтан-асыҡ яҙылды. Маматов аша өлкән хужа менән ныҒыраҡ бәйләнешкә инеү хыялы менән янған яңы директор Сәитборһанов үҙ шымсылары аша был ялыуҙы туҡтатыу сараһын да күреп ҡарағайны, ләкин ғәҙелһеҙлекте үтәнән-үтә күреп торған коммунистар ялағай-флюгер директорҙың мәкерле ҡармағына эләкмәне, үҙ һүҙҙәрен һүҙ итте — ялыу Мәскәүгә юлланды. Коммунистарҙың берҙәм фекерен аяҡ аҫтына һалып тапап, улар һыртынан Маматовҡа икенсе, ыңғай характеристика биргән директорҙың боҙоҡлоғо тураһында ла яҙылғайны был хатта. Бигерәк тә ошо һуңғы факт әле яңы ғына фән гранитын кимерергә тотонған Сәитборһановтың күңелен борсоно. Институт коммунистары менән уртаҡ тел таба алмағас ул өлкән хужа биләгән учреждениеға йүгерҙе. Уның был ялыу хаҡында үҙ ваҡытында вазифалы ил ағаларының

ҡолағына тишеп ҡуйыуы бушҡа китмәне — Мәскәүгә ебәрелгән коллектив хат Мәркәз ҡапҡаларын барып шаҡып ҡараны ла Уралға кире боролдо. Ҡала комитеты өҫтөнән яҙылған ялыу — Ҡала комитетына кире әйләнеп ҡайтты.

Институт стенаһында себен осҡанын да белеп йөрөгән Маматов был ялыуҙы ойоштороусы актив коммунистарҙың исемлеген шундуҡ ҡала һәм Өлкә комитетҡа еткереү сараһын күрҙе. Юғары органдарҙа «батшаһыҙ»ға әйләнә башлаған партия ойошмаһын нисегерәк туҙҙырыу юлын эҙләй башланылар.

Фирҡә билетын ҡайҙа, нисек һәм кем тапшырырға тейешлеген үҙ ағаһы ауыҙынан ишеткән Маматов оло түҙемлелек менән Бүребаевтың тиҙерәк һауығыуын көттө. Оҙон мөһабәт кәүҙәле секретарҙың бөтә коммунистар алдында билен бишкә бөгөп, ғәфү үтенеү тамашаһын күреү хыялы Маматов күңелен ҡытыҡланы, уға яңынан дәрт өҫтәне, ул үҙен киңерәк офоҡ аръяғында итеп һиҙә башланы. Директор кабинетының ишеген ул хәҙер инде аяғы менән генә тибеп аса, элекке әҙәпле генә һеҙ тип өндәшеү урынына туп-тура һингә күсте. Ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла ҡаранып, үткәненә шөкөр итеп, киләсәгенә фекер итеп, өргән ел ыңғайына ғына әйләнгән флюгерҙарҙың береһе Сәитборһанов күҙе алдында Маматовтың шомло шәүләһе йән тыныслығы, күңел шатлығы түгел, ҙур борсолоу килтерҙе. Уның янында институтҡа хужа булырға тырышҡан икенсе шәүлә барлыҡҡа килде. Маматовҡа ярҙам ҡулы һуҙып, үҙ нигеҙен нығытырға теләгән Сәитборһанов, үҙе лә һиҙмәҫтән, йылан аяғы киҫкән ветеринарҙың тоҙағына эләкте. Көндән-көн үҙаллылығын юғалтып, ихтыяры һүнә барған директорҙың теҙгенен Маматов үҙ ҡулына ныҡлы урап тотоп алды. Үҙ коммунистары ышанысынан мәхрүм ителгән директор карьераның хәтәр баҫҡысынан үрләгән, шашыныуҙың сигенә сыҡҡан Маматовҡа һыртын терәмәй булдыра алманы.

Тамам сығырынан сығып, хәттин ашҡан ветеринар үҙ ағаһы менән һирәк-һаяҡ осрашыуҙар мәлендә үҙенә фирҡә билетын тапшырыу тантанаһын тәүге сценарий буйынса башҡарыуҙы талап итте. Яңы хужа ҡалын быяла аҫтындағы талсыҡҡан күҙҙәрен сырт-сырт йомоп алғандан һуң алдында ҡыр танауын шаңҡайтыңҡырап, ҡара янған оҙонса битендә оло хәстәргә батҡан кеше һыны күрһәтеп ултырған ҡустыһына теклән ултырҙы ла:

— Однако, ты большой хам, — тине. — Һиңә билетыңды коммунистар алдында бирҙертәбеҙ, тип берәүҙе аяҡтан йыҡтыҡ бит инде. Тағы һиңә ни кәрәк? Етте. Әгәр һиңә билет кәрәк булһа, ана комитеттың бюроһынан барып ал.

Билетыңды кемдәр сығарған, шулар тапшырыр, — тип ҡырт киҫте. Бындай яуапты көтмәгән Маматов, урынынан торҙо ла, үҙ туғанына соҡоронда тәгәрәп торған һоро күҙҙәренән нәфрәт атып:

— Гляди, гляди... — тине. — Әле бында башың керһә, арт шәрифең кереп өлгөрмәгән. Нисегерәк һөйләшкән була. Алдағы көндәреңдә туғандарыңдың кәрәге бик тейер әле. Алдан әтәсләнеп кәпәренмә, — тип ишекте дәррәү асып сығып китте. Ул туп-тура район комитетына йүнәлде. Уның кем икәнлеге күптән мәғлүм булғанға күрә уны теге серәкәй билле ҡыҙыҡай бер минут та тотмай Бүребаев урынына ҡалған кеше кабинетына индереп ебәрҙе. Саңғы шыуа торған спортсмендарға тартым оҙон ҡуллы, һонтор аяҡлы асҡаҡ ҡына йәш кеше уны аяҡ үрә тороп ҡаршы алды. Урын тәҡдим итте.

— Яңы ғына теге йортта булдым, — тине лә туҡтап теге егеткә ҡараш һирпте. Теге йорт һүҙен ишеткәс, уның кемдә булыуын күҙ алдына килтергән егеттең сикә һөйәктәре кинәт хәрәкәткә килде, ҙур йәшел күҙҙәрендә борсоулы сырай төҫмөрләнде. — Өлкән хужаға фирҡә билетын ошонда ғына бирһендәр, тип кәңәш иттем. Ул риза булды. Бәлки шылтыратырҙар. Шулай ғына эшләйек тә ҡуйайыҡ, инде, — тине Маматов шомло моңһоулыҡ ҡаплаған битендә яҡтылыҡ һыҙаттары сырымланған йәш кешегә мөрәжәғәт итеп. — Шулай һеҙҙең өсөн дә, минең өсөн дә ҡулайыраҡ булыр.

— Ысын һүҙгә яуап юҡ. Бик тә дөрөҫ ҡарар. Беҙ уны иртәгә үк әйләндереп сығарабыҙ, — тип өтәләнде йәш секретарь.

Ысынлап та, Маматов киткәндән һуң, бер нисә сәғәт үтеүгә ҙур йорттан шул турала шылтыраттылар.

— Беҙ уның менән нәҡ шулай һөйләштек, килештек, — тине секретарь.

— Ярай, добре... — тип хупланылар теге башта.

Юл ыңғайында институт директорына һуғылып, Маматов:

— Теге йорттан килә ятам әле. Үҙендә булдым. Бик оҙаҡ әңгәмәләшеп ултырҙыҡ. Институт хәлдәре менән бик ҡыҙыҡһынды. Ғиззәт Сафич, нисегерәк тотона, эштә ҡулы һиҙеләме, тип һорашты.

Шатлығынан ни эшләргә белмәгән Сәитборһанов эске тулҡынланыуын йәшерә алмай:

— Прәмо шулай Ғиззәт Сафич, тип өндәшәме? Бигерәк зирәк икән, ҡара һин уны. Бер нисә тапҡыр ғына осрашҡайныҡ, исемде ятлап та өлгөргән. Баш бар инде, тимәк. Башһыҙ кешене разве шундай мәрмәр һарайға ултырталар, — тип директор хужа адресына яғымлы дифирамбы

көйләп алды. Татлы һүҙҙең өҙөлөп ҡалыуынан ҡурҡҡан кешеләй ул үҙ өҫтәленә ятыбыраҡ тағы ла хәбәрҙең аҙағын тыңларға йыйынды.

— Киң ҡоласлы, масштаблы ғалим, тинем. Тик институтҡа ярҙам итергә кәрәк тинем. Институттың нужаларын беләм бит инде. Кешегә бик тә иғтибарлы, тәрән аҡыллы кеше тинем. Хатта үҙенең бер туған апаһына директорҙың утын-бесән, аҙыҡ-түлек менән ярҙам итеүен дә әйтеп биргәс шатлығынан: «Беҙ әле Ғиззәт Сафич менән оҙаҡламай апайға ҡунаҡҡа барып та ҡайтырбыҙ әле», тип вәғәҙә итте.

Бәхет күгенең түшәмендә йөҙгән Ғиззәт Сафич нишләргә белмәй урынынан тороп уҡ китте. Маматовтың ҡулын һелкергә кереште. Арлы-бирле паркетлы иҙәндә йөрөп алды, уның башына килгән осҡор фекерҙәр береһенән-береһе тәрәнерәк, уның өмөтлө киләсәге бына-быша ҡул менән тотоп алырлыҡ ҡына яҡынайғандай тойолдо.

— Тормош булғас, төрлө хәлдәр килеп тыуыуы мөмкин. Бәлки, еңгәйҙең һыуытҡыстары ла таҡырайып китер. Мин барҙа ашап-эсеүгә, аҙыҡ-әүҡәткә йонсоп, яфа сигеп ятмағыҙ, барыһы ла үҙебеҙҙең ҡулда. Егетлек ерҙә ятып ҡалмай ул, — тип оҙатты директор уның тормош офоғонда яҡты маяҡ булып төҫмөрләнгән Маматовты.

Вәғәҙә ителгәнсә икенсе көн комитетта Маматовҡа партия билетын ҡайтарыу тантанаһы булды. Бүребаев башына ҡайғы-хәсрәт төшкәндә борсаҡ кеүек төрлөһө-төрлө яҡҡа таралып бөткән бюро ағзалары был юлыһы барыһы берҙәй дәррәү йыйылды. Һуңғы ваҡытта район күгендә балҡып яна башлаған был сихри кешегә һәр кем йылы һүҙ әйтергә, һис юғында үҙенең ихласлығын белдереп йылмайып ҡалырға тырышты. Фирҡә билеты һалынған ҡыҙыл папканы ҡулына тотҡан секретарь оло еңеүҙәргә өлгәшкән кешегә фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн награда тапшырған һымаҡ тантаналы, шул уҡ ваҡытта ихлас тәүбәгә килеү телмәре тотоп ташланы.

— Беҙ барыбыҙ ҙа бөгөн үҙебеҙҙе ҙур ғәйепле итеп тоябыҙ, — тине ул, бөтә бюро ағзаларын да ҡарашы менән барлап сыҡты. Өҫтәл тирәләй ултырған барлыҡ ағзалар, һын күрһәтеп булһа ла, баштарын түбән эйгән мәлдә, тик Маматовтың бутылкалаш әшнәһе ветеринар Мөғәлләмов ҡына башын ғорур күтәреп, Маматовҡа мөләйем ҡараш атып ултыра ине. Уның бирелгәнлек хисе менән һуғарылған ҡарашында: «Ысын дуҫтар ана шулай була ул: һине фирҡәнән ҡыуған саҡта мин бойкот иғлан итеп килмәгәйнем, ә бөгөн был тантанала һинең шатлығыңды уртаҡлашырға ашыҡтым», тигән һүҙҙәр яҙылғайны. Секретарь үҙ һүҙен дауам итте:

— Беҙ барыбыҙ ҙа ысын коммунист, саф йөрәкле Маматов иптәш алдында түбәнселек менән ғәфү үтенәбеҙ. Был хата беҙҙе күп нәмәгә өйрәтергә тейеш. Иң беренсе нәүбәттә, үҙгәреш, демократия осоро талап иткәнсә, һәр коммунистың яҙмышына иғтибарлы ҡараш, тикшереү эшендә объективлыҡ күҙ уңында тотолорға тейеш. Мин бөгөн ҙур энтузиазм менән Маматов иптәшкә үҙенең партия билетын ҡайтарып бирәм һәм ихлас ҡотлайым, — тип тамамланы секретарь үҙ һүҙен.

Бюро ағзаларынан икенсе булып, район прокуроры сығыш яһаны.

— Иптәштәр! Мин бөгөн икеләтә шатмын, — тине ул киң йылмайып. — Бүребаев иптәштең ҡәтғи шәхси күрһәтмәһенә ҡарамаҫтан, мин Маматов иптәште партиянан сығарғас та ҡулға алманым. Ул үҙенең күрһәтмәһен һуңынан да бер нисә тапҡыр ҡабатланы, ләкин мин төрлө сәбәптәр менән һаман һуҙырға тырыштым. Ысынын ғына әйткәндә, минең был эште тартып-һуҙып, яһалма булыуына, ә коммунист Маматов иптәштең намыҫлы икәненә баштан уҡ шигем юҡ ине. Мине үҙемдең эске интуициям алдамауына мин ныҡ ышандым. Ысын күңелдән тәбрик итәм һеҙҙе, Маматов иптәш, — тип прокурор үҙ телмәрен мажорлы нотала тамамланы. Маматов алдында ярамһаҡланып, ул бөтә ғәйепте хәҙер яуапһыҙ ятҡан Бүребаевҡа япһарҙы, сөнки закон кешеһе булараҡ ул елдең ҡайҙан иҫкәнен һәр кешенән алда белә ине.

Үҙ алдында тирелеп торған бюро ағзаларына рәхмәтен дә әйтмәй, Маматов һис бер минут туҡтап тормайынса, һөжүмгә күсте. Хәҙер уның күптән көтөп йөрөгән ҡалҡаны кеҫәлә ята ине инде.

Ул шул уҡ кистә Ҡала партия комиссияһына яңы ялыу төшөрҙө. Үҙенең зәһәрле хатында уға тиҫкәре характеристика биргән институттың элекке директоры профессор Ғарифуллинды яуапҡа тарттырыуҙы талап итте. Уны партия сафына керенән алып, билетын тапшырыу элекке директор имза ҡуйған насар характеристиканы юҡҡа сығарырға тейешлеген, ветеринар булһа ла, яҡшы аңлай ине. Уның был ялыуында төплө логика ятҡанын шундуҡ төшөнөп алған партия комиссияһы райкомдан Маматовтың намыҫын бысратҡан элекке характеристиканы юҡ итеүҙе һәм уны биреүҙә ғәйеплеләрҙе яуапҡа тарттырыуҙы кәрәк тапты. Билдәле, парткомиссияның был талабының асылында уға ҡул ҡуйған директорҙы яуапҡа тарттырып, иң кәмендә шелтә иғлан итеп, Маматов ҡыҫымынан ҡотолоу ине. Был мәсьәлә буйынса институт партия ойошмаһының секретарын комитетҡа саҡырып, ентекле инструктаж бирҙеләр.

Маматовты тынысландырыу өсөн институттың элекке директоры профессор Ғарифуллинға хисап карточкаһына яҙмайынса булһа ла шелтә иғлан итеүҙе эшләргә кәрәк тигән күрһәтмә алып ҡайтты партия ойошмаһы секретары.

Ләкин йыйылышҡа килгән коммунистар юғарынан төшкән күрһәтмә буйынса ғына эш итмәне. Был мәсьәләне тикшереү оҙаҡламай етди төҫ алды. Сығыш яһаусы бөтә коммунистар ҙа Маматовҡа элек бирелгән характеристиканы яңынан бер тауыштан дөрөҫләне. Маматовты ҡайтанан фирҡәгә алыуҙы дөрөҫ түгел тип тапты. Сәитборһанов менән партия ойошмаһы секретарының ҡабат-ҡабат трибунаға менеп «Райком линия»һын яҡларға тырышыуҙарын йыйылыш бер тауыштан кире ҡаҡты. Тамам аптыраған секретарь: «Неужели мин һеҙгә йәл түгел. Бөгөн һеҙ ошондай ҡарар ҡабул итһәгеҙ, иртәгә район комитеты мине бөтөрәсәк бит», — тип күҙ йәше менән илап та ҡараны, ләкин йыйылыш уның ялбарыуына ҡолаҡ һалырға теләмәне. Дәүләт милкен урлағаны өсөн яуапҡа тарттырылған кешене үҙ ҡанаты аҫтына алған өсөн коммунист Сәитборһановҡа йыйылыш шелтә иғлан итте, ә Маматовты өр-яңынан партиянан ҡыуырға тигән ҡарар сығарҙы. Иң аҙаҡтан партия ойошмаһы район комитетының бюро составына ышанмаусанлыҡ белдерҙе.

Сире көндән-көн ҡатмарлашҡан Батыр Бүребаев өсөн партия ойошмаһының был дәһшәтле ҡарары насар ҙа, яҡшы ла тәьҫир итмәне. Шул телдән яҙған көйөнсә, ул тағы ла бер ике аҙна интегеп ятты ла яҡты донъянан китеп тә барҙы. Ғәрәптәр әйткәнсә, «Дәрел фанадин дәрел баҡыға риҳләт итте»[1]. Уны ерләү өсөн комиссия төҙөп тә мәшәҡәтләнмәнеләр, йәһәннәмгә ҡойроҡ сәнсеүен ятһа ла, торһа ла хоҙайҙан бер туҡтауһыҙ һорап ултырған, ғүмер буйы әҙмәүерҙәй ирҙе табаны аҫтында тотҡан ғәййәр абыстайҙың теләге ҡабул булды. Ниһайәт, ауырыуының беренсе сәғәтенән үк иҫен юғалтып, телдән ҡалған иренең яҙмышы шуның менән осланыры уға күптән мәғлүм ине инде. Екһеҙ ергә пропускыһыҙ үтеп өйрәнгән был бисә, үҙ таныштары, врачтарҙан был мәсьәлә буйынса ла ентекле мәғлүмәт алып өлгөргәйне.

Уның һәр һүҙен ҡуш ҡуллап ҡабул ҡылып, һәр ишараһына эйәк атып ултырған яҡын ярандарынан уны һуңғы юлға оҙатыу өсөн берәү ҙә килеп йөрөмәне, сөнки вафат булыусыға юғары властарҙың мөнәсәбәтен яҡшы белгән һиҙгер танаулы ағай-эне ел-ямғыр тейеүҙән, үҙ вазифаларынан ҡолаҡ ҡағып ҡалыуҙан ҡурҡты.

---

[1]Фани донъянан үҙ асылына ҡайтты, тигән һүҙ. Ғәрәпсә.

Уның мәйетен районан килгән туған-тыумасалары ауылға алып ҡайтып киттеләр. Бик күптән тыуған төйәгенән айырылып, бисәһе арҡаһында бер тапҡыр ҙа унда килеп урамаған Батыр Бүребаевтың тыуған тупрағына тик уның үле кәүҙәһе менән «флюгер» тигән ҡушаматы ғына ҡайтып төштө. Әйткәндәй, уның зыярат рәшәткәһенә ниндәйҙер әтрәгәләм, уны ерләп бер нисә ваҡыт үтеүгә фанерға ҡара буяу менән яҙып «Флюгер» тигән яҙыу ҙа элеп китте.

Нисә тиҫтә йылдар уның менән тормош юлын бергә атлаған, түшәк йылыһын бергә бүлешкән хәләл ефете ул тере саҡта уҡ байтаҡ ҡына йыйылып киткән йыһаз-мөлкәтен аҡса болына һәм алтынға әйләндерә башлағайны. Әле сиртһәң ҡаны сығырлыҡ, теләһә ниндәй ирендә лә туҙҙырып, йыуғысҡа әйләндерерлек бисә иренең үлеүенә йыл тулыр-тулмаҫтан, утыҙынсы йылдарҙа колхоздан һырт биреп ҡасҡан туғандары янына, Ташкент тарафтарына сығып китте. Атлағанда ер сатнатып йөрөгән, ҡысҡырғанда ер ярырҙай тауышлы, үткер ҡараштары менән теләһә кемде лә өтөп алған, ҡарамаҡҡа арыҫландай ажар ир Батыр Бүребаевты һуңынан иҫкә алыусы кеше лә булманы, сөнки күк көмбәҙендә ел-дауылдар сығарып тороусы икенсе яҡтыраҡ йондоҙҙар балҡый ине. Флюгерҙарҙың өҙләкһеҙ әйләнеп торған ҡанаттары әлбиттә шул тарафҡа боролдо. Үҙен күктең етенсе ҡатында хис иткән, яҡты хыялдарының бөрөләре асылып, бына-быпа сәскәгә йомарланыр ваҡыт ҡул һуҙымы ғына ер ҡалғас, Маматов һәм уның ағаһы тарафына ҡарап флюгерҙары әйләнә башлаған ғына бер хиләүәт мәлдә аяҙ күктә тағы ла йәшен йәшнәне...

Иң ҙур ҡала комитеты пленумы әле креслоһы йылынып та өлгөрмәгән өлкән хужаға һәм ул етәкселек иткән бюроға ышанмаусылыҡ белдерҙе. Тәү башлап үҙ посын ҡалдырыу хаҡында өлкән хужа үҙе ғариза яҙҙы, уның артынан башҡалары ла эйәрҙе. Өлкән хужа ни өсөндөр үҙенең оло вазифаһына ҡырталашып, яғалашырға теләмәне. Бының сәбәбе тик һуңынан ғына асыҡланды. Киң ҡолас, ҙур алымдар менән дәүләт милкен таларға тотонған яңы хужа менән сағыштырып ҡарағанда ваҡ-төйәк урлап тотолған ветеринар Маматов баҙар араһында буталып йөрөгән кеҫә буры, береһе — теләһә ниндәй табышты ла сәйнәмәй йотоусы ас крокодил булһа, икенсеһе — әле тик селбәрә йотоусы йөҙгөс ҡанаттары ла нығынып өлгөрмәгән йылға сурағайы ғына ине. Быпа шуға күрә лә үҙенең ҡылған яуызлыҡтары өсөн ҡасан да булһа бер яуап биреү сәғәтен көтөп ятҡан өлкән хужа үҙенең оло вазифаһы өсөн көрәшеп маташманы. Эш боҙған малайҙар

шикелле, башын баҫҡан килеш, шымып ҡына ултырыуҙы хуп күрҙе. Уның ҡарауы, көпә-көндөҙ эштән ҡайтып, үҙ телевизорын шул тапшырыуға көйләп ҡуйған Маматов, ағаһының уртына һыу уртлаған кешеләй, иҙәнгә теклəп ултырыуына сыҙамай, бер урынынан тороп китте, берсә төкөрөнә-төкөрөнә киң бүлмәгә һыя алмайынса арлы-бирле йөрөп алды. Бер тауыштан ағаһын һәм уның ярандарын вазифаларынан бушатҡас, «Китте баш, хәҙер йыйын хәйерсе беҙгә сайыр һымаҡ йәбешә инде. Бына шулай була ул хоҙай биргән власты ҡулыңда тота алмағас. Бешәлкәһеҙ, асыҡ ауыҙ. Килеп ултырғас та, иң башта кемдәрҙең башын кисекмәҫтән киҫергә кәрәклеге тураһында ҡат-ҡат һөйләп тә сыҡҡайным бит. Етмәһә, уларҙың исемлеген дә ҡулына тоттороп киткәйнем. Ул йүнһеҙҙең шул исемлекте юҡ итергә лә башы етмәҫ әле, моғайын», — тип үрһәләнде Маматов. Балконындағы бутылдан бер стакан таҙа спирт һалып алды ла ҡапыл боғаҙына килеп тығылған ауыр уйҙар төйөнөн йыуып төшөрөргә теләне. Күҙен йомдо ла, ауыҙын ослайтып, тынын тышҡа өрҙө. Кинәт, йомран ояһы кеүек асыҡ ауыҙына бер стакан спирт ауҙарҙы. Утлы шыйыҡса уның үҙәген яндырып, ашҡаҙанына төшөп тә өлгөрмәне, кинәт телефон шылтыраны. «Трубканы алырғамы, әллә алмаҫ-ҡамы?» тигән етди һорау әле спирт парҙары барып етмәгән хужаның башын айҡап сыҡты. Телефон һаман шылтырауын дауам итте. Трубканы күтәреп, кире һалырға самалағайны, яңғырауыҡлы тупаҫ тауыш уны ҡыпһыуырҙай тотоп алды. «Өйөңдә генә ҡасып ятаһыңмы, ҡараҡ, — тине билдәһеҙ кеше. — Һин башҡа шул өйөңдән сыға ла алмай тонсоғорһоң. Телевизорҙан ҡарағанһыңдыр — һинең атаҡлы ағайың башын да ҡалҡытмай, артҡы шәрифенән тын алып ултырҙы. Көнөгөҙ бөттө һеҙҙең, ҡояшығыҙ байыны. Иртәгәнән башлап һеҙгә беҙ тотонасаҡбыҙ, тик таң атҡанса үҙегеҙгә ҡул һалып ҡуймағыҙ, һеҙгә ясинды беҙ уҡырбыҙ», — тип өҙөп-өҙөп әйтте лә трубкаһын һалып ҡуйҙы.

Был икенсе — ҡапма-ҡаршы яҡтан өрә башлаған елгә ҡанаттарын яйлай башлаған флюгерҙарҙың береһе ине.

# АВТОМАТ БИСӘ

Хангилде Батырханов ғүмерен үҙенсәрәк йәшәне. Совет власының бөтә закондарын да тип әйтерлек йәне-тәне менән ҡабул итеүенә ҡарамаҫтан, ирҙәр хоҡуғын ҡатындарҙыҡына тиңләүҙе оҡшатып бөтмәне. Ошо законға ҡаршы уның елкәһе ҡорошто. Нисек инде ул, мин үҙем, исемем, фамилиямда ғына ике ханды йөрөткән ир, ҡатындар менән тиң булайым, ти? Тормошта ирҙең үҙ урыны, ҡатындарҙың үҙ урыны. Береһенә — бала табыу, ә икенсеһенә — бала туйҙырыу. Ҡатын урыны өйҙөң түр башында, ирҙең урыны ихатала, кәртә-ҡурала. Иргә утын килтереү, уны бысып, ярып биреү һәм шуның менән, шабаш-баста! Ә ҡырҡылған утынды өйгә ташыу, мейес яғыу — ҡатындар шөғөлө. Ир башым менән утын ҡосаҡлап өйгә индереп биреү, бигәйбә, минең эшем түгел, тип ҡараны. Ул үҙенең атаһынан вариҫ булып ҡалған ошо фәлсәфәне өлкән улы Яубаҫарҙың сабый күңеленә, яңы ғына ҡуйыра башлаған һоро мейе шыйыҡсаһына даими рәүештә экренләп һала барҙы, ошо үҙ һабағын улына һеңдерергә тырышты.

— Бына берәр ваҡыт минең түрбашта ҡашығаяҡ йыуып торғанды күргәнең бармы? Берәй саҡ, әсәйең өлгөрә алмай тип, ир башым менән Ҡыҙылдан көйәнтәләп һыу алып ҡайтҡаным булдымы? — тип өҫтәлдә дәрес әҙерләп ултырған малайына, үҙенән ҡала тормош дилбегәһен тапшырасаҡ кешегә, ҡат-ҡат тыҡыр ине.

Атаһының беренсе генә һабағы булмағанға күрә, иртә менән тороп көн дә бит йыуған шикелле, был һорауҙың йыш ҡына ҡабатланыуынан тамам ялҡып бөткән Яубаҫар, уҡыған китабынан башын ҡалҡытмай ғына, гәҙәттәгесә:

— Юҡ, күргәнем юҡ, — тип яуап бирер булды.

Хангилде, урты эскә бата башлаған йыйырсыҡлы битенә оло кинәнеү һыҙаттары йүгертеп:

— То-то, — тине. — Бисәгә һыу ташып йөрөү ана колхоз агрономы Вәлиәхмәтовтың кәсебе ул. Кәстүме өҫтөнән алъяпҡыс һалып, терһәгенә ҡәҙәр еңен һыҙғанып, түрбашта һауыт-һаба йыуып тороу ауыл мөғәлиме Аҫылбаевтың эше. Тфү, пазур! — тип Хангилде ҡарт, бик ҡыҙған саҡтарында, иҙәнгә сарт төкөрөп ҡуйҙы.

Нисек кенә булмаһын, был һүҙҙәр күберәк Яубаҫарҙың дәрес әҙерләгән мәлендә һөйләнһә лә, атаһы өйрәткән тормош ҡағиҙәһе, әлбиттә, бала мейеһенә һеңмәй ҡалманы.

Ләкин атаһының: «Улымды ысын ир итәм», — тип, «Башына кәпәс кейеп, иҙән һепереп йөрөгән кеше ирме ни ул, ул салбарлы бисә», — тип ҡайһы кешеләрҙе мыҫҡыллауы ир ғорурлығын башына һеңдереп өлгөргән, ҡырҡма мыйыҡ ауыл егеттәре артынан эйәрә башлаған Яубаҫарҙы

саҡ ҡына һәләкәткә килтермәне. Шулай бер мәл бер төркөм ауыл малайҙары етенсе төркөмдө тамамлап, Ҡарталы станцияһындағы тимер юл училищеһына имтихан тоторға китте. Дүрт-биш малай билетһыҙ-ниһеҙ вагон тамбурында юлға сыҡты. Бер аҙ барғас, ҡара гимнастеркаһын яҫы ҡайыш менән быуып, бер ҡулына һепертке, икенсе ҡулына тимер һоҫҡо һәм бысраҡ биҙрә тотҡан, кокардалы фуражка кейгән бер ир тамбурға сыҡты ла иҙән һепererгә кереште. Вагон стенаһына терәлеп ултырған малайҙарҙың ҡуңысына еүеш һепертке менән һуға-һуға, теге кеше: «Аяғығыҙҙы күтәрегеҙ», — тигән ишара яһаны. Үҙ ғүмерҙәрендә иҙән һепергән ир кешене күрмәгән малайҙар, ғәжәпләнеп, бер-береһенә ҡараны. Ә ир йораты Яубаҫар мыҫҡыл итеп ауыҙын йырҙы ла эргәһендәге иптәшенең бөйөрөнә төрттө. Ә теге фуражкаһына ураҡ-сүкеш йәбештергән кеше ашыҡмай ғына һепертгеһен стенаға һөйәне лә башта йөнтәҫ ерән ҡаштарын төйнәп, уҫал ҡараш менән бер мөйөшкә өйөлөшкән малайҙарҙы өтөп алды.

— Ҡана, һеҙ, өйөрлө ҡаҡбаш Аллабирҙеләр, билетығыҙҙы сығарығыҙ әле, — тип ҡулын һондо. Башҡалар ҡурҡышынан аяҡ үрә баҫты. Билен бишкә бөгөп, иҙән һепереп йөрөгән «ҡыҙтәкә»нең билет тикшерергә хоҡуғы барын башына ла килтермәгән Яубаҫар урынынан тороу түгел, ыжламай ғына яуап ҡайтарҙы.

— Ты не насалник, а баба, — тип ебәрҙе. Уның уйлауынса, билет тикшереп йөрөүсе кеше һис һүҙһеҙ үҙ ауылындағы «налагауай агент» Хәкимйән ағаһы шикелле яурыны аша күн сумка тағып йөрөргә тейеш кеүек тойолдо. Ныҡ сығырынан сыҡҡан вагон кондукторы Яубаҫарҙың елкәһенән тотоп, коридорға һөйрәп сығарҙы ла китеп барған вагон ишеген асып: «Көрәк һабындай маңҡа миңә аҡыл өйрәтеп маташа», — тип һөйләнә-һөйләнә, Яубаҫарҙы тышҡа этте. Ниндәйҙер хикмәт менән уның елгә елберҙәгән тун салғыйы ябылған ишеккә ҡыҫылып тороп ҡалды. Ошолай аҫылынған рәүештә туңып ҡатҡан Яубаҫар икенсе станцияға тиклем барҙы. Поезд туҡтағас, эстән ишек асылыу менән, иген тултырылған тоҡ кеүек, ул лапылдап ергә төштө. Үлеүен ул үлмәне, ҡаты имгәнһә лә, бәхетенән, тере ҡалды, ләкин бына ошондай ваҡиғанан һуң да ул атаһы фәлсәфәһенә тоғро булып ҡалыу ғына түгел, уны йәшәү ҡағиҙәһенә, тормош кендегенә әйләндерҙе.

«Үҙем тере саҡта баш баламды башлы-күҙле итәйем», — тип Хангилде ҡарт Свердловск өлкәһе Ҡыштым ҡалаһында яңы ғына тау техникумы тамамлап ҡайтҡан малайына ауыл уҡытыусыһын әйттерҙе.

Ситтән килгән был тилбер, буй-һыны күркәм генә ҡыҙ бала, Яубаҫар һымаҡ, уҡыу бөтөрөп, Ялан ауылы мәктә-

бендә икенсе йыл ғына эшләй ине. Уны Хангилделәр күршеһендә яңғыҙ ғына йәшәгән Маһибәҙәр әбей өйөнә фатирға керттеләр. Төтөн менән ыҫланған, мөйөштәрен үрмәксе ауы баҫҡан, тәҙрәләре бер ҡасан да йыуылмаған ҡараңғы өй бер йыл эсендә баяғы мөғәллимәнең тырышлығы, уңғанлығы менән гөлт итеп яңырҙы.

Әбейҙең барлыҡ ҡына йыһазын соланға сығарып, Гөлдәр исемле был ҡыҙыҡай өйҙөң эсен, стена, түшәмдәрен ҡырып йыуып сығарҙы. Бер иле саң ҡунған тәҙрәләрҙе йыуып, сигелгән ҡорғандар элде. Әбейҙең ғүмерендә эзбиз күрмәгән усаҡ-мейесен, ап-аҡ ҡар һымаҡ итеп аҡлап ебәрҙе. Тәүге эш хаҡына өҫтәл, карауат һатып алды. Бер нисә ай үткәс, әбейҙе лә ҡаҡ һикенән селтәрле йомшаҡ карауатҡа күсерҙе.

Күктән төшкән был бәхеткә Маһибәҙәр ҡарсыҡ ҡарап та, һөйөнөп тә туя алманы. Башындағы элек төҫһөҙ кәшәмир яулыҡтың, өҫтөндәге ныҡ керләнеүҙән биҙәктәре уңа башлаған күлдәгенең берҙәй асылып, нур бөркөп тороуын күреп, уның күршеләре:

— Маһибәҙәр инәй, ошо уҡытыусы фатирға килеп ингәс, өйөгөҙгә лә, үҙеңә лә баҙыҡ төҫ керҙе, матурлыҡ өҫтәлде, сырайҙарың асылып, йәшәреп киттең, әллә ул ҡыҙ баланың бер-бер ырымы бармы? — тип ҡыҙыҡһынды.

— Ә һуң уның өйөн ҡара, ялт итеп тора, шул тиклем ыҡсым, культурный итеп йыйыштырылған, аяҡ баҫырға ла ҡурҡып тораһың, инһәң, сыҡҡы килмәй, — тиештеләр.

Әбей тындары бөтөп, үҙенең яңы өйҙәшен, ауыҙының һыуы ҡороғансы күршеләре алдында маҡтап, һүҙе бөтмәне.

— Ҡуй инде. Әйтерең бармы. Уның уңғанлығына, таҙалығына иҫең китмәле. Бер генә минут та буш тора белмәй... Мин инде — ашарын ашаған, йәшәрен йәшәгән кеше — килендәрҙең тырнаҡ керен байтаҡ татыған әҙәм бит инде, ләкин бының ише инсафлы, бының шикелле итәғәтле, әлүән-әлүән аш бешереүсе баланы күргән юҡ. Уның бешергән аш-һыуы шул тиклем татлы — ашап туйғыһыҙ. Анауы ысталауайҙарында бешкән нәмәне һис кенә лә ашап булмай бит. Саҡ ҡына ҡапһаң — үҙеңде ашай, килеп тороп үҙәк көйә, — тип Гөлдәрҙең, аяҡ-ҡулын ергә тигеҙмәй, маҡтарға керешә. Яулығының мөйөшө менән тешһеҙ ауыҙын ҡаплап, бер аҙ уйланып ултыра ла әбей, үҙ һүҙен изге теләктәр менән тамамлап ҡуя.

— Үҙе дитдум балаһы бит әле. Ата-әсәнән дә хәҙерге бала ул тиклем тәрбиә ала алмай. Бер яҡшы урыны тура килһә, хәҙер генә донъяһын байытырға тора, ирен дә, бала-сағаһын да хур итә торған бала түгел. Бәхетен генә бирһен инде, хоҙай.

Бына ошо Маһибәҙәр ҡарсыҡтың уңған уҡытыусыһы Гөлдәр баяғы Яубаҫарға насип булды.

Яңы йортҡа, үҙ ғаиләһенә килеп ингәс, йәш килендең уңғанлығы ла, тырышлығы ла бермә-бер арта төштө.

— Бөгөн ата-әсәләр йыйылышы, кис балаларҙы баҡсанан барып алырға ваҡытым юҡ, — тип иренең эшенә шылтыратҡыланы.

Ләкин шырты оторлһона торған ире тупаҫ ҡына яуап ҡайтарҙы.

— Нисек? Мин ошо мастер башым менән, урам уртаһынан, балалар ултыртып сана һөйрәп ҡайтайыммы? Баш бармы һиндә әҙерәк? — тип бисәһен шелтәләне.

Өйҙә балалар тәрбиәһендә уның ҡатнашлығы ла үҙенсәрәк булды. Балалар шаулашып, шаяра башлаһалар, ул, диванда гәзит уҡып ятҡан еренән, башын ҡалҡытып:

— Шаулатма әле шуларыңды. Маҙаға тейәләр бит. Гәзит уҡырға, фекер тупларға бирмәйҙәр ҙә баһа, мәлғүндәр, — тип бисәһенә ҡысҡырҙы. Ә төндәрен балалар карауатында ятҡан кесе сабыйҙары сырылдай башлаһа:

— Анау балаңды тыйһаңсы, нишләп шул тиклем аҡыртаһың, йоҡларға бирмәй бит, биҙун, — тип көн буйы арып, яңы ғына йоҡоға киткән бисәһен уятыр булды.

Балалары иҫ белә башлағас, ике малайын ике яғына ултыртып, уның үҙенә нисек туҡығандар — шулай, ата һабағы уҡыта башланы... «Башына кәпәс кейеп, иҙән һепереп, бисәләр эшенә тығылып, түрбашта ҡашығаяҡ йыуып торған ир — ир түгел ул — «ҡыҙтәкә», донъяла ирҙең урыны башҡа...» — Быңдай эленән-әле ҡабатланған ата өгөтөн ишетеп йөрөһә лә, ғүмер буйы этләнеп, ирҙәр эшен башҡарып йөрөгән Гөлдәр быңдай осраҡтарҙа өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙе. Ауыҙ-моронон буяп, тырнаҡ еткереп, хәҙерге әҙергә-мәҙер йыртанас килендәр алдында үҙ малайҙарының ҡол булып йөрөүен теләмәне. «Ана, атаһы...»

Бына шулай «үҙ-ара эш бүлешеп», «ал да гөл» ғүмер иттеләр улар. Бисәһе, уртаға егелеп, тормош йөгөн тартты, ә балалар тейәлгән донъя арбаһының кузлаһында «ат ҡыуып», Яубаҫар ултырҙы. «Аты» талсығып, йөгөн тарта алмай, үжәтләнә башлаһа, Яубаҫарҙың ҡулындағы «оҙон сыбыртҡы» ярҙамға килде.

Ә күрше-тирә улар тормошоноң етешлегенә, матурлығына хайран ҡалды. Балаларының бөхтә, уйынсыҡ кеүек кейенеп йөрөүҙәренә һоҡланмаған кеше булманы. Уларҙың таныштары был ғаилә тормошоноң тышҡы буяуы ялтырап торған яғына ҡарап фекер йөрөттө, шуға ҡарап баһа бирҙе, ә халыҡ баһаһы, ил бизмәненең мыҫҡалы иренә лә, ҡатынына ла тигеҙ үлсәү сығарҙы. Хатта ҡайһы берәүҙәре:

— Яубаҫар бик салт, уңған ир бит. Эшендә уны, бөтә кешегә лә бик иғтибарлы, илтифатлы кеше, тип маҡтап телгә алалар.

— Шулай булмай ни? Бына нисә йылдар инде Яубаҫарҙың фотоһы Почет таҡтаһынан төшкәне, ә үҙе премиянан ҡалғаны юҡ. Быйыл металлургтар көнөндә үҙен Мәскәүгә саҡырып, ҙур бүләк биреп ҡайтарғандар, имеш, тиҙәр ҙә баһа, — тиеште уларҙы белгәнерәк кешеләр.

Быларҙың йәмле тормошон ситтән күҙәтеп йөрөгән ҡайһы бер таныштары Гөлдәргә лә өлөш сығарҙы.

— Уның бисәһе лә ничауа ғына, өйҙә бик эшлекле, балаларын бик матур көтә, тиҙәр. Ләкин ул бисә ҡарамаҡҡа бик тә йонсоу күренә. Тышҡы ҡиәфәте лә бик мөшкөл, өҫтө-башы ла әллә ни түгел, үҙен ҡарамай, күрәһең...

— Уны әйтәһең әле һин. Ата-әсәләр йыйылышында ул киленде һәр ваҡыт телгә алып ҡына торалар икән. Уҡытырға ла бер ниндәй әҙерлекһеҙ килә ти ҙә баһа. Бер эшлекһеҙ бисә, ахыры, — тиеште халыҡ.

Шулай итеп, был ике хөрмәтле кешенең береһе тормошта күпме генә тырышмаһын, эше менән дә, тышы менән дә әкренләп түбән төшә барҙы, ә икенсеһе, ирмен тигәне, барған һайын юғарыға үрмәләне.

Яубаҫарҙы, ике йыл ярымлыҡ тау инженерҙары институтын тамамлағас, ҡалаға эшкә күсерҙеләр. Бында инде ул тышҡы ҡиәфәте менән дә, аппараттағы эше менән дә бүтәндәрҙән ҡалмаҫҡа, үҙе әйткәндәй, бер табандан атларға тырышты. Эше буйынса ла, йәше буйынса ла ул ысын ир ҡорона тулды.

Егерме биш йылдан артығыраҡ ауылда уҡытып килгән Гөлдәрҙе ҡала мәктәптәренең береһе лә эшкә ҡабул итмәне. Бер нисә тапҡыр барып, Минпрос тупһаһын тапап йөрөү ҙә бер ниндәй һөҙөмтә бирмәне. Етмәһә, ғүмер баҡый ауылда башҡорт телендә дәрес алып барған Гөлдәр Барлыбаева ҡала өсөн кәрәкмәгән белгес булып сыҡты. Бер көн дә ҡалдырмай мәктәптә эшләп өйрәнгән ауыл уҡытыусыһы ҡалаға күсеп, бер ниндәй ҙә йән тоҡаһы таба алманы. Институттың тарих факультетын тамамлау тураһындағы дипломын һандыҡ төбөнә ырғытып, ул торлаҡ идаралығына лифтер булып эшкә төштө. Уның ауылда сирек быуат буйы балалар тәрбиәләүен бер кем дә хисапҡа алманы.

Тик көн дә бер үк ваҡытта мәктәптән дәрестән ҡайтҡан, етенсе ҡатта йәшәгән инглиз теле уҡытыусыһы, көләс йөҙлө, шат Светлана Шнайдерҙы күргәс кенә, уның былай ҙа болоҡһоу күңеле үткән йәшлек йылдарына әйләнеп ҡайтыр булды, бындай саҡтарҙа йыйырсыҡтар менән һырланған маңлайына йыш ҡына һөрөм шәүләһе ятты.

Ир менән ҡатындың йәшәү рәүеше уларҙың тышҡы ҡиәфәтенә, буй-һынына ла үҙ ҡалыбын һалды. Ҡасандыр тал сыбығылай һығылмалы, һыу һөлөгө шикелле сибәр Гөлдәрҙең яурындары ғүмер баҡый ауыр эш башҡарған ирҙәр, йөк ташыусыларҙыҡы һымаҡ киңәйә төштө, кәүҙә торошо артыҡ үҙгәрмәһә лә, ул утын яра торған шынаға оҡшап ҡалды. Ә инде олпат Яубаҫарҙың яурын урынына, май ултырып, янбаштары яҫырҙы, былай ҙа тулы бите өрөп тултырғандай түңәрәкләнде, ҡалын эйәктәре икегә айырылып, һалынып төштө. Папканан башҡа нәмә тотмаған ҡулдары, толоп булып шешенгән ише, ҡамырға әйләнде.

Үҙе лифт эсендә генә ултырһа ла, Гөлдәр үҙ ире менән һәр саҡ ысын күңеленән ғорурланды. «Буй тиһәң — буйы, һын тиһәң — һыны бар балалар атаһының. Уның артынан урам буйлап эйәреп йөрөүе үҙе бер ғүмер әле», — тип ҡыуанды. Ҡалаға күсеп килгәс, уның менән йәнәш йөрөргә ул үҙе ҡыйманы. Уның үҙенә ҡарата һуңғы йылдарҙа һыуына башлауына ҡарамаҫтан, иренә элеккесә йәнен-тәнен аямай хеҙмәт итеүен дауам итте. Яубаҫарҙың ғүмер бергә торған ҡатынынан һыуына башлауына, бәлки, Гөлдәр үҙе лә ғәйеплелер.

Элек тә өйҙә ҡыл ҡыбырҙатмаған Яубаҫар яңы ҡала фатирына күскәс, донъяға ҡул һелтәне. «Утын-бесән әҙерләйһе юҡ, фатир яғып йылытылған, һыуы өй эсендә. Элек ауылда минең ҡулға эш тигеҙмәгән Гөлдәр хәҙер бөтөнләй ожмахта йәшәй. Хәҙер миңә түгел, уның үҙенә лә эш юҡ», — тип фекер йөрөттө Яубаҫар.

Ләкин Гөлдәрҙең эше, хәстәре ҡалала ла һис кәмемәне. Йә ул үҙ эшенән тыш магазинына йүгерҙе, өйөн ҡараны, ашарға әҙерләне, ҡалала йәшәгән ейән-ейәнсәрҙәренә лә өлгөрҙө. Уның өсөн хәҙер «атаһын» тәрбиәләп, үҙ ваҡытында ашатып-эсереп ебәреү иң мөһим эшкә әүерелде.

Төпсөк ҡыҙҙарын кейәүгә биргәс, улар йәштәрҙе ситкә бер ҡайҙа ла ебәрмәне. «Әле, хәҙергә, аллаға шөкөр, әҙәмдән кәм-хур йәшәмәйбеҙ. Донъя мәшәҡәтен елкәләрендә татырға өлгөрөрҙәр әле. Беҙҙең тәрбиәлә булһындар. Икебеҙ ҙә тиң эшләйбеҙ», — тине ата булған кеше. Иренең был йылы һүҙенә ҡыуанып бөтә алмаған әсә кешенең былай ҙа йомшарған нескә күңеле мөлдөрәп тулды, уның ике яғымлы күҙенә әсе йәш эркелде. «Бик тә дөрөҫ, бик тә мәслихәт, йәш саҡтарында пар күгәрсендәй гөрләшеп, рәхәтләнеп йәшәп ҡалһындар. Бала-сағалары була башлаһа, донъя хәстәренә былай ҙа батырҙар әле», — тип Гөлдәр үҙ фекерен йомғаҡланы.

«Тормошта үҙемдең этләнгәнем дә буйтым еткән. Ҡыҙым, минең шикелле, бите менән иҙән һепереп йөрөмәһен,

исмаһам, ул донъя ҡәҙерен белеп етеш тормошта, ожмахтағы һымаҡ йәшәһен».

«Һапһыҙ ҡара балта»ға әйләнгән әсәһенең йылы ҡанаты аҫтында сиртһәң ҡаны сығырлыҡ йәш ҡатын май эсендәге бөйөр һымаҡ йәшәне. Бала табырға ла, ҡарыуы бөтә башлаған әсәһенең тормош йөгөн еңеләйтергә лә ашҡынып барманы. Ә кейәү булған кеше, ҡайнынан күрмәксе, беренсе көндәрҙән үк донъя көтөүгә елкәһе соҡор булып сыҡты. Культура һарайына барып, ике-өс сәғәт барабанын һуғып ҡайтыр ҙа, ҡайнының әле һыуынып та өлгөрмәгән диванына тәгәрәр булып китте, ләкин урманда ағас ауҙарырлыҡ арыҫландай егетте ҡабат диванға ятмаҫлыҡ итеп арт һабағын ҡайыҙларға был өйҙә кешеһе табылманы. Уның эш һөнәре генә «ударник» тип аталды, ә асылда ул арҡырыны-буйға һалмаған тере ялҡау ине.

Кейәүенең культура һарайында «ударник» булып эшләүен тәүгә ишеткәс: «Әллә ошо өй эсендә ҡыл ҡыбырлатмаған ир-ат барыһы ла хөкүмәт эшендә ударникмы икән?» — тип Гөлдәр бер аҙ хайран ҡалып йөрөнө. Тик ҡыҙының: «Әсәй, ул заводтың вокаль-инструменталь ансамблендә таяҡҡа эленгән еҙ тәрилкәләрҙе, мискә дәүмәлдәге барабандарҙы һуғыусы булып эшләй», — тигәс, әсәһе ике ҡулын янбашына һуғып: «Ыстағафирулла, шул кешене «ударник» тип атайҙармы?» — тип байтаҡ иҫе китеп торҙо. Унан ни тип әйтергә лә белмәй: «Ярай, улай булғас, кейәү баланың кәсебе ҡул ҡабартырлыҡ түгел икән», — тигән булды.

Нисек кенә булһа ла, тормош йөгөн төпкә егелеп, бер үҙе тартҡан Гөлдәргә хәҙер ишле ғаиләне ашатыу-эсереү, тәрбиәләү өсөн үҙ янына мисәү итеп, аҡтыҡҡы көс-ғәйрәтен егергә, лифтта эшләп алған жалуньяһын ҡушырға тура килде. «Донъя хәлдәрен белеп булмай, бынауы егерме биш йыл уҡытҡан өсөн ай һайын бирелә торған ҡырҡ ике тәңкә аҡсаны булһа ла төйнәп барайым әле», — тип йыя башлаған уның әҙ-мәҙ болы ла тормош кәрәкярағына әкренләп шыуа башланы.

Бер көн кис эштән ҡайтҡас, диванда, ғәҙәттәгесә, гәзит уҡып, ашарға көтөп ятҡан Яубаҫар бисәһенең өй эсендә өлгөрә алмай, ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла өтәләнеп, йомғаҡ кеүек, тәгәрәп йөрөгәнен күҙ ҡырыйы менән генә күҙәтеп ятты. Яурындары көмрәйеп, аҫҡа сүгә башлаған бисәһенең өҫтөнә керле халат кейеп, үҙ эргәһенән үтеп-һүтеп йөрөүе уның кәйефен ҡырҙы. Етмәһә, йыйырсыҡ бураҙналары менән һырланған ҡаҡса бите, ваҡытынан алда тешһеҙ ҡалыу сәбәпле бер яҡҡа кәүшәйә башлаған ауыҙы, кәксәйгән танау кимерсәгенә төшкән күҙлеге, бер һүҙ менән әйткәндә, ғүмер буйы бергә йәшәгән бисәһенең тышҡы ҡиәфәте Яубаҫарҙың эсен бошорҙо, күңелендә нәфрәт тыуҙырҙы.

Ул, ятҡан урынынан әкрен генә тороп, залдағы ҙур көҙгө алдына баҫты, кискә ауышҡан ҡояш нурҙарына мансылған бейек көҙгө алдында, олпат кәүҙәһен һылап, үҙенең төҫө шикелле, килешеп торған импорт спорт костюмында мөһабәт ир кеше тора ине. Уның мәрмәр плитаһы шикелле шыма, туҡ битенә, шешмәк ҡабаҡтары өҫтөндә, ҡарлуғас ҡанаттары һымаҡ, ике яҡҡа ҡыйғасланып киткән ҡуйы дөм ҡара ҡаштары, сикәләре ағара башлаһа ла, әле бөҙрәләре яҙылып бөтмәгән, ҡашы төҫлө, шырт сәстәре көҙгө алдында үҙ-үҙенә һоҡланып ҡарап торған кешегә бермә-бер матурлыҡ, бөтмөшөнә әле сарыф ителмәгән көс-гәйрәт, урғылып торған дәрт өҫтәй ине.

Ул, көслөк менән тигәндәй көҙгөнән айырылып, яңынан диванға барып ятты. «Да, бисә әптән ҡартайҙы, һөйкөмһөҙгә әйләнде, ҡатын ғүмере ҡырҡ йәш, тип белмәй генә әйтмәйҙәр икән шул. Бер уйлаһаң, уға шулай бик иртә туҙырға сәбәп тә юҡ бит. Мин уны үҙ ғүмеремдә бармағым менән дә сиртмәнем, тормошо һәр саҡ етеш булды, үҙемә килгәндә инде, мин башҡа ирҙәр һымаҡ араҡы эсеп, ғаиләлә рисуай һалып, уны бер ҡасан да йәберләмәнем, тәбиғәтем тыныс», — тип, үҙ бисәһен тәүге күргән шикелле, оҙаҡ ҡына уйланды Яубаҫар.

— Йә, ашарға буламы бөгөн, юҡмы? Нишләп шул тиклем мыштырлайһығыҙ? — тип хужа ятҡан ерендә бисәһен яңынан шелтәләп алды. — Гипертоник кешегә кәйеф ҡырырға ярамай, ошо өйгә ҡайтһаң... — тине лә Яубаҫар, әйтәһе һүҙен бөтөрмәй, эсенә йотто.

— Ниңә шул тиклем мыжыйһың, былай ҙа көнө-төнө уты һүнмәгән машина һымаҡ сабам да баһа, шуны күрмәйһеңме ни? — тип Гөлдәр иренә үпкәләүҙән йөрәге әрнеп, кухняға үтте. — Бөтәгеҙгә лә хеҙмәт итергә өлгөрә алмайым бит, беҙҙең өйҙә барыһы ла байҙар бит, ә хеҙмәтсе берәү генә — мин, автомат бисә, — тип хужабикә был ғаиләлә үҙ ғүмерендә әйтмәгән һүҙ ысҡындырҙы.

Бисәһенең ауыҙынан тәүге сыҡҡан был һүҙҙе ишетеп, Яубаҫар ҡапыл ни тип яуап бирергә лә белмәне. Гөлдәрҙең йөрәгендә, уның кисерештәре менән тулған күкрәгендә ул ниндәйҙер яңы асыш һиҙҙе, үткән тормоштан үкенеү, әсе әрнеү тойғолары төҫмөрләгәндәй булды. Ул үҙ күңеленән генә: «Эйе, бисә — автомат... Автомат бисә... тигән һүҙҙәрҙе бер нисә тапҡыр ҡабатланы. Ғүмер буйы өнһөҙтынһыҙ үҙенә тоғро хеҙмәт иткән бисәһенең эске донъяһын, уның фекер асылын аңларға тырышты, ләкин күпме генә уйланһа ла, был «автомат» һүҙенең мәғәнәһенә, уның ни өсөн әйтелеүенең сәбәбенә төшөнә алманы, зиһене таралды, әммә бисәһенең был етди яуабы уны байтаҡ ҡы-

на уйландырҙы. Ул керпектәрен ҡаҡмай, ҡараштарын, түшәмдән яуап эҙләгәндәй, юғарыға текәлде.

— Беләһеңме, Гөлдәр, — тине ул һәлмәк кенә. — Миңә металл һалҡыны бәреп торған автомат бисә кәрәкмәй. Мине наҙлы итеп иркәләй, ысын йөрәгенән ҡайнар һөйә белә торған ҡайнар ҡанлы, йәне тере, һөйәр бисә кәрәк, — тип һәр һүҙенә ҡаҙаҡ ҡаҡҡандай, баҫым яһап, Яубаҫар һуңғы һүҙен әйтте.

Утыҙ йылға яҡын ҡулға-ҡул тотоноп (һәр хәлдә Гөлдәргә шулай тойолғайны), бергә тормош юлын үткән кешенең теле осонан ысҡынған был аяуһыҙ һүҙҙәр Гөлдәрҙең әлһерәгән йөрәген телгеләп үтте, уның ҡолаҡ төбөндә ғәйепләү ҡарары булып яңғыраны.

Ул, сайҡала-сайҡала, йоҡо бүлмәһенә атланы, бер ни күрмәгәндәй, күҙ алдары ҡараңғыланып, яҫтыҡҡа ауҙы. Буштан-бушҡа тигәндәй, үткән ғүмерен ҡайтарып алырға теләгәндәй, ул ҙур мендәрҙе ҡосаҡлап, үкһей-үкһей, күҙ йәшен түкте. Ҡаҡса битенән тәгәрәп төшкән әсе күҙ йәше менән ул йылдар буйы күңеленә ултырған юшҡынды, бөтмөшөн солғап алған ҡайғылы ҡара болот һөрөмөн йыуырға теләне, ләкин бик һуң ине инде...

Әгәр һеҙ ҡала урамында, яҡшы арғымаҡтар шикелле, ҡаҙандай шәшке бүрек кейгән башын артҡараҡ ташлап, олпат кәүҙәһенә килешеп торған ратин пальтолы эре генә атлап барған папкалы кешене күрһәгеҙ, ул Яубаҫар Батырханов үҙе булыр, ә унан биш-алты аҙым артта йыбырлап ҡына юрғалап барған, ике ҡулына ла тулы сумка тотҡан, аҫҡа сүгә башлаған теремек кенә бәләкәй ҡарсыҡты осратһағыҙ, уныһын Яубаҫарҙың автомат бисәһе Гөлдәр Батырханова, тип танырһығыҙ.

Ә улар үҙ тормоштарының марафонын башлаған саҡта икеһе лә тигеҙ һымаҡ ине бит. Киреһенсә, Гөлдәр саяраҡ та, донъя көтөү өсөн етеҙерәк тә, тырышыраҡ та күренгәйне, ә тормош ахырына улар бына нисек — икеһе ике рәүешле береһе Батырханов, ә икенсеһе Бахырйәнова булып килде.

Юлға сыҡҡанда, уларҙың икеһенең дә ижтимағи һәм сәйәси хоҡуҡтары ла тип-тигеҙ ине... ә һөҙөмтә?

# САҠЫРЫУ ҠАҒЫҘЫ

Башына гәзиттән эшләнгән кәләпүш һалып, алдына әзбиз тамып бөткән брезент алъяпҡыс бәйләп, бүлмәһенең түшәмен йүкә бумала менән аҡлап йөрөгән пенсионер Моталлап Ғирфановичты театр ҡарарға саҡырҙылар. Театр етәксеһе Ғәли Ғәлеевич телефондан үҙе шылтыратты. Уның көмөш тауышы, һуйыр таш араһынан урғылып, түбәнгә тәгәрәгән шишмә кеүек, сылтыраны.

— Бөгөн үҙебеҙҙең мәшһүр артисткабыҙ Рәсимә Ҡәрипованың юбилейын үткәрәбеҙ. Шул уңай менән театрҙа ҡуйыласаҡ премьерала ул бөгөн төп ролдә уйнаясаҡ. Килмәй ҡалмағыҙ, — тип киҫәтте ул.

Көтмәгәндә килеп сыҡҡан был ваҡиғаға ҡарт бер аҙ аптырап та, ләкин эсенән ҡыуанып та алды. Телефон трубкаһын ҡулынан төшөрмәйенсә, ул икенсе бүлмәлә аяғына тәрән резина калош кейеп, түшәмдән төшкән әзбиз, аҡбур бысраҡтарын иҙәндән ҡырып маташҡан ҡарсығына ҡараны. Телефондан ни тураһында һүҙ барғанын төшөнөп алған Мәрйәм әбей бысраҡҡа батҡан көрәген стенаға һөйәне лә туҙанлы ҡулдарын алъяпҡысына һөртә-һөртә: «Әлләсе», — тигән булды.

Трубканан уның яуабын ишетеп торған һиҙгер Ғәли Ғәлеевич ҡарсыҡтың «әлләсе»һенә бер ниндәй ҙә урын ҡалдырманы, тиҙ генә эләктереп алды:

— Унда Мәрйәм апай нишләп икеләнеп маташа? Килһен, килһен. Беҙҙең театрыбыҙға йәм өҫтәп ултырыр. Ул беҙҙең элекке «культура фронты» работнигы ла баһа.

Былдай йылы хәбәрҙе ишеткәс, ҡарсыҡтың күңеле тулды. «Ярай инде, рәхмәт! Шулай итеп ихлас күңелдән саҡырып торғас, барырбыҙ шул», — тине лә шатлығынан күҙенән эркелгән йәшен ҡулының һырты менән туҙанлы битенә һылап ҡуйҙы.

Һүҙҙең ыңғайлағанын аңлағас, телефонда көтөп торған Ғәли Ғәлеевич:

— Минең бөгөн бик тә тығыҙ көн. Рәхим итеп кассанан саҡырыу ҡағыҙын үҙегеҙ генә алырһығыҙ инде. Унда урындары күрһәтелгән, бигәйбә, — тип трубкаһын элде.

Был ҡыуанысла хәбәр ҡарттың да күңелен күтәреп ебәрҙе. Ул ауыртҡан биленә ике ҡулын ҡуйып, командир һымаҡ, ҡарсығы алдына килеп баҫты.

— Ҡарсыҡ, ҡарсыҡ тим, ә? Шулай ҙа был донъяла итәғәтле кешеләр бөтмәгән бит әле. Пинсе ашап өйҙә тик кенә ятһаҡ та, онотмай, юҡ-юҡ та шылтыратып ҡуялар ҙа баһа. Әбей ҙә билен яҙып, кәүҙәһен турайтты:

— Иҫтәренә төшөрөп, театр ише театрға саҡырып

тороуҙары өсөн рәхмәт инде, — тип ҡарттың һүҙен ҡеүәтләне. Шунан бер аҙ уйланып торғандан һуң:

— Әҙәм араһында афтаритың булмаһа, саҡырырҙар, көтөп тор, саҡырмай ни?

Үҙенең был һүҙен иҫбат итергә теләгәндәй, ул өҙөлгән хәбәрен тағы ялғап алып китте:

— Күп тә эшләнек бит, бабай, мин үҙем генә лә әртист-фәлән булмаһам да, культура фронтына ҡырҡ йыл ғүмеремде бирҙем дә баһа, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

— Бына шуға күрә лә һиңә хөкүмәтебеҙ үҙенең персональный пенсияһын биреп ҡуйған да инде, — тип ҡарт үҙенең саҡ торған ҡарсығын ҡупайтып ебәрҙе.

— Әй эттәгенәһе, бик һуңлап ҡына белдек тә баһа, юғиһә, баҙарҙан барып бер тотам сәскә алып киленер ине. Ярай, берәй уңайы тура килеп, тәбрикләргә кәрәк булһа, эстәге йылы тойғоно һүҙ менән дә әйтеп бирергә булыр, — тип ҡарт үҙ-үҙе менән һөйләште.

— Әйҙә, ҡарт, йыйына башлайыҡ. Беҙ мыштырлап кейенеп бөткәнсе сап-самай булыр, — тине ҡарсыҡ сепрәк менән ҡапланған стенаға элеүле кәкүкле сәғәткә ҡарап.

Һыланып-һыйпанып, пар күгәрсендәр шикелле, гөлдөр-гөлдөр килеп, ҡарт менән ҡарсыҡ етәкләшеп театрға йүнәлде. Боҙло юлда тайып йонсоһалар ҙа, уларҙың күңелдәре бик күтәренке ине.

Моталлап ҡарт менән Мәрйәм ҡарсыҡ бөгөнгө юбиляр артистканы ишетеп кенә түгел, күреп тә белә. Улар менән, ҡарт әйтмәксе, бер нисә тапҡыр мәжлестә «ултырҙаш»та булғандары бар. Бик күңелле, алсаҡ, күркәм ҡатын. Бына яңы ғына һымаҡ: Мәскәү театрҙарына йәп-йәш кенә ошо ҡыҙ бала менән бергә барып йөрөгәйнек. Юбиляр ҙа булып өлгөргән. «Үткән ғүмер — аҡҡан һыу», — тип ҡарт юл буйына уфтанды.

Театр бинаһы күренгәс тә берәм-берәм теҙелеп торған кешеләр уларҙың ҡаршыһына сығып:

— Бабай, артыҡ билетығыҙ юҡмы? — тип һораша башланы. Бабай кеҫәһендә бер ни булмаһа ла, эре генә сирттерҙе.

— Юҡ, юҡ, балалар. Беҙ бына инәйегеҙ менән спектаклдәренә саҡырылып китеп барабыҙ, — тип кенә ебәрҙе.

Быялалы ишектәрҙе асып, коридорға ингәс тә, ҡарт кассаға йүнәлде. Бик ҙур һаҡлыҡ менән генә касса тәҙрәһенә сиртте. Бәләкәй генә, ҡап уртаға һынған айға оҡшашлы тишектән ҡуңыр битен ҡуйы итеп буяған, бәбәге аҫтына оҙон, энә шикелле, яһалма керпектәр ҡаҙаған кассир ҡыҙҙың һары башы күренде. Моталлап ҡарт, һыуыҡтан алһыулана төшкән ҡаҡса битенә алсаҡлыҡ һыҙаттары йүгертеп, кассир ҡыҙға мөләйем генә һүҙ ҡушты.

— Ҡыҙым, минең фамилиям Ҡолбаҡтин була, — тине лә нишләптер үҙ һүҙенән үҙе оялғандай булды. Теге ҡыҙ, дегет кеүек ҡара, тимер сыбыҡ ише тура керпектәре аҫтынан утлы ҡараш атты ла:

— Ну и что же? Подумаешь, велика персона! — тип ҡарттың танауы төбөндә генә торған бәләкәй ҡапҡасты шаҡылдатып ябып та ҡуйҙы. Бөтә ихтыярын усына йыйып, ян-яғына ҡарана-ҡарана, ҡарт баяғы шөһрәтле тәҙрәгә яңынан сиртте. Асыҡ тәҙрәнән баҙлап янған ике утлы күҙ касса алдында нишләргә белмәй тыпырсынып торған ҡарттың бөтә бөтмөшөн ялмап алды. Ул, тәфтиш алдында торған гәйепле кеше һымаҡ, бутала-бутала аңлатырға тотондо.

— Ҡыҙым, мине һеҙҙең хужағыҙ, йәғни Ғәли Ғәлеевич үҙе, инәйең менән бөгөнгө спектаклгә саҡырғайны. Саҡырыу ҡағыҙы ошо кассала булыр, тип өйгә шылтыратып та ҡуйғайны. — Теге ҡыҙ ҡартты тәүге күргән шикелле:

— Фамилия, — тине лә, башын ситкә бороп, уның эргәһенә кассаға ингән, өҫтөнә ҡаракүл тун кейгән ханым менән ауыҙын ауыҙға терәп, сыр-сыр көлөшөп, һүҙгә кереште. Ҡарт, сит кеше ишетмәһен тигән шикелле ауыҙын теге тишеккә яҡынырaҡ ҡуйып:

— Ҡолбаҡтин, эйе, минең фамилиям Ҡолбаҡтин була, — тип ҡабатланы. Тәмле һүҙенән айырғанға, күрәһең, битен сирып, ҡыштырлатып өҫтәл аҫтында ниҙер аҡтарҙы ла, кассир ҡыҙ:

— Юҡ! — тип ҡырт киҫте. Теге ярты өшәгә оҡшаған тәҙрә шаҡылдап яңынан ябылды. Ҡарт, һөмһөрө ҡойолоп, ҡарсығы эргәһенә килде. Уғаса булмай театр фойеһы тамашасылар менән тула башланы. Ара-тирә таныштар ҙа осрай. Театрҙың быяла стенаһы аша саҡырыу ҡағыҙы менән килеүселәрҙе ҡаршы алырға директорҙан кесерәк түрәләрҙең сыҡҡаны күренде. Улар араһында, үҙенең элекке эше буйынса үҙен таныған бер нисә кеше лә булғас, ҡарттың эсенә йылы йүгерҙе. Билеты булмаһа ла, ҡарт менән ҡарсыҡты театр фойеһына үткәрҙеләр,

— Әйҙә, ағай, ана минең бүлмәгә инеп сисенә тороғоҙ. Бына апай, көҙгөгә ҡарап, тағы ла матурланыбыраҡ алһын. Билет мәсьәләһе ни үҙебеҙҙең ҡулда ул, хәл ҡылырбыҙ, — тине лә администратор ҡайҙалыр китеп юғалды.

Юбилярға тапшырыу өсөн ҡулдарына сәскәләр, ҡыҙыл папкалар тотҡан етди ҡиәфәтле, олпат ағай-эне, администратор бүлмәһенә инеп, үҙҙәренең затлы пальтоларын, бүректәрен эләләр ҙә, һибелгән борсаҡ һымаҡ, яҡты, матур бинаның төрлө мөйөштәренә тарала торалар.

Ҡарттың бер нисә таныш-тоношо килеп хәл-әхүәл белешеп китте.

— Театрға килдем тиһең инде, ә?

— Үҙебеҙҙең мәшһүр актриса Рәсимә Ҡәриповалы тәбрикләргә уйланыңмы? Бик яҡшы эш, изге бурыс.

Ләкин билеты юҡлыҡҡа оятынан ярылырҙай булып торған Моталлап ҡартҡа уларҙың күңелле һүҙҙәре стена аша ишетелгән кеүек тойолдо. Бына ҡулдарын ыуа-ыуа йүгереп икенсе ҡаттан төшөп килгән театр хужаһы үҙе күренде.

— О, Моталлап Ғирфанович, бигәйбә, бигәйбә! Ҡаршы алып булманы. Беҙҙең йүнһеҙлек бер бөгөн түгел инде ул. Үҙебеҙ саҡырабыҙ ҙа, үҙебеҙ ҡасып алып тик йөрөйбөҙ, — тип ул, ҡарт алдында аҡланғандай, көлә-көлә хәбәр һөйләп алды. Шунан туп-тура кассаға атланы. Күп тә үтмәне ул ҡулына оҙонса конверт тотоп, кире килеп сыҡты.

— Бына, ағай кеше, һеҙҙең йомшаҡ урындарығыҙ. Әҙерәк артистарса килеп сыҡты инде, ағай, бигәйбә, — тип ул ҡарт ҡулына конверт тотторҙо ла, ҡайҙалыр тағы ашыҡты. Ҡарт менән ҡарсыҡтың йөҙө, ҡыҙарып сыҡҡан май ҡояшы кеүек, яҡтырып китте. Ҡарт, бына күрһендәр тигән һымаҡ, ул ҡағыҙын, күҙенә яҡын килтереп, ҡат-ҡат уҡыны. «Ҡара, шельма, рәүешенә килтерә. Ғәли Ғәлеевич ҡағыҙын алтын буталлы ташҡа баҫҡан хәрефтәр менән эшләткән», — тип ул ҡағыҙын усы менән тигеҙләп, һаҡлыҡ менән генә, ян кеҫәһенә һалып ҡуйҙы. Үҙенең бер нисә тиҫтерен, танышын осратып, Моталлап ҡарт бер аҙ борсаҡ шыттырып алырға ла өлгөрҙө.

— Бына, Ғәли Ғәлеевич үҙе шылтыратып саҡырып алды әле.

Уның эргәһендә торған ҡарсығы ла ҡартының һүҙен ҡеүәтләп:

— Ҡарттарҙы онотмайҙар. Ҡайҙа барһаң да ҡәҙер итеп, хөрмәтләп торалар, — тигән булды. Тамаша залына инергә бер нисә минут ҡалғас, ҡарттың күптәнге танышы уның саҡырыу ҡағыҙын ҡараны ла:

— Ой, Моталлап ҡорҙаш, бер рәттән, хатта йәнәш ултырабыҙ икән. Ярай, ошо театрҙа осрашмаһаң, башҡа форсат та теймәй, һөйләшә-серләшә ултырырбыҙ, — тип ысын күңелдән шатланды.

Өсөнсө ҡыңғырау шылтырағас та бер-береһенән арттырырға тырышып ыҫпай, затлы кейем кейгән тамашасылар фойе ишегенән залға ағылды. Бөтә кешенең йөҙө көләс, күңеле күтәренке, бөтә кешенең битендә генә түгел, һынында ла әҙәплелек, инсафлыҡ һыҙаттары балҡый. Ирҙәр баштарын түбәнселек менән эйеп, киске электр уты яҡтыһында тәбиғәттең барлыҡ төҫөн өҫтәренә кейгән, биҙәнгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы ишектән алға үткәреп тора. Әйтерһең дә, ярты сәғәт кенә алдан ошо уҡ кешеләр магазин сиратында бер-береһенә тупаҫлыҡ күрһәтмәгән, нышып тултырылған ҡала автобусында ошондай уҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы этә-төртә

осло терһәктәре менән үҙенә юл ярмаған. Юҡҡа ғына театрҙы, концерт залдарын сәнғәт һарайы, тип әйтмәйҙәр шул! Бында бөтәбеҙ ҙә культуралы, һәр икебеҙ кеселекле, бер-беребеҙгә өлгө булырлыҡ ихтирамлы.

Моталлап ҡарт та, ҡарсығын етәкләп, үҙ рәтенә үтте. Уның фойела осраған танышы урынан тороп уҡ:

— Әйҙә, ҡорҙаш, бына һинең урының, рәхим ит, — тип эргәһендәге ҡыҙыл буҫтау менән көпләнгән ултырғыстарға төрттө. Моталлап үҙ ҡырынан әбейен үткәреп, саҡырыу ҡағыҙында күрһәтелгән урындарға ултырырға ла өлгөрмәне, ҡабырғалағы ҡыҙыл гобелен менән көпләнгән ишектән ҡарсыға тиҙлегендә, ҡулына ниндәйҙер ҡағыҙ киҫәге тотоп, мыҡты кәүҙәле бер йәш ҡатын осоп сыҡты ла, быларҙың араһына баҫты.

— Ғәфү итегеҙ, иптәштәр, был урындарға рөхсәт юҡ. Сөнки был урындар, — тип ул тырнағы ҡыҙылға буялған бармағы менән ике урынға төрттө, — башҡа хөрмәтле ҡунаҡтарға тәғәйенләнгән, — тине. Моталлап ҡарттың башы аша һалҡын һыу ҡойған шикелле булды, ҡапыл теленән яҙҙы, уның былай ҙа ҡартлыҡ еңеп, аҫҡа әйеләә башлаған ҡарсығы бөтөнләй сүгеп ҡалған кеүек тойолдо. Ҡарсыҡтың аҡ, сибәр генә битенә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, ике сикәһендә бөртөк-бөртөк алһыу таптар килеп сыҡты. Улар үҙҙәренә ҡыҙыҡһынып текәлгән унарлаған күҙ ҡарашынан оялып, баштарын түбән эйҙе. Былдай мөғәмәләне ғүмерҙә лә көтмәгән ике ҡарт бөтөнләй юғалып ҡалды. Тик кешеләрҙе урындарға ултыртып йөрөүсе ҡатындың ғына командирҙарҙың бойороғона оҡшаш тимер тауышы бөтә залға яңғыраны.

— Нимә, һеҙ, бағана кеүек ҡатып ҡалдығыҙ? Бына һеҙҙең урынығыҙ ошо була, — тип стенаға төкәтеп эшләнгән урындарҙы күрһәтте, унда ике малай ултыра ине. Тегеләр үҙ урындарынан торорға бик ашығып барманы. Улар икеһе лә ҡолаҡтары өҫтөнә урап ҡыҫтырған билеттарын тағатын баяғы ҡатынға һуҙҙы. Администратор, уларҙың билеттарын ҡарап та тормай, үҙенең һүҙен яңынан ҡабатланы:

— Һеҙгә әйтелгән бит, урынығыҙҙы ошо ике ҡартҡа бирәһегеҙ, — тип бойорҙо. Тегеләр ҙә тел сарлап, байтаҡ талашып өйрәнгән егеттәр булып сыҡты. Был мөйөштә администратор менән былар араһында шау-шыу ҡупты, талаш китте. Оялышынан ҡайһы тишеккә барып инергә белмәгән Моталлап ҡарт, әбейен етәкләп тамаша залынан ишеккә йүнәлде. Үҙҙәре артынан баштарын башҡа терәп, ҡосаҡлашып ултырған йәштәрҙең: «Мейес башында ғына ятмай, йөрөйҙәр шунда театр тип», «Улай ғына булһа бер хәл, хатта билет та алмай, кеше урынын даулашалар бит

әле...», тигән өҙөк-өҙөк тауыштар ишетелде. Ә кемелер, ишек төбөндәрәк ултырғаны: «Бөтөнләй алйып баралар инде, улар өсөн театр ни, мәсет ни — барыбер», — тип өҫтәп ҡуйҙы. Был һүҙҙәр ике ҡарт йөрәгенә уҡ булып сәнселде. Ҡарт артына әйләнеп тә ҡарамай, елпелдәтә баҫып, алға ынтылды, ләкин Мәрйәм ҡарсыҡ үҙ ҡыҙыҡһыныуын еңә алмай, үҙҙәренә тәғәйен рәткә ҡараш ташланы. Ул урында, таныш кешеләрҙең — райондың аҙыҡ-түлек магазины менән промтауарҙар магазины директорҙарының ултырғанын күрҙе. Улар кресло башына ҡырын ятып, ниндәйҙер бик ҡыҙыҡлы әңгәмә алып бара ине. «Ә бына кемдәр икән ҡәҙерле ҡунаҡтар», — тип уйланы ҡарсыҡ, ләкин бөтөнләй туҙынып китерен уйлап, ҡартына өндәшмәне.

Ҡарт менән ҡарсыҡ кейемдәрен кейеп тә тормай, ҡултыҡ аҫтарына ғына ҡыҫтырып, урамға сыҡты, сөнки гәрлектәренән был ҡәһәрле театр бинаһына ғүмергә аяҡ баҫмаҫ хәлгә еткәйне. Улар, йыбырлап ҡына баҫып, тая-тая өйҙәренә килеп еткәнсе бер-береһенә һүҙ ҡатманы. Өйгә инеп, үҙенең театрға ғына кейеп йөрөй торған, тейен тиреһенән тегелгән күгелйем пальтоһын ишек төбөндәге элгескә элер-элмәҫтән, Мәрйәм ҡарсыҡ «театр тамашаһы» ның икенсе пәрҙәһен асып ебәрҙе:

— Бына һин ул ҡартайғансы, һаҡалың ағарғансы аҡыл инмәгән бәндә, кеше һайт тигәнгә, тайт, тип саба ла сығаһың! — тип эсендә ҡайнаған гәрлеген ҡарты өҫтөнә һирпте. Былай ҙа талағы ташып, кемдән үс алырға белмәй килгән Моталлап ҡартҡа етә ҡалды.

— Мин сабып сыҡҡанда һин атаңдың башын ҡарап торҙоңмо? Телефон трубкаһын да һалмай мин һинән һораным түгелме һуң?

— Бик ҡапыл ғына килеп сыҡҡанғалыр инде, күңелем ниҙер һиҙенгәйне-һиҙенеүен, — тине әҙерәк һүрелә төшкән ҡарсыҡ. Уның сигенә башлағанын күреп, әле күңелендә гәрлек уты бөтмәгән ҡарт һөжүмгә күсте.

— Һинән булды был эш. Шунда ҡырҡа һуғып: «Юҡ, ҡарт, театр артынан йөрөй торған заман түгел, нисә айҙар көтөп алған малярҙар килеп өй ремонтын башланы, шуларға булышайыҡ», тип әйтһәң, телең төшөп ҡалыр инеме ни? — тип ысҡындырҙы ботинкаһын сисә алмай аҙапланған ҡарт асыуынан. Быныһы инде һүрелә башлаған усаҡҡа ҡоро сытыр ташлаған һымаҡ булды.

— Бына мин үлермен дә, йәшен, аҡылы камилын алырһың, ҡарт алаша!

— Һинең үләм дә үләм, тип бәлә һалыуыңа хәҙер бер утыҙ-ҡырҡ йыл бар инде. Ҡурҡма, башта бына мин үлермен, һин ҡалырһың, һине әле күҫәкләп тә үлтерерлек түгел.

Шулай итеп, театрҙың икенсе өлөшө — ҡарт менән ҡарсыҡ ҡатнашҡан пәрҙәһе — бик оҙаҡҡа һуҙылды. Икеһе ике урында керпек тә ҡаҡмай шығырлап төн сыҡты. Ошо ваҡиғанан һуң улар, ниндәйҙер ғәйәт ҙур эш боҙған кеүек, кеше күҙенә күренергә оялып, өйҙәренән сыҡмай, бик оҙаҡ бикләнеп ултырҙы. Ләкин кәйефең ҡырылып, күҙгә-башҡа күренмәй, дүрт стенаға бикләнеп, күпме ултырмаҡ кәрәк? Тормош булғас, кәрәк-яраҡ һатып алыу өсөн магазинға ла сыҡмай әмәл юҡ. Бына шулай теге «тамаша ваҡиғаһы»на бер аҙна самаһы үткәс, бүлмәләрҙә малярҙар ҡалдырып киткән бысраҡтан әҙерәк айный төшкәс, ҡарт ҡулына бидон тотоп магазинға йүнәлде... Һәм үҙе лә аңғармаҫтан көтөлмәгән кешегә тап булды. Өҫтөнә йөнлө тун кейеп, башына күкһел ҡаракүл бүреген ҡырын һалған Ғәли Ғәлеевич, сәнсә баҫып, үҙе йөҙмә-йөҙ килеп бәрелде.

— О, Моталлап ағай, иҫәнлектә генәме?

Ул, эргәһенән берәй олпат түрә үтеп китер ҙә, һаулыҡ һораша алмай тороп ҡалырмын, тигәндәй, ян-яғына ҡаранды.

— Моталлап ағай, әйҙә, Мәрйәм апай менән театрға рәхим ит! Беҙ ҡунаҡтарға һәр саҡ шат, — тип, үҙенең киң күңеллелеген күрһәтергә теләп, ҡоласын йәйҙе, — һеҙҙең үҙегеҙгә генә тәғәйен урын һәр саҡ буш, һеҙҙе көтә, — тип шапырынды. Асыуынан эсендә шыйыҡ ҡорос кеүек ут ҡайнаған Моталлап ҡарт, һүҙен әйтәлмай, бидоны менән киҙәнергә лә уйлағайны, ләкин үҙ хәбәрен һөйләгәндә һәр саҡ кешенең ҡулына тотоноп торорға яратҡан директор был юлы ла үҙе лә һиҙмәҫтән ҡарттың ҡулынан эләктереп алды.

— Тик бер көнгө кеүек тамаша уртаһында залды ташлап сығырҙан булмаһын, — тип ҡарттың секерәйеп ут сәскән күҙенә бер аҙ текләп торҙо ла уның ҡолағына эйелде.

— Ул урынға теләүселәр, ағай, бик күп ул. Ғөмүмән, был саҡта буш урынды көҫәп муйын һуҙыусылар ҙа аҙ түгел. Хәҙерге заманда кеше үҙ урынын бирмәй трамвайҙа ла талаша. Ә тормошта урын өсөн, ағай, талашыу ғына түгел, һуғышырға кәрәк, — тип ул көләс күҙҙәрен уйнатып, кинәйәле йылмайҙы. — Ярай, ағай, бигәйбә, ашығам, — тине лә ҡайҙалыр ары, күрәһең, урын дауларға сапты.

# КОНСУЛЬТАЦИЯ

Бик нығ һыуыҡ үткәреп, өҙләкһеҙ йүткереп интеккән ауырыу Фаруҡшинға: «Иртәгә һине билдәле профессор Ғәлләметдинов үҙе ҡараясаҡ», — тип хәбәр иттеләр.

Ысынын әйткәндә, профессорҙарҙы ул элек тә күргеләгәне бар, оҙаҡ йылдар ул эшләгән районға килеп, трибунанан тороп, ҡайһы берҙәре тәрән аҡыллы доклад һөйләп китә, ә ҡайһы берәүҙәре эштәре менән район ойошмаларына килһә, улар менән осрашырға тура килгәне бар. Ә был инде... бөтөнләй икенсе эш. Әле ошоға тиклем күҙмә-күҙ килеп, профессор уны, уның ауырыуын ентекләп ҡарағаны булманы.

Уның Алыҫ Көнсығышта, Ҡыҙыл Армияла, арыу-талыуҙы белмәгән тынғыһыҙ старшиналар ярҙамында сыныҡҡан, ҡанлы һуғыштың утлы, ауыр юлдарын үтеп, яҙғы-көҙгө бысраҡтарын кисеп бешеккән организмы ошоға тиклем бирешмәй килә ине әле. Ысынлап та, ваҡыты-ваҡыты менән ул старшиналарға Фаруҡшин рәхмәт уҡый. Утыҙ-ҡырҡ градуслы һыуыҡта, йылы түшәктән торғоҙоп, яңы ғына хеҙмәткә килгән һалдаттарҙы ҡарҙа гимнастерkaһыҙ аунатып, уларҙың тәнендәге теләһә ниндәй сырхауҙы ла ҡыуып сығара белә ине улар. Рәхмәт уларға! Бер ниндәй докторҙың да кәрәге юҡ ине ул саҡтарҙа.

Ләкин йылдар... йылдар! Улар барыбер үҙенекен итә. Бына ул больница койкаһына килеп эләкте. Был профессор менән уның бынан биш-алты йыл элек ҡыҫҡа ғына осрашыуы булғайны шикелле, ләкин ул замандарҙа Фаруҡшин улар менән иркенерәк, аяҡ терәберәк һөйләшә ине шул.

Ә хәҙер бөтөнләй башҡаса. Ике яҡ үпкәгә һәм тын юлдарына һалҡын тейгән. Был ауырыуҙан Фаруҡшин әҙерәк шөрләңкерәп тә ҡуйҙы. «Хәҙер нисек икән был профессор? Ниндәй фәтеүәле һүҙҙәр әйтер? Ниндәй шифалы дарыуҙар яҙып бирер икән был ҙур доктор? Дауалаусы врач Сафыя Тәлғәтовна менән миңә киләсәккә ниндәй файҙалы кәңәштәр бирер?» — Бына шундай уйҙар борсоно Фаруҡшинды. Ул бик оҙайлы, төплө әңгәмәгә әҙерләнде.

Төндә бик насар йоҡланы, иртәнсәк иһә, суйын шикелле ауыр баш менән торҙо. Тамағына аш барманы. Әйтелгән ваҡыт еткәс тә, түҙмәне, өҫкә, икенсе ҡатҡа, ординаторскийға күтәрелеп, уның ишеге төбөнә барып, бер нисә тапҡыр әйләнеп төштө. Асыҡ ишектән башын тығып, кейем элгескә күҙ йөрөтөп, профессорҙың пальтоһын эҙләне. Ғәҙәттә, ул, ашығып инә лә, пальтоһын элеп, аҡ халатты яурынына һала, шунан исемлек буйынса ауырыуҙарҙы саҡыра башлай.

Былай ҙа сикәһе ҡорошорға ғына торған Фаруҡшиндың асыуы ҡабарҙы. Ул сығырынан сыға башланы: йә өҫкә саҡырмайҙар, йә үҙҙәре түбәнгә, уның палатаһына төшмәйҙәр. Бына ул йәнә ишек эргәһенә килде. Кабинетта профессорҙың көр тауышы, тағы кемдәрҙеңдер көлгәне ишетелде. Етмәһә, бүлек сестраһы, кистән килеп: «Һеҙ бер ҡайҙа ла китмәгеҙ! Нәҡ сәғәт унда консультация башлана», — тип киҫәтеп ҡуйҙы. «Нимә, ул сөннәткә ултырыуҙан ҡурҡып ҡасҡан малаймы ни, больница эсенән юғалырға».

Бына оҙаҡ көттөргән аҡ халатлы профессор палата ишегендә күренде. Ул, бик ашығып мөйөшкә, Фаруҡшин ултырған карауатҡа, йүнәлде. Уның артынан бүлексә мөдире Сәғиҙә Яхыевна, дауалаусы врач Сафыя Тәлғәтовна һәм сестра эйәргән. Фаруҡшин, генералды ҡаршы алған офицер шикелле, профессорҙы аяҡ үрә баҫып хөрмәтләне. Бесеүе артыҡ тура килмәһә лә, тегеүе бик ыҫпай тегелгән халат кейгән урта йәштәрҙәге кеше булып сыҡты ул. Сикәләре, түбәһе көмөшләнә башлаған таралмаған сәсе, көслө дауыл туҙҙырған күбәгә оҡшаған. Уға ултырғыс бирҙеләр. Ул әкрен генә ултырҙы ла тимерлектәге сүкешсе ҡулына оҡшаған, һыртын ҡуйы йөн баҫҡан көрәктәй ҡулдарын тубығына һалды. Күптән ҡырҡылмаған тырнаҡ шәбеләре аҫтында ярайһы ғына керҙе күреп, профессор ауыр ҡулдарын ҡултыҡ аҫтына йәшерҙе. Төпкә батҡан үткер йәшел күҙҙәре менән тишә ҡарап, ул:

— Беҙ һеҙҙең менән ҡайҙалыр осрашҡаныбыҙ бар, шикелле? — тип һорап ҡуйҙы.

Фаруҡшин хәрби кешеләр кеүек:

— Так точно! — тип яуап бирҙе.

Балыҡ таҙартҡанда ҡапыл тәрән мәкегә бәкеһе төшөп киткән балыҡсы һымаҡ, профессор «м...-да» тип һуҙып ҡуйҙы.

— Нимәгә зарланаһығыҙ? — тине ул бер аҙ һүҙһеҙ ултырғандан һуң.

Фаруҡшин ауырыуға нисек юлығыуын һөйләп бирҙе. «Әгәр профессорҙың мәрхәмәтен күргең килһә, уның кесе коллегаларын тәнҡитлә», тигәнде хәтерләп, Фаруҡшин район врачтарының тетмәһен тетеп алды:

— Ултыралар шунда — дөрөҫ диагноз да ҡуя белмәйҙәр! Бер ҡосаҡ ҡағыҙ яҙалар ҙа тик химикат бирәләр, эшкинмәгән бешәлкәһеҙҙәр! — Үҙенең район врачтарына һуҡраныуы менән ул бындағы докторҙарҙың һалпы яғына һалам ҡыҫтырырға, — бына был больницала, исмаһам, ысынлап та белгестәр эшләй, тип әйтергә уйланы.

Фаруҡшин ташлаған ҡармаҡҡа ҡапҡан врачтар, профессор алдында бер-береһенә ҡарашып, ҙур кинәнеү менән йылмайып ҡуйҙы. «Күрҙегеҙме? Бындағы докторҙарҙың

класын! Улар һеҙгә район врачтары түгел!» тигән һүҙҙәрҙе уларҙың йылтыраған күҙҙәрендә уҡыуы ҡыйын түгел ине.

Фаруҡшиндың үҙ ауырыуының сәбәптәрен сурытып, тоноҡ ҡына, баҫып яуған ямғыр кеүек һөйләүе профессорҙы йоҡоға тартты. Ул ауырыуҙың һүҙен нишләптер күҙҙәрен йомоп тыңланы. Шунан ул ҡапыл күҙен асты ла, тумбочка өҫтөндә полиэтилен папка эсендә ятҡан эпикризды (ауырыу тарихын) ҡулына ла алмай, дауалаусы врачҡа мөрәжәғәт итте:

— Әйтегеҙ әле! Һеҙ уны нисек дауалайһығыҙ? Уға нимәләр билдәләнегеҙ?

Профессорҙың элгәрге студенткаһы, хәҙер инде билдәле врач Сафыя Тәлғәтовна яуап бирергә ашыҡты:

— Уколдарҙан сульфакамфакаин, пенициллин, анальгин менән папаверин, эуфилин, В6 витамины, ә таблеткаларҙан — нитронг, беллоид, төнгөгә үңәсенә йылы компресс. Ҡайнар һөт бирәбеҙ. — Шошо урында профессор, врачты ҡапыл туҡтатып, яҫы ирендәренә бер аҙ йылмайыу йүгертеп, ярым шаярыу менән:

— Хатта ҡайнар һөт бирәһегеҙ? О... бына быныһы шәп! — тине.

Йомшаҡ күңелле, бер ҡатлы ғына Сафыя Тәлғәтовна профессорҙың иронияһын аңлап еткермәне, ахырыһы:

— Эйе-эйе, профессор! Ятыр алдынан ҡайнар һөт бирәбеҙ, — тип ҡабатланы.

Бер аҙ өндәшмәй ултырғандан һуң, профессор, төҫөнә ҙур етдилек биреп:

— М-да, ... яҡшы, — тине.

Кистән бирә торған һөтмө, әллә доктор тәғәйенләгән дарыуҙар бик яҡшымы? Быны, билдәле, бер кем дә аңламаны.

— Инде, хәҙер билгә тиклем сисенәбеҙ, йылдамыраҡ, йылдамыраҡ, — тине әллә ниндәй тәрән уйға сумған профессор, Фаруҡшинға ҡарап.

Тәүҙә трико өҫтөнә кейгән, төҙөүселәр спецовкаһына оҡшаған, ныҡ ҡына таушалған пинжәген, унан трикоһының өҫтөн систе лә йомро кәүҙәле Фаруҡшин профессор алдына баҫты. Трактор моторына ҡолағын ҡуйып тыңлаған таһыллы механик шикелле, фонендоскоптарын Фаруҡшиндың яланғас тәненә терәп, тыңларға кереште. Төрлө командалар башланды: «Ауыҙың менән тын ал! Танауың менән тәрән тын ал! Тынды ауыҙыңдан сығар! Тын алышыңды туҡтатып тор!» Фаруҡшиндың күкрәге, тимерсе күреге шикелле, берсә ҡалҡты, берсә төштө. Бөтәһе лә уның ике яҡ үпкәһендә, үҙҙәре әйтмешләй, диффуз хырылдауы, ә бронхыларында ят ниндәйҙер сыйылдау барлығын билдәләне.

Шунан һуң профессор уң ҡулы менән Фаруҡшиндың ас биленән уратып ҡосаҡланы ла алға иңкәйергә ҡушты. Тейешенсә эйелә алмай интеккән Фаруҡшиндың профессор, таһыллы самбист шикелле, һул ҡулы менән елкәһенә баҫты.

Был процедура бөткәс, бөтә кеше һораулы ҡараштарын профессорға төбәне. Ләкин ул бик тиҙ генә өндәшмәне.

— М-да. Яҡшы... Билдәле, һеҙҙең сирегеҙ бик етди, ләкин артыҡ хафаланырға урын юҡ. Һеҙҙең ауырыуҙы дарыуҙар ярҙамында бөтөрөп була, әлбиттә. Бөтә нәмәгә лә ваҡыт талап ителә. Ваҡыт, хөрмәтле иптәш... как Вас по батюшке? — Ошо ерҙә ике врач берҙәй: «Иптәш Фаруҡшин», — тип ҡысҡырҙы. — Да, да иптәш Фаруҡшин, үҙе доктор ул. «Сир ботлап керә — мыҫҡаллап сыға, дорогой!» — тине лә ишеккә йүнәлде.

Юл ыңғайында ишек төбөндәге карауатта ятҡан мыҡты кәүҙәле данлыҡлы генерал Ҡасимовты күреп ҡалды ла:

— О, һаумыһығыҙ, иптәш генерал? Ә ул нишләп бында? — тип, дауалаусы врачҡа өндәште. Сафыя Тәлғәтовна, генерал янында туҡтап, уның сире хаҡында һөйләй генә башлағайны, профессор уны ҡулы менән ишара яһап туҡтатты ла:

— Ничего, ничего! Уның бәһлеүән организмын бер ниндәй сир ҙә ҡаҡшатырлыҡ түгел, — тип, ҡуҙғалырға йыйынды. Ләкин быңдай осраҡтарҙа яуапһыҙ ҡалырға күнекмәгән генерал:

— Ничего-то ничего! Минең температура — 39 градус. Ике яҡ үпкә лә крупоз сире менән ауырып этләтә бит әле, — тине.

Ләкин уның һүҙен профессор ишетмәмешкә һалышты, тиҙерәк сығып китеү яғын ҡараны.

— Ҡайҙа ашығаһығыҙ? — тине генерал ишеккә табан боролған профессорға көс-хәл менән.

— Мин түгел, заманаһы ашыға. Тиҙләнеш, тиҙләнеш. Исемлек бына ҙур, ә миңә өлгөрөргә кәрәк.

Ысынлап та, уның консультацияһын ҡала больницаларының башҡа палаталарында ла көтәләр ине. Генерал ергәһенә ултырып, уның хәл-әхүәлен ентекләп һорашырға уның ваҡыты табылманы, сөнки консультация үтәсәк ауырыуҙар исемлегенә бөгөн уның фамилияһы яҙылмағайны.

# ХӘТЕРҺЕҘ ҒӘРИФУЛЛА

Ғәрифулла ҡарт, май ҡояшына сағылған, нуры ҡайта башлаған күҙҙәренең йәшен ҡулының һырты менән һөртә-һөртә, баҡсалағы йәшел эскәмйәлә тәмәке көйрәтә. «Бөтто хоҡуҡ. Ир хоҡуғы боттө. Түшәмгә күгелйем төтөн өрөп, карауатта ғына ҡырын ятҡан көйөнсә тәмәке тартыла торғайны бит, заманында», — тип ул тәмле хыялдар йомғағын тағата. «Ул саҡтарҙа афтарит та ҙур ине шул, емереп эшләне лә, көрәп аҡсаһы ла алына ине, шуға күрә еңгәгеҙҙең төбөрө бата алмай ине. Ҡаҙалып ҡара! Ҡартайғас, ҡарыуың ҡайтҡас, ир кешеләге ажар ҙа, ҡороған шишмә һымаҡ, бөтә икән. Тик ашҡынып ярҙарына бәрелә-һуғыла аҡҡан ғәйрәттең үҙәне генә тороп ҡала. Майланмаған күсәрҙәй, шығырламаған быуын, тәҡәт бирмәй һыҙламаған урын юҡ. Ә бынауы йөрәк булған нәмәһен, әйтерең бармы, сәпсим ослаб булған тиҙәр бит докторҙары».

Ҡайғыра Ғәрифулла, хәсрәтләнә, сөнки хәҙер тәмәкеһен тоҡандыра башлағас та ҡарсығы уны коридорға ҡыуа, тишек-тошоҡ ишек ектәренән баҫҡыс майҙансығындағы квартираларға төтөн еҫе танауға бәрер-бәрмәҫтән күршеләр шундуҡ ғауға күтәрә. «Коридорға тағы сыҡты теге сихут Ғәрифулла, тағы төтәтә», — тип һуҡрана башлайҙар. Быға ҡайһы саҡта ҡарт үҙе лә ғәйепле шул, ләззәтләнеп, ауыҙына имеҙлек шикелле тығылған тәмәкеһен бер-ике һурырга ла өлгөрә алмай ҡала, кәркелдәп йүткерергә тотона. Уның йүткереү тауышы буш коридорҙа, мәмерйә эсендә яңғыраған һымаҡ, бөтә ҡаттарға ла ишетелә. «Теге тәмәжниктең моторы троить итә башланы», — ти уның менән күрше генә йәшәгән бульдозерсы егет.

Бына шулай: тәмәкесе Ғәрифулла ҡартҡа ҡайҙа ла форсат юҡ.

«Врачтар ташларға ҡушалар ҙа һуң, ҡапыл йөрәк туҡтап, донъянан китеп барырмын тип ҡурҡа ҡартым», — тигән була ҡарсығы, күршеләре алдында аҡланырға теләп. Үҙ ҡолағы менән ишетмәһә лә, күршеләренең ҡартына булған мөнәсәбәтен ул бөтә йөрәге менән тойоп йөрөй. Өйҙән һепереп тигәндәй ҡыуып сығарһа ла, йәлләй, үҙ ҡарты бит, нисә әйтһәң дә, илле йылдан ашыу арҡа йылытып йәшәгән иң яҡын кешеһе лә баһа.

Йылы көндәрҙә йәки бөгөнгө кеүек көләс ҡояш нурҙары һинең битеңде тигеҙләргә теләгәндәй наҙлы иркәләгәндә, Ғәрифулла ҡарт баҡсаға сығып ултырырға ярата. «Рәхәт, ләззәтләнеп үпкәңдең нузрый нөктәһенә еткәнсе һур тәмәке төтөнөн. Бер кем ҡамасауламай».

Әйтмәксе, уны врачтар киҫәтмәй түгел, һәр саҡ иҫенә төшөрөп тора. Бер көн шулай: «Бөтә нәмәне лә бик тиҙ

онота башлағанмын, хәтер ҡапсығым бөтөнләй тишелде, буғай», — тип поликлиникала үҙ врачына зарланғас, йәп-йәш доктор битенә етди һыҙаттар йүгертеп, «анауы резина теҙгенле төрөпкәһен» ҡалаҡ һөйәге араһына ҡуйып тыңланы ла: «Бабай, һиндә склеротик күренештәр бик прогрессировать итә башлаған, тәмәкендән ҡырҡа баш тартырға тура килер», — тине.

Ғәрифулла ҡарт врач һүҙенең асылына төшөнөргә теләп:

— Ҡыҙым, һеҙҙең был бик тә мәғәнәле һүҙегеҙҙе бер ҙә төшөнә алмай ҡалдым бит әле. Шуны үҙебеҙсә әҙерәк аңлатып китә алмаҫһыңмы? — тип һораны ла нурҙары көңөртләнә башлаған күҙҙәрен докторға төбәне.

Ғәрифулла ҡарттың «ғәмәл» дәфтәренә, башын да ҡалҡытмай, ниҙер яҙып ултырған доктор һыҙылған ҡыйғас ҡаштарын өҫкә сөйҙө лә, пациенттың миңрәүлегенә аптыраған кеше шикелле, ҡаны ташҡан тамырлы ҡулдарын тубығына һалып, сабыр ғына яуап көтөп ултырған ҡартҡа күҙҙәрен түңәрәкләндереп, оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы. «Был ҡартласҡа нисегерәк аңлатып, тәмәкеһенә ҡабат тотонмаҫлыҡ итергә икән?» — тигән теләк йәш врачтың ҡаҡса битенә етди һыҙат булып ятты.

— Былмы, был, это означает, — врач күҙ ҡойроғо менән генә ҡарттың карточка тышындағы исемен уҡый алды, — Ғәрифулла ағай, һеҙ оҙаҡ йылдар тәмәке тартыу арҡаһында ҡан тамырҙарығыҙға никотин тигән бляшкалар ултырған.

Врачтан күҙен дә алмай диҡҡәт менән тыңлап ултырған ҡарт: «Был бляшка тигәне ни булды икән? Был, моғайын, йә юшҡын, йә бер тап-фәлән микән?» — тип уйлап алды. «Бына шул арҡала башығыҙҙы ҡан менән тәьмин итә торған меңәрләгән сосудтар хрупкий булып ҡалған, нескәргән, ҡан йөрөшө ауырлашыу сәбәпле, мейегеҙҙә склеротик явлениялар барлыҡҡа килгән», — тине лә, ҡарттың, үрмәксе ауы шикелле йыйырсыҡланған сырайында һис бер кисереш төҫмөрләнмәгәнен күреп: «Бер ни ҙә аңламаны», — тигән һығымта яһаны.

Унық ҡарауы, һәйкәл шикелле, хәрәкәтһеҙ ултырған Ғәрифулла: «Тәмәке төтөнө элгәре заманда үпкәгә бара имеш, тип фараз итә инек, әллә хәҙер баш мейеһенә юл асты микән?» — тип ысҡындырырға ла уҡталғайны, ләкин тыйылып ҡалды.

— Вәт, Ғәрифулла ағай, һиңә стугерон тигән импортный дарыу яҙып бирәм, шуны көнөнә өс тапҡыр принимать итһәң, хәлең еңеләйер, — тип, доктор уға сатай-ботай яҙылған рецепт һуҙҙы.

— Быны эскәс, минең баш яҡшыраҡ эшләй башлар микән, ҡыҙым? — тигән булды ҡарт тыйнаҡ ҡына.

— Һинең башыңдың яҡшыраҡ эшләүенә гарантия бирә алмайым, әммә склеротик процестар туҡтарға тейеш, — тине врач, эшлекле рәүештә урынынан тороп. «Һинең башың эшләмәгәнгә кем ғәйепле?» тигән төртмә һүҙ теленең осонда әйләнә биреп ҡуйҙы — ҡуйыуын, ләкин тышҡа сыҡмай, буялған алһыу ирендәре ситендә юғалып ҡалды.

Сығып китергә ваҡыт еткәнен, ни тиклем генә склеротик булһа ла, ҡарт та аңлап алды. Ул һәлмәк кенә атлап ишеккә йүнәлде.

Врач биргән стугеронды эсеп, Ғәрифулла ҡарт, аңы томаланып, бер-ике көн һиңмай кешеләй бәрелеп-һуғылып йөрөнө лә, был дарыуҙан бөтөнләй баш тартты. «Ярар, яҙғаны булыр. Ул тиклем донъя ҡуласаһы өйрөлтөрлөк урында ултырмайым әле. Әбей менән аңлашырлыҡ аҡыл ҡалһа буйтым еткән. Хәтер туплап, Ҡөрьән ятлайһы юҡ. Тартыуым — тартыу», — тине лә тәмәке бысҡытыуын дауам итте.

* * *

Бына бөгөн дә кеҫәһенән сығарып, һуңғы сигаретын ҡабыҙҙы ла «Прима»ның буш ҡабын сүп-сар урнаһына ырғытты. Шулай кәйефләнеп ултырған мәлдә генә ҡасандыр үҙе ҙур түрә саҡта йөрөткән, иген иләге һымаҡ, киң тирәсле велюр эшләпәһен суңҡаһына һалып, үтекләнмәгән киң балаҡлы зәңгәр бостон салбарын ерҙән һөйрәп барған, үҙе кеүек үк пенсионер Ғәбделвахитты күреп ҡалды. Ул ҡулына буш сумка эләктергән ине. «Әһә, ҡарт магазинға китеп бара икән», — тип уйлап алды Ғәрифулла.

Унан йомош һораған саҡта ике ҡатлы исеменең береһен төшөрөп ҡалдырһаң, күршеһенең шундуҡ шырты ҡабарғанын яҡшы белгәнгә күрә Ғәрифулла, нисек тә мөләйем булырға тырышып, һүҙ ҡушты.

— Йә, Ғәбделвахит ҡорҙаш, юлың уң булһын! — тигән булды.

— Бына юғары органдың йомошон үтәү өсөн магазинға юлландым әле, — тип яуапланы тегеһе.

— Уныһы тағы ниндәй юғары орган, кем була һуң ул? — тип Ғәрифулла белмәмешкә һалышты.

— Өйҙә фарман биреп ултырыусы ҡарсыҡтан башҡа бүтән кем булһын? Беҙҙең өсөн унан да юғарыраҡ тағы кем бар? Шылышып магазинға китеп барыш.

Эргәләге урнала йомарланып ятҡан сигарет һауыты күҙенә эләккәс, үҙенең һуңғы папиросын көйрәтеп ултырыуы Ғәрифулла ҡарттың келт итеп иҫенә төштө.

— Ғәбделвахит күрше, бик ҡыйынһынмаһаң, миңә бер ҡап «Прима» сигареты ғына килтереп тоттороп китсе әле.

Ҡалтыранған аяҡтарҙы һөйрәп шуның өсөн генә магазинға барырға елкә ҡорошоп ултыра, — тине.

— Була ул. Уның ни ҡыйынлығы бар? Ҡана, ҡайҙа аҡсаңды бир, — тип үҙенең ҡолағына бик һирәк салынған ике ҡатлы исемен ишетеп, Ғәбделвахит йәнләнгәндәй итте.

Ғәрифулланан аҡса алып, керләнеп ялтыраған салбар кеҫәһенә тыҡты ла, Ғәбделвахит буш сумкаһын елберләтеп, ары атланы.

Магазинға етеп, ишеккә башын тығыу менән унда нимәгәлер сират торған мәхшәрҙең шау-шыуынан ҡарттың кинәт башы шаңҡыны. Касса тирәһендә ситкәрәк баҫып, ҡарсығы өйҙә яҙып биргән исемлекте уҡып сыҡты. «Ҡатыҡ — 2 шешә, һөт — 2 шешә, эремсек — 2 башҡа. Эһә, бына шуға килтереп аҡсаһын да кеҫәгә һалып ебәргән икән. Ҡара хисапҡа ҡарсыҡ шул тиклем зирәк тә инде», — тип ҡарт әбейен маҡтап алды.

«Һөт — ҡатыҡ» бүлегендә бер кем дә юҡ. Шаулашҡан халыҡ талонһыҙ тауыҡҡа сират тора икән. «Әйҙә, дауайлашһындар, беҙгә ул тауыҡтың хәҙергә хәжәте юҡ. Заманында унан былайырағын да татыған баш», — тип ҡарт һөт-ҡатығын, ауыҙ эсенән мығырлай-мығырлай, сумкаһына тултырҙы. «Эй, инәһеҙ, ҡатыҡ менән һөттө бутамаҫ өсөн ҡарсыҡ салбар кеҫәһенә бер полиэтилен моҡсай тыға ине түгелме?» — тип ул ҡулын плащ кеҫәһенә тыҡты. Ҡапсығы менән ҡуша күпмелер ваҡ аҡса иҙәнгә тәгәрәне. Ҡарт аҡсаларҙы йыйып, усына төйнәне лә ғәжәпкә ҡалды. «Быныһы ниндәй артыҡ аҡса? Быларға ни һатып алырға тағы?» Бер яҡҡараҡ китеп, байтаҡ уйланып торҙо, ләкин кеҫәлә аҡсаларҙың нисек, ҡасан хасил булғанын иҫенә төшөрә алманы. «Ярар, хужалыҡта ярап ятыр әле», — тине лә күҙенә тәү эләккән нәмәне — кирбес дәүмәллеге кер һабынын һатып алып сумкаһына тыҡты.

Ул баҡсаны үткәндә Ғәрифулла ҡарт май ҡояшы мансыған баяғы эскәмйәлә йылыға иҙерәп төнәп ултыра ине. Кемдеңдер ҡыптыр-ҡыптыр итеп яҡынлашып килеүен һиҙеп, ул күҙ ҡырыйы менән ялҡау ғына ҡараш ташланы.

— Ә, Вахит ҡорҙаш, һин икәнһең дә — тип Ғәрифулла ҡартҡа тауыш бирҙе. Бының менән ул: «Хәҙер минең заказды үтәгәс, уның исеменең өҫкө ҡатын алып ташларға ла була» тигәнде аңлатты.

— Алдыңмы, Вахит ҡорҙаш? — тине Ғәрифулла. Ғәбделвахит әллә ниндәй атаҡлы ҡыҙ башы төшкән сумкаһын эскәмйә осона ҡуйҙы ла иптәшенә ҡағыҙға уралған төргәк һуҙҙы. Ғәрифулла ҡарт, төргәккә текләп бер аҙ ғәжәпләнеп ултырҙы ла, ҡағыҙы асылған кер һабынын ҡулына тотоп, бизмәнгә үлсәгәндәй һәлмәкләп ҡараны, ләкин бер ни ҙә өндәшмәне. Тик бер аҙ ултырғас:

— Ай-һай бик һәлмәк икән был хәйерһеҙ, кирбес шикелле, — тип мығырланы. Һабынды эргәһенә ҡуйҙы ла:

— Мин һиңә еҫле һабын алырға ҡушҡайным түгелме һуң, ҡорҙаш, нимә, булманымы ни? — тип икеләнеберәк һорап ҡуйҙы.

— Юҡ, еҫле һабын мин барған магазинда һатылмай икән. Ошонан башҡа һабын әҫәре юҡ, — тине Ғәбделвахит кер һабынын үҙе һорап алғанын иптәшенән йәшереп. Шунан һуң ул хушлашып, ары йүнәлде. «Туҡта әле былайтып, яңы ҡыш сыҡҡан арыҡ башмаҡ ише, ҡояшта ҡыҙынып ултырыу килешмәҫ, ҡарсыҡтың сәйе ҡайнағандыр, ҡайтайым», — тип ҡулына һабын тотоп, Ғәрифулла ҡарт та урынынан ҡуҙғалды.

Ҡарт ҡулындағы төргәкте күреп, ишек асҡан ҡарсығы:

— Барлы-юҡлы аҡсаны туҙҙырып, тағы ни алып ҡайттың? Һин булһаң, шул туҙға яҙмаған нәмә эшләр ҙә йөрөрһөң, — тип сөңкөлдәп алды, сөнки ҡартының өй кәрәк-ярағы алырға бер ҙә маһирлығы юҡлығын ул бик яҡшы белә.

— Бына, ҡарсыҡ, хужалыҡта ярап ятыр әле, тип, кер һабыны алып ҡайттым әле үҙеңә, — тине ҡарт тауышына көрлөк сифаттары өҫтәп.

— Ул ниткән һабын? Сыҡҡан һайын һабын күтәрә лә ҡайта. Һабындан өйөр йыяһыңмы әллә? Кер йыуыу кәпирәте асырға самалайһыңмы? — тип һөйләнә-һөйләнә ҡарсыҡ һабын киҫәген ванна шкафына ырғытты.

Ғәрифулла ҡарт шым ғына ултырып, ҡарсығы менән сәй эсте лә, залға сығып, гәҙәттә, сервант тартмаһында папиростар һаҡлана торған йәшникте тартты, ләкин ул буш ине. Асты ла шап итеп усы менән үҙенең ҡаҡ маңлайына һуҡты. «Үәт, һыу мейе! Мин уға папирос алырға аҡса биргәйнем бит, ә мин, иҫәр, кер һабыны күтәреп ҡайттым. Вахит ҡорҙаштың аҡылы ла шул тауыҡтыҡы ҡәҙәре генә тороп ҡалған икән», — тип гонаһтың яртыһын иптәшенә ауҙарҙы.

«Ысынлап та, үҙ телен йүнләп белмәһә лә, теге врач ҡыҙыҡай хаҡлы, ахырыһы. Склероздың да иң насары башланған икән миндә. Бөтөнләй алйып, хыялыйға әйләнмәҫ борон был хәйерһеҙ тәмәкене төбө-тамыры менән ташларға кәрәк», — тип хәл итте Ғәрифулла ҡарт. «Әтү нимә ашап, нимә эскәнеңде генә түгел, ғүмер бергә донъя көткән ҡарсығыңды ла танымай башларһың, алла һаҡлаһын!» — тип уйланы ҡарт.

Ошо көндән башлап, төтөнөн борҡолдатып, бур кеше кеүек ян-ягына ҡарана-ҡарана, тәмәке һурып торған Ғәрифулла ҡартты коридорҙа күршеләренән бер кем дә осратманы. Тик теге бульдозерсы егет кенә: «Ғәрифулла ҡарт тәмәке ташларға мөфти алдында ант иткән икән, уға ҡулын биргән икән», — тип бер аҙ һөйләнеп йөрөнө лә, ул да шымды.

# ХӘТЕР

## I

Әбейҙәр сыуағы башланған ғына мәл. Салт аяҙ көн.

Үҙ ихатаһында ялан аяғына ҡата ғына эләктереп, тәгәрмәс туғыны һуғып торған Ғәлләм ҡартты мәктәпкә саҡырттылар. Ҡатҡан билен яҙып, ҡояш нурына йәшләнгән күҙҙәрен ҡайҙалыр алысҡа текәп торған ҡарт алдына галстук таҡҡан ике пионер килеп баҫты ла, һалдат шикелле, салют биреп:

— Ғәлләм олатай, беҙ һеҙҙе бөгөнгө Тыныслыҡ дәресенә үҙ мәктәбебеҙгә ҡунаҡҡа саҡырабыҙ! — тип, ҡулына саҡырыу ҡағыҙы тоттороп киттеләр.

Ғәлләм ҡарттың совхоздың үҙәк усадьбаһында яңы ғына төҙөлгән өс ҡатлы урта мәктәпкә беренсе генә барыуы ине. Шулай ҙа байрам тантаналарында уны, ветеран булараҡ, башҡа урынға әлдән-әле саҡырып торалар. Шуға күрә ул быңдай саҡтарҙа кейеп барыу өсөн үҙенә затлы ғына кейем-һалым да йүнәткәйне. Әйтергә кәрәк, үҙ ихатаһында эш мәлендә теләһә нисек кейенеп йөрөһә лә, Ғәлләм ҡартты ауылда бер кем дә шаҡшы, һыйпатһыҙ кейенә тип әйтә алмаҫ. Ул таҙа, ыҫпай йөрөргә ярата, нисә әйтһәң дә ул Ҡыҙыл армияның элекке кесе командиры ла баһа.

Кейем шкафындағы костюмын алып, ишек төбөндәге сөйгә элде лә, ул пинжәгенең түшендәге көңөртләнә башлаған орден-миҙалдарын порошокка манылған сепрәк менән ышҡып таҙартты. Бер-ике аҙым артҡа сигеп, яңынан бер ҡарап алды. Ҡартының һыланып-һыйпанып, ҡайҙалыр китергә йыйынғанын күреп, өйгә инеп-сығып йөрөгән Мәхмүзә ҡарсыҡ түҙмәне, еүеш ҡулдарын алъяпҡысына һөрткөләп, шешмә ҡабаҡтарын өҫкә сөйҙө.

— Мынауындай эш мәлендә ҡушылған эшен быраҡтырып, ҡайҙа йыйына был балалы Байрас? — тип һорап ҡуйҙы.

Ҡарт, һыҙылып киткән нескә генә мыйығын өҫкә тырпайтып, әҙәпле генә йылмайҙы ла, тауышына әҙ генә тәкәбберлек һыҙаты йүгертеп:

— Центральный мәктәбенә ҡунаҡҡа саҡыралар, әбей, — тине. — Ниндәйҙер Тыныслыҡ дәресе була имеш, тип әйтеп киттеләр ҙә баһа, — тип өҫтәне.

Ҡартының был яңы хәбәре Мәхмүзәне бермә-бер ҡыҙыҡһындырҙы. Ҡулына тотоп торған күнәген иҙәнгә ҡуйҙы ла, ул, кейенә башлаған ҡартынан, ахыры, ысынлап төптәшергә уйланы.

— Ул ниндәй дәрес тағы? Ошо хәҙерге мөғәллимдәр һулыу һайын теләһә ни уйлап сығаралар ҙа балаларҙың башын ҡатыра, — тине. Тәпәш бүкәнгә аяғын ҡуйып, ботинкаһының бауын бәйләп маташҡан Ғәлләм ҡарт ҡапыл торайҙы ла, йыйырсыҡтар менән һырланған тарамыш үңәсен ҡарсығына борҙо.

— Әй, әбей, әбей! Бигерәк томанаһың да инде. Уны мөғәллимдәр түгел, ә халыҡ уйлап сығарған. Бынан кире йыл һайын мәктәптә беренсе сентябрь көнө үткәрелгән дәрес «Тыныслыҡ дәресе» тип аталасаҡ. Бына беҙ, үткән һуғыш утын баштан кисергән ветерандар, йәш үҫмерҙәргә әмеректең һуғыш суҡмарын болғауҙары ни тәкәбеле шөбһәле икәнен үҙебеҙҙең примерҙа төшөндөрөп бирергә тейешбеҙ. Аңланыңмы, әбей? — тип, Ғәлләм ҡарт имән ботағы кеүек, тош-тош урынынан кәкрәйгән бармаҡтарын теүәтәйе ҡырына ҡуйып, әбейенә честь бирҙе.

— Аңланым, аңламай ни, әллә мине шул тиклем тома һуҡыр тип уйлайһыңмы? Мин дә күҙем таныған кеше лә баһа, гәзит ҡарап барам, — тип кәмһенгән һымаҡ итте. Ләкин эсенән үҙ алдында орден-миҙалдарын зыңғылдатып, етмеште ҡыуып барыуына ҡарамаҫтан, сырышып көнгә янған битендә, ҡыҫығыраҡ һоро күҙҙәрендә йәшәү дәрте саткыларының һүнмәү генә түгел, баҙлап тороуын күреп, эстән генә ире менән маһайып ҡуйҙы. «Ғәлләмемдең тәненә ҡәһәр һуҡкыр немец нисә генә тамға киртеп ҡайтарһа ла шул тиклем дә беше булыр икән. Әле һаман бирешәһе түгел. Аллаға шөкөр», — тип эсенән генә ҡыуанды. Ләкин шулай ҙа ҡарсыҡтың күңел төбөндә күптән йоҡомһорап ятҡан көнләшеү иблисе лә ҡуҙғалып ҡуйҙы.

Ҡарты сығып китер алдынан әле матурлығын ташламаған тулы аҡ йөҙөнә етдилек өҫтәп, ул, ғәҙәттәгесә, иренә тағы бер тапҡыр һабаҡ уҡып алыуҙы кәрәк тапты.

— Һине, моғайын, шул балалар алдында тағы ла хәбәр һөйләргә ҡушырҙар әле. Бер нәмә һөйләргә тотонһаң, эсәк һөйрәгән эт шикелле, сурытып алып китә торған ғәҙәтең бар. Штубы ла телеңдең теҙгенен ҡыҫҡа тот. Ни һөйләһәң дә, шул әлеге лә баяғы, совхоз түрәләренә бәйләнмәй, шуларҙың эшенә тығылмай ҡалмай торғанһың. Былай ҙа үҙеңде ауылда «туңыртҡа Ғәлләм», тип күҙеңде астырмайҙар. Шул тик тормаған телең арҡаһында яманатлы булып бөттөк. Бер нәмәне ауыҙыңа алһаң, сылғау сәйнәгән һыйыр һымаҡ, өҙмәйһең дә, ҡуймайһың.

— Ошо, ауыҙына май биргән бисәләр берәр яҡҡа китә башлаһаң, үҙҙәрендә булмаған аҡылдарын кешегә өләшә башлайҙар. Ҡайҙа, ни һөйләргә тейешлекте белмәҫкә мин бөтөнләй сумашушный түгел дә баһа. Етмешкә баҫҡан был башҡа инәре инеп, лыҡа тулған инде уның. Минең кеше

аҡылы менән йәшәмәгәнде нүжәли ошоға тиклем аңлап еткерә алмайһың, ә? Ҡайһы саҡ ошо ләғәттәрең менән сей елкәгә тейәһең бит, малай! — тип Ғәлләм ҡарт арыш өшәһендәй усын шапылдатып муйынына һуҡты. — Һинеңсә, ошо донъяның тыныслығын күләгәлә ятып яҡлайҙар тип уйлайһыңдыр. Нисек тә шулай булмаған, уны белә белһәң, ҡул менән дә, тел менән дә яҡламаҡ кәрәк. Һеҙҙең барығыҙға ла анһат булһын штубы, — тип ҡарт туҙҙы-туҙҙы ла, иҙән уртаһында өнһөҙ баҫып торған ҡарсығын ҡалдырып, тышҡа сыҡты.

Уның йыйнаҡ ихатаһында йәшел келәм булып йәйелгән бесәй үләненең ҡыйғас япраҡтарында иртәнге нур менән мансылған көҙгө ысыҡ тамсыларын, сыуаҡ көн вәғәҙә итеп, Салғыя ташы өҫтөндә аҫылынған алһыу ҡояшты күреп, Ғәлләм ҡарттың ҡапыл бүҫерелеп төшкән күңеле, һирпеп ташлағандай, күтәрелеп тә китте. Әллә ҡайҙалыр алыҫта, ауылға ҡаршы Сағыл битләүендә гөрөлдәгән трактор, тырпылдаған мотоцикл тауыштарын ишетеп, арҡаларына сумка аҫып, мәктәп формаһы кейгән ауыл балаларының, ҡаҙ бәпкәләре шикелле, теҙелешеп, сыр-сыу килеп, урам буйлап барыуҙарын күреп, Ғәлләм ҡарт: «Үәт, шулай тормош тәгәрәп китеп ултыра. Бөтә аяғына баҫҡан ғәләм йәшәү өсөн тырышып ята. Бөтә тереклеккә именлек кәрәк шул», тип тәмле хыялдар менән бүлексә контораһына ыңғайланы. Тәҙрәнән сыға яҙып мине ҡарап тормайҙар микән тигән шикелле, ул ян-яғына ҡараны ла, тамаҡ ҡырып алды. Мәктәпкә барырға тейешле кешеләр йыйылып бөткәс, зәңгәр төҫлө, әле завод буяуы еҫе бөркөп торған совхоздың «Рафигы» уларҙы үҙәк усадьбаға елдерҙе. Ләкин Ғәлләм ҡарттың күтәренке күңелен яңы ғына өйҙә ҡарсығы менән икәү-ара булып алған сетерекле һөйләшеүҙең шәүләһе ҡапланы. «Ну яндыраймын да инде, ниңә шул тиклем, ҡоро сыра шикелле, тоҡанып барырға? Ҡырҡ биш йыл бергә-бергә ғүмер иткән әбейеңә тел тейҙереп, иҙән уртаһында һерәйтеп ҡалдырып кит инде. Бесталкауай», тип хәҙер инде ҡарт үкенде.

## II

Автобус, алыҫтан тимер ҡыйығы ялтырап, йәйпәк, ләкин тирә-яҡҡа күренеп, түбә өҫтөндә ултырған мәктәпкә килеп туҡтаны. Асфальт юлдың ике яғына рәт-рәт булып теҙелгән йәшел ағастар ҡарттарҙы, сафта торған һалдаттар шикелле, иртәнге талғын иҫкән елдә япраҡтарын шаулатып ҡаршыланы.

Өҫтө бәләкәй генә ҡыҙыл флагтар менән биҙәлгән

селтәрле тимер ҡапҡаны үткәс тә, байрамса ыҫпай кейенгән көләс йөҙлө мәктәп директоры ике ҡуллап ҡарттар менән күрешеп сыҡты ла, үҙ артынан эйәртеп, уларҙы мәктәптең бейек болдорона мендерҙе. Ә үҙе әллә ҡайҙа китеп юғалды. Былар эргәһенә тағы бер-нисә таныш ветеран күтәрелде. Ялтырап ҡояшҡа янған биттәренә арҡылы-буй йыйырсыҡ бураҙналар төшөүгә, ҡайһы берәүҙәренең ҡулында таяҡ булыуға ҡарамаҫтан, бөгөнгө тантанаға улар бөтәһе лә көр күңел менән килгәндәр.

Аранан кемеһелер тәрән уйға батып, өндәшмәй генә торған Ғәләм ҡартҡа төбәп:

— Ғәләм ағай, мәктәпкә нишләп бөгөн әлифбаһыҙ ғына килгәнһең? Еңгәм әллә сумкаңды тартып алып ҡалдымы? — тип мәрәкәләне.

Уның өндәшмәгәнен күреп, икенсеһе:

— Ул бөгөн үҙе һабаҡ бирергә самалап тора, — тип төрттөрҙө. Уның был һүҙе, ысынлап та, Ғәләм ҡарт күңеленә оло төйөн булып төртөлдө.

— Ә что же, уларҙы уҡытырлыҡ ҡына хәл юҡмы ни беҙҙә? Барыбыҙ ҙа әлепбейгә башлап, ошо мәктәптә аяҡ баҫтыҡ түгелме ни? Аллаға шөкөр, үҙ ғүмеребеҙҙә ғилемгә күҙебеҙҙе асҡан мәктәпкә тап төшөрмәнек шикелле? Был тәңгәлдә беҙҙең выждан таҙа, — Ғәләм ҡарттың «беҙҙең» тигән һүҙе «минең» тигән мәғәнәне аңлатыу ғына түгел, шул төркөмдә элгәрге һымаҡ, осрашыуҙан һуң «нимәлер» көҫәп торған кешеләргә тапҡыр яуап ине. Ҡарттың яуабын төрлөһө төрлөсә ҡабул итте, ләкин барыһы ла һыу уртлаған кешеләй, шымып ҡалды. Бер аҙ торғандан һуң баяғы тәләкәс ветеран тағы һүҙ башланы.

— Ғәләм уҙаман, осрашыуҙан һуң, элекке фурмыла ашау-эсеү ойоштормайҙар микән? — тип һораны ла, ҡалғандарға күҙ ҡыҫып алды. Йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалған был һүҙ Ғәләм ҡартты тағы тоҡандырып ебәрҙе. Ул нисек тә тынысыраҡ булырға тырышты:

— Заманы ул түгел, ҡустым. Үҙ һөнәребеҙҙе байтаҡ күрһәттек инде, әле шуның мейегә һеңгән бахмурын һаман сығарып бөтөрә алмай этләнәбеҙ бит. — Бер аҙ торғас, үҙ-үҙе менән һөйләшкән кеше һымаҡ, ләкин бөтәһе лә ишетерлек итеп:

— Әҙәм мәсхәрәһе бит, малай, бер уйлаһаң. Мәктәп ише изге урынға килеп: «Балалар хәмер йотмағыҙ, бөтә зәхмәт, боҙоҡлоҡ шунан башлана, таҙалығығыҙҙы йәштән һаҡларға өйрәнегеҙ, тәмәке тартмағыҙ, тәмәке — бары сырхауҙың ғәләмәте», тип балалар алдында лөғәт уҡып, аҙаҡтан үҙебеҙ директор кабинетына бикләнеп, күҙебеҙ быялаға әйләнгәнсе шытып, таралыша инек бит өйөрлө битһеҙ, мәйт... — тип төкөрөп ҡуйҙы.

— Булды инде, ағай-эне, булды.

— Танып булмай, үҫмер быуынға заманында бөтә эштә лә үрнәк була алманыҡ шул.

— Уйлап ҡараһаң харап инде, малай. Балаларға ҡарап үпкәләй торған юҡ. Шулай бер көн, ошондай осрашыуҙан һуң, ул заманда мәктәптә уҡып йөрөгән Мырҙағәле, үҙемдең малайҙы әйтәм, хәҙер малай түгел инде, бала-сағалы булып, үҙ алдына донъя көтөп ята. Шул малай, шабаш, минең менән һөйләшмәй ҙә ҡуя бит әй. Мин һүҙ ҡушып ҡарайым, ләм-мим яуап алырмын тимә. Тәки һөйләшмәне. Бер-ике аҙна үткәс, әсәһенән һорашһам, ул: «Балаң нишләп һинең менән һөйләшһен? Теге мәлдә ни директор булмаһендә һинең «Әх-ма!», тип ер ярырҙай ҡысҡырып, таяғыңды иҙәнгә туҡылдата-туҡылдата бейегәнеңде балалар ишек егенән ҡарап торғандар», ти. Оятынан прәмә ят та ул, малай. Икенсе көнө: «Ну, малай, атайың баҫа ла икән? Беҙ мәктәп ансамбленә етәксе таба алмай этләнәбеҙ, үҙебеҙҙең ауылда мынамын тигән оҫта бейеүсе булған икән дә баһа», тип мыҫҡыл итәләр ти. Әҙәм страмы! Шунан минең менән ниндәй балаң һөйләшһен? Знамо, һөйләшмәй. Мин ундай атайҙы ташлап сығып китер инем әле, һөйләшеү түгел. «Бейеүсе малайы» тип беҙҙекеләрҙе үсекләй башлағас, Мырҙағәле тас та тос һуғышып киткән, ти. Бына һиңә осрашыу гәләмәте.

— Һин уны һөйләйһең әле. Шул һуңғы осрашыуҙың икенсеме-өсөнсөмө көнөндә совхоз кәнсәһендә мине мәктәп директоры осратты ла: «Һеҙ, ағайҙар, пажалыста, мынан кире ундай тантанала минең кабинетта тәмәке тарта күрмәгеҙ инде, сөнки һеҙ таралышып киткәс, ун биш көн буйына кабинетҡа баш тығырлыҡ булмай, тәмәке еҫе бөтә стеналарға һеңеп бөтә», тип зарланып торҙо.

Бындай үҙ-үҙеңде тәнҡитләү һүҙҙәре бәлки дауам да иткән булыр ине, ләкин мәктәп директоры ветерандар төркөмөн эйәртеп, күҙҙең яуын алып торған мәктәп залына йүнәлде. Һап-һары итеп буялған иҙәнгә баҫырға ҡыймай ҡайһы бер ҡарттарҙың ишек төбөндә аяҡ кейемдәрен һала башлауҙарын күреп, директор:

— Зинһар өсөн аяғығыҙҙы һалмағыҙ, был мәсет түгел, көн ҡоро, зыян юҡ, аҙаҡ балалар йыуырҙар, — тип туҡтатып ҡуйҙы. Үҙе артынан эйәргән төркөмгә ул ҡапыл әйләнде лә:

— Хөрмәтле ағайҙар, хәҙер дәрес башланыр алдынан мәктәп буйлап бәләкәй генә экскурсия яһап алабыҙ. Ҡаршылар юҡтыр бит, — тип өндәште.

— Юҡ, юҡ. Ҡайҙа алып барһаң да үҙ ихтыярыңда, беҙ риза.

— Ҡунаҡ хужаның ишәге, — тиеште эйәргән халыҡ.

— Был бүлмә техник средстволар ярҙамында уҡытыу кабинеты, — тип директор ҙур яҡты кабинеттың ишеген шар асып ебәрҙе. Ошо кабинетты кәрәк приборҙар, аппараттар менән йыһазландырыу өсөн күп кенә район, республика ойошмаларының тупһаһын тапап, байтаҡ ҡына үҙ нервыһын боҙған мәктәп директорының киң маңлайында, тулы битендә әҙәпле генә ғорурлыҡ тойғолары, кинәнеү сатҡылары күренеп ҡалды. Етмәһә, ул үҙ мәктәбендә физика-математика дәрестәре алып бара ине. Рәт-рәт итеп ултыртылған дүрткел өҫтәлдәрҙә әллә ни төрлө приборҙар, техник дәрестәрҙе үткәреү өсөн бихисап ҡулайламалар теҙелеп киткән. Бер яҡ стенаға түшәмдән иҙәнгә тиклем күлдәй экран эленгән.

— Ә бында инде программа менән бәйләнешле фәнни-популяр, техник фильмдар күрһәтәбеҙ, — тип аңлатты директор. Аранан кемдер:

— Ул киноны ҡарарға беҙҙең балалар кискә мәктәпкә яңынан киләләрме? — тип ҡыҙыҡһынды.

— Юҡ, юҡ. Нишләп улай булһын? Көндөҙ беҙ бына ошолайтып эшләйбеҙ уны, — тине лә директор ишек ҡырындағы кнопкаға баҫты. Бейек тәҙрәләрҙең яҡтауына йыйып ҡуйылған ҡара пәрҙәләр ҡыштырлап яҙылдылар ҙа, кабинетты төн ҡараңғылығы баҫты.

— Бына һеҙгә кәрәк булһа ҡараңғылыҡ.

Күп тә үтмәй икенсе стенала, теген машинаһыныҡы кеүек, ваҡ ҡына тигеҙ сылтырлаған тауыш ишетелде. Экранда ут ҡабынды. «Ер ҡатламының төҙөлөшө», «Яһалма рәүештә алмаз эшләү» тигән төҫлө фильм башланып та китте.

— Бына ғәжәп, аптыраҡ бит, малай. Элгәрерәк ауылға кино килһә, ай яҡтыһы төшмәһен өсөн бөтә тәҙрәләрҙе кейеҙ, балаҫ менән ҡорғанлап бөтә торғайныҡ бит.

— Хәҙерге әҙәм грамотный булмай мынаулай итеп бөтә техниканың дәстижениеһын күреп үҫкәс?

— Беҙ уҡыған саҡтарҙа быларҙың осмото ла юҡ ине шул.

— Буҫтауға тараҡ ышҡып, электр тогы табып ултыра торғайныҡ бит, үәт заман әй! — тиеште өҫтәл артында ултырышҡан ветерандар.

Директор бер-бер артлы теҙелеп киткән физика, химия кабинеттарын күрһәтте. Бөтә стенаны биләп торған Менделеев таблицаһын ҡарап, Ғәлләм ҡарт: «Беҙ мәктәп бөтөрөүгә илле йыл да үтмәгән, был таблицаға әллә ни саҡлы минерал өҫтәлгән. Тик ятмай беҙҙең ғалимдар ҙа — һаман эҙләнеү, табыу өҫтөндә», тип уйлап ҡуйҙы. Бөтә стена буйына һуҙылған быяла шкафты асып, директор:

— Бында инде беҙҙең Урал аръяғында табыла торған минералдар тупланған, — тип төрлө мәғдәндәрҙе күрһәтеп сыҡты.

— Ә бында беҙҙең ашхана. Тәмле аш бешереп, балаларҙы көнөнә бер тапҡыр бушлай ашатып торабыҙ, — тине. Аранан кемдер:

— Йә, әйтәгүр, ошо мәктәптән ҡайтһа, әсәһе беҙҙең Әүхәдиҙе тамағына ашата алмай ыҙалай. Баҡһаң, бында буйтым туйып ҡайта икән, шилма, — тине.

Шунан һуң алма баҡсаһына сыҡтылар. Ағас төптәрендә алһыуланып бешкән алманың ҡойолоп, сереп ятыуын күргәс, Ғәлләм ҡарттың йәне әсене. Утыҙынсы йыл урталарында Волга-Балтик каналын төҙөүҙә ҡатнашҡан бер ағай-эне тейеш кешеһенең күстәнәс итеп ауылға ике алма алып ҡайтыуы һәм уны үҙ туған-тыумасалары хисабына, егерме ике өлөшкә бысаҡ йөҙө ҡалынлығындай ғына итеп таратып ултырыуы келт итеп, хәтеренә төштө. «Вәт заман, ризыҡ ҡәҙере бөтөнләй юғалды бит, алманың алмаһы ағасынан ҡойолоп, сереп ятһынсы әле. Уны йыйыусы ла, ул турала ҡайғыртыусы кешеһе лә юҡ», тип әсенде Ғәлләм ҡарт. Алма баҡсаһын, ҡурсаҡ һымаҡ итеп йыйыштырылған уҡыусыларҙың производство участогын ҡарап сыҡҡас, ветерандарға ҙур ғына полиэтилен ҡапсыҡтарға һалынған алма тараттылар. Алған бүләктәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырап торған кешеләргә ҡарап, директор:

— Ул бүләктәрегеҙҙе хәҙергә ошонда һалығыҙ, — тине лә тип-тигеҙ итеп эшләнгән бүлкәтле шкафтарҙың ҡапҡасын асып ебәрҙе. Улар яңынан мәктәп болдорына сыҡтылар.

Улар ишектән күренгәс, мәктәп майҙанында бал ҡорто һымаҡ мыжғыған балалар тынып ҡалды. Шунан ҡапыл, борғо тауыштары, барабан ҡағыуҙар аҫтында, мәктәптең тынлы оркестры ветерандар хөрмәтенә «Ҡаршы алыу» маршын уйнап ебәрҙе. Әллә ҡасан ишетелеп тә, инде онотола ла башлаған был хәрби марш бер ветеранды ла битараф ҡалдырманы. Уларҙың барыһын да ҙур эске тулҡынланыу солғап алды, был марш уларҙың күңел ҡылдарын сиртеп, йәш эркелгән күҙҙәрен һөртөү өсөн ҡулъяулыҡҡа тығылырға мәжбүр итте. Ғәлләм ҡарт иһә, икенсе эшелонға сыҡҡан үҙ полктарына дивизия командирының килеүен, башҡалар менән бергә үҙенә Ватан һуғышы орденын тапшырыу ваҡиғаһын хәтерләне. Бөгөнгө шат, тыныс тормош емеше — сәскәгә күмелеп сафта диңгеҙ кеүек сайҡалып торған бәхетле балаларҙы күреү ветерандарҙы үтә ныҡ шатландырҙы, улар быны йәшереп тормай, һәр кем үҙенсә тышҡа бөрктө. Аҫта ҡырмыҫҡа иләүе шикелле шаулап, туғай сәскәләрен ҡулына тотҡан береһенән-береһе гүзәлерәк балалар барыһы ла, үткән хәтирәләргә бирелеп, йәшкәҙәгән күҙҙәрен һөртөп торған Ғәлләм ҡартҡа мөләйем ҡараштарын текәгәндәй тойолдо.

Ҡулына мегафон тотҡан мәктәп директоры бер-нисә

аҙым алғараҡ атланы ла, майҙандағы балаларҙы тынысланырға саҡырҙы. Уның өҙөп-өҙөп әйткән һүҙҙәре йәйрәп ятҡан дала буйлап, әллә ҡайҙарға таралды, Салғыяның таш ҡаяһына, ҡаршылағы армыт-армыт һуҙылған Сағыл битләүҙәренә бәрелеп, әллә нисә тапҡыр шаңдау булып яңғыраны. Әйтерһең дә, тыныслыҡҡа саҡырған уның был оранын бөтә ғаләм ҡолаҡ һалып тыңлағандай тойолдо.

— Хөрмәтле балалар, ҡәҙерле ата-әсәләр һәм ветерандар! — тине директор, — партия, йәмғиәт ойошмалары һәм уҡытыусылар коллективы исеменән һеҙҙе бөгөнгө шатлыҡлы тантана — яңы уҡыу йылы башланыу көнө менән тәбрик итәм, һәр уҡытыусыға илһамлы эш, ә һәр уҡыусыға мәктәп программаһын үҙләштереүҙә төплө белем, аңлы һәм юғары тәртипкә өлгәшеүҙәрен теләйем. Беренсе дәрес — Тыныслыҡ дәресен асыҡ тип иғлан итәм!

Директорҙың ҡайнар ҡотлауын балалар һәм саҡырылған ҡунаҡтар дәррәү алҡыштар менән ҡаршы алды. Алғы рәттәге бер төркөм уҡыусылар ҡулдарындағы шәлкем-шәлкем сәскәләрҙе әле бөгөнгө оло тантана ҡыуанысынан айный алмай, үткән хәтирәләр ҡосағында йөҙгән ветерандарға тапшырҙылар.

Мыҡты кәүҙәле бер егет ҡулына еҙ ҡыңғырау тотҡан ҡурсаҡҡа оҡшаған бәләкәй генә ҡыҙҙы яурыны өҫтөнә ҡолаҡсындай сөйҙө лә, сафтар буйлап алып китте. Бала ҡулындағы өҙлөкһөҙ сыңлаған еҙ ҡыңғырау беренсе дәрестең башланыуын иғлан итте.

Тулған ай һымаҡ түңәрәк көләс йөҙлө ҡыңғыраулы ҡыҙҙы күргәс, ветерандар араһынан берәү, танауын мырш-мырш тартып, нуры ҡайта башлаған күҙен еүешләп алды. Ҡалтыранған ҡулдары менән яулыҡ эҙләп, таба алмағас, кеҫәһенән аҡса янсығы сығарып шуның мөйөшө менән күҙ йәшен һелкте лә, шатлығынан көлөп ҡараған булды. Уның юлаҡ-юлаҡ булып йәш аҡҡан ҡаҡса битендә, йәшкәҙәгән һоро күҙҙәрендә ғорурланыу һыҙаттары сағылып ҡалды.

— Белә-белһәгеҙ, ҡыңғыраулы анау бала минең Үрге Нуғайҙағы Латиф кейәүҙәге ҡыҙымдың ҡыҙы, йәғни минең ейәнсәрем була, — тип, уның был һүҙен бөтә кеше тыңлағандай күреп, маһайып ҡуйҙы. Был хәбәре менән ул үҙ кейәүенең дә тип-тигеҙ урында оро булып тороуын аңлатты, сөнки ул кеше шул бүлексәлә һарыҡсылыҡ комплексының хужаһы булып эшләй ине.

Ҡыңғырау тауышына ҡуҙғырышып осҡан бер туп сыйырсыҡ, ҡарлуғастар һауаға атҡан байрам фейерверкы һымаҡ, ҡояшта ялтыраған ҡыйғас ҡанаттары менән иртәнге һалҡынса һауаны киҫеп, мәктәп тирәләй бер-нисә тапҡыр уралып остолар ҙа, балаларҙың бөгөнгө ҡыуанысын уртаҡлашҡандай, мәктәп баҡсаһына яңынан килеп ҡундылар.

## III

Уҡыусылар ҙа, килгән барлыҡ ветерандар ҙа шау-гөр килеп, класс бүлмәләренә таралыштылар. Ғәләмдәр төркөмөн директор үҙе башлап өс ҡатлы кирбес мәктәпкә төкәтеп эшләнгән тәпәш кенә ағас бинаға алып инде. Был төкәтмә ағас мәктәптең бер яҡ стенаһы буйлап һуҙылған коридорға килеп ингәс, Ғәләм ҡарттың күңеле әллә нишләп китте. Был ни хикмәт? Был ниндәй бик тә таныш, сикһеҙ ҡәҙерле коридор? Һары төҫкә буялған иҙәндә бынан ҡырҡ-ҡырҡ биш йыл элек үҙенең табанлы быймаһы, күн ботинкаһының эҙен күргән кеүек булды уға. Өнөммө? Төшөммө? Был минең тыуған мәктәбемдең коридоры түгелме? Шул. Башҡаса булыуы мөмкин түгел, тик ике тәҙрә араһында сылтлап һуғып торған берҙән-бер туҡмаҡлы сәғәт кенә күренмәй. Бына коридор уртаһында, ғәҙәттә, ҡышҡы һыуыҡ көндәрҙә иҙәнгә беркетеп ҡуйылған турник бағанаһының тишектәре. Коридор башында уң яҡта урынлашҡан быяла ишекле директор кабинеты, уҡытыусылар бүлмәһе лә шул көйөнсә һаҡланған.

Ғәләм ҡарттың быуындары йомшарҙы, эске әҫәрләнеүҙән йөрәге дөпөлдәп тибергә тотондо, ҡаҡса битенә эҫе ҡабып, ике сикәһе ҡыҙа башланы. «Китсе, китсе, ошо ағас төкәтмә, ысынлап та, мин тамамлап сыҡҡан Ҡоруҙәк мәктәбе булып сыҡты микән ни? Булмаҫ, булмаҫ. Уны Ҡоруҙәк руднигы ябылғас, һуғыш мәлендә икенсе яҡҡа күсереп алып киткәндәр имеш, тип ишеткәйнем дә инде мин. Бына беҙҙең ғәмһеҙлек, донъя артынан ҡыуып, үҙеңә белем биреп сығарған мәктәбеңдең ҡайҙалығын белмәй йөрөсө әле». Ошо күп һораулы уйҙар Ғәләм башынан йәшен тиҙлеге менән үтеп китте. «Белмәү ҙә ғәжәп түгел, сөнки беҙҙең был совхозға ҡушылыуыбыҙға ике йыл да юҡ бит әле», ул үҙен-үҙе аҡларға тырышты.

Юл башлап алда барған директор коридор осондағы иң һуңғы бүлмәнең ишеген шар асты ла:

— Хөрмәтле ветеран ағайҙар, беҙ бөгөн беренсе Тыныслыҡ дәресен унынсы класс уҡыусылары менән башлап ебәрәбеҙ, рәхим итегеҙ! — тип стенала уйылған ике ҙур тәҙрәле класс бүлмәһендәге парталарҙан урын күрһәтте. Мәктәп директорын һәм уның артынан эйәргән биш-алты ҡартты балалар аяҡ үрә тороп ҡаршы алды. Билдәре ҡатып бөткән оло кешеләр парталарҙы дығырлатып шылдыра-шылдыра, шаҡ-шоҡ килеп урынлашып бөткәс, директор дәрес башлап ебәрҙе. Ғәләм ҡарт бүлмәгә инеү менән, бер аҙ туҡтап, уның эсенә күҙ йүгертеп сыҡты. Ул тәҙрә төбөндәге иң алғы партаға ултырҙы.

Ләкин ул һаман тиҙ генә тынысланa алманы, күңеле

менән ниҙер, кемделер эҙләне, артына ла, ҡабырғаһына ла ҡаранып, парталарҙы барлап сыҡты, кемдең ҡайҙа ултырғанын күҙ алдынан үткәрҙе. «Бына был парта артында Васька Рындин, Венька Мартынов ултырып уҡыны, ләкин ул егеттәр икеһе лә Сталинград фронтында ятып ҡалдылар». Эйе, уның күңелендә берниндәй ҙә шик ҡалманы, ул үҙ класында ғына түгел, ә үҙ партаһы артында ултыра ине. Ҡапыл уның бөтә бөтмөшөн яңғыҙлыҡ, һағыныу тойғоһо солғап алды. «Нишләп мин дә улар менән бергә һуғыш ҡырында ятып ҡалманым икән? Тере ҡалған хосуста мин тормошта уларҙың мәңге яҡты иҫтәлегенә лайыҡ булырлыҡ эштәр башҡара алдыммы?» тигән ауыр уйҙар уның былай ҙа борсоулы йөрәген телгеләп үтте. Ул бөтөнләй күңел тыныслығын юғалтты. Ғәлләм төрлө уйҙар сырмалған башын ҡалҡытып, алғы стена уртаһында эленгән ҡара таҡтаға ҡараны. «Хатта был таҡта ла үҙ урынында эленеүле тора, тик уның өҫтөндә балаларҙың уҡыуын даими күҙәтеп торған шикелле күҙҙәрен ҡыҫыбыраҡ класс бүлмәһенә ҡарап торған Сталин портреты ғына юҡ».

Мәктәп директоры Тыныслыҡ дәресен башлап, кемгәлер һүҙ бирҙе, ләкин уларҙың ни хаҡында һөйләгәнен Ғәләм ҡарт ишетмәне, сөнки бүлмәгә инеү менән уның барлыҡ бөтмөшөн йөрәк түрендә мәңгегә уйылып ҡалған, күгелйем томан менән ҡаплана башлаған йәшлек хәтирәләре сорнаны. Быға тағы ла икенсе, бик тә мөһим, күңел тетрәткес нәмә сәбәпсе булды.

Партаға килеп ултырғас та, Ғәләм ҡарт тәҙрә бүкәне аҫтындағы бүрәнә ярығына иғтибар итте. Ул салбар кеҫәһенән салғы бәкеһен сығарҙы ла, бәке осо менән шул ярыҡ эсен соҡой башланы һәм күп тә үтмәй нәҙек кенә, ҡат-ҡат итеп төрөлгән, осһоҙло «Спорт» папиросындай ғына һарғайып бөткән ҡағыҙ киҫәге тартып сығарҙы. «Елгә тейеп таралып китмәһен» тигәндәй, ҙур һаҡлыҡ менән, дерелдәгән бармаҡтары менән ул төрөлгән ҡағыҙҙарҙы тағатып, ниҙер, бик тә ҡәҙерле нәмәне эҙләне. Бына ул элберәп бөткән изге ҡағыҙ киҫәге! Дүрт тиҫтәнән артыҡ бүрәнә егендә һаҡланған был ҡағыҙ битендә ҡырҡ дүртенсе йылдың ноябрь аҙағында Венгрияның Кечкемец ҡалаһында һәләк булған иптәше Абдрахмандың һүнмәҫ рухы, күренеп ҡалғандай, уның ҡул йылыһы бәрелгәндәй булды. Был Абдрахмандың һуңғы имтихан ваҡытында үҙ ҡулы менән яҙып биргән иң һуңғы яҙыуы ине. Урыны-урыны менән юйылып, ҡара менән яҙылған байтаҡ хәрефтәре еүешләнеп таралып бөтөүгә ҡарамаҫтан бында түбәндәге юлдарҙы уҡырға була ине. Хәйер, ул яҙыу бөтөнләй юйылып бөтһә лә Ғәләм ҡарт уны барыбер тоташтырып уҡыр ине, сөнки унда яҙылған һүҙҙәр күңелендә киртелеп, мәңгегә һаҡлана ине. «Мәлләғ дуҫ! (ул

уның исемен шулай кирегә әйләндереп йөрөтә ине). Был минең һуңғы кәһтем (антым) булыр. Әгәр бәхет булып, ошо имтиханды иҫән-һау ауҙарһаҡ, икебеҙ ҙә Өфөгә уҡытыусылар әҙерләй торған курсҡа китербеҙ, яраймы, дуҫ! Һинең мәңгелек ңыҫуд Намрах Абд».

Ун йыл бер партала ултырып уҡыған йәндәй дуҫының кинәт табылған был ҡош телендәй васыяты Ғәлләм ҡартты тәрән кисерештәргә, һағышлы уйҙарға дусар итте, ул тағы үҙен үткән хәтирәләр упҡынында, ғүмер таңының өйөрмәләрендә хис итте. Ғәлләм ҡарттың әкренләп тағатылған хәтер ептәренең осо ҡырҡ беренсе йылдың бөтә тәбиғәт хуш еҫле сәскәгә күмелгән июнь айына килеп тоташты.

Ғәлләмдең бөгөнгөләй хәтерендә, был көн уларҙың класы физиканан иң һуңғы имтиханды тапшыра торған ун өсөнсө июнь ине.

Был класта тәүге имтихандан башлап, һуңғыһына тиклем РОНО вәкиле булып тәғәйенләнгән уның мөдире Сәғәҙиев ағай үҙе ултырҙы. Ғәҙәттәгесә өҫтөнә өр-яңы һоро костюм, ҡырылған башына теүәтәй кейгән мыҡты ғына, яурынтаҡ кәүҙәле, битен әҙерәк шаҙра һипкеле ҡаплаған Һибәт ағай иң артҡы парталағы буш урынға барып ултырҙы. Ул еңенең осо менән пинжәгенең түшенә тағылған «Почет Билдәһе» орденын ышҡып алды. Бөтә стенаны биләп торған ике тәҙрәнән төшкән иртәнге ҡояш нурҙарында уның орденындағы ҡыҙыл байраҡлы эшсе менән колхозсы ҡатын-ҡыҙҙың матур һыны класс таҡтаһында сағылып ялтлап китте. Ул ашыҡмай ғына партаға үҙенең блокнотын сығарып һалды ла ниҙер теркәп ҡуйҙы.

Оло вәкил барлығынанмы, әллә үҙ ғүмерендә беренсе имтихан булғанғамы, физика уҡытыусыһы Август Карловичтың йөҙөндә бер аҙ ҡаушау һиҙелә ине. Ул ике сикәһендәге оҫта итеп ҡалдырған һары бөҙрә бакенбардаһын ышҡып алды ла, папкаһынан һорау билеттары сығарып, өҫтәл өҫтөнә йәйҙе. Былай ҙа бейек, матур кәүҙәһенә һылап тегелгән, арттан билдекле пинжәгенең салғыйҙарын аяҡ үрә баҫып тартҡылап алды ла, артҡы партала ултырған Сәғәҙиев ағайға ымланы. Был уның: «Дәресте башларға мөмкинме?» тигән һорау билдәһе ине. Вәкилдең эйәк ҡаҡҡанын күреп, ул ҡалтыранғанныраҡ тауышы менән:

— Бына шулай итеп, беҙ физика дәресенән имтихандар башлап ебәрәбеҙ. Билеттарҙа һеҙгә мәғлүм булмаған бер генә һорау ҙа юҡ, бөтәһе лә һеҙ программа буйынса үткән темаларҙан алынған. Һеҙгә уңыштар теләйем.

Быныһы инде уға текәлеп ултырған ҡырҡ ике күҙгә өмөт тойғолары уятып, имтихан алдынан балаларҙы бер аҙ ҡанатландырып алыу өсөн әйтелгән һүҙ ине. Ләкин имтихан ул уйлағанса бик тиҙ генә башланып китмәне. Быға

әлеге лә баяғы Рындин сәбәпсе булды. Ул кинәт ҡулын күтәреп, һүҙ һораны. Ул парта араһынан сығып, иҙәнгә баҫты ла, әйтерһең дә, уның өлтәйгән сикә сәсе осоп бара, уң ҡулы менән ҡабарып торған сәсен баҫты ла, аяҡтарын алмаштырып алды.

— Иптәштәр! — тип ҡысҡырҙы ла һыуға сумған кеше шикелле, тәрән итеп тын алды. Имтихан башларҙан алда беҙҙең уҡытыусы Август Карловичты законлы брак менән ҡотларға рөхсәт итегеҙ! — тине лә урынына ултырҙы. Бөтә балалар ауыҙҙарын йырып, дәррәү ҡул сапты. Сәғәҙиев ағай ҙа мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп, ихлас күңеленән сәпәкәйләп алды. Ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарған Август Карлович бөтөнләй ҡойолоп төштө. Бер аҙ ултырғандан һуң ул нишләргә белмәй, ҡулъяулығын сығарып, тирләгән битен һөрттө лә, аптырағандың көнөнәндер инде: «Большое спасибо, товарищи!» тигән булды. Инде батырланып алған баяғы Рындин:

— На здоровье, пожалуйста, Август Карлович, — тине.

Бөтәһен дә белеп йөрөгән мәктәп балалары уның кисә генә рудник больницаһының медсестраһы Галя тигән сибәргә өйләнгәнен ишетеп ҡалғайны. Оҙаҡ ҡына үҙен ҡулға ала алмай ултырған уҡытыусыға Сәғәҙиев ағай: «Журналыңды ас та дәресеңде башла», тип ымланы.

Физика уҡытыусыһы беренсе нәүбәттә үҙ фәненән яҡшыраҡ өлгәшкән балаларҙы саҡырып сығарырға булды. Беренсе булып, аяғына иҫке генә күн ботинка, тубығы ямалған зәңгәр галифе кейгән Ғәлләм сыҡты, насар ғына өҫ-башынан егет ҡорона тулып килгән Ғәлләм иптәштәре алдында һәр саҡ ояла ине, ләкин класташ балалар уның ырп-ярп кейеменә күптән күнегеп бөткәйнеләр инде. Билдәле, баштараҡ уны мыҫҡыл итеүселәр ҙә табылды.

Ғәлләм бөгөн таҡта янында оса өләшө һәм ике сандыры хром менән ҡапланған ошо кавалеристар салбарын ямалған ботинка өҫтөнән кейеп, тәүге тапҡыр класҡа килгәс, шул уҡ Рындин «Смирно!» командаһы биреп, йәнәһе лә Ҡыҙыл армия командирына рапорт тапшыра, бөтә класс алдында көлкөгә лә күтәргәйне. Ләкин шундуҡ башҡа егеттәр Ғәлләмде яҡлап, Рындинға биргеләп алдылар ҙа, өҫтөндәге шевиот костюмының салғыйын йыртып ҡайтарғайнылар. Аулағыраҡ саҡтарҙа үҙ фәҡирлегенән ғәрләнеп, Ғәлләмдең илаған саҡтары ла булғыланы. Шулай ҙа уның тырышып уҡыуын, таҡтала математиканан башҡалар эшләй алмаған мәсьәләне сисергә тик ул ғына булдыра алыуын класташтары күрәгенсә баһалайҙар ине. Күпселек иптәштәре һабаҡташының алам-һалам кейеменә түгел, уның зирәклегенә ҡарап фекер йөрөттө.

Шуға күрә лә бына бөгөн имтихан башланғас, уның

беренсе булып тактаға сығыуы бер кемде лә ғәжәпләндермәне. Ошоға тиклем үткәрелгән имтихандарҙа ошо малайҙың гел генә беренсе булып, төплө, анык яуап биреүе Сәғәҙиев иғтибарынан да ситтә калманы. Был малай уны бөгөн дә кыҙыкһындырҙы. «Эх, был егетте баштан-аяк кәҙимгесә кейендереп, юғары укыу йортонда укытып та алһаң, мына тигән инженер йәки ҙур математик сығыр ине, шайтан алғыры», тип уйлап алды ул. Былай ҙа уның көрән тышлы блокнотындағы унынсы класс укыусылары исемлегендә Яуымбаев фамилияһы тапкырында ул үҙенә генә аңлайышлы әллә ниндәй билдәләр куйып бөткәйне. Был юлы ла: «Кайткас та, был егетте мотлак күҙ уңынан ысҡындырмаҫка!» тигән һүҙҙәр яҙҙы ла, уны ҙур түңәрәк эсенә коршап куйҙы.

Роно мөдире райондағы ике урта мәктәптең береһенә алдан уйланған максат менән килде. Ошо берҙән-бер рус программаһы менән укытылған мәктәп укыусылары араһынан башка рус мәктәптәре өсөн бик тә кәрәк, бигерәк тә кытлык кисергән физика, математика буйынса, бер аҙ укытыусылар һайлап алып булмаҫмы, тигән уй уны күптән борсой ине. Бына шуға күрә, ул бөгөн дә башын кырын һалып, һоро күҙҙәрен такта алдында «кояш яктылығының тиҙлеген хисаплап сығарырға» тигән мәсьәләне, акбур менән һыҙа-һыҙа ентекләп сисеп торған галифелы малайға төбәне. «Кара һин уны, караңғы ғына башкорт ауылында тыуып үҫеүенә карамаҫтан, урыҫ телендә ни рәүешле сатнатып һөйләп тора, кайҙан шул тиклем өйрәнгән тиген, ә!» тип һокланды.

Август Карлович та һәм район вәкиле лә, үҙ-ара һүҙ куйышкандай, Яуымбаевка физика дәресенән «Бик якшы» билдәһенә өҫтәп, бәләкәй генә кушыу билдәһе һуғып куйҙылар.

Кырк беренсе йылдың ун өсөнсө июнендә, йәғни һуңғы имтиханды тапшырған көнө, унынсы класты тамамлаусыларҙың тантаналы кисәһе булды. Кисәлә аттестат алыусылар араһынан Ғәлләм Яуымбаевты бер нисә тапкыр мактап телгә алып киттеләр. Кисә аҙағында мактау грамотаһы менән куша уны тукһан тәңкәлек ебәк күлдәк менән бүләкләнеләр. «Ыштанһыҙ осаға кайыш бау» тигән шикелле, ебәк күлдәк биргәнсе, берәр салбар ғәләмәте бирһәләр ни булған икән?» тип Ғәлләм үкенеп тә куйҙы.

## IV

Һуңғы имтиханды тапшырып, аттестаттарҙы алғас та, кисәге укыусылар төрлөһө-төрлө тарафтарға таралыша ла башланылар.

Ҡамытҡа ҡолаҡ бауы нығытып ултырған Вәлләм ҡарт улы алып ҡайтып тотторған аттестатты күҙенән алыҫҡа ҡуйып ҡараны ла:

— Ғәрәпсә булһа, бәлки, әҙ-мәҙ һупалар ҙа инем, хәҙергене күҙ танымай шул, — тигән булды. «Маҡтау грамотаһы менән гел генә «биш»ле билдәләре һуғылған аттестатты ҡулына алыр ҙа, атайым берәр ҡыуаныслы хуплау һүҙе әйтер инде», тип Ғәлләмдең өмөтләнеүе бушҡа ғына булды. Ул киреһенсә, «улым, шундай ҡыйын саҡтарҙа ла, мынауы түләп уҡыуҙар килеп сыҡҡас та, мәктәп ташлатмай һине уҡытыу сараһын күрҙек инде, башҡа балаларҙың ата-инәләре йүнсел булмағас, ана төрлө синыфта уҡыу ташлап бөттөләр бит», тине Вәлләм ҡарт.

Оялышынан бәпкә йөндәре беленеп торған ябыҡ битенә ҡыҙыллыҡ йүгергән Ғәлләм әкрен генә:

— Атай, әсәй һеҙгә тәрбиәгеҙ өсөн ҙур рәхмәт инде. — Үҙ һүҙенән үҙе иларға етешкән Ғәлләм: — Иҫән булһам, мин дә һеҙҙе күтәрмөн, — тип бышылданы. Атаһы ҡырында торған әсә кешенең күҙендә йылтырап йәш күренде. Ҡарт шулай ҙа урындыҡта ятҡан аттестаттың эре хәрефтәрен шыраулы усы менән һыйпап алды ла:

— Ҡағыҙы бик йылтыр икән, элгәрге заманда Микулай батша фармандары ошондай ҡағыҙҙа баҫыла торғайны, — тип өҫтәне. Ғәлләмдең ҡултыҡ аҫтындағы төргәкте күреп:

— Бының ниткән нәрҫә? Әллә берәр беремиә-фәлән дә бирҙеләрме? — тип ҡыҙыҡһынды. Ун йыл буйына аслытуҡлы, ярым яланғас тигәндәй, уҡып алып ҡайтып атаһына тотторған аттестатты уның ситкә этәреп ҡуйыуы Ғәлләмдең нескә күңелендә мәңгелек тут ҡалдырҙы, әлбиттә, ләкин атаһының һүҙҙе икенсегә бороп биргән һорауына ул моңһоу ғына яуап бирҙе.

— Эйе атай, яҡшы уҡыған өсөн миңә бына ошо премияны бирҙеләр, — тип ул урындыҡ өҫтөндәге балаҫҡа буй-буй һыҙыҡ төшкән ебәк күлдәген йәйеп һалды. Вәлләм ҡарт ҡулындағы ҡамытын иҙән уртаһына ырғытты ла, урынынан тороп уҡ китте.

— Бына быныһы шәп. Бындай затлы, ҡыйбатлы күлдәкте, беҙҙең ата-олатайҙар түгел, мирауай судья, ыстанауай пристеф та кеймәне борон заманда. Түрбашында ҡашығаяҡ менән булашҡан әсәһе эшен ташлап, тәҙрәнән төшкән ҡояш нурына үҙенең мәрйен һымаҡ бөтә биҙәктәре менән ялтырап ятҡан ебәк күлдәкте ҡулына алып, төрлө яҡҡа әйләндерҙе, оло ҡыуаныс саҡҡылары менән тулған күҙен иҙәндә һүҙһеҙ баҫып торған Ғәлләменә төбәп:

— Рәхмәт инде, улым. Ата-әсәңдең йөҙөнә серкеү килтермәй ошондай ҙур уҡыу бөтөрөп, мынауындай дөкәмит, беремиәләр алыу кемгә тейә әле. Йылы тәнендә туҙһын

инде хәләл көсөң менән тырышып алған күлдәгең, — тине лә күҙенә эркелгән йәшен йәшерергә телəп, башын икенсе яҡҡа борҙо. Өтөк Вәлләм ҡартҡа етә ҡалды.

— Ошо бисәләрҙең, ауыҙына май биргәндәр, саҡ ҡына бер нәмә булһа, күҙҙәре шәмәреп, балауыҙ һыға башлайҙар. Ул күҙ йәшенең яҡын ғына тороуын әйт. Өйөңдән үлек оҙатаһыңмы әллә? Ни күреп ҡыуаныр урынға, йәш түгеп илап тораһың? Кешенән генә оятыраҡ, әтү мин был күлдәкте бағанаға бәйләп, ҡапҡа башына елберләтеп элеп ҡуйыр инем әле. Күрһендәр беҙҙекеләрҙең алдын сығып, беремиә алып ятыуҙарын. Улым үҙемә оҡшаған, мин дә Маннап хәҙрәт мәҙрәсәһендә беренсе уҡыу китабы «Мөғәллим әл әүәлде тыңлатҡанда» алдыма шәкерт сығарманым, «афарин»дан ғәйре билдә алманым, — тип ҡарт ошо уңай менән үҙен бер маҡтап алыуҙы урынлы тапты. Һикелә күҙҙең яуын алып ятҡан күлдәккә тағы бер ҡараш атты ла: — Бындай затлы нәмә беҙҙең ише фәҡир-фоҡараға ҡул түгел ул. Борондан беҙҙең тоҡомға яңы кейем килешмәй, ырыҫы кәмей. Уны ана тегендә ултырғандар кейһен, — тип ҡулын колхоз кәнсәһе яғына һондо. — Бер көн ҡоҙаға кейеп барырға күлдәк таба алмай колхоз калдаушигы Сәләхетдин ауыл араһында сандалап[1] йөрөй ине. Быны шуға ғына елгәреү кәрәк. Беҙгә был бер ҙә ҡул түгел, — тип өҫтәне.

— Атаҡ-атаҡ! Улай итмәгә һуң? Үҙенә насип икән, балам үҙе кейһен! Әллә минең Ғәлләметдинем ошондай күлмәк киймәҫлек баламы? — тип әсәһе ҡаршы ла төшөп ҡарағайны, ләкин үҙ һүҙен йыҡтырып өйрәнмәгән Вәлләм ҡарт күлдәкте ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, елпәләтә баҫып сығып та китте. Бер аҙҙан һуң:

— Улым, мин һинең күлдәгеңде ослап ҡайттым. Колхоз калдаушигына дүрт бот бойҙайға алмаштырып килдем, — тине. — Исмаһам, бер тоҡ бойҙайҙы ризыҡҡа яҙып, һалдырып алһаҡ, бер ай ашарбыҙ. Ебәк күлдәккә тексәйеп ултырып ҡына тамаҡ туймаҫ ул, — тип ҡарт үҙе сығарған ҡарарға үҙ мөһөрөн баҫып ҡуйҙы.

Шулай итеп,үҙ хәләл көсө менән тапҡан, ғүмерендә бер тапҡыр үҙҙәренең өйөнә килеп ингән затлы күлдәкте Ғәлләмгә кейеп, тиҫтерҙәре араһында фарсит итеп йөрөргә насип булманы. Билдәле, атаһының был ҡарарын, улының кеше араһында күркәм кейенеп йөрөүен көнө-төнө хоҙайҙан теләгән әсә лә, бала ла, әлбиттә, хупламаны. Ләкин нишләмәк кәрәк? Таштан йүкә һуйып булмай, был өйҙә генә түгел, теләһә ниндәй ҡарарға ла мөһөр баҫыусы бирәү генә, атайҙар ғына булғас?

---

[1]*Сандалап* — ҡаңғырып, аптырап.

Киске тамаҡ мәлендә, усына сынаяҡ аҫтын ултыртып, өрә-өрә һөрпөлдәтеп сәй эсеп ултырған Вәлләм ҡарт, ике тубығы араһында шаҡмаҡлы шәкәр һалынған янсығын, әйтерһең дә, уның бәләкәй моҡсайына кемдер ҡул һуҙа, төпкәрәк этәрҙе лә, кәзә һаҡалын бармаҡтары менән тарай-тарай һүҙ башланы.

— Йә, Ғәлләметдин улым, колхозда ла эшләмәнең түгел, эшләнең. Түбән остоң брыгаты Ҡәйүм ҡарт һиңә ҡарап үпкәләй алмаҫ, уның ҡушҡан һәр эшенә буй һалып, баш тартмай эшләп килдең. Хәҙер инде һин бәлиғ булған егет, алла бойорһа, көҙгә ун етең тула. Хәҙер инде ниндәй кәсеп менән зәнимәйт итәргә ниәтләнеп тораһың? — тип һораны.

Ғәлләм бик оҙаҡ уйлап тормай, кинәт кенә:

— Беҙ Абдрахман менән уҡытыусылар курсын тамамлап, мәктәпкә китергә ҡарар иттек, — тине. Улының былдай яңы яҡшы һүҙенән йөҙө яҡтырып киткән әсә кеше, сәй яһауҙан туҡтап:

— Эйе, бирһен хоҙай. Беҙҙең аранан да аҡты ҡаранан айырған кеше сыҡты ла баһа. Һапһыҙ ҡара балта һымаҡ, Ҡәйүм ҡайҙа ҡуша — шунда соҡоноп йөрөмәгә. Ҡәләм осо менән көн итеү беҙҙең балаға хараммы? Ана көшөл Әхмәҙиҙең биш-алты төркөм бөтөргән ҡыҙҙары колхоз кәнсәһендә урында ултыра, — тип сурыта башлағайны, атаһы ултырған сынаяғын ҡапыл батмусҡа ҡуйҙы ла, башта, ҡунырға урын таба алмаған тауыҡ шикелле, ултырған ерендә тыпырсынып алды, һуңынан бер аҙ тынысланa төшкәс:

— Башҡа ғәйре эш юҡта был да кәсеп. Уның элгәрге әфтиәк уҡытҡан хәлфәнән ни айырмаһы бар? Айырма тик шунда ғына: элгәрге хәлфә мир аша, быныһына хөкүмәт ялунья түләй. Икеһе лә шул эшһеҙ Кәрим инде, — тип ҡырт киҫте. — Мына бер ҙур уҡыуға китеп, ер аҫтында мәғдән эҙләй торған ынйыынырлыҡҡа уҡып ҡайтһаң, мына был пакраймире һөнәр. Рәмиевтәргә генә алтын табып, Рәсәй мәмләкәтен байытырға тимәгән бит, — тип өҫтәне ҡарт.

Ғәлләмдең атаһы элек-электән «һәнәк тотҡанса ҡулы ҡабарған» кешеләрҙе яратманы, күңелендә лә һәр ҡасан уларға ҡарата ихтирам самалы булды. Ундайҙарҙы ул һәр саҡ: «Бешәлкәһеҙ, былйыраҡ, майғул» тип мыҫҡыл итә килде. Бына шуға күрә лә ул үҙенең Ғәлләмен бала сағынан ирҙәр һөнәренә: сана ҡарамаларға, тәгәрмәс бөгөргә, балта эшенә өйрәтте. «Ир кеше һәр ваҡыт ҡатыңҡы булырға тейеш», тип ыжып килде. «Хужалыҡта бер хәжәте тейер» тигән атаһынан күреп, ул йәштән арҡан ишергә, ун ике артмаҡлы ҡайыш ҡамсы үрергә лә өйрәнде.

## V

Ләкин яңынан бер аҙнанан Ғәлләмде генә түгел, бөтә илде тетрәткән дәһшәтле ваҡиға уның да яҙмышын үҙенсә хәл ҡылды. Һуғыш башланғандың икенсе көнөнә үк уның һабаҡташы, йәндәй дуҫы Абдрахманды Өфөлә яңы ойошоп ятҡан хәрби фельдшерҙар әҙерләй торған училищеға оҙаттылар. Ә унан бер йәшкә кесерәк Ғәлләмде илде обороналауға кәрәкле баҡыр иретә торған заводҡа эшкә ебәрҙеләр. Бында уны завод электростанцияһына яғыу өсөн китә торған торф ҡырҡырға ҡуштылар.

Атаһы уның торф эшенә китеүенә артыҡ бошонманы. «Әйҙә, ҡулына бол төшөрөп, әҙ-мәҙ өҫтөн-башын йүнәтеп ҡайтыр», тип уйланы. Торфта эшләүҙең Вәлләм ҡартты бермә-бер ҡыҙыҡһындырған икенсе яғы ла бар. Ул саҡтағы закон буйынса быңдай кешенең хужалығы хөкүмәткә ит, һөт, йөн һәм йомортҡа тапшырыу налогының ҡап яртыһынан азат ителә ине. Быныһы өсөн Вәлләм ҡарт бигерәк тә шатланды. Ләкин ҡарттың был ҡыуанысы бик сонтор булды.

Август аҙаҡтарында, йәй айының әкренләп көҙгә ауыша башлаған мәлендә, Вәлләм ҡарт ғаиләһе киске тамаҡҡа ултырғас, ботинкаларын яурыны аша һалып, арҡаһына тоҡ урынына мендәр кәпрәне аҫып алған Ғәлләм ҡайтып инде. Йәй буйы торф һаҙлығы кисеп йөрөү сәбәпле тош-тош урынынан ярылған элекке ҡуңыр, ә хәҙер инде дөм ҡара булып көнгә янған Ғәлләмдең битендә ҡыуаныс ҡатыш бер аҙ тартыныу һыҙаттары төҫмөрләнде.

Ул иҫәнлек-һаулыҡ һорашты ла, ҡапсығын яурынынан алып, һап-һары итеп йыуылған һике ҡаҙнаһына ултырҙы. Уның бөтә тәнендә талыулыҡ һиҙелә ине. Нисә әйтһәң дә, елкәңә артмаҡ һалып, етмеш-һикһән саҡрым йәйәүләп үтеүе уйын түгел. Кинәт килеп тыуған шатлыҡ тойғоларынан нурланған йөҙөн, мөхәббәт хисе тулған күҙҙәренән урғылған йылы ҡарашын улына төбәп, хужабикә өтәләнеп урынынан торҙо.

— Әйҙә, улым, бит-ҡулыңды сайып ал да, тамаҡҡа ултыр, шул дәрья йәйәүләп килеп арығанһыңдыр, ҡорһағың асҡандыр, — тип суйын ҡомғанға йылы һыу һалды. Атай кеше үҙенең эске тойғоһон бик тышҡа сығарып барманы, әҙәп һаҡланы. Ғәлләм дүрт мөйөшөнән сүс еп менән бәйләнгән моҡсайын сисеп, ҡусты-ҡарындаштарына күстәнәс тарата башланы. Әсәһенә кешәмир яулыҡ тотторғас, уның шатлығы эсенә һыймай, тышҡа бәреп сыҡты. Күңеле тулыуҙан йыйырсыҡлы ҡаҡса битенә тәгәрәгән бөрсөк-бөрсөк йәшен ул тотоп торған яулығының осо менән һелкеп алды. Өлөшһөҙ ҡалған атаһына Ленин бабай

һүрәте төшкән һыйыр телендәй биш дана ҡағыҙ аҡса тотторғас, ул аптырауынан нишләргә белмәй бер аҙ өнһеҙ ултырҙы. Өйрә эскәс, ҡалағын ашъяулыҡҡа ҡуйҙы ла, тыңламаған бармаҡтарына төкөрә-төкөрә, тубығы өҫтөндә ялбырап ятҡан ҡағыҙ аҡсаларҙы яңынан һанарға кереште. Ҙур ризалыҡ менән кәзә һаҡалын һыйпап, алдында ятҡан аҡсаларҙан ҡарашын алалмай:

— Йәмғеһе ике йөҙ илле һум. Афарин, улым! Бик ҙур бол менән ҡайтҡанһың кәсептән, — тип маҡтап ҡуйҙы. Был, замана үлсәме менән егет ҡорона тулған Ғәлләмдең, атаһы ауыҙынан ишеткән беренсе маҡтау һүҙе ине. Улдарын ашарға ултырттылар. Улының өйҙән сығып киткәндә ни кейеп киткән, шул рәүешле ҡайтып төшөүен күреп, тауышына яғымлылыҡ һәм йәлләү һыҙаттары өҫтәп, әсәһе һүҙ башланы.

— Улым, моғайын, эшләгән ереңдә кейем-һалым һата торған кәпирәт булғандыр, ҡалған аҡсаңды өҫ-башыңа тотонған булһаңсы? — тип һаҡлыҡ менән генә һорап ҡуйҙы.

Нисә йылдар быңдай сумма ҡулына инмәгән Вәлләм ҡарт һүҙҙе икенсегә борҙо. Эшкә юлланыр алдынан «улының кейем-һалымын йүнәтеү» теләге был аҡсалар килеп ҡунғас, ҡарт күңеленән күптән осҡайны инде.

— Ул аҡсаға урын бик күп әле. Ауыр заман килде — һуғыш бара. Налогты үҙ мөҙҙәтендә түләп, хөкүмәткә ярҙам итеү — һәр икебеҙҙең фарыз бурысы. Мына беҙҙең дә быйылғы страхауанья, силхозналуг түләнмәгән, — тип улының тәүге кәсебенән алып ҡайтҡан беренсе эш хаҡына урын эҙләп тә ҡуйҙы. Һүҙһеҙ генә шыйыҡ өйрә эсеп ултырған Ғәлләм:

— Мин үҙем дә шулайыраҡ уйлап ҡайтҡайным, — тине. Бер аҙ һүҙһеҙ ултырғас, ҡарт үҙенең тауышына элгәргә етди ҡатылыҡ өҫтәп:

— Дугауарың мөҙҙәте тулмайынса, яңы тыуған айҙай, өндәшмәй-нитмәй һинең ҡайтып төшөүең ни? — тип һораны.

Ғәлләм текә яғаһы ылбыраған күлмәгенең үҙе әтмәләштереп алған кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән ике ҡағыҙ сығарып, атаһына һондо. Ул түңәрәк мисәт баҫылған ҡағыҙҙы ҡулына алып, нишләптер, Сағыл артына ярты-лаш йәшеренә башлаған ҡояшҡа тотоп ҡараны ла, төҫөнә һиҙелерлек борсолоу күләгәһе йүгертеп:

— Ғәлләметдин, мә үҙең уҡы, — тип ҡағыҙҙарҙы улына кире бирҙе. Ташҡа баҫылған хөкүмәт мисәтле ҡағыҙҙарҙы күреп улар эргәһендә ултырған әсәй кешенең йөрәге өҙөлөп төшөп киткәндәй булды. «Күҙ терәп торған ҡолонсағымды һуғышҡа алып китәләр икән», — тип уның ҡото осто.

Ғәлләм киреһенсә, ҡояшта янып, көрәнгә әйләнгән битенә ҙур ризалыҡ, ә тауышына көрләк һыҙаттары ҡушып:

— Был ҡағыҙҙарҙың бына быныһы — мине торфтан срогынан алда ҡайтарыу өсөн РИК-тың рөхсәт ҡағыҙы, ә инде икенсеһе — быйылғы уҡыу йылында ғына урта мәктәпкә әйләнгән Николаевка ауылына етенсе-һигеҙенсе кластарҙа математика уҡытыу өсөн РОНО-ның приказы, — тине.

Был ҡағыҙҙарға әсәһе һөйөндө, ә атаһы көйөндө. Улың әле генә эске шатлығынан ҡояш нуры балҡытып торған ҡаҡса йөҙөн һалҡын күләгә ҡапланы. Ләкин йоҡо алдынан атаһы ла, әсәһе лә ишетерлек итеп:

— Бер нисә көндән мин ул мәктәпкә барып, уҡыта башларға тейешмен. Былай ҙа ике көнгә һуңланым, — тип үҙенең китеү-китмәүенә өйҙәгеләрҙә бер ниндәй ҙә шик булырға тейеш түгеллеген белдереп, ҡырҡа ғына әйтеп ҡуйҙы.

— Мынау өҫтө-башың менән һин ни рәүешле балалар уҡытмаҡһың? Ваҡыт көҙгә ҡалып килә, һуғышҡа алып китмәһәләр, ҡышҡы кейем дә таярламаҡ кәрәк, — тигән атаһының шикләнеберәк әйткән һүҙен Ғәлләм ҡырҡа киҫте.

— Ялан аяҡ, ялан баш булһам да — китеүем-китеү. Бына минең һеҙгә әйтәһе һуңғы һүҙем шул.

## VI

Ғәлләмде бик ашығыс рәүештә мәктәпкә әҙерләй башланылар. Иртә менән тороп, хужабикә үҙенең ҡыҙ һандығын аҡтарырға йәбеште. «Ҡыҙҙар башлы-күҙле булып фәлән китһә, бирнәгә ярар. әле», тип күптән һаҡлап тотҡан биш метр ҡара сатинын һөйрәп сығарҙы.

Был тауарҙы ҡултығы аҫтына ҡыҫтырып, осраған бер кешегә: «Беҙҙең Ғәлләметдинде Микулаевка ауылына рәхмәтикә уҡытырға мөғәллим итеп тәғәйенләгәндәр, бына шуға күстән-салбар тектерергә Асия фартнуйға китеп барам әле», тип һөйләнә-һөйләнә Вәлләм ҡарт үҙ заказын биреп тә ҡайтты.

Элекке замандарҙа ауыл байҙарына, мулла-хәлфәләргә ҡыҫма билле, көмөш төймәле кәзәкиҙән башҡа кейем текмәгән, ә хәҙер инде күҙҙәре лә насарая төшкән «Ауыл фартнуйы» яңы мөғәллим Ғәлләмгә өс көн тигәндә ни кәзәки, ни пинжәк түгел нәмә әтмәләп бирҙе. «Күмер һалып ҡыҙҙырыла торған өтөгөм боҙолған», тип Асия Вәлләм ҡарт заказын ойпалап тегелгән көйөнсә тотторол ҡайтарҙы.

Мөғәллим кейеп китәһе кейемде ҡарарға киске тамаҡ алдынан бөтә ғаилә йыйналды. Тубыҡ тиңенә етеп торған

бер яҡ салғыйлы ҡара сатин кәзәки кейеп ебәргәс, Ғәлләм бөтөнләй икенсе кешегә әйләнде. Өйҙәге кесе ҡыҙҙар ағаларының килбәтһеҙ яңы рәүешен күреп, шыҡы-шыҡы көләргә лә самалағайнылар, ләкин аталарының уҫал ҡарашы уларҙы бик йәһәт кенә үҙ урындарына ултыртты. «Өҫтө бөтөн булып, тәне күренеп тормаһа, ярар»ға өйрәнгән Вәлләм менән ҡатыны малайҙарының яурынына яңы кейем эленгәс, ҡыуанып бөтә алманы. Телдәрен шартлата-шартлата:

— Йә инде, Ғәлләметдинебеҙҙе һуңғы йылдарҙа бер кәррә лә үҙ күҙе менән күрмәгән кешегә сапсамай итеп килештереп тегеүен әйт тигән, ә? Ҡулы оҫта инде. Риуәлүтсиәнән алда бөтә яҡын-тирәгә ни кәзәкиҙе ул тегә торғайны бит, — тип тегеүсене, аяҡ-ҡулын ергә тейгеҙмәй, маҡтап алдылар.

Көнө-төнө тигәндәй алмашһыҙ кейеү сәбәпле хром ултырыштары ылбырап, сей елкәгә тейгән галифеһын һалып ырғытты ла, Ғәлләм яңы сатин салбарын кейеп күрһәтте. Стенала себен сыбарлап бөткән көҙгөнө алып, һикеләгә мендәргә һөйәп ҡуйҙылар. Сыбарланып бөткән көҙгө алдында Малбаҡты ауылының Ғәлләме түгел, яңы кәзәки, салбар кейгән бөтөнләй сит кеше баҫып тора ине.

Кейеп китергә тейешле ботинкаларының табаны ҡупҡан булып сыҡты. Уға өләсәһенең алҡымы йылтырай башлаған күн калушын тәҡдим иттеләр. Ләкин Ғәлләм ике аяҡҡа ла бер итеп тегелгән, хан заманынан ҡалған был ҡаталарҙан ҡырҡа баш тартты.

— Ҡатағыҙ үҙегеҙгә булһын, кеймәйем тигәс, кеймәйем, вот все, — тип киреләнде. Ғәлләмдең йәтеш кенә аяғына әсәһенең ике аяҡҡа ла бер төрлө тәпәш резина калушы ыҡсым ғына булды. Ә башына инде атлы башҡорт полкында егерменсе йылдар аҙағында Таджикстанда хеҙмәт итеп ҡайтҡан ике туған ағаһының зәңгәр селтәрле фуражкаһын кейҙерергә булдылар.

Ғәлләм был атлылар фуражкаһын да кейеп алғас, бөтә нәмә теүәлләнгән төҫлө тойолдо. Мендәргә терәлгән көҙгөлә ул ярым хәрби, ярым ауыл кешеһенең, ярты хәлфә, ярты мөғәллим фигуралы йәш егеттең рәүешен күрҙе. «Яңы кейем — яңы кейем инде, шулай ҙа тышҡы ҡиәфәт үҙгәреп тә китте бит әле», тип эстән генә шатланып ҡуйҙы Ғәлләм. Үҙенең тәү кейгән кейемен һынамаҡ өсөн, «ауыл йәштәре нисегерәк ҡабул итер икән» тигән ниәт менән ул тәүге репетицияға колхоз клубына, йәштәр кисәһенә йүнәлде. Бында ашығыуының башҡа мөһимерәк сәбәптәре лә юҡ түгел ине, әлбиттә... Ғәлләм өсөн был һуңғы кис ауыл йәштәре, үҙенең серҙәш дуҫтары, уны өҙөлөп көткән Мәстүрәһе менән хушлашыу ҙа көнө ине.

Клубҡа килеп ингәс тә, уны күптән күрмәгән, бөгөн-иртән хәрби комиссариатҡа саҡырыу ҡағыҙы күтәреп йөрөгән иптәштәре төрлө яҡтан уратып алдылар ҙа, баштан-аяҡ ҡарап сыҡтылар. Тик аранан үҙ кейеме менән маҡтанып, танау сөйөп йөрөгән бер егет кенә ауыҙын йырып:

— Һин, дуҫ кеше, бер ҡараһаң, мәҙрәсә хәлфәһенә, ә икенсе ҡараһаң, ауыл мөғәллименә тартымһың. Ә, ғөмүмән, ничауа, өҫтөңдә бөтәйткәнһең, — тип ҡуйҙы. Уның «мөғәллимгә» оҡшағанһың тигән һүҙе Ғәлләмде ҡанатландырып ебәргәндәй булды. Ул «мин былай ҙа мөғәллиммен, иртәгә дәдәңдәр уҡытырға китә», тип клуб яңғыратып, ҡысҡыраһы килде, ләкин өндәшмәне, әҙәп һаҡланы.

Таралышырға ваҡыт етә башлағас, уға һыйынып бөтә тәне менән егеттең тылсымлы йылыһын тойоп ултырған Мәстүрә һағыш тулған күҙҙәрен аҫтан өҫкә һирпеп ҡараны ла, ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйғас ҡаштарын яҙып:

— Ғәлләм, һине икенсе урыҫ ауылына уҡытыусы булып китә имеш, тип ишеткәйнем. Шул ысынмы, бушмы? — тип Ғәлләмдең ҡолағына бышылданы.

— Ысын, һин иртәгә рәхәтләнеп, татлы төштәр күреп, наҙлы йоҡлаған саҡта мин инде офоҡта һин күренмәй микән, тип артыма әйләнеп ҡарай-ҡарай Сағыл артылып барасаҡмын, — тине. — Айырылышабыҙ, бәғерем, — тип һағышлы ғына йылмайҙы. Ысын мөхәббәт хистәре тулған күҙҙәрен мөлдөрәтеп, остары өҫкә бөгөлгән оҙон керпегенең бөртөгөн дә ҡаҡмайынса Мәстүрә Ғәлләмгә текәлде. Уның керпек остарында ләйсән ямғырының көмөш тамсылары сағылып ҡалды.

— Бәхетһеҙ ғәзиз башҡайҙарымды тағы уттарға һалаһың икән? Белмәйем, йөрәгем ярһыуҙарын ниҙәр менән генә баҫырмын инде? — Ирендәре менән әкрен генә әйтелгән һөйөкләһенең был татлы һүҙҙәрен Ғәлләм ҡолағы менән түгел, йөрәге менән ишетте. Ул үҙе лә киләсәк айырылышыу һағышы ялҡынында дөрләп яна. Ләкин улар икеһе лә үҙҙәренең ҡайнар мөхәббәтенә тоғролоҡҡа оло һынауҙың алда торғанын һиҙмәйҙәр, тик берҙәй типкән ҡайнар йөрәктәре менән тоялар ине.

— Хат яҙ, һинең ялҡынлы сәләмдәреңде осоп килгән ҡоштар артынан өҙөлөп көтәсәкмен, йәме, — тип Мәстүрә һағышлы күҙҙәренең мөләйем ҡарашын Ғәлләмдән алманы.

Кисәләге йәштәр клубтан һуң ғына таралышты. Улар сығыуға, ҡара юрған кеүек болот ҡаплаған күктән ямғыр һибәләргә тотондо. Һөйләшеү буйынса Мәстүрә алданыраҡ сығып, Ғәлләм иптәштәре менән хушлашҡансы, клуб ҡойmаһы буйында көтөп торорға тейеш ине. Күк ҡабағы

тишелгәндәй ҡойоп яуа башлаған ямғыр бөтә кешене ышыҡҡа, өйҙәренә ашыҡтырҙы. Шул арала ғына лысма еүеш булып өлгөргән Ғәлләм ҡойма буйында уны ҙур түҙемһеҙлек менән көтөп торған Мәстүрәһе ҡосағына атылды. Уның нескә билен ҡыҫып торған зәңгәр бәрхәт камзулы өҫтөнән арҡаһына аҫылынып төшкән ауыр сәс толомдарын үҙ яурындары аша һалды ла, Ғәлләм Мәстүрәнең ҡайнар ирендәрен үпте. Ғәҙәттә, үҙенең бөтмөш тәбиғәте менән үбешеүҙе ят күргән Мәстүрә был юлы үҙенең ҡалҡып торған һығылмалы күкрәге менән Ғәлләмгә һыйынды.

Элегерәк Мәстүрә һәр саҡ: «Ошо Ғәлләм урыҫ ҡыҙҙары менән бергә уҡып, үбешергә яман өйрәнгән. Уңайы сыҡҡан һайын муйынға артылып үбешеүҙе көһәй ҙә тора. Беҙҙең йыныста үбешеү ғәҙәте юҡ. Оят нәмә ул», тип этәреп кенә ебәрә торғайны, ә бөгөн, үҙе лә һиҙмәҫтән, Ғәлләмен ҡосаҡлап алды. Уның эске тулҡынланыуҙан ут һымаҡ янған устарынан Ғәлләмдең ҡалаҡ һөйәге аша бөтә тәненә, тамырҙарына ниндәйҙер йомшаҡ, наҙлы эҫе йүгерҙе. Һөйгәненең үҙенә терәлгән ҡалҡыу күкрәге эсендә, ҡулға эләккән ҡошсоҡ кеүек, Ғәлләм ярһып типкән йөрәк һуғыуын тойҙо. Ул үҙен ошо минутта бөтә ғаләмдә иң бәхетле кеше итеп хис итте.

— Етер инде, бәгерем, хушлашайыҡ, — тигән ҡайнар тыны аша әйткән яғымлы һүҙе генә мөхәббәт диңгеҙендә донъяһын онотоп йөҙгән Ғәлләмде уятҡандай булды.

Улар киренән клубтың соланына инеп, элекке мәсеттең ҡатаханаһына стена ҡырына ҡуйылған эскәмйәлә ямғыр туҡтағансы һүҙһеҙ генә ҡосаҡлашып ултырҙылар.

Ғәлләм шым ғына өйгә ҡайтып инде лә, һикелә йәйелгән урынына тәгәрәне.

Салғыя ташы ашаһында күк йөҙөнә үҙенең нурлы алһыу уҡтарын сәсеп, сентябрь ҡояшының һырты күренгәндә ҡулына моҡсайға тығылған арыш өшәһе тотҡан Ғәлләм текә Ҡабаҡ үрен артыла башлағайны инде. Уның түбәһенә менеп еткәс, ул артына бер тапҡыр әйләнеп, ауылы яғына моңһоу, һағышлы ҡарашын төбәне. Клуб рәтенән түбән икенсе өй ҡыйығы өҫтөндә уны оҙатып, зәңгәр яулыҡ болғап Мәстүрә тороп ҡалған кеүек тойолдо.

## VII

Малбаҡтынан ҡырҡ-илле саҡрымда ятҡан Николаевка ауылына ул, юлда бер тапҡыр ҡуналҡа яһап, кеше иртәнге тамаҡты ашағас ҡына барып инде.

Калушын һалып, сылтырап ағып ятҡан тар ғына Йәнгел йылғаһын кисеп сыҡты ла, йыуынып, өҫ-башын таҙар-

тып алырға уйланы. Элекке көн ямғыр аҫтында тороп, еүешләнгән кейем менән клуб соланында Мәстүрә менән ҡосаҡлашып-һыйынышып ултырыу ярайһы ғына эҙ ҡалдырған. Уның салбар балаҡтары сырышып, противогаздың гофрирланған көпшәһе кеүек түңәрәкләнгән, гармун күрегенә әйләнгән. Кәзәкийенең салғый, еңдәре лә ныҡ ҡына таушалған булып сыҡты. Ҡырсын таш өҫтөндә сисенеп ташлап, ул еүеш устары менән таушалған кейемен һыпырғыланы, бысранған балаҡ остарын таҙартты. Бит, ҡулдарын ағын һыуҙа йыуып, сәсен тараны. Фуражкаһын ҡырынырак кейҙе лә, йылға ҡолағындағы тоноҡ һыу өҫтөндәге шәүләһенә ҡарап, тағы ла төҙәтенде.

Николаевка үҙенең тыуған ауылы Малбаҡтыға ҡарағанда башҡасараҡ булып сыҡты. Бында йорттар яңыраҡ та, бейегерәк тә. Йорт түбәләре күбеһе тигәндәй йылтыр ҡалай менән ябылған, ҡыйыҡһыҙ, тупаҡ өйҙәр, Малбаҡтылағы шикелле, асыҡ-ярыҡ, үтә атмалы кәртәләр бында бөтөнләй күренмәй.

Бейек, ике яҡҡа асылмалы таҡта ҡапҡалар, ныҡлы ағас ҡоймалар һәр йорттоң ихатаһын уратып алған. Ауылдың тышҡы күренеше үк бында хәлле кешеләр йәшәгәнен күрһәтеп тора.

Ул бер кемдән һорап та тормай, өҫкө урамға ҡапмаҡаршы тау битләүендә урынлашҡан, бейек нигеҙгә ҡоролған ҙур ағас бинаға йүнәлде. «Ауылда ошонан да ҙурыраҡ, бейегерәк йорт күренмәй, моғайын мәктәптәре ошолор», тип уйланы ла Ғәлләм туп-тура шунда йүнәлде. Бейек болдорҙоң ике яғындағы яҙыуҙы уҡығас, уның күңеле нишләптер иләҫ-миләҫ булып китте, ҡапыл тулҡынлана башланы. Киң коридорға барып ингәс, уң ҡулдағы мөйөштә ҡуйылған кеше бейеклеге көҙгөгә яҡын килеп, тағы ла, һуңғы тапҡыр, өҫ-башын төҙәткеләне, ҡулындағы буш моҡсайын йомарлап кеҫәһенә тыҡты.

Ҡулы бушаған Ғәлләм һыпайланып, коридор буйлап китте. Ишектәге класс һандарын ҡарап сыҡты. Бына ул уҡытасаҡ алтынсы-һигеҙенсе кластар. «Алтынсы, етенсе кластар икешәр икән», тип уйланы Ғәлләм. Ишек аша уҡытыусыларҙың, һорауҙарға яуап ҡайтарған уҡыусыларҙың тауыштары ишетелеп ҡала. Уларҙың тауыштарына ҡарап, ҡайһы класс бүлмәһендә ниндәй дәрес барғанлығын төҫмөрләү ауыр түгел. Ләкин бер класта ла уҡытыусының таҡтала математиканан йәки алгебранан мәсьәлә сискәне, дәрес аңлатҡаны ишетелмәй. «Был кластарҙа хәҙергә математика, физика алып барыусы уҡытыусылар юҡ. Тимәк, мине көтәләр инде», тип Ғәлләм бер аҙ ғорурланып та ҡуя. Стенала сылтлап һуғып торған сәғәткә ҡарап, Ғәлләм: «Был икенсе дәрес булырға тейеш, тәнә-

феске ҡәҙәр ун биш минут бар әле», тип уйланы. Ишектәге «Директор», «Уҡытыусылар кабинеты» тип яҙылған һүҙҙәрҙе уҡығас, ишек асып башын тығып ҡарарға ла уҡталғайны. Ләкин ул үҙ-үҙен тыйып ҡалды. «Нисек инде ул, коридорҙа шаярып йөрөгән балалар шикелле, ишек асып кабинетҡа башын тығып торһон? Уҡытыусы кешегә килешә торған һөнәр түгел, хәҙер инде, иптәш Яуымбаев, үҙ дәрәжәңде белергә ваҡыт», тип ул үҙ-үҙе менән һөйләшеп алды.

Дәрестәр расписаниеһын ҡарап, мәктәп директорының фамилияһы Сафин, ә уҡытыу бүлеге мөдире Саперов икәнен белде. «Сафин ағай үҙе лә физик-математик икән, улай булғас, эш бешәсәк. Иркенсе аҙна башында уның да дәрестәре башланасаҡ икән, ә минең дәрестәрҙе иртәгәнән башлап планлаштырғандар, тик минең фамилияны ғына ҡуймағандар, асыҡ урын ҡалған. Ничауа, белмәһәгеҙ тиҙҙән белерһегеҙ, директорҙың үҙе менән ярыша-ярыша уҡытабыҙ икән», тип Ғәлләм расписание алдында байтаҡ ҡына хыялланып торҙо.

Иртәгә етенсе класҡа беренсе тапҡыр аяҡ баҫып, дәресте нисегерәк башлап ебәререн күҙ алдына килтерҙе. «Моғайын мине был класҡа башлап директор үҙе алып инер. Балалар менән таныштырыр ҙа сығып китер, йәки мин башлап ебәргән беренсе дәресте тыңлап ултырғыһы килер. Бөгөн үк программа табып, Киселев дәреслегенән ниндәй тема үтеүҙе билдәләп, ныҡ ҡына әҙерләнеп килергә кәрәк. Минең ниндәйерәк математик икәнде балалар беренсе дәрестән үк һиҙеп алырға тейештәр, тик йомшаҡлыҡ күрһәтергә ярамай, атайым әйтмешләй «ир кеше ҡатыңҡы булырға тейеш».

Ошондай тәмле хыялдарға бирелеп, Ғәлләм коридор буйлап, класта дәрес аңлатҡан уҡытыусыны күҙ алдына килтереп, күрәһең, стеналағы сәғәткә күҙ һалырға ла онотоп ебәргән. Ҡапыл 5-се кластың ишеге асылып китте лә, бәләкәй генә бер ҡыҙ бала ҡулына ҡыңғырау тотоп, коридор буйлап йомғаҡ шикелле тәгәрәп үтте. Башта эре генә баҫып, ҡулдарына журнал тотҡан уҡытыусылар үтеп китте. Улар тәҙрә яҡтауына һөйәлеп торған ят кешегә һирпеп кенә ҡараш аттылар ҙа, һөйләшә-һөйләшә уҡытыусылар бүлмәһенә инеп киттеләр. Тәнәфескә сыҡҡан уҡытыусыларҙан бер кем дә директор ишеген асып инмәгәс, Ғәлләм бер уҡыусы баланы туҡтатып:

— Директорығыҙ ҡайҙа? — тип һораны. Ул бала артыҡ уйлап торманы, ялт-йолт итеп, кабинет ишеген асып ҡараны.

— Директор эшендә юҡ, белмәйем ҡайҙалыр, — тине лә яурындарын һикертеп, йүгереп китеп барҙы.

Күп тә үтмәй бер нисә, яҡшы кейенгән, Ғәлләмдән аша ҡарап торған өлкән класс уҡыусылары яҡтауға һөйәлеп торған ауыл малайын юрый яурындары менән төртөп үтеп китте. Өҫтөнә шевиот костюм кейгән, иң артта барған мыҡты уҡыусы башын бороп Ғәлләмгә һөҙөп ҡараны ла унын алдына килеп баҫты. Иң башта был яуызлыҡ уйлай торған малайҙы Ғәлләмдең ала-сола өҫтө-башы ҡыҙыҡһындырҙы. Ул ҡапыл бер ни көтмәгән Ғәлләмдең башындағы зәңгәр тирәсле мәҙәк фуражкаһын һуғып осорҙо. Ә башҡа малайҙар коридор буйлап барған фуражканы асыҡ ишектән типкеләп урамға алып сығып киттеләр. Үҙе тураһында йәмле хыялдар ҡосағында уйланып торған Ғәлләм, ғәрлегенән ни эшләргә лә белмәй, мәктәп ихатаһында туп урынына тәгәрәп йөрөгән фуражкаһы артынан йүгерҙе. Теге аҙғын малайҙы ҡыуып етеп, түбәһе йыртылған фуражкаһын тартып алды ла, илау ҡатыш ҡалтыранған тауыш менән:

— Я же ваш учитель! — тип ҡысҡырҙы.

Ә тегеһе, ғәжәпләнеүҙән зәңгәр күҙҙәрен шар кеүек тәгәрәтеп:

— Какой х... ты учитель? Һин беҙҙе нимәгә уҡытырға килдең? — тип ауыҙ йырҙы.

— Мин һеҙҙе физика-математиканан уҡытасаҡмын, — тип яуап бирҙе иламһыраған Ғәлләм.

Ә теге малай:

— Эй, килегеҙ әле бында, беҙҙең мәктәпкә әбейҙәр калушы кейгән Ньютон килеп сыҡҡан, — тип иптәштәрен саҡырҙы. Әллә ҡайҙан килеп пәйҙә булған өҫтө-башы мәҙәк «уҡытыусы»ны башҡа малайҙар уратып алды.

Ошо минутта ҡулына портфель тотоп, йүгерә-атлай килгән олпат кәүҙәле бер кешене күреп, малайҙар ел өрөп осорғандай, төрлөһө-төрлө яҡҡа йүгерешеп таралды. Был ашығып килгән кеше мәктәп директоры Сафин иптәш үҙе булып сыҡты. Ул ҡалын быялалы күҙлеге аша Ғәлләм һонған документты күҙ йүгертеп кенә ҡарап сыҡты ла:

— Д-а-а-а... — тип бер ни өндәшмәй һуҙып Ғәлләмде баштан-аяҡ күҙ ҡарашы менән байҡап сыҡты. Уның киң яңаҡлы битендә көләмһерәү сатҡылары төҫмөрләнеп ҡалғандай булды.

— Әйҙә, ҡусты кеше, кем булды, әле һинең фамилияң? — тип артына әйләнеп тағы бер ҡараны ла, әле яңы ғына кисергән ваҡиғанан күңелһеҙ генә торған Ғәлләмде үҙ артынан эйәртеп алып китте.

Кабинетына килеп ингәс, директор портфелен өҫтәл ҡырына лыпын һалып, күн менән тышланған креслоһына сумып ултырҙы ла, алдында баҫып торған малайға текәлде. Үҙенә генә мәғлүм «да»һын яңынан ҡабатланы. Бер аҙ уйланып ултырғандан һуң:

— Бына, ҡустым, нәмә? Билдәле, миңә һинең хаҡында шылтыратып Сәғәҙиев ағай күптән әйткәйне лә ул. Һинең бик башлы математик һәм физик икәнлегең дә миңә күптән мәғлүм. Ләкин ул бер нәмәне хисаплап еткермәгән. Быңдағы халыҡ элек-электән бик етеш, мул йәшәй. Уларҙың уҡыусы балалары ла беҙҙең ауылдарҙағы кеүек, өҫтәренә алам-һалам, ни етте шуны кейенеп йөрөмәй. Мынауы, бик тә мөсһөҙ өҫ-башың әҙерәк эсте бошора бит әле. Бынан тыш, элек, нигеҙҙә, кулактар йәшәгән был ауылда беҙҙең халыҡҡа быуындан быуынға ҡала килгән насар мөнәсәбәт тә бөтөп етмәгән. Ошо рәүешең менән дәрес үткәрәм, тип класҡа килеп инһәң, уның аҙағы ни менән бөтөүенә бер ҙә баш етмәйерәк тора әле, — тип бик сурытып һөйләп алды.

Эштең ҡайҙа барғанын бер аҙ һиҙемләп, аңлап өлгөргән Ғәлләм турая биреп, кәзәкийенең итәктәрен тартҡылап алды ла:

— Мин уҡытырға китәм тип, бөтә ауылға йәүкәләп, иптәштәрем менән хушлашып килгәйнем бит әле. Етмәһә, элекке эшләп йөрөгән еремдән «уҡытырға китәһең» тип ошо ҡағыҙ менән саҡыртып алғайнылар, — тип ул директорҙың алдында уның һуңғы һүҙен көтөп ятҡан мисәтле ҡағыҙға төрттө.

— Уныһы шулай ҙа ул, ләкин... — тип директор үҙ фекерен ярты юлда өҙҙө.

Бер аҙ уйланып ултырғас, ул ҙур ҡыйынлыҡ менән генә урынынан торҙо ла, стенаға беркетелгән һары телефондың тотҡаһын зырлатып әйләндерергә кереште. «Почта, почта, Кускарово!» тип бөтә көсөнә ҡысҡырып, билдәһеҙ кемгәлер мөрәжәғәт итте. Асыуынан нишләргә белмәгән директор, итләс ике уртын тумпайтып «тфу...» тип көрһөнөп алды. Бер аҙ ял итеп алғас, ул ҡыҙара-бүртеп яңынан телефон тотҡаһына йәбеште. Быға ҡарап торған Ғәлләм аяҡтарын алмашлап баҫты ла, үҙ уйына сумды. «Ошо телефон аппаратында ниндәй физик процесс хасил булғанын был ағай, моғайын, белмәйҙер әле? Ул телефон тотҡаһын бороп, генераторҙың якорен әйләндерә. Ә уның хәрәкәтенән генераторҙа электрик ағым барлыҡҡа килә. Ә һуңынан был электрик ағымдың тирбәлеүе ҡуйылған мембрана ярҙамында тауыш булып ишетелә», тип яҙмышының нисек тамамланыуын ваҡытлыса онотоп, Ғәлләм телефон аппаратының төҙөлөшө тураһында уйлай. Ыҙалана торғас, мәктәп директорын РОНО мөдире менән тоташтырҙылар шикелле. Уның йөҙө яҡтырып китте.

— Ә, Сәғәҙиев ағаймы? Һаумыһығыҙ? Теге һеҙ ебәргән егет килеп етте. Шунан тип ни, шул инде. Уның башында ни барын белгән юҡ. Ләкин ул егеттең өҫ-башы мөсһөҙ

булып сыҡты бит әле. Кәүҙәһен инде уның хоҙай биргән, бер ни ҙә ҡылып булмай... Мин был тиклем хөрт булыр, тип уйламағайным бит әле. Ҡайҙа, тип ни, бына әле минең алда ялан баш баҫып тора. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы — ул егет, пожалуй, бында уҡытыусы булып эшләп килештерә алмаҫ... Тәҡдим тип ни, берәр бәләкәйерәк мәктәпкә тәғәйенләп, эшләтергә мөмкин булыр, тип уйлайым.

Быларҙың үҙ-ара һөйләшеп торғанын тыңлап торған Ғәлләмдең күңелен оло ҡайғы-хәсрәт солғап алды, киләсәктә уҡытыусы булыу теләген үҙенең йөрәк түрендә йөрөткән Ғәлләмдең яҡты хыялы ошо минутта өрөп тултырған һабын ҡыуығындай шартланы. Мәктәп һарҡыуына тәгәрәп барған үҙ фуражкаһы уның күңелендә мәңге йөрөткән яҡты хыялын да үҙ артынан мәңгегә эйәртеп алып киткәндәй тойолдо.

— Ярар, ярар, Сәғәҙиев ағай. Ебәрермен. Эйе шул. Мин үҙем артабан был мәктәптә эшләргә ҡалһам да, бер хәл булыр ине, минең эргәлә, үҙемдең ҡарамаҡта бәлки эшкә өйрәнеп тә китер ине, ләкин, үҙегеҙгә мәғлүм, минең ҡулда ла хәрби комиссариат повесткаһы бит, иртәнән һуңға теге ханыма эште тапшырып, мәктәп менән бөтөнләй хушлашам инде. Һау булығыҙ, Сәғәҙиев ағай!

Был хәбәрҙең ахырын ишетеү Ғәлләмгә үҙенә ҡарата сығарылған суд ҡарары һымаҡ тойолдо. Шундай яҡты өмөттәр менән башланған үҙ яҙмышының ошолайтып, уйламағанда селпәрәмә килеүе уға үтә нығ тәьҫир итте, уның башында төрлө сырмалсыҡ күңелһеҙ уйҙар буталды.

— Бына шулай, Яуымбаев ҡустым, миңә һинең менән парлашып, ярыша-ярыша физика, математика уҡытырға насип булманы. Ни хәл итәһең? Ил өҫтөнә мынауындай ҡәһәрле дошман ябырылған саҡта ни йөҙөң менән ауылда уҡытыусы булып ятмаҡ кәрәк? Беҙҙең урын тегендә, Ҡыҙыл армияның ен-яға килеп немец менән алышҡан урынында, — тип директор ҡулын көнбайышҡа һуҙып күрһәтте. — Ничево, бына дошманды дөмөктөргәс, физмат уҡытырға беҙгә лә насип булыр әле, — тип көлөмһөрәне. — Ә хәҙер инде, ҡустым, РОНО-ға, Сәғәҙиев ағайыңа юл тот. Ул һине икенсе мәктәпкә тәғәйенләр. Ярай, Яуымбаев иптәш, бөйөк еңеүҙән һуң ошо мәктәптә яңынан осрашҡанға тиклем, — тип ул үҙенең йомшаҡ ҡулын һуҙҙы.

Ләкин Ғәлләм районға килеп еткәс, мәғариф бүлегенә түгел, комсомолдың район комитетына инеп, үҙе теләп Ҡыҙыл армияға китеү тураһында ғариза бирҙе.

Ике көндән С. М. Буденный исемендәге Ҡыҙыл байраҡлы хәрби кавалерия училищеһына китеү хаҡында ҡулына повестка тотоп, Ғәлләм Малбаҡты ауылына яңынан ҡайтып төштө. Ошоноң менән үҙ киләсәген уҡытыу-

сылыҡ менән бәйләргә тигән йөрәк төрендә ҡәҙерләп йөрөткән яҡты өмөтө мәңгегә һүнде. Уның онотолмаҫ иҫтәлеге булып, йәндәй дуҫы Абдрахмандың һуңғы яҙған ҡош телендәй яҙыуы ғына тороп ҡалды.

## VIII

Директорҙың «аҙаҡҡы һүҙ хеҙмәт һәм һуғыш ветераны, боевой һәм хеҙмәт ордендары кавалеры Ғәләм ағай Яуымбаевҡа бирелә» тигән һүҙе бынан ҡырҡ йылдан артыҡ ғүмер үҙе ултырып уҡыған партаһында, класс бүлмәһендә бороллмалы тормош юлының күгелйем томан ҡаплай башлаған тәүге аҙымдары хаҡында тәрән хәтирәләргә бирелеп, онотолоп ултырған ҡартты бөгөнгө көнгә килтереп баҫтырҙы. Ул, яңы ғына йоҡоһонан уянған кеше шикелле, яңағына ҡаранды, кейемен төҙәткеләп, түшендәге орден-миҙалдарын рәтләне. Әкрен генә тороп, башҡа кешеләр һөйләгән урынға, таҡта ҡырына баҫты ла, ошо хәтирәләргә дусар иткән үҙенең класс бүлмәһенә яңынан күҙ йүгертеп сыҡты.

Һүҙен башларҙан алда Ғәләм ҡарт өҫтәл ҡырында яңағына таянып, «Был бабай тағы ни һөйләр икән» тигәндәй үҙенә теклəп ултырған директорға эйәк ҡаҡты. Ләкин директор уның һүҙһеҙ генә ымлап өндәшеүен аңламаны. Ҡарт әкрен генә:

— Директор иптәш, балалар менән әңгәмәне ҡайһы телдә алып барайыҡ? — тип һораны.

Унан алдағы кешеләр белер-белмәҫ руссаһы менән әтмәләп, йырып-йыртып башлағас, директор һис бер икеләнергә урын ҡалдырмайынса, һүҙенә етдилек өҫтәп:

— Билдәле, урыҫ телендә. Мәктәптә бөтә программа урыҫ телендә алып барыла ла баһа, — тине. Ҡарттың урынһыҙ һорауына ризаһыҙлыҡ белдергән шикелле:

— Ул тағы ла ниндәй яңылыҡ? — тип өҫтәне.

Директорҙың, мәктәп балалары менән һөйләшкән шикелле, ашараҡ ебәреп, текәрәк бәрелеүе ҡарт күңелендә ниндәйҙер төйөн ҡалдырҙы.

Уяна башлаған асыуын баҫырға тырышҡандай:

— Яңылыҡ тип ни, бында артыҡ яңылыҡ юҡ та юғын, тик егерменән артыҡ бала уҡыған класығыҙҙа мин урыҫ кешеләренән, уҙа барһа ике бала һананым. Ҡалғандары шул барыһы ла беҙҙең күрше-тирәләрҙәге ауылдарҙан йыйылған балалар түгелме һуң? Үҙ балаларыбыҙ менән дә урыҫса һөйләшеп ултырайыҡмы ни инде? — тип һалды.

— Эйе, Ғәләм ағай, үҙ балаларығыҙ менән дә урыҫ

телендә һөйләшәсәкһегеҙ, — тип, мисәт баҫҡан шикелле, һәр бер һүҙҙе айырым-айырым һуҙып, аныҡлап бирҙе директор.

Ике оло кешенең үҙ-ара килешә алмай дәрес ваҡытында һүҙ көрәштереүе балаларҙа бермә-бер ҡыҙыҡһыныу уятты. «Ҡайһы яҡ еңер икән?» тигәндәй балалар шымып ҡалды. Был килеп тыуған уңайһыҙлыҡтан тиҙерәк ҡотолоу өсөн, был үҙ һүҙле еңмеш ҡарттың аяҡ терәп талашырға ла әҙер икәнен тойоп, директор ҡулын һелтәне.

— Әйҙә, Ғәлләм ағай, бушҡа ваҡыт үткәрмәйек, ниндәй телдә теләйһең — шул телдә һөйләүеңде бел, — тип, бөтөнләй үпкәләгән кеше шикелле ултырғысын балаларға ҡарап борҙо ла, ҡартҡа һырт бирҙе. Был инде сырайы һытылған мәктәп хужаһының алдында ултырған уҡыусыларға өнһөҙ генә мөрәжәғәте ине. Һиҙгер балалар үҙ уҡытыусыһының эске теләген шундуҡ эләктереп алды — класта уны яҡлап шау-шыу ишетелде. Мыҡты кәүҙәһен «адидас» свитеры ҡыҫып торған, тырпайған сәсле бер малай торҙо ла:

— Дед, беседаңды урыҫ телендә алып бар. Беҙ башҡортса не волокем, — тине. Инде Ғәлләм ҡартҡа үҙ һүҙен урыҫса башлауҙан башҡа әмәл ҡалманы.

— Ҡәҙерле балалар! — тине ул үҙ һүҙенең башында. — Мынан ҡырҡ йыл элек мин ошо һеҙҙең мәктәбегеҙҙе тамамлап сыҡҡан кеше. Ул ғына ла түгел, ошо класта, әле генә мин торған парта артында ултырып уҡыған кешемен мин.

— Вот это да!

— Вот дед дает! — тигән тауыштар ишетелеп ҡалды. Балалар араһынан кемсһелер, күрәһең, бер сабырһыҙылыр инде:

— Ә нишләп беҙ ул хаҡта бер ни ҙә белмәйбеҙ? — тип иптәштәренә берәм-берәм ҡарап алды.

Һүҙен артабан дауам итергә теләгән ҡарт тамағын ҡырҙы ла:

— Унынһы уландар, беҙгә мәғлүм түгел инде, әммә бөтөүебеҙ хаҡ. Һуғыш башланған йылда унынсы класты тамамлаусылар был совхозда мин генә түгел.

Ҡарттың был һүҙе ошо мәктәптә байтаҡтан директор вазифаһын башҡарған Имелбаев өсөн ҙур яңылыҡ ине. Ул ҡарттың был һүҙе үҙенә килеп төртөлгәндәй, ғәйепле кеше шикелле, ултырғысын шығырлатып, урынында ҡуҙғалып ҡуйҙы. Уның тулы битенә һиҙелер-һиҙелмәҫлек кенә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе.

— Балалар! Бына бөгөн һеҙҙең директор ағайығыҙ беҙҙе Тыныслыҡ дәресе үткәрергә саҡырған. Ауыл ҡарттарын кешегә һанап саҡырыуы өсөн ҙур рәхмәт инде, — тип ул

яңынан Имелбаевҡа ҡараны, унының битендәге ҡыҙыллыҡ һаман бөтөп етмәгәйне әле. Ҡарт бер аҙ һүҙһеҙ торҙо ла, үҙенең ҡата башлаған кәүҙәһен ҡапыл турайтты, унының орден-миҙалдары зыңлап ҡуйҙы.

— Ни һуң ул — тыныслыҡ? Уны нисек аңларға? — тигән беҙҙең алда һөал тыуа. Һеҙҙең ҡайһы берҙәрегеҙ тыныслыҡты, бәлки, үҙ теләгеңдә күктән өмөт итеп, ҡул ҡаушырып, тыныс ҡына тик ятыу тип фараз итә торғандыр. Әгәр улай уйлайһығыҙ икән, уландар, ҡыҙҙар, бөкилле яңылыш. Тыныслыҡ һүҙе — бик тә мәғәнәле, оло һүҙ. Ул — йәнеңә лә, тәнеңә лә һис тынғы бирмәй, ил йөгөн иңеңә һалып, Ватаныңа тоғро хеҙмәт итеү, һәр икебеҙгә тәғәйен эште, выжданыңа тап төшөрмәй, урын еренә еткереп башҡарыу тигән һүҙ. «Ялан» совхозын төрлө яҡлап үҫтереү, унының иҡтисадын нығытыу — ил ҡеүәтен нығытыу менән бәрәбәр. Бына ни нәмә ул тыныслыҡ! — тине лә ҡарт һыртында ҡан тамырҙары күгәреп, ташып шартлаҙай булып торған көрәктәй ҡулын өҫкә күтәрҙе. Ул һүҙен дауам итте. — Үҙ хеҙмәтебеҙ менән илде нығытып, унының ҡеүәтен арттырып ҡына тыныслыҡ өсөн көрәшеп була. Тыныслыҡ — тырыш хеҙмәт, тырыш хеҙмәт — тыныслыҡ өсөн көрәш. Был ике һүҙҙең мәғәнәһе берҙәй.

Беҙ көсһөҙ, фәҡир ил булһаҡ, Америка беҙгә иртәгә үк суҡмарын һөйрәп килеп ябырылырға тора. Ә инде һеҙҙең өсөн, балалар, тыныслыҡ өсөн көрәш — төплө ғилем алыуҙан, яҡшы уҡыуҙан ғибәрәт. Мөғәллимдәрегеҙ биргән һабаҡты яҡшы үҙләштереү, яҡшы уҡырға тырышыу — ул үҙе оло хеҙмәт. Төплө ғилем — һеҙҙең киләсәгегеҙҙең ныҡлы нигеҙе. Тик ғилеме бар кеше генә бөгөнгө ҡатмарлы техниканы йүгәнләп, уны кеше файҙаһына эшләтә ала.

Ҡарт ошо урында: «Иптәш директор, минең һүҙ хилаф түгелме?» тигән шикелле уға ҡарап алды. Һүҙен хуплап, директорҙың эйәк атҡанын күреп, ҡарт һүҙгә тағы ла дәртләнеберәк кереште.

— Бына бәләкәй генә бер миҫал алайыҡ. Беҙҙең совхозда бик тә ғәйрәтле, һабан туйҙарында бил бирмәгән Ғөбәйт исемле көрәшсе бар, уны, бәлки, белә лә торғанһығыҙҙыр?

Балалар бер тауыштан:

— Беләбеҙ, беләбеҙ! Ул быйыл да һабан туйында беренселекте алып ҡайтты, — тип ҡысҡырҙы.

— Ә шул Ғөбәйт бәһлеүәндең берәр ваҡыт кеше менән яғалашып, һуғышып йөрөгәнен күргәнегеҙ бармы? — тип ҡарт хәйләкәр генә тағы бер һорау ырғытты.

— Юҡ, ул көслө лә инде, ҡурҡмай, уға кем йәбешһен, — тиеште әңгәмәнән бер аҙ йәнләнә төшкән балалар.

— Мына шулай шул. Совхоздың ҡайһы бер ҡулы

ҡысып, ҡайҙа барып бәрелергә белмәй йөрөгән һуғыш суҡмарҙары уны күреү менән йөҙ таяҡ урап үтәләр, сөнки уның менән йөҙгә-йөҙ килеп, осрашыуҙан шөрләйҙәр. Ә шул көрәшсе Ғөбәйттең совхозда нисек эшләгәнен беләһегеҙме? — тип ҡарт тағы һорап ҡуйҙы.

— Беләбеҙ, беләбеҙ. Уның фотоһы йыл һайын контора ҡаршыһында «Почет таҡтаһы»нда тора.

— Ул үткән йыл халыҡ хужалығы күргәҙмәһенән бүләккә «Москвич» машинаһы алып ҡайтты.

— Беҙҙең ил менән дә ошоға миҫал. Бөтә башҡа капиталистик мәмләкәттәр әллә беҙҙең илде яратып, ҡосаҡлашырға ашҡынып торалар, тип уйлайһығыҙмы? Нисек тә шулай булмаған! — Ҡарт урынына балалар яуап бирҙе.

— Юҡ, конечно.

— Дөрөҫ.

— Һеҙгә лә әйтәһе һүҙем шул ине. Программаны ныҡлы үҙләштереп, фән нигеҙҙәренә эйә булһағыҙ, һеҙҙән киләсәктә яҡшы механизаторҙар, төплө инженерҙар, белемле врачтар, ғөмүмән, уҡымышлы, ниндәй эште ҡушһалар ҙа намыҫ менән атҡарып сыға торған кешеләр сығасаҡ. Әгәр инде бөгөн мәктәптә илке-һалҡы уҡып сыҡһағыҙ, киләсәктә «иҫәпкә бар, һанға юҡ» белгес булып сығасаҡһығыҙ. Ундай һөнәр эйәһенән илгә лә, ергә лә бер ниндәй ҙә фәтеүә юҡ — ни аллаға, ни муллаға. Ә бит һеҙҙе уҡытып сығарыу өсөн хөкүмәт күпме сәрмәйә түгә. Ул үтескә алған аҡсаны ҡасан кире ҡайтармаҡ кәрәк?

Тәнәфес яҡынайғанын һиҙеп, парта артында ултырған балалар, команда биргән шикелле, берәм-берәм ҡулдарындағы сәғәттәренә ҡарап алды.

— Бына әле һеҙҙең барығыҙҙың да сәғәттәрегеҙгә күҙ йүгертеп алыуығыҙҙы күҙәтеп торҙом. Ғәжәп бит, балалар, — тип ҡарт һүҙен дауам итте. — Беҙ уҡыған мәлдәрҙә ана теге коридор уртаһында, — тип ҡарт ҡулын һуҙып күрһәтте, — ике тәҙрә араһында бөтә мәктәпкә бер генә сәғәт сылтлап һуғып торор ине. Мәктәп шул яңғыҙ сәғәткә ҡарап эш итте. Дәресен дә шуға ҡарап, тәнәфесен дә шуның буйынса яһар инек. Ә сынйырлы кеҫә сәғәте — мәктәптә бер генә кешелә, мәрхүм директорҙа ғына булыр ине. Ә хәҙер һеҙҙең барығыҙҙың да ҡулында ялтырап торған сәғәт.

Тәнәфестән һуң Ғәлләм ҡарт үҙ әңгәмәһен дауам итте.

— Балалар! Был тормош һәр саҡ ошо бөгөнгө кеүек етеш булған, ашау-эсеү ҙә бөгөнгөләй алдан-арттан ҡалғансы, кешеләр һәр саҡ ни теләһә шуны кейеп йөрөгәндәрҙер, тип уйламағыҙ. Бөтәһенә лә бик тә мохтаж саҡтар бар ине. Бына бөгөн генә беҙгә директор иптәш алма баҡсаһын, һеҙ бушлай ашай торған ашхананы күрһәтте. Ҡайҙа

ҡарама, шунда муллыҡ, ризыҡ тәгәрәп, исраф булып ята. Ай, балалар, ашау-эсеүгә бик тә наҡыҫ саҡтар бар ине бит. Бына һеҙҙең ошо коридорығыҙҙың башында балаларға һатыу өсөн көнөнә бер тапҡыр кәбеҫтә пирәжкәһе килтергән булырҙар ине. Шул саҡтағы утыҙ тинлек, әскелтем еҫе бөтә коридорға таралған баяғы пирәжкәне һатып алырға ла аҡса табалмай, ауыҙҙың һыуы ҡойолоп, мөлдөрәп ҡарап торған саҡтар бар ине. Ә һеҙ хәҙер буш һалып биргән ашты ашамай исраф итәһегеҙ. Әҙәм балаһы өсөн аслыҡтан яфа сигеүҙән дә ауыр яза юҡ, ләкин беҙгә үтә туҡ булыу ҙа килешеп етмәй, күрәһең.

Арыш икмәгенең тәмен татып ҡарамайынса, бойҙай икмәгенең тәмен белеп булмаған шикелле, аслыҡты үҙ елкәһендә татып ҡарамайынса, туҡлыҡтың ҡәҙерен белмәй әҙәм балаһы.

Бөгөнгө етеш тормош — ул һеҙҙең быуындың, һеҙҙең ата-бабаларығыҙҙың ас-яланғас, тир түгеп, алды-ялды белмәй эшләгән хеҙмәтенең емеше. Киләсәк быуындың яҡты бәхете өсөн күп ирҙәр үҙҙәренең башын һалды, үҙ ғүмерҙәрен юйҙы. Был байлыҡ, һеҙҙең әкиәтегеҙҙәге һымаҡ, суртан әмере буйынса ғына күктән төшмәгән. Бына һеҙҙең кабинеттарҙа нисә төрлө приборҙар, станоктар, күпме иҫәпләп сығарыу техникаһы һәм башҡа ҡыйбатлы йыһаздар тупланған. Улар барыһы ла халыҡтың эшләп тапҡан малы, унық бер генә осмото ла буштан килмәгән, мәктәп милкенә үҙегеҙҙең әйберҙәрегеҙгә ҡараған кеүек иғтибарлы, һаҡсыл булығыҙ, сөнки ул оло быуындарҙың кисәге хеҙмәтенең нәтижәһе.

Балалар! Тағы һеҙгә әйтергә теләгән һүҙем шул. Бөтәбеҙҙе уратып алған байлыҡ, халҡыбыҙҙың даръялай ҡаҙаныштары һәммәһе лә тәбиғәт емеше, унық сығанағы беҙҙе уратып алған мөхиттә, тәбиғәттә. Ләкин беҙҙе ашатып эсергән, кейендергән, домналарға тимер рудаһы, күмер, беҙҙең өйҙәребеҙҙе йылыта, аш бешерә торған газ һәм меңәрләгән машиналарҙы хәрәкәткә килтереүсе бензин, меңәр саҡрымдарға тимер сыбыҡ буйлап тапшырылған электр ағымы биргән тәбиғәткә беҙҙең ҡарашыбыҙ нисек һуң? Насар, балалар, бик тә насар. Миҫалға ошо үҙебеҙҙең совхозды алыу ҙа етә.

Бынан ҡырҡ-илле йыл элгәре ошо һеҙҙең мәктәбегеҙ ҡаршыһында, йылға ашаһында сәскәләргә күмелгән йәм-йәшел туғай йәйрәп ятыр ине. Ауыл халҡы уны быуат башында кәйлә, көрәк ярҙамында, ҡул көсө менән быуа быуып, шул туғайға һыу сығарған, һыу тирмәне эшләткән. Заманында ул иң данлыҡлы тирмән ине, ярма яра, тары, һоло әрсей торғайны. Унық тарткан ононан кырандастың алғы тәгәрмәсе дәүмәлендәге яҫтыҡ һымаҡ

күпертеп, уңған ҡатындар икмәк һалыр ине. Тирмән эргәһендә — күккә олғашҡан тирәктәр, ә аҫ яғында әҙәм үтә алмаҫлыҡ йәшел тал үҫте. Ә йылғала төрлө балыҡтың мыжғып ятыуы хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ. Ярты сәғәт эсендә ҡәҙимге үрелгән күреп менән биҙрә-биҙрә балыҡ һөҙөп алыр ине ауыл халҡы. Ошо ус аяһындай туғайҙа элгәрерәк ауыл халҡы, һуңынан «Ҡыҙыл ялан» колхозы илле кәбән бесән ҡойоп ултырта торғайны.

Бынан утыҙ йыл элек, ошо совхоз ойошторолған йылдарҙа, ниндәйҙер агрономдың ҡулы барып, шул йәйрәп ятҡан туғайҙы һөрҙөрөп ҡуйҙы, ләкин ул майҙан хөкүмәткә бер ҡаҙаҡ та иген бирмәне. Һуңынан ул ер тоҙланып, бөтөнләй эшлектән сыҡты, ырҙын табағы шикелле, совхоздың тапанды саңдауына әүерелде. Бына шуға нисек йөрәгең әсенмәһен, уны беҙҙең ата-бабаларыбыҙ көс түгеп, бына беҙҙең өсөн эшләп ҡалдырғандар бит, элгәрерәк, игенде әҙерәк сәскән осорҙа, уларға ҡышлыҡ бесән сабып алырға мынауы даръя һымаҡ ятҡан яланда урын етмәгәнме ни? Юҡ, улар бына беҙҙең турала ҡайғыртҡандар.

Хәҙер шуны, ошондай көслө техника бар заманда, төптәнерәк уйлап яңынан туғайға әйләндерергә кәрәк, тип уйлап торам мин ошо тороуымда.

— Беҙгә, олатай, һинең ул туғайың кәрәкмәй! — тип ҡысҡырҙы бер бала.

— Ни өсөн? Нишләп кәрәкмәй?

— Сөнки беҙҙең совхоз кукуруз сәсә лә үкертеп, дуғалы ат бейеклеге уңыш ала.

— Әй, улым, улым, ҡана һуң совхозыбыҙға бөгөн бер йөҙ кәбән туғай бесәне булһа, — тип ҡарт әҙерәк уйланып торҙо ла, үҙ-үҙе менән һөйләшкәндәй ситкә ҡарап һүҙен дауам итте. — Дымды дым тарта, улым. Әгәр беҙ Ҡыҙыл йылғаһы буйында шырлыҡ булып үҫкән талды ҡырып бөтмәһәк, ауылдың был башында ла, теге осонда ла элекке туғайҙар йәйрәп ятһа, һеҙ исемен онотоп бөткән «Үләнде», «Оҙон күлдәр» мал төшөрөү арҡаһында кибеп бөтмәһә, йыл аша тигәндәй беҙҙе килеп һуғып торған ҡоролоҡ һирәгерәк, бәлки бөтөнләй ҙә булмаҫ ине. Бына бит уның, улым, төп мәғәнәһе ҡайҙа ята. Балам, һин дуғалы ат тигән һүҙҙе ысҡындырып ҡуйҙың, һуң, әле һин совхозда һуңғы йылдарҙа дуғалы ат еккән кешене осратҡаның бармы? — Малай уйға ҡалды.

— Әһә, башыңды баҫтыңмы? Баҫырһың шул, сөнки хәҙер совхозда дуғалап ат егеп йөрөгән кеше бөттө. Был заманда дуғаһы булһа, ҡамыт-сбруйы юҡ, әгәр инде уларын тапһаң, йәй арбаһын, ҡыш санаһын табалмай этләнәһең, ни өсөн тигәндә, уларҙы бөгөн килеп совхозда минән башҡа эшләй белеүсе ҡалманы. Ә мин хәҙер ет-

мешкә етеп киләм, ҡарыуым бөтһә, ул эште мин дә оҙаҡламай ташлармын, ләкин мин тере саҡта ул эшкә өйрәнергә тырышып ятҡан бер кеше тойолмай. Мына мин үлгәс, егеүле атты һүрәттәрҙә генә ҡарап ултырырһығыҙ әле.

— Олатай, уға һеҙҙең бер ҙә эсегеҙ көтөрләмәһен, беҙгә һеҙҙең дуғалы атығыҙҙың кәрәге лә үҙе саҡлы, хәҙер механизация, автоматизация быуаты, машинаға ултырҙың да, һинең көн буйы өшкөлдәп бара торған ереңә бер сәғәттә барҙың да еттең, — тине баяғы тауыш.

Бабай ҙа алғанын тиҙ генә ҡуя торған кешеләрҙән түгел.

— Уның, улым, тормош булғас, ат менән башҡара торған йомошо ла етерлек, ләкин хәҙер кешенән алда коммунизмға ат сыҡты, ни өсөн тигәндә, совхоздың биш өйөр йылҡыһын меңгегә лә, еккегә лә өйрәтеүсе кеше тағы ла юҡ. Элекке кавалерист, ғүмер буйы йылҡы көткән бер Әбделғәни ағайығыҙ бар ине, ул да былтыр донъянан китеп барҙы. Элгәрге заманда байҙарҙың, һуңыраҡ колхоздарҙың байлығы күпме йылҡыһы булыуына ҡарап йөрөтөлә ине, ә хәҙерге ат ҡыл да ҡыбырлатмай, тик уның ат көсө тигән боронғо даны машина, тракторҙарҙа ғына тороп ҡалды. Хатта шуға барып еттек — атыбыҙға трактор менән ташып бесән ашата башланыҡ бит.

Элек әҙәмде, уның малын ат эшләп туйҙырыр ине, ә хәҙер бесән ташып, аттың үҙен ашатып ятабыҙ. Бына бит тормоштоң асты-өҫкә әйләнеүе ошо була бит инде. Ана, теге, киноларҙа артист урынына атҡа атланып сапҡан кешеләрҙе каскадер тиҙәрме әле?

— Эйе, каскадер тип атала.

— Бына совхозға ат өйрәтеү өсөн Мәскәүҙән шуларҙы саҡырырға ҡалды инде. Ат итен былай барыбыҙ ҙа яратып ашайбыҙ, был эштә каскадерҙарҙың хәжәте юҡ. — Ҡарт эсенән генә: «Әгәр бөтә совхозда йылҡы һуя белә торған кеше таба алһағыҙ?» тип ҡуйҙы. — Әйткәндәй, класығыҙҙа ат өҫтөндә һыбай йөрөй белгән бала бармы? — тип һораны ҡарт. Ләкин уның был сәйер һорауына ла яуап биреүсе табылманы. — Беҙҙе атайҙар үҙ аяғыбыҙ менән атлап китерҙән алда ат өҫтөндә ултырып йөрөргә өйрәтте, сөнки ат өҫтөндә йөрөй белеү ир кешелә сослоҡ, кәүҙәнде дөрөҫ тотоу тәртибен тәрбиәләй, ундай кешенең атлап килеүҙәре лә икенсе төрлөрәк була.

Ауылда мал салыусы кеше ҡалманы бит, тауыҡ һуйырға өйберенсә кеше эҙләп йөрөйбөҙ, ә һуйылған мал тиреһен эшкәртеү — уны иләү тигән һөнәрҙе белеү түгел, ул һүҙҙең мәғәнәһенә төшөнөүсе кеше хәҙер бик һирәгәйҙе. — Ысынлап та, ҡарттың ни хаҡында әсенеп һөйләп тороуын класта, директорҙан башҡа, аңлаусы булманы, тик

ветерандар ғына уның һөйләгәнен хуплап, баш һелкеп ултырҙы.

Директор сәғәтенә ҡарап, ҡарт янына килде лә, әкрен генә, балалар ишетмәҫлек итеп: «Ағай, бөгөнгә етмәҫме?» тип һораны. Ҡарт ризаһыҙлыҡ белдереп башын сайҡап:

— Был, бәлки, минең үҙ тыуған мәктәбемә һуңғы килеүемдер, шуның өсөн үҙ фекеремде әйтеп бөтмәй әмәлем юҡ, — тине.

— Йәгеҙ әле, уйлап ҡарағыҙ, шул мин үрҙә әйтеп үткән «Хәкимйән тирмәне» ҡайһы тирәләрәк булған? Кем әйтә алыр?

Класс шымып ҡалды, өндәшеүсе булманы.

— Ә «Әмин ҡотоғо», «Әмин ҡыуағы» тигән урындар ҡайһы ауылда һәм ҡайһы урында булған?

Бер бала баҙнатһыҙ ҡына ҡулын күтәрҙе.

— Йә, йә, улым, һөйләп ебәр әле, — тип бабай йәнләнеп китте. Инде класта дәресте Ғәлләм ҡарт алып киткән кеүек тойолдо.

— Беҙҙең ауыл ҡаршыһында Сағыл битләүенән бер һалҡын шишмә сығып ятҡан, ә унан түбәнерәк, үҙән буйында уның ҡыуағы ла булған икән, тип олатайым һөйләп ҡалдырғайны.

— Әй маладис, ә ул урынды үҙең беләһеңме? Күрһәтә алыр инеңме?

— Юҡ, белмәйем.

Малайҙың был яуабынан ҡарт шартлар сиккә етте. Ә ситтән генә бер ҡыҙарып, бер буҙарып күҙәтеп ултырған директор үҙ урынында ултырғысын шығырлатып ҡуҙғалып ҡуйҙы, сөнки әңгәмәнең ул планлаштырған һуҡмаҡтан сығып, икенсе эҙгә төшөп китеүе уның эсен байтаҡтан бирле бошора башлағайны инде.

Ҡарттың ныҡыша-ныҡыша, «Өс тирәк ҡайҙа? Үҙәк усадьбаның ҡайһы ерен Өмөтҡужа арығы тип йөрөтәләр?» тигән һорауына ла ул бер ниндәй ҙә рәтле яуап ала алманы. Ғәлләмдең асыуынан тағы ла кикереге ҡыҙара башланы.

— Картанан һеҙҙең Арал диңгеҙен, Байкал күлен күрһәтеп, уларға характеристика биреп тороуығыҙ, әлбиттә, бик яҡшы эш, ләкин үҙегеҙ йәшәгән ер, ауыл тарихын, булып үткән ваҡиғаларҙы белеү йәш быуынға мотлаҡ кәрәк, — тине Ғәлләм ҡарт.

«Балаларҙың белмәүе бер ҙә ғәжәп түгел, сөнки тәбиғәт күрке булып ятҡан был ерҙәрҙең исемдәрен ололар ҙа онотоп бөтөп баралар шул», тип ҡарт әсенеп ҡуйҙы.

Иҫе китмәй генә ултырғысына ҡырын ятынҡырап: «Был тумыртҡа тағы ни һөйрәп сығарыр икән?» тип ултырған директорҙың тыныс йөҙөнә ҡарап, ҡарттың асыуы ҡабарҙы. Ул Имелбаевҡа боролоп:

— Йәш быуында тыуған илгә патриотизм тәрбиәләү, уларҙы уратып алған сағылдарға, тауҙарға, совхозды уртаға ярып аҡҡан Ҡыҙыл йылғаһына, уларҙың тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу, мөхәббәт тәрбиәләү менән туранан-тура бәйләнмәгәнме ни? — тип ҡарт һорауҙы ҡабырғаһы менән ҡуйҙы.

— Ундай ауыл, ер-һыу тарихын өйрәнеү беҙҙең мәктәп программаһына инмәгән, уның менән шөғөлләнергә беҙҙә ваҡыт та, әйтергә кәрәк, хәжәт тә юҡ. Балаларҙы совет патриотизмына беҙ политик яҡтан әһәмиәтлерәк миҫалдарҙа, башҡа боевой һәм хеҙмәт традицияларында тәрбиәләй алабыҙ. Һинең Малбаҡты ауылының тарихы, «Ҡаҙаҡ үлгән Сағыл» балаларҙың донъяға ҡарашын тарайта, архаизм һуҡмағына алып китә, — тине лә директор үҙ яуабын бөткәнгә хисаплап, ултырғысына ҡырын ятты. Ләкин Ғәлләм ҡарт уның был аңлатыуына хушһынманы.

— Бына Имелбаев ҡусты, һин, моғайын, Ҡыҙыл армияла хеҙмәт иткән кешеһеңдер?

— Йә, хеҙмәт итеү йәки итмәүҙең был әңгәмәгә ниндәй шойҡаны бар?

— Шойҡаны шунда, ҡустым, Алыҫ көнсығышҡа хеҙмәткә алынған йәштәр бер ҙә ауылға яҙған хаттарында «Каспий күлен һағындыҡ», «Кавказ тауҙарын төшөбөҙҙә күрәбеҙ», тип яҙмайҙар, «Бөҙрә таллы Ҡыҙыл йылғаһын бер ҡайтып күрәһе ине», «Салғыя ташының көнбитендә ҡолас йәйеп, салғы сыңлатып бесән сапҡан саҡтар бер ҙә иҫтән сыҡмай», тип яҙалар, тыуып үҫкән төйәген улар һеҙ уҡытмаһағыҙ ҙа, бала саҡта уйнап үҫкән туғайҙарын ер шарының теләһә ниндәй урынынан артыҡ күрә. Бына ошонан башлана оло Ватанға һөйөү. Оло Ватанды, кешенең аяғына баҫып «атай», «әсәй» тип тәүге һүҙен әйткән ерлектән айырырға ярамай торғандыр ул тип уйлайым мин, — тине Ғәлләм ҡарт һүҙен ҡырт киҫеп, урынына ултырҙы.

Яуапһыҙ ултырып ҡалыуҙы, күрәһең, урынһыҙ күреп, директор урынынан торҙо ла:

— Һеҙҙең был фекерегеҙ менән килешеп булмай, Ғәлләм ағай, Тыуған төйәк хаҡында һеҙҙең төшөнсәгеҙ асыл-да Ватан дәрәжәһен, уның бөйөклөгөн фәҡирләндереүгә алып бара. Беҙ ундай концепция менән килешә алмайбыҙ, һәр бер мәктәп программанан тыш, үҙ белдеге менән үҙ аллы тәрбиә эшенә тотонһа, беҙ партия ҡуйған оло бурыстарҙан тайпылабыҙ, был инде һөҙөмтәлә беҙҙе политик хаталарға килтереүе мөмкин, — тине.

Күңеле һаман тынысланa алмай үҙ урынында ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла өйрөлөп ултырған Ғәлләм ҡарт түҙмәне:

— Ә һинең үҙең әйткән концепциянан бик тә ят еҫ

килә, ҡустым, һеҙҙең фекерегеҙ, ҡусты кеше, туп-тура космополитизмға алып бара торған юл. Ә ул инде үҙ ереңдән айырылып, сикһеҙ күктә йөҙөү менән бәрәбәр. Патриотизмдың нигеҙе — ул үҙ ерлегең, уның мәҙәниәте халыҡтың рухы һәм теле. Үҙ халҡыңдың үткән тарихын белмәү, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен инҡар итеү кешене әхлаҡи, физик яҡтан ҡаҡшата, уны тотоп торған умыртҡа һөйәген имгәтә, ундай кеше ҡамғаҡҡа әйләнә. — Ҡарттың һүҙен хуплағандай, уның ҡапыл ҡул һелтәүенә түшенә таҡҡан орден, миҙалдары бер-береһенә бәрелеп, зыңлап ҡуйҙы.

Ышлыяһы арт шәрифенә ҡыҫылып алған ҡарт туҡталманы, һаман үҙенекен дауам итте.

— Һеҙҙең башҡортса тел ғилемегеҙҙе дәрес башланғас та, тикшереп белдек, буғай. Ә бына башҡорт әҙәбиәтен класығыҙҙа даими рәүештә кем уҡып бара? — тип һораны Ғәлләм, ләкин уның был һорауына ла яуап ҡайтарыусы булманы. Аптырағас, ҡарт тағы бер мәҙәгерәк һорау ташланы.

— Класығыҙҙа бәлки боронғо башҡорт көйҙәрен йырлаусылар барҙыр.

— Ундай кешеләр беҙҙә, дед, юҡ, — тине бер импорт свитеры кейгән егет. — Беҙ уның боронғоһон түгел, хәҙергеһен дә йырламайбыҙ. Олатай, һеҙ үткән заман кешеһе, хәҙер электротехника һәм тауыш техникаһы периоды, сәхнәлә бер кешенең үңәсен һуҙып «Буранбай»ҙы йырлап тороуын хәҙер бер кем дә тыңламай, просто не интересно, — тип урынына ултырҙы. — Волокешь, дед? — тип өҫтәне лә бөтә класҡа «Күрҙегеҙме мине?» тигән шикелле күҙен ҡыҫып алды.

Ҡарттың ни таптырғанын йүнләп аңламаған балалар, тәүге тапҡыр малайға әйләнеп ҡарап, шырҡылдап көлөп ебәрҙе.

Ғәлләм ҡарт асыуынан ишекте шарт ябып сығып китергә лә уйлағайны, ләкин ниндәйҙер бер эске көс уны алға этәрҙе, ул тағы ла аяҡ үрә торҙо.

— Бынығы ла беҙҙең программала ҡаралмағанмы?

— Бынығы инде бөтөнләй беҙҙең программала ҡаралырға тейеш түгел мәсьәләләр. Һеҙ әйткән был әйберҙәр һәр кемдең шәхси эше. Һәр кем, теләй икән французса, теләй икән русса һөйләшә ала, ә ҡайһы телдә йырлай белеү, белмәү бөтөнләй мөһим түгел, ғөмүмән, ауыҙ күтәреп йырламай ҙа бик яҡшы йәшәп була, мына мин үҙем, мәҫәлән, үҙ ғүмеремдә көй сығарған кеше түгел.

Хәҙер инде был дәрес директор менән ҡарт араһындағы дискуссияға әйләнде. Күптән тәнәфес иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, был икәүҙең киҫкен генә һөйләшеүе класты бер аҙ һағайтты ла, әммә ҡыҙыҡ та тойолдо.

— Бына ошолайтып, өҫтән төшкән программа буйынса

ғына ла һис бер баш ватмай, ғәмһеҙ йәшәп, беҙ ошо көнгә төшөп ҡалдыҡ та инде.

— Ә ул тиклем иҫ китерлек беҙҙә бер ни ҙә ҡупҡаны юҡ.

— Әй, ҡустым, ҡустым. Тирә-яғыңа әйләнеп байҡап ҡара. Тормоштоң ағышы ҡайҙа бара, йәмғиәттә ниндәй ваҡиғалар, уның йүнәлеше нисек? Былар барыһы ла беҙҙе ҡыҙыҡһындырыу ғына түгел, ныҡ борсорға тейеш. Ошо үҙгәрештәргә ярашлы эшләй ала торған кадрҙар кәрәк беҙгә, ҡустым.

— Бына беҙ тап шундай кадрҙар етештереп ятабыҙ.

— Ҡана һуң. Юҡ шул, иптәш директор, бына ошо совхоз ойошҡаны бирле алтмыштан артыҡ кеше юҡҡа сыҡты, ә кешеләре лә ниндәй бит! Әзмәүерҙәй ир арыҫландары! Иҫерек көйөнсә тракторы менән ҡуша ауып йә автомобилдә аварияға эләгеп һәләк булды. Уларҙан һуң зар илап, күпме йәтим ҡатын, бала-саға ҡалды? Шул тиклем ир-ат ҡырылырға ул бит һуғыш осоро түгел, совхоз территорияһынан бер ниндәй ҙә яу үтмәне бит.

— Уларҙың үлеүендә мәктәптең ни касафаты бар?

— Касафаты шунда — улар барыһы ла ошо мәктәпте тамамлап сыҡҡан элекке һеҙҙең уҡыусылар. Уларҙың ҡулдарына мәктәпте тамамлап сығыу хаҡында ҡағыҙ биргәнһегеҙ, ләкин йәмғиәтте үҙгәртеп ҡора алырлыҡ ысын кешеләр тәрбиәләп сығара алмағанһығыҙ, әхлағы ла, мәҙәниәте лә, тормошҡа яуаплылығы ла етерлек булмаған.

— Һеҙ бөтә ғәйепте мәктәпкә япһарырға уйлайһығыҙмы, ләкин уларҙы артабан башҡа коллективтар тәрбиәләгән бит. Ә һеҙ үҙегеҙҙең ғәйепте ниңә танымайһығыҙ? Уйлап ҡарағыҙ әле, Ғәлләм ағай, һеҙ һәр саҡ шул балаларға үҙегеҙҙең тормошта үрнәк була алдығыҙмы? — Бындай кинәт ҡуйылған һорауға ҡарт башын тырнап:

— Әйтә алмайым, иптәш директор, — тине.

— Шулай булғас, атта ла бар, тәртәлә лә бар, ағай, — тип директор йылмайып, ҙур кинәнес менән һанарға тотондо. — Беҙҙе уратып алған мөхит, радио һәм телевидение, ата-әсәләр, совхоз администрацияһы — уларҙы ҡайҙа ҡуяһың? Улар барыһы ла ошо кешене тәрбиәләү эшенә өлөш индерәләр түгелме?

— Уныһы дөрөҫ, ләкин уларҙың, һин әйткәнсә, өлөшө тураһында мин улар саҡырғас, шунда әйтермен. Бөгөн һүҙ мәктәп һәм уның киләсәк быуынды тәрбиәләүҙәге бурыстары хаҡында бара. Шуныһы көн шикелле асыҡ — йәш үҫмер күңеленә, уның саф йөрәгенә изгелек һәм яуызлыҡ, яманлыҡ һәм яҡшылыҡ, әҙәплелек һәм боҙоҡлоҡ орлоҡтарын ошо мәктәптә һалалар түгелме һуң? — тип Ғәлләм ҡарт кәкре бармаҡтары менән партаға туҡылдатып алды.

— Ә һеҙ балалар күңеленә сәскән орлоҡто артабан яҡшы итеп тәрбиәләп, ваҡытында һыу һибеп, әлдән-әле баҫып барған ҡый үләндән таҙартып, мул уңыш алыу нәҡ баяғы һеҙ әйткән ойошмаларҙың өҫтөнә төшә. Ләкин, иптәш директор, программаға һылтанмай, үҙең етештергән продукцияны, йәғни уҡытып, тәрбиәләп ун йыл уҡытҡан, тәрбиәләгән балаларҙы сифат билдәһе менән сығарыу һеҙҙең мөҡәддәс бурысығыҙҙыр, тип уйлайым. Халыҡ хужалығындағы күп етешһеҙлектәрҙең башы бына ошо һеҙ уҡытҡан мәктәпкә килеп терәлә. Насар уҡытыу, яуапһыҙ тәрбиә — йүнһеҙ эшсе, наҙан инженер, эскесе механизатор, ғаилә боҙоусы ата.

Ике наркоман балағыҙҙың бөгөн Өфөлә дауаланып ятыуы, унлаған уҡыусының хоҡуҡ һәм тәртип боҙған өсөн милицияла хисапта тороуы — бына һеҙҙең ҡайнаған тормошҡа үтеп инмәй, гәмһеҙ генә тәҙрәнән күҙәтеп ултырыу, тик программала күрһәтелгәндәрҙе генә балаларға еткереп, «Тормош дәресен» өйрәтмәүҙең нәтижәләре.

Ә тормош бөтә программаларҙың да нигеҙе ул, белә-белһәгеҙ, уның кендеге, унан бер ҡасан да айырылырға ярамай. Әле һеҙгә йыш ҡына килеп, «Тыныслыҡ дәресе»нән тыш, «Тормош дәресе»н өйрәтеп китәһе бар икән әле.

Ҡарт ишекте шым ғына ябып сығып киткәс, бөтә класс балалары ла, уларға текләгән мәктәп хужаһы ла байтаҡ өнһөҙ ултырҙылар.

Ә Ғәлләм ҡарт мәктәп директорының үҙен «Тормош дәресе»нә ҡасан саҡырыуын һаман да көтә әле.

## САҘАҠА

Уның фамилияһы Тәлғәтов, исемен Әхмәт тиҙәр, ә инде атаһы мәрхүмде, йәне йәннәттә булһын, Әҙелғужа тип йөрөттөләр.

Кеше хаҡын ашарға Әхмәт бик йәштән генә күнекте. Быға, билдәле, нигеҙҙә генә сәбәптәр ҙә юҡ түгел ине.

Егерменсе йылдар аҙағында ауыл мәхәлләһенең имамы указынан баш тартҡас, муллалыҡ вазифаһы ул замандарҙа әле йәш кенә Әҙелғужаға күсте. Иҫкесә артыҡ ғилеме булмаһа ла, ул, ауыл мәҙрәсәһендә өс ҡыш бөрсә һимер-

теп, әфтиәктән Ҡөрьәнгә күсеп туҡтағайны. Атаһына өшкөрөм-төкөрөмгә хәйер төшөүҙәре, уға ауыл халҡы биргән гүр, ғөшөр саҙаҡалары ул саҡтарҙа бала ғына булған Әхмәт күңелендә ныҡ уйылып ҡалды. Тимәк, тормошта артыҡ тир түгеп, ятҡанды һөйәмәйенсә, кеше хаҡына ла йәшәп була икән, тигән бөрөләнә башлаған фекер, егет ҡорона тулғас, «күкрәп» сәскә атты. Тик Әхмәт ул һиммәтле төшөнсәгә «Әгәр башың эшләмәһә...» тигән бик мөһим өҫтәлмә керетте.

Ул үҙенең тәүге аҙымын атаһы янсығынан тиндәр сиртеүҙән башланы, шунан инде тиҫтерҙәренән үтескә алған бишәр-унар тин аҡсаны ҡайтарып бирмәү гәҙәтенә инеп китте.

Ләкин уның һәр ҡасан уҡыуға тырыш булыуын әйтмәү мөмкин түгел. Ауылда урта мәктәпте уңышлы ғына тамамлағас, Мәскәүҙең абруйлы ғына институтына имтихандар тапшырып, шунда уҡый башланы. Уның уҡыу йылдары ауыр замаңға — һуғыш йылдарына — тура килде.

Тап бына ошо юғары уҡыу йортонда Әхмәттең бөтә һәләтлеге асылып китте лә инде. Юғары математиканан таныш студенттарға ауырыраҡ мәсьәлә сискәне өсөн берәр һум, материал ҡаршылыҡтары тигән, студенттарҙың башын ҡатырған фәндең һәр һорауына яуап әҙерләп биргән өсөн бишәр тәңкә такса билдәләне.

Ә инде тәнәфес ваҡытында берәр таныш студент осраһа: «Слушай, пожалуйста, үҙең менән ашханала миңә лә талон һуҡтыр әле, эшем бик ашығыс», — тип үҙе ҡайҙалыр китеп юғалды, ә аҙаҡтан үҙенә изгелек эшләгән иптәштәре менән иҫәпләшергә онотор булды. Тора-бара уның бындай «кәсебе» гәҙәтенә инеп китте.

Институтты тамамлағас, уны даны бөтә тарафтарға киткән ҙур ғына идараға өлкән инженер, унан участка начальнигы, баш инженер, ә һуңынан инде, тәжрибәһе бар яҡлап та арта төшкәс, ошо идараға хужа итеп тәғәйенләнеләр.

Уның дәрәжәһе үҫкән һайын, бала саҡтан үҙләштергән ғәҙәте, нәфсеһе лә, такса баһаһы ла арта барҙы. Эшен иң башта ул кадрҙарҙы һайлап алыуҙан башланы, үҙ идараһына тик уға йәне-тәне менән бирелгән, хужаны күҙҡараштан уҡ аңлай торған, ситкә һүҙ сығармаҫлыҡ, теш аралары екһеҙ кешеләрҙе генә һайланы. Ә улар Әхмәт ағалары күрһәткән мәрхәмәткә мәрхәмәт менән яуап бирергә тырышты. Хужаның яҡты сырайы бер ваҡытта ла улар тарафынан иғтибарһыҙ ҡалманы. Ул тәртә башы терәлгән бар ерҙә уға һый-хөрмәт әҙер булды, уны оҙатҡанда, өйҙәге бала-сағаһын да онотманылар. «Волга» багажнигы һәр

саҡ нышып тултырылған булды. Идара йомошо менән сыҡҡан саҡтарҙа ҡунаҡханала ятыу, ашау-эсеү өсөн ул кеҫәһенән бер ҡасан да, бер тин көмөш тә сәрмәйә түкмәне, тик оҙата килгән, үҙенә буйһонған кешеләргә: «Ярай, егеттәр, хушығыҙ, тәрбиәгеҙ өсөн рәхмәт. Аҙаҡтан хисаплашырбыҙ», — ти ҙә тунының яғаһын ҡалҡытып, артынан күгелйем төтөн бөркөп торған «Волга»һына барып ултыра.

Ул берәр яҡҡа юлланыр булһа, уның артынан, шәүлә кеүек, бер аҙым да ҡалмай йөрөгән урынбаҫары ике-өс көн алдан: «Беҙҙекеләр һеҙҙең тарафтарға йыйына. Ҡарағыҙ», — тип шылтыратып ҡуя. Һүҙ араһында хужаға өҫтәлгә ниндәй аҙыҡ-әүҡәт, тамаҡ майлау өсөн ниндәй эсемлек ултыртырға кәрәген дә әйтергә онотмай. Ә «ҡарағыҙ»ҙың мәғәнәһе һәр кемгә мәғлүм. Бигерәк тә тәьминәт бүлегендә эшләгән ағай-эне баштарын тотоп оло ҡайғыға ҡала, улар үҙ-ара: «Теге «аҙаҡтан хисаплашырбыҙ» тағы бында йыйына, нишләргә? Беҙҙең ошо ғәзиз башҡайҙарҙың тағы ниҙәр күрәһе бар икән?» — тип уфтана. Йәнә лә ҡолас йәйеп ҡаршы алыуҙар, йылы осрашыуҙар, йомшарған күңелдең нескә ҡылдарын тибрәткән, талғын ғына аҡҡан «Түрәкәй» көйө, ҡупшы аяҡтарын сәнсә баҫып, зәңгәр ҡоршаулы күҙҙәренән йәнеңде көйҙөрөрлөк наҙлы ҡараштар атып, һый-хөрмәт ташыған мөләйем официанткалар, хужаның алтын башы һәм даръяға тиң аҡылы хөрмәтенә әйтелгән ихлас тостар... Һәм йәнә: «Рәхмәт, хисаплашырбыҙ...». Һуңынан йөнтәҫ кәпәстәрҙе һауаға сөйөп, дуҫтарса хушлашыуҙар. Эске тулҡынланыуҙан эркелеп биткә тәгәрәгән йәштәрҙе лә йәшереп тормайынса, ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлашып үбешеүҙәр...

* * *

Торғонлоҡ йылдарында асыҡтан-асыҡ идара начальнигын кәпәс сөйөп, ҡаҙна хисабынан ашатыу-эсереү һуңғы йылдарҙа, үҙгәртеп ҡороу осоронда, ҡырҡа сонторлана төштө. Ләкин Әхмәт Әҙелғужиевичты һыйлау өсөн был саҡта ла әмәлен тапты уға һеперелеп хеҙмәт иткән яраҡдар. Шешәләр өҫтәлдән осто, улар урынына «әрмән сәйе» һалынған ҙур ҡорһаҡлы сәйнүктәр килеп ултырҙы. Ҡунаҡтар сафы ла һирәгәйҙе. Шулай ҙа үҙенең сәфәренән Тәлғәтов мыйыҡ майламай ҡайтманы.

Шулай, һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ шикелле, дүрт яғы ла ҡибла донъяла йәшәп ятҡан бер мәлдә уға үҙенең уң ҡанаты һымаҡ күргән әшнәһен ерләргә тура килде. Бына тап шул саҡ уның күңеленә күптән донъя ҡуйып, инде төҫө-

башы ла күгелйем томан менән ҡаплана башлаған атаһы Әҙелғужа иҫенә килеп төштө. «Туҡта, — тине ул, — был фани донъяға килмәк бар, китмәк бар, нисә әйтһәң дә, күпме генә йәшерһәң дә — мин шул Әҙелғужа мулланың баш балаһы бит әле. Атай мәрхүмдең ҡәберен табып, ҡулда форсат барҙа, уны тимер рәшәткә менән уратып, баш осона яҙыулы таш әтмәләп ҡуяйым», — тип уйланы. Был уның үҙ ғүмерендә ғәзиз атаһын беренсе тапҡыр иҫенә алыуы ине.

«Мин дә йылдан-йыл йәшәрмәйем, бер көн, бәлки, мине лә шул атай ятҡан йортҡа йыйыштырып ҡуйырҙар ҙа мәңгегә онотторҙар. Тыуыр-тыумаҫтан уҡ аҡса, теләһә ниндәй дискотека, япон магнитофоны дауайлап, башыңа осоп-ҡунып килгән малайҙарҙан ни изгелек көтмәк кәрәк? Шул иманһыҙҙарға, бәлки, бер йүнле үрнәк булыр», — тип, Әхмәт үҙ фекерен ослап ҡуйҙы.

Ләкин уның был изге теләген ғәмәлгә ашырыуҙа бик тә бер ҡатмарлы хәл килеп сыҡты. Ул да булһа шул: Әхмәт атаһының ҡайһы тирәгә күмелгәнен, уның ҡәберенең ҡайҙалығын белмәй ине. Мәскәүҙә уҡыған сағында, атаһының үлеүе хаҡында уға һуҡҡан телеграмманы «алманым»ға һылтанып, атаһын ерләргә лә ҡайтмағайны.

Бер нисә йылдар үткәс, мосолман зыяратында оҙаҡ йылдар эшләгән бер ҡартты осратып, бик ситләтеп кенә һораштырып та ҡараны.

— Уҙаман, бынан байтаҡ йылдар элек ошо мосолман зыяратында беҙҙең ауылдың Әҙелғужа тигән муллаһы ерләнгәйне. Шул изге йән эйәһенең ҡәбере ҡайһы тирәләрәк булыр икән? — тип уратып-уратып белергә лә тырышҡайны. Ләкин зыярат ҡараусы теге ҡарт, «Волга» машинаһы ҡырында баҫып торған олпат кәүҙәле кешегә йәшкәҙәгән күҙҙәре менән текләп торҙо ла көтмәгәндә бер хәбәр ысҡындырып ҡуйҙы:

— Былай мин ул ҡартты хәтерләп ҡалам. Бик уҡымышлы, ғәләмә мосолман әһеле ине. Бер-ике кәррә[1] мәүлит шәрифендә лә[2] булғайныҡ. Барлыҡ ҡиәфәте менән бик тә ошо һиңә оҡшаған кеше ине. Әллә һин уның улы, вариҫы булаһыңмы? — тип һораны ла теге ҡарт Әхмәткә тағы һынаулы ҡараш ташланы.

Әхмәттең ҡапыл таяҡ менән бәкәленә һуҡҡан кеүек булды, теҙ быуындары ҡалтыраны, башына ла йүгерҙе, шунан, уңайһыҙланып, башын ситкә борҙо ла:

— Юҡ-юҡ-юҡ, — тип, ҡат-ҡат ҡабатланы. Ҡарттың был һүҙенән ҡапыл ҡойолоп төшкән Әхмәт һырт биреү

---

[1]*Кәррә* — ҡат-ҡат.
[2]*Мәүлит шәрифе* — ҡорбан ғәйетен уҡыу.

яғын ҡарай башланы, ләкин ҡарттың һүҙен тыңлап бөтөрмәйенсә, уның янынан китә алманы.

— Ҡәбере, улым, бер ҙә хәтерҙә ҡалмаған. Асылына ҡайтҡан был әруахтар араһында ябай мосолман ғына түгел, муллаһы ла, мөфтөйө лә, ҙур эш башҡарған оло түрәләр ҙә ята. Ғазраил ғәлиәссәләм алдында улар һәммәһе лә бер тигеҙ хәҙер. Әле кисә генә ана тау булып өйөлөп ятҡан сәскәле ҡәбергә, һинең шикелле, ошондай машиналы ҙур түрәне ерләп киттеләр, — тине. Ҡарттың был тура һүҙе былай ҙа барлыҡ бөтмөшө болоҡһоп торған Әхмәт күңеленә шомло ҡурҡыу һалды.

Әхмәт был күңелһеҙ ваҡиғаны бер нисә йыл ете ҡат ҡарыны аҫтында йәшереп йөрөттө, теге зыярат ҡарауылсыһы донъя ҡуймайынса, иҫенә төшөрмәҫкә тырышты. Ләкин уның һимеҙ битендә йыйырсыҡ һырҙары ишәйгән һайын, маңлай сәстәре ҡойолоп, башы ныгыраҡ таҡырайған һайын был ваҡиға, юҡ-юҡ та, уның йөрәген өйкәп, төрлө уйға дусар итте.

Бына бөгөн эштән һуң, шәфәҡ шәүләһе байып, гүр тынлығы баҫҡан кабинетта бер үҙе ҡалғас, Әхмәт Тәлгәтовтың күңелен ниндәйҙер моңһоу бошонҡолоҡ солғап алды. Ул кнопкаға баҫты. Секретарь, эшен тамамлап ҡайтып китеү сәбәпле, уның алғы бүлмәһендә үҙ хужаһының артабанғы күрһәтмәһен көтөп торған ярҙамсыһы кабинет ишеген йәһәт кенә асты ла иҙән уртаһында ҡатып ҡалды.

— Тыңлайым, Әхмәт Әҙелғужиевич, — урынбаҫарҙың күпте күргән башында әллә ни саҡлы сырмалсыҡ уйҙар хасил булды. «Кәйефе бик насар һиҙелә, әллә «Алтын балыҡ» тирәһендә хиләүәткә сығып китергә уйлай микән?» — тип фекер йөрөттө һиҙгер урынбаҫар. Ләкин хужаның етди, моңһоу йөҙөндә сәхрәгә сығып кәйеф-сафа ҡороу теләге һиҙелмәне. Әхмәт Әҙелғужиевич, йөнтәҫ ҡаштарын һындырып, өҫкә сөйҙө лә:

— Хәҙер мосолман зыяратына барып ҡайтабыҙ, — тине.

Ғүмерҙә хужа ауыҙынан ундай хәбәрҙе ишетмәгән урынбаҫарҙы: «Был нимә, әллә һаташып барамы? Үлгәндәрҙе хәҙер ул зыяратта күмеү тыйылған, тип һөйләйҙәр, әллә тиҙерәк үҙенә урын алып ҡалырға ашыға микән?» — тигән ҡурҡыныс уй һиҫкәндереп ебәрҙе.

Улар машина менән зыярат ҡапҡаһы төбөнә барып туҡтаны. Аласыҡ янындағы йышылып бөткән эскәмйәлә ултырған ҡарт-ҡоро, ҙур төшөм өмөт итеп, урындарынан торҙо.

— Улым, әллә әруахтарға аят бағышлатырға килдеңме? — тип таяғына таянған кәҙә һаҡаллы ҡарт Әхмәт Әҙелғужиевич алдына килеп баҫты. Ә инде икенсеһе, ҡара күҙлек кейгән унан да ҡартырағы:

— Асылына ҡайтҡан яҡындарың рухын иҫкә алып

хәйер таратыу — кеше өсөн ҙур сауап, фарыз эш, — тип кәкре бармаҡлы ҡулын һондо.

Башын өҫкә сөйөп, өндәшмәй генә улар эргәһенән үтеп барған Әхмәт Әҙелғужиевич, артҡа боролмайынса ғына, яурыны аша баш бармағын артҡа һуҙҙы ла:

— Бынау ҡарттарға саҙаҡа биреп кит, — тип үҙ урынбаҫарына әмер бирҙе. Башта ниндәйҙер бер ят тауыш уның ҡолағына баҙнатһыҙ ғына: «Бынағайыш, ул ниткән саҙаҡа? Һинең бында кемең ерләнгән? — тип бышылдағайны ла, ләкин киң һыртлы хужаһының дағалы үксәһе менән асфальтта ятҡан ҡырсын ташты онтай баҫып барыуын күреп, был шомло уйынан үҙе ҡурҡып китте. Хужаның дағалы үксәһе аҫтында ул үҙе йәлпәшеп ятып ҡалғандай тойолдо. Шунан урынбаҫар эскәмйәлә теҙелешеп ултырған ҡарт-ҡороға үҙ хужаһы өсөн уның үлгән атаһы хаҡына хәйер таратып сыҡты.

Ул бөгөн бик болоҡһоу, тыныпһыҙ күңел менән ҡараүатына ауҙы, ләкин зыяратта алған тәьҫораттарҙан, күпме таныш дуҫ-иштәрҙең донъя ҡуйыуын уйлап, оҙаҡ ҡына түшәмгә теклəп, йоҡоһоҙ ятты. Тик таң алдынан ғына уның ауырайған кәүҙәһен, сырмалсыҡ уйҙар менән буталған башын йоҡо баҫты. Ул күҙен йомдо...

Ап-аҡ кәфенгә төрөнгән, ҡулына саған таяҡ тотҡан Әҙелғужа мулла ҡапыл асыҡ форточканан килеп инде лә салҡан ятҡан Әхмәт өҫтөнә атланып ултырҙы. Улының ҡамырға әйләнгән ҡулдарын артҡа ҡайырып бәйләне лә үҙенең тир һеңгән теүәтәйен Әхмәттең ауыҙына тыҡты. Ҡайҙан килгән был кәүен генә ҡартҡа шундайын көс-ғәйрәт: карауат башындағы оҙон таҫтамалды алып, күҙе аларған ҡарт Әхмәтте карауатҡа ҡуша бәйләне һәм өй эсен аҡтарырға тотондо. Таяғының кәкре башы менән әләктереп, карауат аҫтынан ҡунысына алтын-көмөш тултырылған иҫке фетр быйма һөйрәп сығарҙы. Йәшле күҙҙәре менән атаһын күҙәтеп ятҡан Әхмәт ҡысҡырырға, ярҙам һорап күршеләрҙе саҡырырға маташты, ләкин тауышын сығара алманы. Уның тамағына ниндәйҙер ҙур төйөр килеп тығылды. Ә Әҙелғужа ҡарт шифоньер ҡапҡасын шар асты ла ниҙер эҙләнә башланы. Унан кейем-һалым араһына йәшереп тығып ҡуйылған биш-алты һаҡлыҡ кенәгәһе килеп сыҡты. Атаһы ҡарт ул кенәгәләрҙе: «Һин, мәлғүн, ул аҡсаны барыбер йә хөкүмәт, йә кеше талап йыйғанһың, мин, исмаһам, уны хәйер итеп таратырмын», — тип һөйләнә-һөйләнә үҙ ҡуйынына тыҡты. Ә иҙәндә аунап ятҡан быйманы ашығыс ҡына ҡулына алды ла уның эсенә нышып тултырылған алтын-көмөш сәғәттәрҙе, бриллиант ҡашлы балдаҡ, һырғаларҙы форточканан сылтыратып урамға түгә башланы. Асфальтҡа зыңлап төшкән

алтын-көмөш тауышы Әхмәттең ҡолағына ап-асыҡ килеп бәрелде.

— Бына, һиңә, битһеҙ ҡарун, кәфенеңде ашағыр! Игелекһеҙ, дәүләт талаусы, бәдбәхет. Ҡулың ҡороғор, миңә тейешле хәйерҙе лә кешенән бирҙерәһең бит, иманһыҙ! — тип ҡарт улының арҡаһына бер-ике бирҙе лә ингән форточкаһынан кире сығып китте...

Ҡара тиргә төшкән Әхмәт Әҙелғужиевич, аяҡтары менән тыпырсынып тулай торғас, ауыҙына тығылған теүәтәйҙе теле менән этеп сығарҙы ла ҡапыл бөтә көсөнә: «Өйгә уғры төштө, Әҙелғужа мулла бөтә мөлкәтемде өптәп сығып ҡасты!» — тип аҡырҙы. Икенсе карауатта ятҡан бисәһенең:

— Әй, әй, әллә ҡотороп бараһыңмы? Ниңә шул ҡәҙәр ер ярырҙай булып аҡыраһың, ә? Һиңә ни булды? — тигән ҡалтыранған борсоулы тауышы Әхмәткә стена аша ғына ишетелгәндәй булды. Ул ҡапыл күҙен асты ла, ялан аяҡтарын һалындырып, карауатына тороп ултырҙы. Ҡаты көрһөндө лә простыняһының сите менән һалҡын тир бәреп сыҡҡан еүеш маңлайын һөрттө. Ул, эйелеп, карауат аҫтын оҙаҡ ҡына һәрмәштерҙе лә туҙанға батҡан үҙенең аҡ быймаһын һөйрәп сығарҙы. Быйма ҡунысына ҡалтыранған ҡулдарын тыҡты. Аҡ сепрәк моҡсай эсендәге мөлкәтенең теүәл икәнен белгәс, уның шомло күңелендә тыныслыҡ урынлашты. Ул яңынан түшәгенә ятты. Ләкин уны башҡаса йоҡо алманы.

Иртәгеһенә эше бөтөр-бөтмәҫтән ул үҙ урынбаҫарын эйәртеп, яңынан зыяратҡа килде. Зыяраттың керләнеп бөткән төп кенәгәһен алып, дерелдәгән бармағы менән һәр фамилияны төртөп тигәндәй атаһын эҙләне. Атаһының фамилияһын, исемен тапты табыуын, ләкин уны ерләгән саҡта яҡындарының булмауы сәбәпле ҡәбереңең ҡайҙа икәнлеге теркәлмәгән булып сыҡты, шуға күрә уны бер кем дә аныҡ ҡына күрһәтә алманы.

— Әҙелғужа мулланың ятҡан ере бына ошо тирәләрәк булырға тейеш, — тип зыяраттың яңы ҡарауылсыһы таяғының осо менән сырмалсыҡ үлән үҫкән бер шырлыҡ ҡалҡыулыҡҡа төрттө.

Икенсе көнөнә Әхмәттең күрһәткән урынына идара төҙөүселәре башта тимер рәшәткә ҡорҙо, ә бер аҙҙан һуң: «Был урында... йылда Әҙелғужа Тәлғәтов күмелде», — тигән таш яҙҙырып, уның осона ҡуйып китте.

Бер аҙнанан идара начальнигы исеменә килеп төшкән зыярат контораһының түләү ҡағыҙын Әхмәт Әҙелғужиевич ҡулында әйләндергеләп ултырҙы ла: «Торлаҡ төҙөлөшө хисабынан түләргә», — тигән тамға һуғып, был ҡағыҙҙы үҙҙәренең бухгалтерияһына төшөрҙө. Атаһына иң һуңғы «гүр саҙаҡаһы» ана шул булды.

# ӘМИР БАҪЫУЫ

Был бик күптәнге ваҡиға инде... Уның еп осо ҡаты һуғыш осорона барып ялғана.

...Ҡәһәрле һуғыштың аяуһыҙ ялҡыны Агиҙел йылғаһының ҡултығына һыйынып ҡына ятҡан Һалабаш ауылын да ялмап үтте. Кисә генә колхоз баҫыуҙарын гөрләтеп комбайнда иген урған ирҙәрҙе, ҡеүәтле тракторҙар менән ер аҡтарған егеттәрҙе һуғыш упҡыны һөйрәп алды.

Колхоз идараһының ҡуңалтаҡ бүлмәһендә һыңар ҡулы менән сикәһен ҡыҫып, «Ҡыҙыл туғай» колхозына кисә генә райком тәғәйенләп киткән яңы председатель Туғанбаев ултыра. Уның эскә һурыҡҡан яңаҡтарын ҡара мыйыҡ төктәре баҫа башлаған. Туҙғыған сәсен ул ара-тирә уң ҡулы менән өҫкә һыйпай, ләкин салғы аҫтында боҫоп ҡалған үлән шикелле, уның шырт сәсе тырпайып яңынан өҫкә ҡалҡып сыға. Гимнастеркаһының һул яҡ еңе киң ҡайышына ҡыҫтырып быуылған. Сусайып торған осло яурын башы, ул һөйләшкәндә раҫлап торғандай, берсә ҡалҡып, берсә аҫҡа төшөп хәрәкәтләнә.

Уның алдында ҡултыҡ таяғына таянып, кисә генә больницанан ҡайтып төшкән 12—13 йәштәрҙәге түңәрәк бите ҡара янған мөләйем ҡарашлы теремек кенә бер малай баҫып тора. Уны был заманда «малай» тип атауы ла ҡыйын, сөнки улар — колхоздың кендеге, ауыл яҙмышы уларға терәлеп ҡалған. Колхоз йөгөн уртаға егелеп, ошо малайҙар һөйрәй хәҙер. Быны аңлап өлгөргән яңы председатель Туғанбаев ағалары улар менән итәғәтле, ихлас булырға тырыша.

— Йә, Әмир Фәйзрахманович, имен-һау ҡайттыңмы? Таяҡты ҡасан ташлап, йүгереп китергә самалайһың? — тине колхоз председателе, аҫтан өҫкә күҙ ҡарашын һирпеп. — Мә ултырғыс, ултырып һөйләшәйек. Атлы ҡаҙаҡтар шикелле тормайыҡ әле, — тип өҫтәне.

Әмир, таяғын ҡаҡ иҙәнгә таҡылдатып, уға этелгән бүкәнгә килеп ултырҙы. Яланғас бүлмә эсе тын ҡалды.

Тик председатель башы осонда ҡыҫығыраҡ күҙҙәренән мәкерле ҡараш ташлап, колхоз эшен даими күҙәтеп торған Сталин ғына, былардан яуап көткәндәй, йылмайып ҡуйҙы һымаҡ тойолдо.

Больницала оҙаҡ ҡына ятыуҙан йонсоп, ҡобараһы осҡан, яңаҡ һөйәктәре ослайып сыҡҡан Әмирҙең башынан ниндәй фажиғәле ваҡиға үтеүен яңы председатель ишеткәйне инде.

Ағиҙелдең юғары ағынан ҡыуғын төшкән саҡта, Һалабаш ауылы ҡаршыһындағы йылғаның тарлауығына бүрәнәләр килеп тығылды. Шарпы урында шатыр-шотор

килгән бүрәнәләр сатай-ботай — ҡайһыһы арҡыры, ҡайһыһы буй тигәндәй тығылып, йылғаны бөтөнләй бикләп, быуа яһап ҡуйҙы. Көнө-төнө туҡтауһыҙ аҡҡан ағас был урында өйөлгәндән-өйөлдө. Тап ошо мәлдә өҫтән «Һалабаш ҡаршыһында тығылған ағасты ике ярға сығарып, йылғаны асырға» тигән фарман килеп төштө. Был эшкә аяғынан баҫҡан бөтә кеше йәлеп ителде.

Йылғаның өҫкө яғынан ағастарҙы ат менән ярға торттырып, штабелдәргә һалыу эше башланды. Тығылған ағастарҙы яр башына күтәреү тамамланып, йылға үҙәне таҙарғас, Ағиҙелдән иң ҙур һал ағып үтергә тейеш була. Ләкин ағастарҙы сығарып бөтөр-бөтмәҫтән: «Һыу үренән һал килә!» — тигән хәбәр Һалабашҡа килеп етә. Ике-өс урында һалдың арҡанын бәйләп туҡтатыу ниәте менән яр башына бүрәнә ослап ҡағалар.

Һалды ҡаршыларға кешеләр тәғәйенләнә, ләкин ни сәбәп менәндер, өҫтән ағып килгән һал күренгән мәлдә был бүрәнәләр янында Әмирҙән башҡа бер кем дә булмай сыға. Тарлауыҡҡа килеп ингәс тә, ҡойроғо әллә ҡайҙарға һуҙылған һал үҙенең тиҙлеген шәбәйтә. Һал өҫтөндә ғауға күтәрелә. Бына-бына һал тығылып ятҡан бүрәнәләргә бәрелеп, селпәрәмә килеүе мөмкин, уның өҫтөндәге бөтә мөлкәттең, һалсыларҙың һыу аҫтына китеү ҡурҡынысы тыуа. Һалдың алғы ишкәксеһе: «Һалды тотоғоҙ, ҡотҡарығыҙ!» — тип ҡысҡыра ла һал бәйләнгән йыуан сүс арҡанды ҡағылған бүрәнә эргәһендә торған малайға ырғыта. Арҡандың осон ҡулына эләктереп, Әмир бүрәнәне бер генә ҡат әйләндерергә өлгөрә, ҡалғанын ул хәтерләй алмай... иҫе китеп йығыла, тик һул аяғының һум итен үткер балта менән һыҙырып алған төҫлө йөрәк өҙгөс ауыртыу ғына иҫендә уйылып ҡала.

Уның бөтөнләй яланғас ҡалған һәм бүрәнәгә ҡыҫылып бер нисә урынынан һынған аяғын район врачтары бик оҙаҡ дауалай. Ахырҙа аяҡ бармаҡтарын иҙәнгә терәй башлағас, ҡултыҡ таяғына атландырып, уны ауылына ҡайтарып ебәрәләр.

Бына бөгөн үҙ йәнен аямай һал ҡотҡарған Әмир колхоз идараһында, председатель эргәһендә. Колхоз хужаһы үҙ һорауына яуап бирмәй, шыраулы усы менән таяғын һыйпап ултырған Әмиргә яңынан өндәшә. Шул саҡта ғына ул иҫенә килеп:

— Ә... ә... — тип һуҙа ла. — Ағай, хәҙергә ҡасан аяҡҡа баҫыу билдәле түгел, ҡалаға ҙурыраҡ больницаға барырға ҡушалар.

— Бына нәмә, Әмир ҡустым, — тине яңы председатель, етдиләнеп. — Хәҙер больницаларға йөрөр ваҡыт түгел, һөйәген тоташтырһалар, уға ит үҫер. Бына һөйәге булмаһа

ғына ҡыйыныраҡ, — тип ул үҙенең буш ҡуллы сурайып торған яурынын һелкеп ҡуйҙы. — Иртәгәнән атайың кырандасын ек тә колхозда бригадирлыҡ эшенә тотон. Аяғың шул бригада кырандасында йөрөп йүнәлер әле.

«Тиҙ генә ризалыҡ белдерһәм, яңы түрә алдында әҙәпһеҙ булып күренермен», — тип Әмир баш тартырға сәбәп эҙләне.

— Грамыт бик һай бит әле, ағай, атай киткәс, мәктәпте ташларға тура килде, — тине.

— Бына һуғыш бөткәс, икәүләп белем алырға тотонорбоҙ, — тип мәрәкәләне председатель.

Әмирҙең атаһы Фәйзрахман ағай ҙа фронтҡа китерҙән алда оҙаҡ йылдар колхоз бригадиры булып эшләгәйне.

Шулай итеп, ун өс йәшкә сыҡҡан Әмир, ҡултыҡ таяғын да ташламайынса, колхоз бригадиры булып китте.

Үрге остан иренең йөнтәҫ ҡолаһын егеп ҡайтып килгән улын күреп, әсә шатлығының сиге булманы, ул, ҡаҡса бите буйлап тәгәрәгән әсе йәштәрен ҡул һырттары менән һөртә-һөртә, беренсе тапҡыр яңы бригадирға ҡапҡа асты. Ашъяулыҡ йәйеп, улына ҡыҫыр ғына сәй яһап эсерҙе. Улының тамаҡ төбө менәнерәк, атаһына оҡшатып ҡайҡайыңҡырап эшлекле хәбәр һөйләп ултырыуы әсә күңеленә хуш килде, эске шатлығынан уның йөрәге күкрәгенә һыймай туланы. Нурлы йөҙөнә сыҡҡан ҡыуаныс һыҙаттарын улына һиҙҙермәҫкә тырышып, әсә кеше:

— Улым, атайың кешегә алъюҫыҡҡа ҡағылып-һуғылып барманы. Эш кешеһен бер ҡасан да әбиҗәнйәгә бирмәне. Былай ҙа күңеле китек кешеләрҙе йәберләмә, бинахаҡҡа кеше рәнйетеүҙең гонаһы бик ҡаты, яҡшы һүҙ — йән аҙығы, насар һүҙ — йән ҡаҙығы, тигән боронғолар, — тип теҙҙе.

— Ул мәсьәлә, әсәй, уйланылған ул... — тип ебәрҙе Әмир эшлекле генә. «Нимәһе уйланылғандыр?» Уныһын әсә кеше, әлбиттә, аңлап еткерә алманы.

Әмир атаһы бригадаһын ҡабул итеп алған саҡ ҡыҙыу бесән әҙерләү ваҡыты ине. Косилкаға ултырырлыҡ ирҙәр ҡалмағас, ул бөтә бригадаһына тиерлек ҡул салғыһы тоттторҙо. Эшкә тотоноп китерҙән алда атының теҙгенен талға эләктерҙе лә, һылтыҡлай-һылтыҡлай, унан күрһәтмә көтөп торған бер төркөм ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға эргәһенә килде. Ҡултыҡ таяғының ергә батҡан осон тартып сығарҙы ла, ҡатҡан суҡраҡҡа тераn, уның тотҡаһына үҙенең кепкаһын элде. Таяғына уңайыраҡ таянып, һүҙ башланы.

— Бына, апайҙар, еңгәйҙәр, бесән мәле лә етте. Ошо Ағиҙел ҡултығындағы тирмән болонлоғон йыл да косилка менән саба торғайныҡ, ә быйыл ундай мөмкинлектән мәхрүм булып торабыҙ. — Ошо урында ҡайһы бер нескәрәк күңелле ҡатындар танауҙарын мыш-мыш тартып алды. —

Шулай булғас, беҙгә был бесәнлекте ҡул менән сабырға тура киләсәк. Һәр кешегә сабыу заданиеһы 30 сутый. Әгәр ҙә кем дә кем үҙ заданиеһын арттырып үтәһә, уға колхоз биргән ярты ҡаҙаҡ икмәктән тыш берәр стакан арыш оно бүлеп сығарам. Идара менән ул хаҡта һөйләшелгән, — тип ашараҡ һуҡтырҙы яңы бригадир. — Ә бына, Сәлимйән олатай, — тип ул алғараҡ сығып шыма һаҡалын кәкре бармаҡтары менән тарап, ниҙер уйланып торған ҡартҡа мөрәжәғәт итте, — арбама һалып түшке, яныуыс алып килгәнмен. Һинең бурыс, олатай, салғы тапап, ваҡытында салғы янып тороу булыр, — тине. — Колхоздың бесән әҙерләү буйынса эш планында быға бер ярым труддин ҡаралған, олатай, — тип өҫтәне яңы бригадир.

— Ә уныһы, улым, ҡасмаҫ әле, бына йәй айында колхозға ғына түгел, үҙебеҙгә лә етерлек бесән эшләп ҡалырға кәрәк. Ҡапылда үлергә йыйынмайбыҙ ҙа баһа, — тине ҡарт. — «Йә, балалар, хәйерле сәғәттә!» — Ҡарт беренсе бакуйға юл башланы.

Бөтә кеше араһынан имсәк балаларын күтәреп бакуйға ыңғайлаған бер нисә ауыл ҡатынын күреп, бригадир уйға ҡалды. «Был нисек була инде?» Миһырбаныу еңгәйҙең был бишенсе балаһы, ул бөгөн сабыйын күтәреп, колхоз эшенә килгән, ә ҡалған береһенән-береһе вағыраҡ балалары уның ярты ҡаҙаҡ икмәген көтөп, өйҙә тилмереп ултыра. Ә уның менән йәнәш атлаған Мәстүрә әле тормошҡа сыҡмаған, дәрте һәм көс-ғәйрәте артылып торған йәп-йәш ҡыҙ. Әлбиттә, ул Миһырбаныу еңгәгә ҡарағанда нығыраҡ та, яҡшыраҡ та эшләйәсәк, сөнки балалы ҡатын бер бакуй сыҡҡас та, өйҙә ҡарауһыҙ ҡалған сабыйҙарының яҙмышы уға күңел тыныслығы бирмәйәсәк, кәүҙәһе болонда, ә йәне өйҙә буласаҡ. Шулай булғас, колхоз калдауайынан алған ике бот арыш онон стаканлап ғаиләһе ишле ҡатындарға таратырға кәрәк, буйҙаҡ ҡыҙҙар нисек тә түҙер», — тигән фекергә килә колхоз бригадиры. «Ә уларҙың эшен нисек күрһәтергә?» — тигән уй тағы борсой. Кемдер уның ҡолағына: «Арттырып яҙырға кәрәк, бригадир иптәш», — тип бышылдағандай булды.

Ун өс йәшлек бригадир тартып-һуҙып стаканлап он бүлеп, «Ҡыҙыл туғай» колхозының күп балалы ғаиләләрен аслыҡ тырнағынан ҡотҡарып алып ҡала. «Тик тиҙерәк арыш бешеү көнөн күрергә насип булһа ярар ине», — тип ҡайғыра ул. «Арышҡа төшөп китһәк, унда ҡурмас ҡурып, арыш талҡанын тартып аяҡҡа баҫып китер инек», — тип өмөтлө хыял менән йәшәй ул. Бына тере кешегә уныһы ла килеп етә.

Арыш урағының башланыуы бригадир Әмир башына шатлыҡтан күберәк ҡайғы-хәсрәт килтерә. Башаҡ ҡыр-

ҡып алып ҡайтыусылар өсөн 1932 йылдың 7 авгусында уҡ 7 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү язаһы уның йөрәгенә оло ҡурҡыу һала. Ураҡҡа төшкән тәүге көн үк уның ҡурҡыуы дөрөҫ икәнен күрһәтә. Кис эш бөтөрөп ҡайтырға сыҡҡан үҙ колхозсыларының ҡулында ул ҡырҡылған, ыуылған башаҡтар тултырылған төрлө төҫтә, төрлө ҙурлыҡта моҡсайҙар күрә. Уның йөрәге жыу итеп китә, сөнки бының аҙағы яҡшылыҡ менән бөтмәйәсәген йәш булһа ла асыҡ күҙ алдына килтерә.

Хәбәрҙең ҡайғылыһы ла, ҡыуаныслыһы ла халыҡ күңелендә оҙаҡ ятамы ни? «Бына кисә генә күрше «Ҡыҙыл ялан» колхозында арыш урлауҙан ҡайтып килгән ҡатын-ҡыҙҙарға тентеү ойоштороғандар. Балалы ике ҡатынды суд язаһына тарттырып, НКВД-ға алып киткәндәр икән», — тигән хәбәр Һалабаш ауылына ла килеп ишетелә. Ләкин бригадир нисек кенә һаҡ булырға киҫәтһә лә, ил өҫтөнә килгән аслыҡ халыҡты яза алыуҙан да ҡурҡытмай, ул законға ҡарағанда көслөрәк булып сыға. Ә ул арала «Кисә НКВД башаҡ ҡырҡҡан өсөн фәләнде алып киткән, шул ауылда халыҡҡа тентеү үткәргәндәр», — тигән шомло хәбәр ҡуйырғандан-ҡуйыра.

Был хәбәрҙәр бригадирҙың башын ҡайғылы уйға һала. «Нишләргә? Һуғылған арышты хеҙмәт көнөнә таратып биреп булмай, бөртөгөнә тиклем дәүләткә тапшырырға», тигән ҡәтғи күрһәтмә бар. Көнөнә һәр кешегә бирелгән бер ҡаҙаҡ икмәк менән көн итеү мөмкин түгел. Бригадир баҫыу башында ултырыусыларҙы эш бөткәс бер көн йыя ла:

— Апайҙар, еңгәйҙәр, мин һеҙҙең көн дә башаҡ урлап алып ҡайтҡанығыҙҙы күреп йөрөйөм, ләкин башҡаса бер ниндәй ҙә сара юҡлығын да беләм. Ғаиләләрегеҙ асыға — уныһы ла миңә мәғлүм. Нишләп ҡарайбыҙ? Берәр аҡыллы кәңәшегеҙҙе бирһәгеҙсе? — тип үтенә бригадир.

Ләкин моҡсайҙарын ҡулына тотоп, яурындарына ураҡтарын һалып торған бригада халҡы, бер нисек тә кәңәш бирә алмай, тынып ҡала. Бөтәһенең талған күҙ ҡараштары барлыҡ затлы ниғмәттәрҙән ҡиммәтерәк башаҡлы моҡсайҙарға төбәлә. «Бөгөн бригадир беҙҙең башаҡтарҙы тартып алырға итә, күрәһең», — тигән шомло уй һәр кемдең йөрәген өйкәй. Бер ниндәй ҙә һүҙ ала алмай аптырауға ҡалған бригадир яңынан телгә килә:

— Апайҙар, еңгәйҙәр, нишләп шул ҡәҙәре батыр ҡыланаһығыҙ, исмаһам, закондан ҡурҡмаһағыҙ, балаларығыҙҙың тере етем ҡалыуын уйлағыҙ. Ҡылған енәйәтегеҙ өсөн төрмә ишеге алдында тороуығыҙ һеҙҙе әҙ генә лә борсомаймы ни? Ул тиклем кемгә ышанаһығыҙ? — тип бригадир, алдан үҙе илап ебәреүҙән ҡурҡҡандай, ҡарашын ергә төбәй.

Сафта торған һалдаттар шикелле, унын алдында баҫҡан күмәк ҡатын-ҡыҙ бер ауыҙҙан:

— Әмир ҡәйнеш, бар ышанысыбыҙ тик һин генә. Бала булһаң да, һиндә атайың холҡо. Ул да бер ваҡытта ла кешене ғәйепһеҙгә НКВД ҡулына тотоп бирмәне.

— Эйе, Әмир ҡустым, бар ышанысыбыҙ һиндә генә. Астан үлтерһәң дә, алып ҡалһаң да, тик һин генә — һиңә баш һалабыҙ! — тип шаулашты халыҡ.

Бригада кешеләренең ышанысынан Әмирҙең күңеле тулды, башын ситкә бороп, тамағына тығылған төйөндө йоторға тырышты, ләкин йөрәкте телгеләгән ул төйөн ары ла, бире лә китмәне. Көс-хәл менән үҙен ҡулға алған бригадир күптән уйлап йөрөгән фекерен үҙенә төбәлеп торған кешеләргә асыҡтан-асыҡ әйтергә мәжбүр булды.

— Ағай-эне, улай булһа, бына минең һүҙҙе тыңлағыҙ: хәҙер мин һеҙҙең ҡулығыҙға химик ҡәләм тотторам. Шуның менән моҡсайҙарығыҙ тышына исемегеҙҙе яҙығыҙ ҙа анау торған минең арбаға алып барып һалығыҙ. Тик аҙаҡтан үпкәләштән булмаһын: мин уны өйгә алып ҡайтҡас, һәр кемдең ғаилә һанына ҡарап, яңынан бүләсәкмен. Әгәр инде ошоға риза булмаһағыҙ, теләгәнегеҙҙе эшләгеҙ, үҙегеҙ тотолғанса, һәр кемегеҙ айырым ташығыҙ, — ти ҙә бригадир яуап көтә. — Мин сүтәки бригадир кеше, мине идара НКВД-нан тентетергә бирмәҫ, — тип өҫтәп ҡуя Әмир.

— Әмир ҡәйнеш, Әмир ҡусты, беҙ риза. Белгәнеңде эшлә, — тип риза була халыҡ.

Кырандасына һалынған бер өйөм башаҡлы моҡсайҙарҙы Әмир бесән менән баҫтыра ла өҫтөнә ултырып, ауылға ҡайтып төшә. Шулай ураҡсылар йыйған башаҡты ул үҙ өйөндә һуҡыр шәм яҡтыһында көн дә яңынан бүлеп, кешеләргә таратып бирә. Бер аҙ тамағы туйған халыҡтың эшкә дәрте арта, болонлоҡтан өҫкә күтәрелгән Оҙонһырт битендәге арыш баҫыуының майҙаны күҙгә күренеп кәмей, эш ырап ҡала.

Колхоздың яңы председателе Туғанбаев йәш бригадирҙы маҡтап бөтөрә алмай. Идарала йыйылған һайын унын исемен әйтмәй ҡалмай. Тик уны бер генә нәмә аптырата: бөтә тирә-яҡта ураҡ урыусыларға тентеү төшөрөп, НКВД кешеләре көн дә бер-ике кешене алып китеп тора. Ә унын колхозында хәҙергә именлек, эш тә ырамлы ғына алға бара. Был ваҡиға уны ғына түгел, район түрәләрен дә ғәжәпкә ҡалдыра. Һиҙҙермәҫтән колхозға баҫып инеп, Әмир бригадаһы кешеләренә, эш бөткәс, тентеү ойоштороп та ҡарайҙар, ләкин бушҡа ғына... Уларҙың береһендә лә башаҡ таба алмайҙар.

Улының хилаф юлға баҫыуын көн дә күреп йөрөгән әсәһенең йөрәге өҙгөләнә, ул ҡат-ҡат улын был эштән баш

тарттырырға ла юл эҙләй, уның кистәрен башаҡ бүлеп ултырыуын күреү эсә кешегә ғазапҡа әүерелә. «Улым, буш менән булма, йәш кенә көйөңә үҙеңде һәләк итеп ҡуйырҙар. Ошо уҡ ауыл кешеләренең һине тотоп биреүе мөмкин», тип илай-илай киҫәтә.

Ә Әмир әсәһе һүҙенә ҡул ғына һелтәй. «Мин уны үҙемә алмайым да баһа. Кеше өсөн эшләйем. Ас халыҡтан мин нисек ураҡ урҙырайым? Ҡамыт кейҙерерҙән алда ана атты ла ашатып-эсереп алалар. Был бит кеше, әсәй!», — тип Әмир һаман үҙенекен эшләй. «Ярай, улым бөтөнләй башһыҙ түгел, улай-былай килеп сыҡһа, халыҡ та, идара ла берҙәй тороп, яҡлап алып ҡалырҙар әле», — тип әсә күңеле лә тынысланғандай була, улының эшен яҡшыға юрай.

Ураҡты яртылағас, «Ҡыҙыл туғай» колхозының Оҙонһырт баҫыуында көпә-көндөҙ болотһоҙ зәңгәр күктә йәшен йәшнәне. Колхоздағы ниндәйҙер шымсының ошағы буйынса баҫыу ҡырынан бесән менән ябылған моҡсайҙар өҫтөнә ултырып ҡайтып килеүсе бригадирҙы НКВД-ның ике кешеһе юлда ҡаршы ала. Колхоз бригадирын арбанан һөйрәп төшөрәләр ҙә тентеү яһайҙар. Уның таянып торған ҡултыҡ таяғын һыпыра тартып алып, береһе ҡап уртаға һындыра ла юл ситендәге сауҡалыҡҡа ырғыта. Юлда талаш-тартыш барғанын күргән ураҡсылар эштәрен ташлап, бригадир эргәһенә йүгерә. Һыңар аяғы менән сатанлап, улар юлына Әмир ҡаршы сыға.

— Апайҙар, еңгәйҙәр, ураҡтарығыҙҙы ташлағыҙ. НКВД кешеләренә тейә күрмәгеҙ, барыбыҙ ҙа һәләк буласаҡбыҙ. Самосуд ойоштормағыҙ, — тип ҡысҡыра, үтенә, ялбара.

— Ул ғәйепле түгел!

— Уның тырнаҡ ҡараһындай ҙа ғәйебе юҡ!

— Беҙ минауат, беҙҙең барыбыҙҙы ла ултыртығыҙ! — тип халыҡ ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, НКВД кешеләрен этеп-төртөп улар арбаһында ятҡан үҙ моҡсайҙарын тартып алырға тотона. Бал ҡорто кеүек ҡуҙғыған кеше араһына Әмир инеп китә.

— Зинһар өсөн, моҡсайҙарығыҙҙы улар арбаһына кире һалығыҙ. Ураҡтарығыҙға тотонмағыҙ, ҡан ҡоймайыҡ, апайҙар, барыбыҙ ҙа һәләк булмайыҡ, — тип үҙ кешеләрен өгөтләй. Бер аҙ тыныслана төшкән халыҡ алған моҡсайҙарын арбаға кире тейәй башлай, ураҡтарын ергә ҡаҙап, бер урынға өйөлөшөп, инде нимә булырын көтә башлай. Шул саҡ бригадир Әмир башында йәлпәшеп ятҡан кепкаһын ала ла:

— Хушығыҙ, апайҙар, еңгәйҙәр, минең ауылдаштарым. Мине насар итеп иҫкә алмағыҙ. Бына фашистарҙы тар-мар итеп, беҙҙең атайҙар әйләнеп ҡайтһа, ҡурмас түгел, күпертеп ҡалас ашап ятырбыҙ әле. Әгәр һеҙгә берәр насарлыҡ

ҡылһам, түбәнселек менән ғәфү үтенәм, — ти ҙә бер аяғы һынған ҡош шикелле, ырғый-ырғый НКВД арбаһына үҙе барып ултыра.

— Хуш, балам, мир өсөн башың һәләк булды, — тип уның менән беренсе булып салғы яныусы Сәлимйән бабай барып хушлаша.

Күҙ йәштәрен тыя алмай арба өҫтөндә бойоғоп, әллә ниндәй күңелһеҙ уйҙарға дусар булып ултырған бригадирҙары менән бөтә халыҡ һуңғы тапҡыр күрешеп ҡалырға, устарындағы йөрәк йылыһын уға бүләк итергә тырыша.

— Барыһы өсөн дә рәхмәт һиңә, беҙҙең бригадирыбыҙ.

— Һалабашҡа имен-аман кире әйләнеп ҡайтырға насип булһын! — тип хушлаша уның менән ауыл халҡы. Артҡа әйләнеп боролоп ултырған йәш бригадир ҙа күҙенә тығылған йәштәрен йотоп, ҡалтыранған тауышы менән:

— Әсәйемә минән сәләм тапшырығыҙ, минең ауылдаштарым алдында бер ниндәй ҙә ғәйебем юҡ, тип әйтә күрегеҙ, — тип үтенә. Уның һуңғы һүҙе шул була.

Әмир оҙаҡ өйөлөшөп, илай-һыҡтай уны оҙатып ҡалған ауылдаштарына күҙҙән юғалғансы ҡулын болғап, ҡараштары талғансы уларға ҡарап барҙы. Яңы ғына таҙа дегет менән майланған, сылтлап барған НКВД арбаһының тәгәрмәстәре уны тормош билдәһеҙлегенә алып китте.

Яңғыҙ улы ҡулға алынып киткәндән һуң ярты йыл үтеүгә уның әсәһе Вәрәкә апайға иренең дә ҡара ҡағыҙы килде.

Йылдар үтте, ләкин һыу төбөнә батҡандай ғәйеп булған колхоз бригадирынан бер ниндәй ҙә хәбәр-хәтер булманы, ул аты-юлы менән юғалды.

Хәҙер улар ғаиләһенән бер кем дә юҡ инде. Бер нисә йыл үтеүгә юғалған ике ир кеше өсөн көнө-төнө илап һары ҡайғыға юлыҡҡан Вәрәкә ике күҙенән дә мәхрүм булып ҡалды, һағыш хәсрәте уның аҡылын да юйҙы, ул эҙһеҙ юғалған улы менән көнө-төнө һаташты. Ағиҙелдең ташҡын миҙгелендә: «Улымды сығып ҡаршы алам», — тип яр буйына китеп барған Вәрәкәне лә Ағиҙел упҡыны йотто.

Үҙ бригадирҙары хөрмәтенә Һалабаш ауылы халҡы Оҙонһырт ҡырын «Әмир баҫыуы» тип атаны. Бригадирҙың тере ҡалған ауылдаштары йыл һайын арыш урағы башланыу менән беренсе уңыштың игененән күпертеп ҡалас бешереп ғәйепһеҙгә башын һалған ун өс йәшлек Әмирҙе иҫкә төшөрә, был көндө тәбиғәт тә, уның яҡты йәш сырайын хәтергә алғандай, үҙенең ләйсән ямғырын һибеп үтә, әйтерһең дә, ул да йәш Әмирҙе һаман һағынып көтә. Баҫыуҙа осрашыуҙан өмөтөн өҙмәй... Ғәйепһеҙ ҡорбандар өсөн тәбиғәт тә һыҡтай...

## *Рамазан Өмөтбаев тураһында иҫтәлектәр*

# БЕҘҘЕҢ ҒАИЛӘ ХӘТИРӘЛӘРЕ

Беҙҙең атай — Өмөтбаев Ғимран Ғайзулла улы үҙ заманында бик уҡымышлы, аҡылы тәрән, көслө рухлы, тура һүҙле, үткер ҡарашлы һәм аң-белемгә ынтылыусы өлгөр бер кеше ине. Ошо уйҙар менән беҙ июнь айының бер көнөндә (1950 йыл) Әлмөхәмәт ауылынан Сибай ҡалаһына күсеп килдек. Әммә ләкин матур итеп йәшәп ятҡанда, беҙҙең атайға был нигеҙҙә оҙаҡ йәшәргә насип булманы. Март айының яҙғы һалҡын бер көнөндә, 1955 йылдың 5 мартында беҙҙең атай яҡты донъя менән хушлашты. Ә беҙ әсәй — Фәғилә Хәким ҡыҙы менән тороп ҡалдыҡ. Беҙҙең әсәйем киреһенсә: баҫалҡы, артыҡ һүҙ һөйләп бармаҫ, кешелекле, кеселекле, тыныс холоҡло, нәҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ғына хас булған, ысын йөрәкле ҡатын ине. Улар атай менән бергәләп татыу ғүмер итеп, 6 бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Әсәйгә лә атайыбыҙ кеүек оҙаҡ йәшәргә тура килмәне, 1961 йылдың 15 мартында, яҙҙың матур көнөндә вафат булып ҡалды.

Беҙ, шулай итеп 3 бала — Хәнифә, Әсхәт һәм Мәсғүт тороп ҡалдыҡ. Ошо көндән алып беҙҙе ҡурсалап торған Рамазан ағай тәрбиәһенә ҡалдыҡ һәм ул беҙҙең өсөн атай һәм әсәй ролен үтәне, сөнки беҙҙең иң оло апай — Хәшиә Ғимран ҡыҙы үҙ ғаиләһе менән Магнитогорск ҡалаһында йәшәй ине. Атай, әсәйһеҙ ҡалғас, беҙ — өс бала, тормош ауырлығының үҙебеҙгә төшәсәген аңлап, донъя көтә башланыҡ. Ә Рамазан ағай беҙгә аҡыллы кәңәштәрен биреп, һәр ваҡыт беҙҙе ҡурсалап, төрлө яҡтан ярҙам ҡулын һуҙып торҙо.

1961 йылда Өфөгә эшкә күсерелеп, баш ҡалала йәшәгән осоронда ла, Баймаҡ халҡы менән араны өҙмәне, уларҙың шатлығы, ҡыуаныстарын уртаҡлашып, уңышта-

рына һөйөнөп, оло ихтирам менән иҫкә алып йәшәне. Сөнки ул — Рамазан ағай — үҙенең түрәлеген күрһәтеп барманы, һәр кем менән дә ябай итеп аралашып, илем, халҡым тип янып йәшәүсе көслө рухлы шәхес булды. Шуға күрә ул башҡорт халҡы һәм уның киләсәге, милләте һәм яҙмышы тураһында күп уйланды, гәзит биттәрендә лә ошо турала күп мәҡәләләр менән сығыш яһаны. Үҙенә йөкмәтелгән бурысты, эшен бөтә йөрәге ҡушҡанса, намыҫ менән үтәне һәм эшләне, шуға күрә лә халыҡ уны ятатты, ихтирам итте, сөнки ул халҡым, республикам тип янып йәшәне.

Рамазан ағай үҙенең бер журналисҡа биргән интервьюһында былай тигәйне: «Мин үҙемдең физик һәм аҡыл һәләтемде аҙағына тиклем файҙалана, ҡуллана алманым, дөрөҫөрәге, миңә мөмкинселек бирмәнеләр, шуныһы бик йәл».

Рамазан ағай хаҡлы ялға сыҡҡас, ижади эшкә тотоноп китте. Үҙенең һуңғы көндәренә тиклем әҙәби ижад менән әүҙем шөғөлләнеп 6 китабы донъя күрҙе. Уның һәр бер китабы халыҡ араһында оло ихтирам менән, яратып ҡаршы алынды һәм уҡыусыларҙың йәнле ҡыҙыҡһыныуын тыуҙырҙы.

Рамазан ағай, Мөхтәрәмә Таһир ҡыҙы менән татыу, ғүмер буйына гөрләшеп йәшәнеләр, ике ул тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы оло улдары Ришат 1993 йылда эш урынында фажиғәле һәләк булды. Рамазан ағайға хоҙай һәм тәбиғәт тарафынан һәр төрлө һәләт йәлләмәй бирелгәйне. Ул йор һүҙле, боронғо йырҙарҙы ла бик оҫта башҡара ине. «Байыҡ», «Перовский» көйҙәренә лә бынамын итеп бейей торғайны.

Ләкин яҙмыш тигән нәмә аяуһыҙ, 1997 йылдың 24 авгусында, Мөхтәрәмә еңгәй менән пар аҡҡоштар кеүек, беҙҙе, яҡты донъяны ташлап киттеләр. Улар фани донъянан китһәләр ҙә беҙҙең араларҙа йәшәйҙәр кеүек, уларҙың һоҡланғыс, бай рухлы, кеселекле, кешелекле, саф, ыңғай сифаттары, яҡты образдары беҙҙең күңелдәрҙә мәңгегә ҡалыр.

*Әсхәт ӨМӨТБАЕВ,*
*Башҡортостан Республикаһының*
*атҡаҙанған нефтсеһе.*



Рамазан Өмөтбаев ғаиләһе менән. Атаһы — Ғимран, әсәһе — Фәғилә һ. б.



Рамазан Өмөтбаев (уңдан икенсе) ауылдаштары менән. 1930-сы йылдар.



Бер туған Өмөтбаевтар: Мәсғүт, Рамазан, Әсхәт, Хәшиә, Асия, Хәнифә.



Рамазан Ғимран улы ҡатыны Мөхтәрәмә Таһир ҡыҙы менән.



Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары Рамазан Өмөтбаев, генерал Таһир Күсимов яҡташтары менән.




Рамазан Ғимран улы Баймаҡ баҡыр иретеү заводының 50 йыллыҡ юбилейына ҡунаҡ булып саҡырылған.



Рамазан Өмөтбаев ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы президиумы секретары Барый Абдрахманов менән. 1970-се йылдар.



«Ысыҡтан эйеләү ҡылған» китабының презентацияһы. Баймаҡ районы Мерәҫ ауылы китапханаһында.



Рамазан Өмөтбаев генерал-майор П. А. Шапошников менән. 1980-се йылдар.



Рамазан Ғимран улы Өфөлә йәшәүсе әбйәлилдәр — яҡташтары менән.

# ХАЛҠЫБЫҘҘЫҢ КҮРКӘМ ШӘХЕСЕ

Рамазан ағай Өмөтбаевты бик күптән беләм. Әле алтмышынсы йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәтендә яҡташы, ағай-энеһе тейешле Ғәли Ирғәли улы Ишбулатов ҡулы аҫтында мин эш башлағанда, ул йыш ҡына марксизм-ленинизм классиктарын тәржемә итеү редакцияһына килер ҙә һәр төрлө мәҙәк хәлдәр хаҡында һөйләп, илленсе йылдарҙа өлкә партия мәктәбендә бергә уҡыған Хәмит Гәрәев, Хәлисә Ғәлиева һымаҡ һабаҡташтарының эстәрен ҡатырғансы көлдөрөп китер ине.

Шуғалыр, Рамазан ағайҙың был фани донъянан китеүенә һаман ышанып бөтмәгән кеүекмен. Бынан өс йыл самаһы элек, мин Башҡортостан Яҙыусылар союзында эшләгән саҡта, ул август ахырында Баймаҡ яҡтарына уҡытыусылар конференцияһына командировкаға киткәйне, шунан һуң башҡа тере йәнен күрергә насип булманы миңә. Уның баш ҡалаға ҡайтып, үҙе юҡта вафат булған ҡатыны Мөхтәрәмә апайҙы юғалтыуҙан ҡапыл йөрәге туҡтауы, яу ҡырында һәләк булған яугир-разведчик һымаҡ ҡына булды инде. Ә бит шул йылды көҙгәрәк беҙ йәнә Мәскәү янындағы «Переделкино» ижад йортона бергәләп барып ҡайтырға һөйләшкәйнек.

Эйе, 1996 йылда беҙ өсәү, мин, Рамазан ағай һәм хәләл ефете Мөхтәрәмә апай, унда бик күңелле ижад итеп, ял араһында ҡарағайлы урмандар ышығында ихлас серләшеп йөрөгәйнек. Ағайыбыҙ «Һынылыш» тигән яңы романын тамамланы, ул күп тә үтмәй «Ағиҙел» журналында, ә инде 1998 йылда, үкенескә ҡаршы, үҙе үлгәс, Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә лә баҫылып сыҡты. Рамазан ағай ижад йортона йәнә барасаҡ көҙөн трилогияның өсөнсө китабын донъяға тыуҙырыу хаҡында яна ине. Үкенескә ҡаршы, көтөлмәгән үлем яҙыусы Өмөтбаевтың бөтә уй-хыялдарын зил-зибәр килтерҙе.

Башҡортостан Республикаһы Президенты М. Ғ. Рәхимов Рамазан ағай Өмөтбаевты 70 йәшлек иҫтәлекле юбилейында ҡотлаған ихлас һүҙҙәрҙе килтереп әйткәндә, ул туған халҡына һәм Башҡортостанына рыяһыҙ хеҙмәт итте, эш һөйөүсәнлеге, намыҫлылығы, кешелеклелеге уға Башҡортостанда иң арҙаҡлы дәүләт эшмәкәрҙәре сафына баҫырға булышлыҡ итте. Хөрмәтле Президентыбыҙҙың ихлас һүҙҙәренә ҡушылып, Рамазан ағай хаҡында уны белгән бихисап кешеләр, республикабыҙҙың бөтә зыялылары, шул иҫәптән уны һәр саҡ ололаған ҡәләмдәштәре лә, фәҡәт ихлас, маҡтаулы һүҙҙәр генә әйтәсәгенә иманым камил. Мәҫәлән, арҙаҡлы дәүләт эшмәкәре, республикабыҙҙа иң мөхтәрәм шәхес, ил ағаһы Зекерия Аҡназаров

«Башҡортостан» гәзитенең 1996 йылдың 12 сентябрь һанында: «...Рамазан Өмөтбаевты 45 йыл буйы белгән кеше булараҡ, шуны раҫлай алам: ул талантлы яҙыусы һәм публицист ҡына түгел, ә иң юғары әхлаҡи принциптарға эйә булған кеше», — тип белдергәйне. Ә яҙыусы Сабир Шәрипов иһә 1994 йыл «Осҡон» гәзитендә: «Рамазан Өмөтбаевтың әҫәрҙәре тотошлай дөрөҫлөгө менән айырылып тора, уларҙы хатта фәһемле тормош һабаҡтары тип атарға ла мөмкин. Ул үҙе иҫән саҡта танылған һәм хөрмәт ҡаҙанған ҡәләм оҫтаһына әүерелде. Йөҙәрләгән уҡыусыларҙы шатландырып һәм кинәндереп йәнә бер тос китабы — «Ысыҡтан эйелә ҡылған» тигән эпик романы баҫылып сыҡты һәм башҡорт романдар теҙмәһен бына тигән тарихи әҫәр тулыландырҙы».

Мин был фани донъяла аҙашырлыҡ һуҡмаҡтары ла, текә ҡаялы юлдары ла, утлы ғәрәсәттәре лә, боҙло упҡындары ла булған Рамазан ағайҙың ифрат бай йөкмәткеле, үҙенә генә хас ғүмер йомғағын ҡат-ҡат тағатып ҡараным да бөйөк рус яҙыусыһы Л. Н. Толстойҙың йәнә шундай хикмәтле һүҙҙәрен хәтерләнем: «Яҙыусы эше ҡот осҡос ауыр ул. Беҙҙән башҡа, быны бер кем дә белмәй. Ныҡлап эшләү өсөн, һинең аяҡ аҫтыңда күтәрмә (русса әйткәндә, подмостки — *авт.*) булырға тейеш. Әгәр күтәрмәһеҙ эшләргә ниәтләнәһең икән, материалыңды тәләфләп, үҫтерә алмаған стеналарыңды харап ҡына итерһең...»

Рамазан Ғимран улы Өмөтбаевтың күтәрмәләре (подмостки) ифрат ныҡ һынау тота. Уларҙы нигеҙ итеп файҙаланып, ул реаль ысынбарлыҡ менән яратылған тормошсан әҫәрҙәрен республика матбуғатында бер-бер артлы баҫтыра башлай. 1987 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә «Һылыубикә әбей» тигән тәүге китабы донъя күрә. Шул уҡ йылдарҙа «Башҡорт аты», «Уянырға мөҙҙәт етте» тигән социаль-тарихи очерктарын баҫтыра. «Һарығолаҡ» тигән күләмле хикәйәһе яратып уҡылыу ғына түгел, уның йөкмәткеһе буйынса нәфис телефильм төшөрөлөп зәңгәр экрандарҙа күрһәтелә. Бөйөк Еңеүҙең ҡырҡ биш йыллығына арнап, Рамазан Өмөтбаев башҡорт халҡының данлыҡлы улы, Советтар Союзы геройы Таһир Күсимов хаҡында «Генерал Күсимов» тигән документаль повесын яҙа һәм 1990 йылда баҫтырып сығара. Был китабы Бөйөк Еңеүгә арналған һәм республика күләмендә уҙғарылған художестволы әҫәрҙәр конкурсында икенсе премияға һәм Әбйәлил районының Ким Әхмәтйәнов исемендәге әҙәби премияға лайыҡ була.

Рамазан Өмөтбаевтың күтәрмәләре һаман юғарыға үҫкәндән-үҫте. 1993 йылда уның «Ысыҡтан эйелә ҡылған» тигән эпик романы донъя күрҙе. Әҙип был әҫәрендә хал-

ҡыбыҙҙың башынан үткән ҡырҡыу хәл-ваҡиғаларҙы ғына һүрәтләмәне, ә үҙе кисергән, үҙе күргән, үҙе шаһит булған тормошто тәфсилләп, оҫта сағылдырҙы. Шуғалыр роман ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Уңыш менән рухланып, Рамазан ағай ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә был ҙур әҫәрҙең дауамын — икенсе китабын да ижад итте, әйткәнемсә, хатта өсөнсөһөн яҙыу хаҡында ла хыялланды... Һуңғы йылдарҙа ифрат күп эшләгәйне шул. Ғүмеренең һуңғы сәғәттәре етеүен һиҙепме, ул барыһына ла өлгөрөргә тырышты. Юғарыла телгә алынған әҫәрҙәренән тыш, юҡ ваҡытын бар итеп, йәнә «Баймакский медьзавод на перекрестках истории» тигән тарихи-публицистик китабын рус телендә, «Осрашыуҙар, юғалтыуҙар» исемле очерктар китабын башҡорт телендә лә баҫтырып сығарҙы бит әле. Рамазан ағай Өмөтбаевтың 70 йәшлек юбилейы айҡанлы, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре тигән маҡтаулы исеме бирелеү менән юғары баһаланды. Үкенескә ҡаршы, әҙиптең 75 йыллыҡ юбилейын республика йәмәғәтселеге уның үҙенән башҡа ғына билдәләне.

Рамазан Ғимран улы Өмөтбаев башҡорт халҡының йөҙөк ҡашы, күркәм шәхесе, онотолмаҫ дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, сағыу әҙибе булды һәм шулай булып ҡаласаҡ.

Раил Байбулатов,

*Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре*

## ЮЛДА

Олпат кеше оҙон юлға сыҡһа, алабарманланып алға ташланмаҫ, артыҡ хәрәкәт эшләмәҫ, тирә-яғына күҙ атмаҫ — барыр ерҙең йыраҡлығын белеп, ара-тирә офоҡҡа ҡарап алыр ҙа тыныс ҡына атлар ҙа атлар. Уны һауа торошоноң үҙгәреүе лә, үҙен уҙып киткән йәки ҡаршыһына тап булғандар ҙа әллә ни ҡыҙыҡһындырмай, бар маҡсаты, бар ынтылышы ниәтләгән нөктәһенә барып етеү. Рамазан Өмөтбаевтың бар булмышын, холоҡ-фиғелен, һөйләшеүен, атлауын, ижадын тап ошондай олпат юлсыға оҡшатам мин. Ул, ысынлап та, ҡабаланмай, яйламай ҙа, алдына ҡуйған маҡсаттар, ҙур ниәттәр, уй-хыялдар менән алға барыуын белә. Ул үҙенең ни өсөн юлға сыҡҡанын, ҡайҙа барырға тейешлеген бик яҡшы күҙаллай. Күҙалламаһа, сыҡмаҫ та ине.

Беҙ бүтән эштә эшләп йөрөгән кешеләрҙең ижад менән шөғөлләнеүенә нисектер сәйерһенеп, һағайып ҡарайбыҙ.

Шулай өйрәнгәнбеҙ, шулай күнеккәнбеҙ. Гәзит-журнал редакцияларында ғына эшләгән кеше яҙыусы, йәнәһе. Юҡ, ултырып ҡына уҡымлы хикәйәләр, повестар романдар яҙып булмай ул. Тимәк, әҙип ғүмере буйы яҙған, ғүмере буйы ижад иткән.

Автор шаҡ ҡатырғыс ситуациялар артынан ҡыумай. Бындай ғәҙәт бөтөнләй ят уға, ә геройҙар характерын аса. Ғөмүмән, яҙыусының манераһы талғын, тәфсилле, ентекле. Унан килеп, әңгәмәсенең һәр ваҡиғаға үҙ ҡарашы бар, әммә ул ҡараштьı уҡыусыға көсләп таҡмай, минең ише уйла тип нығышмай, ул күрһәтә, һүрәтләй, ә фекерҙе үҙең һөҙөп ал. Шул арҡала геройҙары ла тирә-яҡта барған хәлдәргә, кеше яҙмышына, ил һәм милләт яҙмышына битараф түгел. Яңылыша икән, яңылыша, әммә хатаһын таный. Ә ҡойроҡ болғамай, кеше артына йәшеренмәй.

Миңә ҡалһа, шәхес тураһында үҙе шәхес булған кеше генә еренә еткереп яҙа ала. Сөнки икенсе тауҙы күрер өсөн үҙең тау булыу фарыз, тау нигеҙенән, тау битләүенән икенсе тау күренмәй. Халҡыбыҙҙың ҡаһарман улы Таһир Күсимов тураһында бүтән кеше яҙыуын һис күҙ алдына килтерә алмайым. Яҙыр ине, әммә былай маһир итеп түгел. Ул уға һәйкәл ҡуйҙы, батырҙы белгән йәки белеү-күреү бәхетенә ирешә алмағандарға уның кем икәнен күрһәтте. Ә ул, дөрөҫөн әйткәндә, милли батыр булырлыҡ кеше булған икән дә! Эйе, Р. Өмөтбаевтың Таһиры әкиәт батырылай батыр, ҡыйыу, сая, тәүәккәл — кәрәк икән, утҡа ла, һыуға ла ташланырға әҙер торған бәһлеүән: шул уҡ ваҡытта ул нескә күңелле, кеше йөрәкле ярҙамсыл йән эйәһе. Автор уны халҡыбыҙҙың, кешелектең, бөтә ыңғай сифаттарын үҙенә йыйған ысын башҡорт итеп күрһәтә. Мин әҙипкә тулыһынса ышанам — сөнки ул быға ышандыра — һәм Таһир Күсимовты тап шулай булғандыр ҙа тип уйлайым. Эйе, бөтәһе лә дөрөҫ, әммә китапты уҡып сыҡҡас, йөрәкте әрнеү, ҡаты һыҙланыу ялмай. Сөнки шундай ҙа интернационалист кешене, 40 йылдан ашыу Совет Армияһына хеҙмәт иткән кешене эҙәрлекләү ҙә булған икән дә! Башҡа һыймаҫлыҡ эш, күҙ алдына килтерә алмаҫлыҡ хәл... Документаль повеста бик тә фәһемле бер урын бар. Ул, минеңсә, һоҡланыу аша күҙ йәштәре менән яҙылған юлдар.

1963 йылда генерал Күсимовты хәрби округ штатына саҡыралар. Сәбәбе — Венгрияға, Будапештҡа, совет ғәскәрҙәренең Көньяҡ наркомы командующийына урынбаҫар итеү. Ләкин Күсимов, сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул тип, был тәҡдимдән баш тарта. Бында шул һөйләшеүҙә командующийҙың Таһир Күсимовҡа әйткән һүҙҙәре үтә ғибрәтле, бына ул нимә ти:

«...Йондоҙ алыҫта, күк көмбәҙендә бик юғары торған саҡта ғына сағыу яҡтылыҡ бирә ала. Әгәр уны ергә төшөрһәң, уның матур биҙәктәре һүнә, тоноҡлана, уның сағыу ҡырҙары төҫһеҙләнә. Республикаға ҡайтып төшөү менән һине ҡул осонда ғына йөрөтөрҙәр тип уйлама. Беҙ һинең менән яҡташтарыбыҙҙан алыҫ торған өсөн генә ҡәҙерле. Республиканың ағалары һинең ҡайтып төшөүеңдә ҡуш ҡуллап ҡаршы алыр тип өмөтләнмә...»

Бында аңлатма кәрәкмәй, минеңсә. Автор геройҙың ҡайтып төшөүен, Башҡортостандың хәрби комиссариаты етәксеһе булып эш башлауын, командующийының һүҙҙәре раҫҡа сығыуын шундуҡ аңлай. Ләкин кире китеп булмай... Шәхес трагедияһы, милли трагедия. Бында икенсе моментҡа ла иғтибарҙы йүнәлткем килә: был йәһәттән Таһир Күсимов менән Рамазан Өмөтбаевтың үҙенең яҙмышы бик оҡшаш. Шул уҡ көнсөллөк, һыйҙырмау, ҡара яғыу, ошаҡлау, күрә алмау. Өлкә Комитетының ойоштороу-партия бүлеге мөдире булған кеше тағы ла юғарыраҡ вазифала эшләй алмаҫ инеме ни?!

*Әмир ӘМИНЕВ*

## ХӘТЕРГӘ АЛАЙЫҠ...

Миңә Рамазан Ғимран улы менән дүрт тиҫтә йылдан ашыу ҡатнашырға, уны тормош һәм хеҙмәт юлының бөтә осраҡтарында бергә булырға, шулай уҡ 1997 йылдың 26 августында Өфөлә уны һуңғы юлға оҙатырға насип булды.

1956—1960 йылдарҙа КПСС-тың Баймаҡ район комитетының беренсе секретары булараҡ, Р. Ғ. Өмөтбаев баҡыр иретеү заводын ябыу Баймаҡтың төп сәнәғәт предприятиеһын тамам юҡҡа сығармаһын, ә яңынан барлыҡҡа килгән машиналар эшләү заводы йылдам темптар менән үҫһен өсөн бик күп эш башҡарҙы. Завод барлыҡҡа килеүҙең һәм аяҡҡа баҫыуҙың был осорон ул үҙенең «Баймаҡ баҡыр иретеү заводы тарихтың юл сатында» тигән китабында һөйләп бирҙе. Тап бына шул йылдарҙа мин, яңы булдырылған заводтың директоры булараҡ, Р. Ғ. Өмөтбаев менән тәүгә яҡындан таныштым һәм уның ниндәй етәксе һәм ниндәй кеше икәнлеген белдем. Ул һәр яҡтан белемле, эшкә ереккән, көслө ихтыярлы етәксе, оҫта ойоштороусы ине. Шул уҡ ваҡытта ул бик әҙәпле һәм үҙенә яуаплы ҡараған кеше, бергә эшләү осоронда ғына түгел, ә районда һәм республикала артабан эшләгән йылдарында ла ышаныслы иптәш булып ҡалды. Уның Баймаҡтан республикабыҙҙың баш ҡалаһына күсеп кит-

кәндән һуңғы йылдарында ла мин быға күп тапҡырҙар инандым. Пенсияға сыҡҡас, яҙыусылыҡ эше һәм ижтимағи эшмәкәрлек менән мауығып китте. Уның хәтеренә, кешеләрҙе, тормоштағы ваҡиғаларҙы һәм уларҙың ҡасан булғанлығын шул тиклем аныҡ иҫләүенә аптырай торғайным. Осрашҡан һайын Рамазан Ғимран улы үҙенең иптәштәре һәм таныштары тураһында исем-шәрифен атап белешер булды, туғандарҙы һәм яҡындарҙы төпсөнөп һораша торғайны. Был эш юҡтан түгел, ә үткән тормош юлы бәйле булған кешеләрҙең йәшәйеше менән ихлас ҡыҙыҡһыныуҙан килеп сыҡҡандыр.

Яҙыусылыҡ эшмәкәрлегендә Рамазан Ғимран улы үҙенең иң яҡшы кешелек сифаттарын күрһәтә алды. Өфөлә һәм Баймаҡта, бигерәк тә машиналар заводының ял базаһында осрашҡан мәлдәрҙә, миңә уның ҡайһы бер китаптарының, шул иҫәптән «Генерал Күсимов» документаль художестволы повесының, «Ысыҡтан эйелә ҡылған» романының нисек ижад ителеүен күрергә һәм ишетергә тура килде. Әйткәндәй, романды үҙе уйлағанса ослап ҡуя алманы. Ә бына завод тураһындағы китап хаҡында айырыуса әйтеп үтке килә. 80-се йылдарҙа уҡ беҙ унан китап яҙырға үтенгәйнек. Тик Рамазан Ғимран улы төплө ҡарарға килмәй икеләнеп йөрөнө, сөнки ул был китапты бик яуаплы тойҙо: оҙайлы осорҙағы һәм сәйәси миҙгелдәрҙәге факттар менән ваҡиғаларҙы, кешеләрҙең тормошон һәм эшен тулы аныҡлығы менән сағылдырырға кәрәк ине. 1992 йылда китап өҫтөндә эшкә тотондо. Һөҙөмтәлә заводтың 85 йыллыҡ тарихын сағылдырған һәм уның кешеләре хаҡында һөйләгән тәүге китап донъя күрҙе. Ул һуңғы ике быуатта Рәсәй менән Башҡортостандағы тарихи ваҡиғалар менән ауаздаш ине. Был завод һәм уның кешеләренә үҙенсәлекле мәңгелек һәйкәл булды.

1996 йылдың ғинуарында район китапханаһында китапҡа фатиха бирелде. Унда завод вәкилдәре, хеҙмәт ветерандары, ҡала-район хакимиәте етәкселәре, башҡа ҡунаҡтар ҡатнашты. Барыһы ла Рамазан Ғимран улының сығышын диҡҡәт менән тыңланы һәм уның ҡултамғаһы менән китаптың тәүге даналарын рәхмәт әйтеп ҡабул итте. Был китап хәҙер Р. Ғ. Өмөтбаевтың яҡты образы тураһында хәтер булып ҡалды.

*А. МАНЫЛОВ*

# ЫСЫН КЕШЕ ХАҠЫНДА ҺҮҘ

Рамазан Ғимран улы хаҡында мин тәүге мәртәбә 1948 йылдың көҙөндә ишеттем. Был ваҡытта ул партияның Баймаҡ райкомы аппаратында штаттағы пропагандист (инструктор) булып эшләй ине. Бер йылдан һуң ошонда уҡ партия мәғарифы кабинетының мөдире булып китә, ә аҙағыраҡ пропаганда һәм агитация бүлегенә мөдир итеп күсерелә.

1954 йылда район коммунистары уны район партия ойошмаһының — икенсе секретары, ә 1955 йылдың көҙөндә беренсе секретары итеп һайлап ҡуя. Ошо вазифала Рамазан Ғимран улы 1960 йылдың яҙына, уны КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты аппаратына үрләткәнгә тиклем эшләне.

Шулай итеп, Рамазан Ғимран улы 12 йылдан ашыу эшләне һәм ошо дәүерҙә район партия структураһының аҫтынан алып осона тиклем бөтә баҫҡыстарын үтте, тәжрибәле, улай ғына ла түгел, оҫта етәксе кадр булып китте. Беҙҙә ул ғаилә ҡороп ебәрҙе, үҙенең икенсе төйәген тапты. Шул рәүешсә хаҡлы яҡташыбыҙ булып китте һәм бының өсөн беҙ унының менән һәр ваҡыт ғорурланабыҙ.

Рамазан Ғимран улының характерында бөтә ыңғай кешелек сифаттары тупланғайны. Ул саф күңелле, намыҫлы һәм ғәҙел булды, хужалыҡ һәм предприятие етәкселәренә ҡарата тауыш күтәргәнен бер ваҡытта ла күргәнем булманы. Юғары мәҙәниәтле, сәйәси яҡтан белемле Рамазан Ғимран улы үҙ эшендә инандырыу методын ҡулланыр ине. Ябай колхозсылар һәм эшселәр менән ҡул биреп күрешер булды, һөйләшкән саҡтарында уларҙың күңеленә үтеп инә торғайны. Бик- ябай, әңгәмәсел кеше ине ул. Бына шуның өсөн дә үҙен бөтә эшсән халыҡ яратты, үҙ кеше итеп күрҙе. Р. Ғ. Өмөтбаевты беҙҙең райондан Өфөгә алғас, барыбыҙ ҙа бик үкендек, бынамын тигән етәксене юғалтҡандай тойҙоҡ. Әммә Өфөлә барып йәшәй һәм эшләй башлағас та ул беҙҙең яҡтарҙы онотманы. Райондағы эштәр, элек бергә эшләгән кешеләр менән көн дә тип әйтерлек ҡыҙыҡһынып торор ине. Производствола өлгәшкән уңыштарыбыҙға ихлас шатлана торғайны. Рамазан Ғимран улы Өфөлә юғары вазифаларҙа эшләгән саҡта ла беҙҙең районды һағыныуын тоя торғайныҡ. Оло быуын, моғайын, хәтерләйҙер әле, ул йыш ҡына беҙҙең яҡтарға ҡыҫҡа һәм оҙайлы командировкаларға сығыр, хужалыҡ етәкселәре, дуҫ-иштәре менән осрашыр булды. Йыл һайын тип әйтерлек отпускыһын беҙҙә, Баймаҡта үткәрҙе. Уны белгән һәр кем үҙен ҡунаҡсыл ҡаршыланы.

Хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң, 80-се йылдар урталарында Өмөтбаевтың ижади һәләте күҙгә күренә башланы. Тәүҙә ул халыҡ хазинаһы — ер, башҡорт телен тергеҙеү, колхоз рәйестәре, совхоз һәм предприятие директорҙары тураһында публицистик очерктар һәм мәҡәләләр яҙҙы. Заманында был кешеләр менән бергә эшләгәнлектән, улар хаҡында энәһе-нән-ебенә тиклем белгән икән. Һуңынан әҙәби жанрға күсте.

Рамазан Ғимран улы роман һәм повестарын көнө-төнө яҙған, бик ашыҡҡан. Сөнки ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә өс тапҡыр йөрәк өйәнәге кисергән икән. 1996 йылдың йәйендә үҙәк район китапханаһында үҙенең уҡыусылары менән осрашҡан саҡта бер юлы ике роман өҫтөндә эшләүе хаҡында һөйләгәйне. Ижади пландары менән дә уртаҡлашҡайны.

Тап бына ошо һуңғы осрашыуҙа шаярып ҡына уға былай тип һүҙ ташлағайным:

— Рамазан Ғимранович, йәш сағығыҙҙа, ошондай талантығыҙҙы әрәм итеп, бушҡа партия-совет аппаратында эшләгәнһегеҙ икән. Әгәр шул саҡта уҡ үҙегеҙҙең әҙәби ижадығыҙға тотонған булһағыҙ, бөгөн китаптарығыҙ тау-тау булып өйөлөп китер ине.

Ул миңә былай тип яуап ҡайтарҙы:

— Юҡ, ҡорҙаш, ул саҡта мин яҙыусы булырға әҙер түгел инем әле. Сөнки тормош тәжрибәм булманы. Мин уны эш барышында тупланым.

Әлбиттә, ижади пландары ҙур ине, тик бойомға ашырырға ғына яҙманы. Бөтә уй-хыялдарын үҙе менән гүргә алып китте.

Кешелекле һәм кеселекле кеше Рамазан Ғимран улы Өмөтбаевтың сағыу образы беҙҙең хәтерҙә һәм йөрәктә оҙаҡ һаҡланыр әле.

*Вара БУРАНБАЕВ,*
*һуғыш һәм хеҙмәт ветераны*

## КҮҢЕЛДӘРҘӘ ҠАЛДЫ ЯҠТЫ ЭҘ

Рәсәйҙең атҡаҙанған хеҙмәт эшмәкәре, иҡтисад фәндәре кандидаты, күренекле яҙыусы, публицист, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхесе Рамазан Өмөтбаев беҙҙең аранан китте...

Һоҡланғыс изге зат, көслө рухлы, арыу-талыу белмәгән йәмәғәт эшмәкәре, оло кәңәшсе, үтә лә ярҙамсыл, ябай, мөләйем, намыҫлы шәхес ине ул.

Күренекле ғалим, класташым һәм курсташым, туғаным Ким Әхмәтйәновтың (Өмөтбаев) тыуыуына 60 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһендә Рамазан ағай Өмөтбаев үҙенең сығышын:

*Ниндәй аҡыл шәме һүнеп ҡалды,*
*Ниндәй йөрәк тибеп туҡтаны, —*

тигән йән өшөткәс шиғыр юлдары менән башлағайны. Бөгөн ошо уҡ шиғыр юлдарын, йөрәк һыҙлатып, унын үҙенә ҡарата әйтергә тура килә.

Рамазан Ғимран улы тормошҡа мөкиббән бирелеп, милләт ғәме, халыҡ яҙмышы өсөн борсолоп йәшәне. Заманының ауыр, ҡаршылыҡлы шауҡымдары һуҡҡылағанда ла, һикәлтәле, бормалы юлдар сатында ла юғалып ҡалманы, абынманы. Бөгөн дә намыҫы, йөрәге ҡушҡанса эшләргә ҙур көс тапты. Һайлаған юлынан ситкә тайпылманы. Тура һүҙле булғаны өсөн уны ихтирам иттеләр. Матбуғат биттәрендәге,радио-телевидениелағы сығыштары ла яратып ҡабул ителде. Ата-бабаларыбыҙҙың йола, ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында кинәйәле, йәнле итеп һөйләр ине. Үҙе лә боронғо йырҙарҙы аһәңле итеп башҡарып, тос баҫып, кинәндереп, бөтә күңелен һалып бейер ине.

Рамазан ағай әҙәбиәт донъяһына ла тәбиғи һәләте, зиһене, бай тәжрибә менән ҡолас йәйеп, атылған йондоҙ һымаҡ, балҡып килеп инде. Аҙ ғына ваҡыт эсендә лә бай әҙәби мираҫ ҡалдырырға өлгәште.

Хоҙай тәғәлә ғүмерен бирһә, тағы әллә күпме әҫәрҙәре менән ҡыуандырыр ине ул беҙҙе. Бер күрешкәндә: «Беҙҙең тоҡомда ифрат та уҡытыусылар күп, шул династия хаҡында яҙам әле», — тигәйне. Үкенескә ҡаршы, күпме ижади фекерен, уй-теләген бойомға ашыра алманы...

Миңә Рамазан ағай менән фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында, башҡа йыйындарҙа йыш ҡына осрашып, тәрән аҡыллы фекерҙәрен тыңлап, ҙур фәһем, тормош һабағы алырға насип булды. Әле лә йөрәк түрендә мәңге онотолмаҫлыҡ йылы хәтирәләр йөрөтәм. Изге ниәтле, саф күңелле, аҡ сәмле зат ине ул. Ә изгеләргә тарихта үлем юҡ, тиҙәр.

Рамазан ағай күптәр көнләшерлек тормош юлын үтте. Йәмәғәте Мөхтәрәмә еңгә менән бәхетле, татыу ғүмер кисереп, фани донъянан да бергә киттеләр. Бер-береһен аяп, ҡәҙерләп, ҡурсалап йәшәй белде улар. Һуңғы юлға оҙатҡанда ла: «Был Таһир менән Зөһрә мөхәббәте булған икән, Ер-әсә лә үҙ ҡуйынына бер көндө ҡабул итте», — тип һоҡланыу ҡатыш тетрәнеүҙәрен белдерҙеләр. Халҡыбыҙ өсөн янған изге йәндәрҙең ауыр тупраҡтары еңел булһын, мәңге тыныс йоҡлаһындар. Уларҙың яҡты иҫтәлегенә тап төшөрмәйексе, туғандар!

*Сәлимә ӨМӨТБАЕВА,*
*Халыҡ мәғарифы отличнигы,*
*Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы*

# ЯҘЫУСЫ Р. Ғ. ӨМӨТБАЕВ ИЖАДЫНДА БАЙМАҠ ҺӘМ БАЙМАҠЛЫЛАР

Үткән XX-се быуаттың икенсе яртыһында йәшәп эшләгән Баймаҡ кешеләре районды Рамазан Ғимран улы Өмөтбаевһыҙ һәм ул үҙен Баймаҡһыҙ күҙ алдына килтерә алмағандыр.

Үҙенең Баймаҡҡа килеп тәүге эшкә урынлашып йөрөгән көндәре тураһында «Баймаҡ сәхифәләре» исемле очеркында: «Беҙҙе заводтың электр станцияһын торф менән тәьмин итеп тороусы предприятиеһына эшкә тәғәйенләнеләр... Торф саңы борҡотоп, арыҡ аттар артынан йүгергән вагонетка юлы беҙҙең киләсәккә бормалы-бормалы ауыр һәм ҡатмарлы тормош юлыбыҙҙың тәүге аҙымы икәнен беҙ ул саҡтарҙа, күрәһең, аңлап етмәгәнбеҙ», — тип яҙа ул.

Һәр кемгә йәш сағында тәүге хеҙмәт юлын башлап ебәргән урын күңеленә яҡын да, ғәзиз дә була. Ә Рамазан Өмөтбаев өсөн был төбәк үҙенең тәүге мөхәббәте һәм аҙаҡтан тормош юлдашы булып киткән Мөхтәрәмә Таһир ҡыҙын ошонда осратыуы менән тағы ла яҡынырак булып киткәндер. Шулай булмаһа, Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, 22 йәшлек эфисәр, тәүге тыныс көҙҙө демобилизацияланғас, үҙе әйткәнсә, Мөхтәрәмәнең дүрт йыл буйы яҙған хаттарын «мишауай мешок»ка тултырып, ҡанатлы ҡоштай осоп, яңынан Баймаҡ яҡтарына килеп төшмәҫ ине.

Уның артабанғы яҙмышына Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында сикһеҙ бөлгөнлөккә төшөп, ҡаҡшаған Баймаҡ районының сәнәғәтен, ауыл хужалығын, халҡының социаль көнкүрешен аяҡҡа баҫтырыу, үҫтереү буйынса ҡолас ташлап арымай-талмай хеҙмәт итеү тура килде. Бында ул алтын йыйыу артеленең ябай хисапсыһынан башлап, КПСС райкомының беренсе секретары дәрәжәһенә етте. Баймаҡ ерлегенән үҫеп республиканың күренекле һәм тик үҙенә генә хас шәхси сифаттары менән үҙенсәлекле булған сағыу бер етәксеһе булып танылды. Был турала ул уңайы сыҡҡанда, һәр ваҡыт һыҙыҡ өҫтөнә алып, «хеҙмәт юлымды Баймаҡта башланым, ошонда сынығыу үттем, баймаҡтар мине күтәрҙе» тип әйтер булды.

Халыҡ араһына ынтылыу, уның менән кәңәш итеү, эшен күреү, дәртләндереү йәки етешһеҙлектәрен шелтәләү саралары, шул уҡ ваҡытта кешегә ҡарата ихтирам, ярҙамсыллыҡ, шәхси тыйнаҡлыҡ һәм башҡа матур кешелек сифаттары өсөн үҙ итеп ярата һәм ихтирам итә ине уны баймаҡтар.

Халыҡсанлыҡ уның районда беренсе етәксе булып эшләгән дәүеренә бик хас ине. Ә ижад эшенә күскәс халыҡсанлыҡ уның әҫәрҙәренә лә күскән.

Баймаҡтарҙың уға ҡарата оло ихтирамы электән дә билдәле. Ә инде Р. Ғ. Өмөтбаевтың яҙған әҫәрҙәре китап булып сыға башлағас, уларҙы уҡып, бигерәк тә автор менән электән таныш булған олораҡ кешеләр ныҡ ҡыҙыҡһынды. Сөнки «Ысыҡтан эйелә ҡылған» романының сюжеты беҙҙең Урал аръяғы төбәге өсөн айырыуса ҡатмарлы һәм фажиғәле 1921 йылғы йоттан һуң, граждандар һуғышы яңы ғына тамамланған (1923—1930) осорҙо үҙенә ала. Был инде быуаттар буйына йәшәп килгән укладты үҙгәртеү өсөн большевиктарҙың ҡотҡоһо менән халыҡты килешә алмаҫлыҡ ике төркөмгә бүлеп, бай менән ярлы араһындағы ҡаршылыҡты партия һәм хөкүмәт сәйәсәтенең нигеҙе итеп алыуынан ғибәрәт булды. Романдың төп геройҙары — Граждандар һуғышында ҡатнашып, большевиктар партияһы ағзаһы булып ауылына әйләнеп ҡайтҡан Абдрахман Игебаев, ауыл советы рәйесе Ғәлиәкбәр Аласов, кантон һәм волость милицияһы хеҙмәткәрҙәре Сирбаев, Туҡыбаев, Рәжәпов һәм башҡа күптәр. Уларҙың ҡылған эштәре, яҙмыштары беҙҙең ата-бабалар кисергән яҙмыш ул. Шуға күрәлер, моғайын, Рамазан Өмөтбаевтың ике китаптан торған («Ысыҡтан эйелә ҡылған» һәм «Һынылыш») романы сыҡҡас, берәүҙәр унда үҙҙәренең колхозын, ауылын, икенселәр таныштарын, туғанын төҫмөрләне һәм һәр ауыл халҡы яҙыусыны үҙҙәренә осрашыуға саҡырҙы.

Әҫәрҙәге хәл-ваҡиғалар барған урындар, географик атамалар ҙа ошо яҡтың топонимдары: Ирәндек тауының ике яғында, Һаҡмар һәм Ҡыҙыл йылғалары буйында ятҡан Баймаҡ һәм Түбә ҡасабалары, волость үҙәге Темәс (Нәмәс тип алынған), Әлмөхәмәт (Ялан), Хәлил (Хәлим), Әхмәр (Ялан Әпеге), Ғәҙелша, Атанғол, Басай, Күсей, шулай уҡ Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл һәм Абрашау (Обручевка) ауылдарындағы тормош сағылдырылған. Уларҙа продразверстка һәм НЭП осорондағы киҫкен сәйәсәт, крәҫтиән хужалығын үҙгәртеп ҡороу көрәш ялҡыны менән янған ярлылар: коммунист һәм комсомолецтар: Абдрахман Игебаев, Ғәлиәкбәр Аласов, Сафыя, Маргарита, Хәлилов, Әлимғәфәров, Мөхәмәтнур, Солтанмәхмүт, уларға үҙҙәренең фекерҙәре бөтә булмышы менән ҡапма-ҡаршы торған Мөхәмәтшәриф ахун, Фәйзулла һәм Ғәлимйән хажиҙар, имам Мөхәмәтрәхим һәм Ғәйнулла байҙар образдары халыҡта ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

Күп кешеләр үҙҙәренең ата-олатаһы, таныштарын, ауылдаштарын, хатта үҙҙәрен төҫмөрләне, бәхәстәр һәм яҙыусыға бик күп һорауҙар тыуҙырҙы.

Китап уҡыусыларҙың:

— Романығыҙҙы «Ысыҡтан эйелә ҡылған» тип атағанһығыҙ, ул исемгә ниндәй мәғәнә һалынған, — тигән һорауына яҙыусы: — Китап донъя күрерҙән алда төрлө исемдәр

биреп ҡараным, шулай ҙа ошо исемдә туҡтаным. Быға мине тыуған яҡ далаларында юҡҡа сыға барған ҡылғанды һағыныу тойғоһо мәжбүр итте. Бик күп йырҙарҙа йырланған, легендаларҙа һөйләнгән ҡылған башын эйеп сеңләй, үкһей һымаҡ тойола. Әҫәрҙең исеме бына шуның менән аңлатыла, — тине. Тимәк, әҙип халҡының бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында һөйләгәндә, уны уратып алған мөхите менән бер бөтөн итеп күҙ алдына килтерә. Ниндәй генә йәмәғәт ҡоролошонда йәшәһәк тә, беҙ йәшәү көсөн, дәртен һәм рухын тыуған еребеҙҙән алабыҙ. Ер-һыуҙы һаҡлау һәм уны ҡурсалау һәр ҡайһыбыҙҙың мөҡәддәс бурысы булыуын айырым һыҙыҡ өҫтөнә алыуы күренә.

Рамазан Өмөтбаевтың «Осрашыуҙар. Юғалтыуҙар» (Өфө, «Китап», 1997 йыл) исемле публицистик йыйынтығына ингән очерктарында ла Баймаҡ ерлегендә республиканың сәйәси, иҡтисади үҙаллылығын, мәҙәниәтен үҫтереү һәм нығытыу эшенә тос өлөш индергән шәхестәр, ил уҙамандары ярайһы ғына урын алған. Ундағы «Сиҙәмдең тәүге яҙы» исемле әҫәрендә КПСС Үҙәк Комитетының сентябрь (1953 йыл), февраль — март (1954 йыл) Пленумдары ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу буйынса Баймаҡ районында партия-хужалыҡ активының ауыл хужалығын үҫтереү өлкәһендә ойоштороу эштәрен ентекле тасуирлай.

Баймаҡ районында намыҫлы хеҙмәттәре менән танылған бик күп шәхестәрҙе үҙҙәренең характеры, бөтә булмыш холоҡ фиғелдәре, һәр береһенә хас темпераменттары, хатта, гел генә ҡуллана торған айырым һүҙҙәре һәм һүҙбәйләнештәре менән сағылдырыуы, ул кешеләрҙең тулы образдарын күҙ алдына баҫтыра.

Ундайҙар — «Яңы тормош» колхозы рәйесе М. Морапталов, клуб мөдире Һ. Сәлимов, КПСС райкомының беренсе секретары В. Любушкин, райсовет рәйесе Х. Әхмәҙиев, Йылайыр игенселек совхозы директоры Ә. Наҡыев, Ленин исемендәге колхоз рәйесе Х. Әхмәтов, Һәүәнәк совхозы директорҙары С. Усманов, К. Ҡадиров, Карл Маркс исемендәге колхоз рәйесе И. Уйылданов һәм башҡалар. Былар үҙ заманында арыу-талыу белмәй эшләгән ҙур абруйлы хужалыҡ етәкселәре, оҫта ойоштороусылар. Рамазан ағай улар тураһында яҙып бик хәйерле эш эшләгән.

«Башҡорт аты» исемле очеркында ла яҙыусы Баймаҡты урап үтмәгән. Унда ла Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуына 400 йыл тулыуын байрам итеү көндәрендә (1957 йылда) «Һаҡмар» колхозының «Квадрат» исемле һары айғыры үҙ йөрөшө менән Баймаҡтан Өфөгә кисләп килеп етеп, иртәгәһенә республика ипподромында үткәрелгән ҙур ат ярышында беренсе урынды алыуына хайран ҡалып һәм ғорурланып яҙһа,

Ҡуянтау тәжрибә хужалығының «Герой» исемле башҡорт тоҡомло айғырының өйөргә һөжүм иткән бүреләрҙе эҙәрләп йән-фарман сабып барған сағында йыртҡыстарҙың да һәм үҙенең дә текә ҡаянан осоп һәләк булыу фажиғәһен тасуирлаған.

Рамазан Өмөтбаевтың тик Баймаҡҡа ғына арналған ҙур әҫәре «Баймакский медьзавод на перекрестках истории». Яҙыусы был китабында үҙенең уҡыусыларын Урал аръяғындағы иң оло төҫлө металлургия предприятиеһының береһе булған Баймаҡ баҡыр иретеү, ә һуңынан Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге машиналар төҙөү заводының барлыҡҡа килеү һәм үҫеү тарихы менән таныштыра.

Завод тарихын автор ошо төбәктә ҡайнаған ижтимағи-сәйәси тормош фонында киң яҡтыртып, күп һанлы миҫалдар нигеҙендә урындағы крәҫтиәндәрҙең эшселәр синыфы һәм техник интеллигенция формалашыуын эҙмә-эҙ тасуирлай.

Предприятие үҙенең еңел булмаған йәшәү дәүерендә Баймаҡ ҡалаһын тыуҙырыусы, уның булмышын, йөҙөн билдәләүсе фактор булды һәм бөгөн дә шулай ҡала. Шуға күрә яҙыусы завод тарихынан тыш, унда йәшәгән кешеләр тормошо һәм яҙмышы менән тығыҙ бәйле рәүештә бәйән итә. Әҫәрҙә заводты төҙөүҙә, үҫтереүҙә, шулай уҡ реконструкциялауҙа ойоштороусы һәм етәксе булған кешеләр Октябрь революцияһына тиклем инглиз промышленнигы Лесли Уркварт һәм элекке Красноуфимск сауҙагәре Баймаҡ баҡыр иретеү заводының директор-распорядителе Кабанов, ә совет власы осоронда Зариф Ғәбитов, Филипп Үлмәҫов, Николай Чувашов, Мифтах Сәйәхов, Сабир Ваһапов, Петр Никляев, Данил Вальков, Николай Ушаков, Александр Маныловтарҙың хеҙмәтенә тейешле баһа бирелгән. Тик уларҙың тәүгеләренә фиҙаҡәр хеҙмәттәре өсөн совет хөкүмәте 30-сы йылдарҙа соңкаһына 9 грамм ҡурғаш бирһә, һуңынан орден-миҙалдарын да йәлләмәгән.

Яҙыусы был тик документтарға ғына таянып яҙған әҫәрендә йөҙәрләгән завод эшселәренең һәм бер нисә тиҫтә эшсе династияларының тәржемәи хәлен, фиҙаҡәр хеҙмәтен киң яҡтыртып күп мәғлүмәттәр биргән. Улар араһында республикаға һәм элекке СССР-ға билдәле шәхестәр ҙә бар.

Улар — артиллерия генерал-полковнигы, һуғыш ваҡытында Мәскәүҙе һауа һөжүменән һаҡлау (ПВО) командующийы Журавлев Д. А., авиация генерал-майоры, хәрби авиация соединениеһы командующийы Кузнецов П. И., «Башзолото» тресы управляющийы Рыбаков Н. Д., милли көрәш буйынса үҙ ваҡытында Рәсәй чемпионы булған

Хәлил Әминев, СССР Верховный Советының беренсе саҡырылыш депутаты Иҫән Әхмәтов һәм башҡалар.

Ә ябай эшселәр династияһынан Ғәлеарслан Ғүмәров үҙе — 27 йыл, ҡыҙҙары Бибинисә һәм Шәмсенисә, улы Зиннур, ейәне Айрат, ейәнсәрҙәре Айбикә һәм Альбина заводта эшләп, дөйөм хеҙмәт стаждары 130 йыл тәшкил итә.

Быпдай ғаиләләрҙән Кәйекбирҙиндар — 78 йыл, Бикмөхәмәтовтар—106 йыл, Заматаевтар — 118 йыл, Максимовтар — 175 йыл заводта тырышып эшләп быуындан быуынға алдынғылар сафында барыуҙары уларҙың завод данын, абруйын юғары тотоусы патриоттары булыуы тураһында әйтелә.

Һүҙҙе йомғаҡлап шуны әйтәм, Рамазан ағай баймаҡтарҙы үҙенең йәш сағында, бигерәк тә һуғыштан һуңғы йылдарҙа, сәнәғәтте, ауыл хужалығын үҫтереү, халыҡтың мәҙәниәтен, социаль көнкүрешен яҡшыртыу эштәрен ойоштороуҙағы ихлас хеҙмәте менән ҡыуандырһа, олоғая төшкәс, иғтибарлы һәм күҙәтеүсән, һынаусан һәм көслө хәтерле шәхес буларак, район кешеләренең хеҙмәтен, уңыштарын үә кәмселектәрен бөтә тулылығында үҙенең әҫәрҙәрендә сағылдырып тарихта ҡалдырыуы уны халыҡтың оло ихтирамына лайыҡ итте.

Бының дәлиле булып үҙе иҫән саҡта бөтә районды шаулатып үткәрелгән 70 йәшлек юбилейы, «Һарығолаҡ», «Ысыҡтан әйелә ҡылған», «Баймакский медьзавод на перекрестках истории» әҫәрҙәре буйынса ҡалала, ауыл һәм ҡасабаларҙа күп һанлы осрашыу кисәләре, «Баймаҡ ҡалаһы һәм районының Почетлы гражданины» исеме бирелеүе, ә вафатынан һуң уның 75 йыллығына арналған хәтер кисәһе, исемен мәңгеләштереү маҡсатында ҡала-район хакимиәте бинаһында ҡуйылған таҡтаташ, ҡаланың яңы үҫеп сыҡҡан урамына Рамазан Өмөтбаев исеме бирелеүе торалыр.

*Әмир СӘЙҒӘФӘРОВ,*
*хеҙмәт ветераны*

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Үҙем хаҡында . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
Атлы башҡорт *(Повесть)*. . . . . . . . . . . . . . . . . . 15

*Хикәйәләр*

Даһи маңлайы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 88
Яу ялмаған мөхәббәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 103
Алексей мулла . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 116
Флюгерҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 122
Автомат бисә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 155
Саҡырыу ҡағыҙы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 164
Консультация . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 171
Хәтерһеҙ Ғәрифулла . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 175
Хәтер. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 180
Саҙаҡа . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 218
Әмир баҫыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 225

*Рамазан Өмөтбаев тураһында иҫтәлектәр*

Беҙҙең ғаилә хәтирәләре *(Ә. Өмөтбаев)*. . . . . . . . . 233
Халҡыбыҙҙың күркәм шәхесе *(Р. Байбулатов)* . . . . 240
Юлда *(Ә. Әминев)*. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 242
Хәтергә алайыҡ *(А. Манылов)* . . . . . . . . . . . . . 244
Ысын кеше хаҡында һүҙ *(В. Буранбаев)*. . . . . . . . 246
Күңелдәрҙә ҡалды яҡты эҙ *(С. Өмөтбаева)* . . . . . 247
Яҙыусы Р. Ғ. Өмөтбаев ижадында Баймаҡ
һәм баймаҡлылар *(Ә. Сәйғәфәров)* . . . . . . . . . . 249

*Литературно-художественное издание*

**УМЕТБАЕВ Рамазан Гимранович**

# КОННЫЙ БАШКИР

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *Ф. Исхаҡова*
Мөхәррирҙәре *Г. Фазлиәхмәтова, Ә. Әсәҙуллина*
Рәссамы *Ф. Мостафин*
Биҙәлеш мөхәррире *Ф. Ислахов*
Техник мөхәррире *З. Сыңғыҙова*
Корректорҙары *Л. Мирғәлиева, Ә. Илекәева*

Нәшр. лиц. № 04380; 26.03.01. Йыйырға бирелде 16.03.04. Баҫырға ҡул ҡуйылды 15.04.04. Ҡағыҙ форматы 84x108 $^1/_{32}$. Офсет ҡағыҙы №1. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 13,44. Шартлы буяу отт. 13,86. Иҫәп-баҫма таб. 14,09. Тиражы 2000 дана. Заказ э-290

Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан «Китап» нәшриәте»
дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Әҙерләп бирелгән диапозитивтарҙан баҫылды.
ЯСИ «Яшель».
450077, Өфө ҡалаһы, Ленин ур., 70.

КИТАП

## БАШҠОРТОСТАН «КИТАП» НӘШРИӘТЕ ТӘҠДИМ ИТӘ:

**Балҡыштар.** Шиғриәт. Өфө: Китап, 2004. — 560 бит.

Төрлө быуын шағирҙарының ижады аша заман һулышын тойор уҡыусылар.

**Ун туғыҙынсы.** Детектив роман һәм повесть. — Өфө: Китап, 2003. — 384 бит.

Ғәлим Хисамовтың «Ун туғыҙынсы» китабына ингән роман һәм повесть башҡорт әҙәбиәтендә һирәк осрар сәйәси мажараларға ҡоролған һәм уҙған быуаттың 20—80-се йылдарында былыуы ихтимал ваҡиғаларҙы һүрәтләй.



КИТАП